МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

ИНСТИТУТ РАЗВИТИЯ ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

МӘҒАРИФ СИСИТЕМАҺЫНДА ТУҒАН ТЕЛ, ФОЛЬКЛОР ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ: ТЕОРИЯ, ПРАКТИКА, ПЕРСПЕКТИВАЛАР

Профессор С.Ә. Галиндың тыуыуына 90-йыл тулыу айҡанлы
Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференция материалдары
Өфө ҡалаһы, 25 апрель 2024 йыл

РОДНОЙ ЯЗЫК, ФОЛЬКЛОР И ЛИТЕРАТУРА В СИСТЕМЕ ОБРАЗОВАНИЯ: ТЕОРИЯ, ПРАКТИКА, ПЕРСПЕКТИВЫ

Материалы
Всероссийской научно-практической конференции,
посвященной 90-летию со дня рождения профессора С.А. Галина
г. Уфа, 25 апреля 2024 года

УФА-2024

УДК 37.031
ББК 74.202
Р 32

Родной язык, фольклор и литература в системе образования: теория, практика, перспективы: Материалы Всероссийской научно-практической конференции, посвященной 90-летию со дня рождения профессора С.А. Галина. 25 апреля 2024 г. – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2024. – 146 с.

Всероссийская научно-практической конференция, посвященная 90-летию со дня рождения профессора С.А. Галина состоялась 25 апреля 2024 г.

Организатором конференции выступила кафедра башкирского и других родных языков и литератур ГАУ ДПО Институт развития образования Республики Башкортостан.

В работе конференции приняли участие: ученые, преподаватели, студенты и магистранты вузов и учителя родных языков и литератур из Казахстана, Республики Татарстан, Республики Башкортостан. Цель конференции – увековечение памяти профессора С. А. Галина, обсуждение актуальных проблем гуманитарного образования, направленных на формирование современных ориентиров развития образовательной деятельности в Республике Башкортостан и в других регионах России.

ISBN 978-5-7159-0841-4

©Авторы статей, 2024
© Издательство ИРО РБ, 2024

СОДЕРЖАНИЕ

Абдразяпова И.С.
С.Галин ижадына арнап балалар фольклоры буйынса
викторина үткәреү нигеҙендә кластан тыш сара 5
Абдуллина Г.Ф., Фазлутдинов И.К.
Риф Мөхәммәтжанов – галим һәм педагог 7
Аитбаева З.Р., Хайбуллина Я. Ф.
Башҡорт балалар баҡсаһында телмәр һәләтен үҫтереү …….. 12
Алдырханова- Каримова А.Р.
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә
халыҡ ижады өлгөләрен ҡулланыуҙың тәрбиәүи әһәмиәте 16
Баширова З.Р.
Профессор С. Галин хеҙмәттәрендә
башҡорт халыҡ йырҙарын классификациялау мәсьәләләре 19
Бикмеев М.А.
Некоторые штрихи к портрету
Героя Советского союза генерал-майора Кусимова Тагира Таиповича …… 22
Габитова З.М.
Ә. Хәкимовтың романдарында фольклор элементтарының стилистик ҡулланышы ….. 26
Гадиева И.А.
Башҡорт теле дәрестәрендә проблемалы ситуация тыуҙырыу һәм хәл итеү алымдары... 30
Газизова А.Я.
«Буквабук» как эффективный инструмент формирования
фонематического восприятия речи и звукового анализа слов
у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья …….. 31
Гайфуллина А.Т.
Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә
тәнҡитле фекерләү технологияһының интеллект-карта алымын ҡулланыу 35
Галина Г.С.
Атайым тураһында һүҙ …….. 38
Галлямова В.В.
Һ.Такташ иҙатында сурәтлелек 42
Ганиева Г.Г.
Башҡорт теле дәрестәрендә алғыштар ҡулланыу..... 44
Ганиева Г.Г.
Тел дәрестәрендә һүҙьяһалыш бүлеген өйрәнеү методикаһы……. 48
Дик Ф.Б.
Ҡайҙа ғына сәселмәгән орлоғоҙ..... 52
Жуламанова Н.Ю.
Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы халыҡ йола-байрамдар менән таныштырыу..... 54
Ильмухаметов А.Г.
Халыҡ ижады өлгөләрен рухи-әхлаҡи тәрбиә сығанағы булараҡ ҡулланыу..... 57
Килмакова Ф.Г.
Ауылдаштары хәтерендә..... 60
Масалимова Л.Ф.
Филологическое образование в условиях электронно-цифровой среды……. 63
Муллагалиева Л.Р.
Һәләтле балалар менән эшләү тәжрибәһенән..... 66
Муратшина М.Н.
Илһөйәр шәхес тәрбиәләү – туған тел уҡытыусыһының төп бурысы..... 70

Мухамадеева Д.В.
Киң ҡарашлы шәхес..... 73
Мухаметова Р.М.
Сәсән һүҙе – аҡылдың үҙе..... 76
Нигаматова А.А.
Башҡорт телендә бер ижекле тамыр нигеҙҙәре булараҡ
«йәш» лексик берәмектәренең когнитологик һәм идеографик характеристикаһы..... 78
Саньяров Ф.Б.
Общие мотивы и отражение единоборства с быками
в эпосах «Урал-батыр» и «Сказание о Гильгамеше»…….. 83
Сиразетдинова Г.Ф.
Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә математик грамоталылыҡты формалаштырыу 91
Суяргулова А.Б.
Ғилем һәм моң эйәһе..... 93
Суярембитова Г.Ф.
Башҡорт теле дәрестәрендә аудиояҙмаларҙы «интеракти» платформаһында ҡулланыу
аша уҡыу грамоталылығын үҫтереү юлдары..... 96
Тагирова С. А., Астанова Б.З., Шаяхмиетова Р.С.
Башҡорт теле дәрестәрендә
уҡыусыларҙың уҡыу грамоталылығын формалаштырыу юлдары..... 98
Усманова М.Г.
Башҡорт телендә заман төшөнсәһен биргән ялғауҙарҙың
мәғәнәһе һәм функцияһы: яңы ҡараш..... 104
Утяшева Г.М.
Тел асҡысы – халыҡта..... 110
Фаршатова А.А.
Башҡорт телен уҡытыуҙа интерактив белем биреү ресурстарын ҡулланыу..... 112
Хабибуллина З.А.
Башҡорт теле дәрестәрендә Ф.Ғ. Хисамитдинованың ғилми хеҙмәттәрен ҡулланыу..... 115
Хадимуллина Р.Р.
Профессор С.А.Галиндың башҡорт фольклоры үҫешенә индергән өлөшө..... 119
Хазиахметова Р.Т.
Балаларҙың ижади һәләтен үҫтереүҙә халыҡ ижадының роле..... 122
Хакимова Г.А.
Башҡорт фольклорының йәш быуынды тәрбиәләүҙәге роле..... 125
Хакова Э.Р.
Тел күрке – һүҙ, милләт күрке – тел..... 130
Хусаинова Л.М., Кильмухаметова С.С.
Проблема разнописания в башкирской орфографии……. 133
Хусаинова Р.Х.
О мудром руководителе, человеке и наставнике……. 138
Шагивалиева Д.Д., Алибаев З.А.
Әҙәбиәт дәрестәрендә метапредмет компетенциялар..... 141

УДК 81.282.2.

С.ГАЛИН ИЖАДЫНА АРНАП БАЛАЛАР ФОЛЬКЛОРЫ БУЙЫНСА ВИКТОРИНА ҮТКӘРЕҮ НИГЕҘЕНДӘ КЛАСТАН ТЫШ САРА

EXTRACURRICULAR CHILDREN'S FOLKLORE EVENT DEDICATED TO THE WORK OF S.GALINA

И.С.Абдразяпова,
учитель башкирского языка и литературы,
МОБУ Бшкирская гимназия №9 им. Кинзи Арасланова, г.Мелеуз
I.S.Abdrazyapova,
teacher of Bashkir language and literature, Bashkir Gymnasium No. 9 named after MOBU. Kinzi Araslanova, Meleuz

Аннотация. В статье представлена игра, посвященная жизни и творчеству С. Галина.

Ключевые слова: песня, исторические песни, лирические песни, поэзия, классификация, фольклор,

Abstract. The article presents a game dedicated to the life and work of S. Galina.

Key words: song, historical songs, lyrical songs, poetry, classification, folklore.

Викторина. Уны икенсе төрлө итеп атағанда «Хәтер һынаш» тип тә исемләргә була. Был ниндәйҙер дәрәжәлә күптән таныш «Бәхетле осраҡ» телевизион викторинаһына оҡшаш. Тик ул әҙәбиәт дәресе күләмендә бара. Бер яҙыусының ижадына байҡау рәүешендә йәки әҙәбиәттең айырым бер осоро буйынса үткәрелергә мөмкин. Ғәҙәти дәрескә ҡарағанда, «Хәтер һынаш» викториналы әҙәбиәт дәресен үткәреү ауыр, уҡытыусынан байтаҡ әҙерлек талап итә. Әммә ул ҡыҙығыраҡ, мауыҡтырғысыраҡ, балаларҙы ижади эҙләнеү эшенә нығыраҡ йәлеп итә. Ә был методты кластан тыш сара итеп алғанда, тағы ла мауыҡтырғысыраҡ һәм ҡыҙығыраҡ буласаҡ. Ошо йәһәттән уҡыусыла дәрестә үтелгән темаға ҡарата иғтибар икелетә арта. Сөнки был дәрес түгел, ә уйын буласаҡ. Уҡыусының нығыраҡ иҫендә ҡала. Беренсенән, ул викторинаға алдан әҙерләнеп килә – үҙенә ҡарата ниндәйҙер ярыш бит, тимәк беренсе булырға кәрәк! Икенсенән, викторина үткәрелгән тема буйынса уйын-ярыш барышында ҡатнашыусы тағы ла күберәк мәғлүмәт ала, белмәгәндәрен белә, иҫендә ҡалдыра. Әйтәйек ошо уйынды алдараҡ телгә алып киткән телевизион викторина йәғни башҡа төрлө үткәреп була. Викторина бигерәк тә балалар фольклоры, халыҡ ижады темаһын йомғаҡлаған саҡта уңайлы. Сөнки был осраҡта дөйөм һорауҙар бирелә һәм дөйөм тема буйынса әҙерлек талап итә. Балалар фольклоры буйынса артабанғы һорауҙар бирергә мөмкин:

1. «Фольклор» термины ҡасан ҡулланыла башлаған?

Яуап: XIX быуатта.

2. Балалар фольклорын нисә төркөмө бар?

Яуап: өс төркөмө.

3. Ниндәй төркөмдәргә бүленә?

Яуап: әсәләр поэзияһы, балалар ауыҙ-тел ижады, уйын фольклоры.

4. Балалар фольклорының бүленеше?

Яуап: ҡурҡытҡыстар, үсекләштәр, һамаҡтар, йырҙар, уйын фольклоры.

5. Һеҙ балалар фольклорын өйрәнеүсе ниндәй ғалимдарҙы беләһегеҙ?

Яуап: Р.Солтангәрәева, Ә.Сөләймәнов, Ғ.Хөсәйенов һ.б.

6. *Ҡайындай зифа бул,*

Имәндәй ныҡ бул,

Ҡартатайыңдай оҫта бул,

Ҡартинәйеңдәй шәфкәтле бул!

Был юлдар үсекләшме, ҡурҡытҡысмы, һамаҡмы, йырмы йә булмаһа уйында әйтелә торған саҡырыумы?

Яуап: һамаҡ.

7. М.Кәримдең ниндәй әҫәрендә төп геройҙы «Кендек» тип үсекләйҙәр?

Яуап: «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәрендә.

8. «Аҡ тирәк, күк тирәк» уйынында бер команда составын ишәйтергә теләүсе икенсе командаға нимә тип ҡысҡыра?

Яуап:

Аҡ тирәк, күк тирәк,

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк.

9. «Ҡарға бутҡаһы» йолаһы ҡасан үткәрелә?

Яуап: Яҙ көнө.

10. Үсекләштәр балалар фольклорының ниндәй төрөнә ҡарай?

Яуап: балалар ауыҙ-тел ижадына.

11. С.Галин кем булған?

А) Яҙыусы

Б) Президент

В) Фолькор өйрәнеүсе

Яуап: В варианты

12. С.Галин ниндәй хеҙмәттәр яҙған:

А) “Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады” ғилми китабын

Б) “Бөйрәкәй” романын

В) Шиғырҙар йыйынтығы

Яуап: А варианты

13. Салауат Галин ҡайҙа тыуған?

А) Өфө ҡалаһы

Б) Баймаҡ районы

В) Дөрөҫ яуап күрһәтелмәгән

Яуап: Б варианты

14. С.Галин ниндәй китап авторы?

А) “Башҡортостан мәҙәниәте”

Б) “Башҡортостан тарихы”

В) “Башҡортостан йырҙары”

Яуап: А варианты

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Галин С.Ә. Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулламаһы. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – Һүрәттәре менән 224 бит.

2. Галин С.Ә. Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары. Рус башҡорт бүлегенең I курс студенттары өсөн лекциялар. - Өфө, 1981. – 65 бит.

3. Галин С.Ә. Башҡорт фольклоры. – Пермь, 1975. – 240 бит.

4. Галин С.Ә. Башҡорт халҡының йыр поэзияһы. Йыр жанрының ҡайһы бер мәсьәләләре. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. – 256 бит.

5. Галин С.Ә. Заман һәм фольклор. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. – 112 бит.

6. Гафаров Б.Б. Методика преподования башкирской литературы в школе: Учебное пособие. – Уфа: Гилем, 2003. – 256 бит.

7. Ғималова М.Ғ. V-XI кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994. – 304 бит.

УДК 398

РИФ МӨХӘММӘТҖАНОВ – ГАЛИМ ҺӘМ ПЕДАГОГ

RIF MUKHAMETZYANOV – SCIENTIST AND TEACHER

Г.Ф. Абдуллина,
магистрант Уфимского университета науки и технологий,
педагог Татарской воскресной школы №2, г. Уфа
Научный руководитель: И.К. Фазлутдинов,
кандидат филологических наук, доцент кафедры татарской филологии и культуры Уфимского университета науки и технологий; г. Уфа.
G.F. Abdullina,
Master's student of Ufa University of Science and Technology,
teacher of Tatar Sunday School No. 2, Ufa
Scientific supervisor: I.K. Fazlutdinov,
Candidate of Philological Sciences, Associate Professor of the Department of Tatar Philology and Culture of the Ufa University of Science and Technology; Associate Professor of the Department of Bashkir and Other Native Languages of the Institute for the Development of Education of the Republic of Bashkortostan; Ufa.

Аннотация. Данная статья рассказывает о жизни и научно-педагогической деятельности видного татарского ученого-фольклориста Р.М. Мухаметзянова (1939–1996), посвятившего всю свою жизнь исследованию фольклорных памятников татар Республики Башкортостан.

Автор рассматривает личность Р.М. Мухаметзянова с двух ракурсов: как ученого, собирателя и исследователя национального фольклора; педагога, более 40 лет занимавшегося преподавательской работой на кафедре татарской филологии Башкирского государственного университета (г.Уфа).

В статье подвергнуты комплексному анализу основные научные труды исследователя, его публицистическая и литературоведческая деятельность.

Ключевые слова: ученый, обрядовый фольклор, татары Башкортостана, свадебные обряды, календарная поэзия, литература, татарское народное творчество.

Abstract. This article tells about the life and scientific and pedagogical activity of the prominent Tatar scholar-folklorist R.M. Mukhametzyanov (1939-1996), who devoted his whole life to the study of folklore monuments of the Tatars of the Republic of Bashkortostan.

The author examines the personality of R.M. Mukhametzyanov from two angles: as a scientist, collector and researcher of national folklore; a teacher who has been engaged in teaching at the Department of Tatar Philology of Bashkir State University (Ufa) for more than 40 years.

The article presents a comprehensive analysis of the researcher's main scientific works, his journalistic and literary activities.

Keywords: scientist, ritual folklore, Tatars of Bashkortostan, wedding ceremonies, calendar poetry, literature, Tatar folk art.

Башкортстандагы татар фольклористикасы, филология фәне үсешен, милли педагогик кадрларны әзерләү тарихын күренекле фольклорчы-галим, филология фәннәре кандидаты, Башкорт дәүләт университетының татар филологиясе кафедрасы доценты Риф Мирхабулла улы Мөхәммәтҗановның исеменнән тыш күз алдына да китереп булмый. Соңгы елларда аның истәлеген мәңгеләштерү эше белән Риф Мирхабулла улының шәкерте, дәвамчысы – Уфа Фән һәм технологияләр университетының татар филологиясе һәм мәдәнияте кафедрасы доценты, филология фәннәре кандидаты Илдус Камил улы Фазлетдинов шөгыльләнә. Аның тырышыгы белән галимнең “Башкортстан Ык буе татарларының йола иҗаты” дип аталган хезмәтләр җыентыгы тупланып, Татарстан Фәннәр академиясенең Г. Ибраһимов исемендәге Тел, әдәбият һәм сәнгать институты грифы астында нәшер ителде [5], фәнни журналларда һәм вакытлы матбугатта Р.М. Мөхәммәтҗановның тормыш юлына һәм фәнни хезмәтләренә багышланган берничә күләмле мәкалә дөнья күрде [4] [12] [13] [14] [15]. Иң мөһиме, И.К. Фазлетдинов остазының 1962 елдан башлап 1990 елларга кадәр Башкортстанның татар халкы күпләп яшәгән районнарына фольклор экспедицияләре барышында туплаган материалларын “Башкортстан татарлары фольклоры” сериясе рәвешендә, өч китап итеп бастырып чыгаруга иреште [1] [2] [3]. Әлеге тупланма шулай ук Татарстан Фәннәр академиясенең Г. Ибраһимов исемендәге Тел, әдәбият һәм сәнгать институты грифы астында нәшер ителде. Бу үзе үк Риф Мөхәммәтҗанов башкарган хезмәтләрнең теоретик һәм практик әһәмияте әле югалмавы хакында сөйли.

Риф Мирхәбибулла улы Мөхәммәтҗанов 1939 елның 2 июлендә Башкортстанның Ярмәкәй районы Аксак авылында дөньяга килә. Биредә сигезьеллык мәктәптә белем алгач, 1957 елда Иске Турай урта мәктәбен көмеш медаль белән тәмамлый. 1957-1962 елларда Башкорт дәүләт университетының филология факультеты татар-рус бүлегендә укый. 1962-1966 елларда башкорт

телендә нәшер ителүче «Совет Башҡортостаны» республика гәзитендә әдәби хезмәткәр вазифасын башкара, күпсанлы очерклар, мәкаләләр яза [16, 117 б.].

Ләкин балачагыннан ук туган авылы халкыннан мәзәкләр, сөйләкләр, йола үрнәкләре ҙыеп, аларны аерым дәфтәрчекләргә туплаган Риф Мирхәбибулла улының күңеле фәнгә тартыла [12, 5 б.]. 1966 елда сәләтле белгеч БДУның татар филологиясе кафедрасына эшкә чакырыла. Аңа «Татар халык иҙаты», «Татар әдәбияты тарихы» фәннәре, махсус курслар буенча лекцияләр уку, студентларның гыйльми эшләренә ҙитәкчелек итү бурычы йөкләтелә. Яшь галим яңа эшкә күңел биреп тотына һәм тиз арада хезмәттәшләре арасында зур абруй казана [14, 30-31 б.].

Риф Мөхәммәтҙановның фән өлкәсендәге иң зур казанышы – БДУның татар филологиясе кафедрасы каршында фольклор фонды оештыруыдыр, мөгаен. Ул – Башкортстан татарларының халык авыз иҙатын системалы рәвештә ҙыю һәм өйрәнү эшен башлап ҙибәргән беренче галим. 1967 елдан алып 1990нчы еллар башына кадәр, ул республиканың татарлар күпләп яшәгән районнарына утызга якын фольклор экспедициясе оештыра, 150дән артык авылны урап чыга. Әлеге экспедицияләрдә ҙыелган фольклор материаллары тиз арада фәнни әйләнешкә кереп китә. Мәсәлән, 1977-1993 елларда Казанда дөнья күргән “Татар халык иҙаты» унөчтомлыгының һәр китабында да Риф ага тарафыннан тупланган халык авыз иҙаты үрнәкләре урын ала. Ә инде «Йола һәм уен ҙырлары» томының нигезен, гомумән, ул ҙыйган материаллар тәшкил итә. Ык буендагы татар авылларында таралган йолаларны, гореф-гадәтләрне өйрәнүгә аерым игътибар бүлә ул. Шулар нигезендә, 1973 елда филология фәннәре докторы, профессор Әхнәф Кирәев (әдәби тәхәллүсе – Кирәй Мәргән) ҙитәкчелегендә «Башкортстан Ык буе татарларының йола поэзиясе» [10] темасына кандидатлык диссертациясен яклый. Әлеге хезмәт Татарстаннан читтә яшәүче татар халкының, аерым алганда, Башкортстанда яшәүче татарларның, милли фольклорын, аның төбәк үзенчәлекләрен, биредә яшәүче башка халыкларның авыз-тел иҙаты белән бәйләнешен чагыштырма планда, комплекслы һәм системалы рәвештә анализлаган беренче гыйльми тикшеренү булып тора.

Риф Мирхәбибулла улы алып барган тикшеренүләр соңыннан студентлар өчен дәреслекләр, уку кулланмалары булып формалаша. 1977 елда аның – «Башкортстан Ык буе татарларының йола иҙаты: туй поэзиясе» [7], 1982 елда – «Башкортстан Ык буе татарларының йола иҙаты: календарь поэзия» [6], 1984 елда рус телендә «Специфика татарских фольклорных жанров» [11] дип аталган хезмәтләре үзе эшләгән Башкорт дәүләт университеты нәшриятында дөнья күрә. Алар бүген дә студентлар, халык авыз иҙаты белән кызыксынучылар өчен әһәмиятле чыганаклар булып кала.

И.К. Фазлетдинов бик хаклы билгеләп үтүенчә, «Риф Мөхәммәтҙановның әлеге хезмәтләре «студентлар өчен уку әсбабы» дип бирелсә дә, чынлыкта, алар – тулы хокуклы гыйльми монографияләр» [12, 7 б.]. Аларның берсе дә моңа кадәр билгеле булган, фәнни рәвештә анализланган күренешләр турындагы хезмәтләрнең «әзер» нәтиҙәләрен студентларга хәбәр

итү бурычын куймый, ә, киресенчә, фольклористика өчен яңа булган күренеш-вакыйгаларны, төшенчәләрне әйләнешкә кертә, аларны тарихи һәм чагыштырма-типологик күзлектән чыгып анализлый. И.К. Фазлетдинов әлеге хезмәтләрнең «уку әсбабы» дип бирелүенең объектив сәбәпләрен дә билгеләп үтә. «Беренчедән, – ди ул, – Р.М. Мөхәммәтҗанов – бар гомерен фәнни-педагогик эшчәнлеккә багышлап, Башкорт дәүләт университетында студентлар укыткан шәхес. Уку-укыту планына ярашлы, югары уку йортларының редакция-типография хезмәтләрендә студентлар өчен уку әсбаплары һәм дәреслекләр нәшерләү иң төп бурыч итеп куела, «саф» гыйльми әдәбиятны чыгару арткы планга күчә. <…>. Хезмәтләрен «уку әсбабы» дип билгеләү юлы белән, ул аларны университет хисабына татар телендә чыгаруга ирешә. Икенчедән, Югары аттестация комиссиясе куйган таләпләр буенча, вуз укытучыларына «доцент» исемен алу өчен, гыйльми монографияләр түгел, ә студентлар өчен уку кулланмалары һәм дәреслекләр нәшер итү кирәк. Шулай итеп, Риф Мөхәммәтҗанов биредә «берьюлы ике куянның койрыгын тота» – фәнни тикшеренүен дә туган телендә чыгара, гыйльми-педагогик дәрәҗәгә дә ия була» [12, 7-8 б.].

Әлеге хезмәтләрендә галим Башкортстанда яшәүче татар халкының йола поэзиясен ике төргә бүлеп тикшереп, календарь һәм туй поэзиясенең жанрлар буенча ул чор өчен өр-яңа бүленешен тәкъдим итә, аларны Казан ягы татарлары фольклоры белән тарихи-чагыштырма планда анализлап, уртак һәм аермалы якларын билгели, шул ук вакытта, Башкортстанда яшәүче татарларның һәм тел, һәм мәдәния, һәм фольклор ягыннан гомумтатар халкының аерылгысыз өлешен тәшкил итүен ассызыклый. Бер үк вакытта ул уртак географик һәм рухи җирлектә гомер кичерүче башкорт, урыс, мордва, мари, чуваш h.б. халыклар фольклоры белән параллельләр үткәрә, төрле халыкларның авыз-тел иҗатында үзара бәйләнешләрнең чагылышын тикшерә.

Р.М. Мөхәммәтҗанов, татар фольклористикасында беренчеләрдән булып, халкыбызның туй һәм аграр эчтәлекле йолаларының тарихи-мифологик тамырларын ачыклау һәм, халыкара параллельләр үткәреп, тикшерү эшен башлый. Галим эзләнүләрен башыннан ахырынача тарихи-мифологик яссылыкта алып бара. Мәсәлән, яучының поэтик репертуарының нигезен тәшкил иткән самак җырларын ул профилактик магиягә хас булган яшерен тел, читләтеп әйтү күренешләре белән бәйләп карый; шул рәвешле, әлеге йоланың, ә димәк, халкыбызның да, борынгылыгын ачып сала.

Бу җәһәттән, Риф Мөхәммәтҗановның Ык буе татарларының туй репертуарында киң таралган кыз елату җырларына карата күзәтүләре аеруча кызыклы. Ул әлеге типтагы әсәрләрне бер жанр кысаларында гына карамый. Мәсәлән, галим кияүгә чыгасы кызның туй алдындагы төндә әтисе йоклаган бүлмәнең тәрәзә төбенә килеп, акча сорап җырлаган җырларын таңкучатлар дип атый. Ата кеше, җырны ишеткәч, аңа акча бирергә тиеш, чөнки мәҗүси ышанулар буенча, сатып кияүгә бирелгән кызның җаны өрәккә әверелеп, ата кешедән үч алырга мөмкин. Шулай итеп, биредә дә заманга хас йола борынгы мифологик күзаллаулар эзен саклый [13, 94-99 б.].

Гомумән алганда, Риф Мөхәммәтҗанов үзенең кыска гына тормышында дүрт монографик хезмәт һәм уку кулланмасы, 100дән артык фәнни мәкалә язып һәм бастырып калдыра [Энциклопедия, 2010, с. 117]. Аның исеме Башкортстандагы татар фольклор фәне, педагогика тарихына алтын хәрефләр белән язып куелырга хаклы.

Кулланылган әдәбият

1. Башкортстан татарлары фольклоры. Көнбатыш һәм көньяк-көнбатыш районнар / төзүче, кереш мәкалә һәм аңлатмалар авторы И.К. Фазлетдинов; фәнни редакторы К.М. Миңнуллин. – Казан: ТӘҺСИ, 2021. – 312 б.

2. Башкортстан татарлары фольклоры. Төньяк һәм төньяк-көнчыгыш районнар / төзүче, кереш мәкалә һәм аңлатмалар авторы И.К. Фазлетдинов; фәнни редакторы К.М. Миңнуллин. – Казан: ТӘҺСИ, 2021. – 296 б.

3. Башкортстан татарлары фольклоры. Үзәк һәм төньяк-көнбатыш районнар / төзүче, кереш мәкалә һәм аңлатмалар авторы И.К. Фазлетдинов; фәнни редакторы К.М. Миңнуллин. – Казан: ТӘҺСИ, 2021. – 304 б.

4. Дәүләтшина Л.Х. Башкортстанда яшәүче татарларның фольклор мирасын өйрәнүдә Риф Мөхәммәтҗанов эшчәнлеге // Фәнни Татарстан. – 2021. – №2. – Б. 75-81.

5. Мөхәммәтҗанов Р.М. Башкортстан Ык буе татарларының йола иҗаты / төзүчеләр: И.И. Ямалтдинов, И.К. Фазлетдинов; фәнни редакторы К.М. Миңнуллин. – Казан: ТӘҺСИ, 2021. – 228 б.

6. Мөхәммәтҗанов Р.М. Башкортстан Ык буе татарларының йола иҗаты: календарь поэзия / фәнни редакторы Т.Н. Галиуллин. – Уфа: БДУ нәшрияты, 1982. – 72 б.

7. Мөхәммәтҗанов Р.М. Башкортстан Ык буе татарларының йола иҗаты: туй поэзиясе. – Уфа: БДУ нәшрияты, 1977. – 72 б.

8. Мөхәммәтҗанов Р.М. Йола поэзиясе // Татар теле, әдәбияты һәм аларны укыту методикасы мәсьәләләре. – Уфа: БДУ нәшрияты, 1971. – Б. 30-42.

9. Мөхәммәтҗанов Р.М. Хәзерге поэзиядә традицион фольклор образларының үсеше: ҺҺ. Такташ иҗаты материалында // Татар филологиясе мәсьәләләре (әдәби әсәрдә поэтика): вузара җыентык. – Уфа: БДУ басмасы, 1990. – Б. 57-67.

10. Мухаметзянов Р.М. Обрядовая поэзия приикских татар Башкирии : дисс. ... канд. филол. наук: 10.01.09. – Уфа, 1973. – 228 с. https://search.rsl.ru/ru/record/01009856164

11. Мухаметзянов Р.М. Специфика татарских фольклорных жанров: учебное пособие / Р.М. Мухаметзянов. – Уфа: Издательство БашГУ, 1989. – 84 с.

12. Фазлетдинов И.К. Кереш // Башкортстан Ык буе татарларының йола иҗаты / төзүчеләр: И.И. Ямалтдинов, И.К. Фазлетдинов; фәнни редакторы К.М. Миңнуллин. – Казан: ТӘҺСИ, 2021. – Б. 3-12.

13. Фазлетдинов И.К. Фольклорчы галим Риф Мөхәммәтҗановның фәнни һәм педагогик эшчәнлеге // Фәнни Татарстан. – 2019. – №4. – Б. 94-99.

14. Фазлетдинов И.К. Юксыну // Тулпар. – 2009. – №4. – Б. 30-31.

15. Хәмид Р. Яшьти абый // Тулпар. – 2014. – № 3. – Б. 22-30.
16. Энциклопедия. Ермекеевский район. Республика Башкортостан: А-Я / Т. И. Аминев (рук.) и др.; редкол.: Т. И. Аминев (отв. ред.) и др. – Уфа : Уфимский полиграфический комбинат, 2010. – 199 с.

УДК 37

БАШҠОРТ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА ТЕЛМӘР ҺӘЛӘТЕН ҮҢТЕРЕҮ

DEVELOPMENT OF SPEECH ABILITIES IN BASHKIR KINDERGARTEN

З.Р. Аитбаева, старший воспитатель,
Н.В. Идельбаева, воспитатель
Я.Ф. Хайбуллина, учитель башкирского языка и литературы МАДОУ ЦРР ДС «Йәйгор» с.Акъяр, Хайбуллинский район РБ
Z.R. Aitbayeva, senior educator,
N.V. Idelbayeva, educator
Ya.F. Khaibullina, teacher of Bashkir language and literature
MADOU CRR DS "Yaygor" S.Akyar, Khaibullinsky district of RB

Аннотация. В статье речь пойдет о развитии речи детей дошкольного возраста на родном языке. Рассказывалось о методах работы детского сада в обучении и воспитании малышей на родном языке.

Annotation. The article will focus on the development of speech of preschool children in their native language. It was told about the methods of kindergarten work in teaching and educating kids in their native language.

Ключевые слова: родной язык, национальный дух, обычаи, сезонные праздники и традиции, интерактивные игры, семейные ценности.

Key words: native language, national spirit, customs, seasonal holidays and traditions, interactive games, family values.

Баланы шәхес итеп үҫтеүҙә мәктәпкәсә йәштәге осор әһәмиәтле роль уйнай. Ғәлиева Ғ.Ғ. әйтеүенсә: «Киләсәк быуынды тормошҡа әүҙем ҡарашта булған, кешелек донъяһың мәҙәни һәм рухи ҡиммәттәрен ынғай ҡабул иткән ирекле һәм милләтеннә тоғро булған, уны үҫтереүгә ынтылыусы шәхес итеп тәрбиәләү- беҙҙең мөһим бурысыбыҙ» [1,181].

Бөгөн илебеҙҙә тәртип, әхлаҡ емерелгән заманда “милли рух”, “милли байлыҡ”, “туған тел” төшөнсәләрен балаларҙың эске донъяһында нығытыу бик актуаль. Донъяла телдәр бик күп. Әммә кешенең туған теле, әсәһе кеүек, берәү генә. Туған телдәге тәүге өндө, тәүге һүҙҙе бала әсәнән ишетә. Тимәк, теленә тоғролоҡ – әсәңә тоғролоҡ. Туған телдә дөрөҫ һөйләтергә өйрәтеү, уның бар нескәлектәрен бала күңеленә еткереү, туған телдең әһәмиәтен аңлатыу балалар баҡсаһынан үк башланырға тейеш. Беҙҙең “Йәйғор” балалар баҡсаһы коллективы туған тел аша рухлы, әхлаҡлы шәхес тәрбиәләү маҡсатын һәм балаларҙың туған телендә телмәрен үҫтереүҙе төп бурысы итеп ҡуя.

Халҡыбыҙҙың киләсәк быуыны телле лә, рухлы ла булып үҫһен өсөн баҡсабыҙҙа бар мөмкинлектәр булдырылған. Төп йүнәлештәрҙең береһе булып,

баланың телмәрен үстереү, туған телдә иркен аралашҡан һәм фекерләгән, телебеҙ булмышына битараф булмаған шәхес тәрбиәләү.

Беҙ кескәйҙәрҙе баҡсаға килгән тәүге көндәрҙән үк туған тел серҙәренә өйрәтә башлайбыҙ. Баланың 1 йәштән-3 йәшкә тиклемге аралығы , әгәр ҙә бала психик һәм физик яҡтан үсешкән булһа,тел өйрәнеү өсөн иң отошло осор тип иҫәпләнә. Кескәйҙәр ошо ваҡытта үҙен уратып алған әйберҙәргә, телмәргә бик тә иғтибарлы була. Ул кешеләрҙең туған телендә һөйләшкәнен, аралашҡанын ишетеп үҫһә, тиҙерәк теле асыла. Яңы тыуған бала менән йыш аралашыу, һөйләшеү баланың төрлө яҡлап үсешенә лә булышлыҡ итә. Балалар баҡсаһында йәки өйҙә өйрәнгән төрлө һамаҡтар, тел төҙәткестәр, дүрт юллыҡ шиғырҙар, тел көрмәлдергестәр, һанашмаҡтар өндөрҙе дөрөҫ әйтеүгә булышлыҡ итә.

Телмәр үстереү барышында башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен өйрәнеүгә айырым иғтибар бүләбеҙ. Сөнки тап балалар баҡсаһында ғына был эшкә айырым баҫым яһау мөмкинселеге бар. Кескәйҙәр өндө ишетһен, айырһын һәм дөрөҫ әйтһен өсөн телмәр ағзаларының һығылмалылығын, хәрәкәтсәнлеген үстереүгә артикуляциян, дөрөҫ тын алыу һәм тын сығарыу күнегеүҙәрен ойоштороу ҙа файҙалы.

Беҙҙең коллектив үҙ эшендә мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн «Башҡортостан-тыуған илем»(Ф.Ғ.Аҙнабаева, Г.Ш.Әлбәкова,Ә.Р.Буранбаева, К.Ф.Мортаева), «Башҡорт балалар баҡсалары өсөн комплекслы уҡытыу-тәрбиә программаһы» (Нафиҡова З.Ғ., Ғәлиева Ғ.Ғ.), Ф.Ғ.Аҙнабаева етәкселегендә сығарылған «Гөлбостан», «Тылсымлы өндәр», « Уйнай-уйнай үҫәбеҙ», « Хеҙмәт- тормош сығанағы» методик ҡулланмаларын , «Башҡорт халыҡ уйындары»(И.Ғ. Ғәләүетдинов)» , « Бала-сағаның уйын фольклоры» (Ә.М.Сөләймәнов), «Йәйғор» хрестоматияһы, «Балалар фольклоры» йыйынтығы Ф.Ғөбәйҙуллинаның «Беҙҙең байрамдар» һәм Рәсимә Ураҡсинаның, Абдулхаҡ Игебаевтың, Айһылыу Йәғәфәрованың һәм башҡаларҙың балалар өсөн яҙылған шиғырҙарын, хикәйәләрен, «Аҡбуҙат» журналын әүҙем ҡуллана.

Балаларҙы грамотаға әҙерләүҙе телмәр үстереү менән берлектә Эльконин-Давыдов системаһы нигеҙендә Ф.А.Сохин һәм Л.Е. Журова методикаларына таянып төҙөлгән «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы грамотаға әҙерләү» (В.Б.Кәримова) методик ҡулланмаһы буйынса алып барабыҙ. Балаларҙы һүҙгә өн-ижек анализы яһарға, схема модель ярҙамында һөйләмдәге һүҙҙәр тәртибен һәм уларҙың һанын билдәләргә өйрәтәбеҙ, дидактик уйын формаһында ойоштороған бындай эштәр аша баланы мәктәпкә әҙерләйбеҙ.

Яңы Федераль белем биреү программаһына ярашлы (ФББП) балалар баҡсаһында балаларҙың телмәрен үстереү (коммуникация) белем биреү өлкәһенә түбәндәге бурыстар ҡуя :

1. Балала Ватанына, еренә, халҡына һәм үҙенең яҡындарына хөрмәт. һөйөү тойғоһо формаллаштырыу.
2. Төбәктә йәшәгән үҙ милләте һәм башҡа милләт мәҙәниәтенә ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына ихтирам үстереү, балала кешелек ҡиммәттәре, изгелек, дөрөҫлөк, ғорурлыҡ, иғтибарлыҡ, хәстәрлек, толерантлыҡ, илһөйәрлек

сифаттарын тәрбиәләү.

3. Баланың үҙ тиҫтерҙәре һәм өлкәндәр менән иркен аралаша белеүен үҫтереү.

4. Балаларҙың һөйләү телмәре компоненттарын (телмәрҙең лексик, грамматик төҙөлөшөн, өндәр мәҙәниәтен, бәйләнешле-диалогик һәм монологик телмәрен) төрлө эшмәкәрлек аша үҫтереү.

3. Балаларҙың тел нормаларына ярашлы итеп һөйләү телмәренә өйрәтеү.

4. Телмәр үҫтереү аша баланың аң - зиһенең үҫтереү.

5. Үҙеңде уратып алған ысынбарлыҡ менән таныштырыу өҫтөндә системалы эшләү.

6. Баланың йәш үҙенсәлектәренән сығып тел өйрәнеүгә ыңғай ҡараш булдырыу.

7. Башҡорт ауыҙ - тел ижадын өйрәнеү аша халыҡ тормош - көнкүрешенә , тарихына, йолаларына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Беҙҙең “Йәйғор” балалар баҡсаһы коллективы туған тел аша рухлы, әхлаҡлы шәхес тәрбиәләү маҡсатын һәм балаларҙың туған телендә телмәрен үҫтереүҙе төп бурысы итеп ҡуя. Белем биреү эшмәкәрлегендә тәрбиәселәр яңы технологиялар, аудио-видеоматериалдар, күргәҙмә әсбаптар ҡуллана, телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡтырыу маҡсатында традицион ысулдар менән бергә яңы технологиялар ҙа ҡулланабыҙ:

- мнемоюлдар һәм мнемотаблицалар менән эшләү (балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә, шиғыр ятлағанда, тел байлығын арттырыу өсөн отошло);

- тапҡырлыҡҡа мәсьәләләр сисеү (ТРИЗ-технологияһы) Мәҫьәлән: йәнле тәбиғәттең үҫеү барышын һүрәтләү (тауыҡ-себеш-йомортҡа);

- өндәрҙе дөрөҫ әйткәндә төҫлө моделдәр ҡулланыу: (ҡыҙыл)-һуҙынҡылар, (зәңгәр)-тартыңҡылар («Өндәрҙең өйөн тап!» дидактик уйыны);

- терәк схемалар (мәҫәлән: өлкәндәр төркөмөндә кеше һәм йорт хайуандары араһындағы мөнәсәбәтте асыҡлау өсөн ошондай схема бирергә мөмкин);

- уйын технологияһы. Уйын балаларҙың бөтә төр эшмәкәрлегенә лә үтеп инә. Мәҫьәлән: «Курсаҡты кейендер» уйыны аша үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереүгә өйрәтеү, кейем-һалым атамалары менән танышыуҙы» «Ҡустымды ашатам», «Өләсәй ҡунаҡа саҡыра» дидактик уйындары аша һауыт-һаба менән таныштырыу, режиссер, сюжетлы-ролле уйындар аша профессиялар менән таныштырыу, һүҙ байлығын арттырыу, тылсымлы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, үҙ-ара аралашыу мәҙәниәтенә өйрәтеү, телмәр һәләтлеген үҫтереү бурыстары атҡарыла;

- үҫтереүсе технология. Был технология балаларҙы эҙләнеү-тикшеренеү проекттары, белем биреү эшмәкәрлегендә төркөмсәләр менән, парлап эшләү формалары аша, балалар алдында һорау, проблема ҡуйып, уны бергәләп хәл итеү - уның телмәрен үҫтереү, аралашыу мәҙәниәтен йәки баланы шәхес итеп тәрбиәләү бурыстарын үтәүгә булышлыҡ итә;

- әкиәт сюжетын ҡулланыу технологияһы.

Белем биреү эшмәкәрлеген әкиәттең сюжетына ҡороп, балаларҙы әкиәт геройҙарының ярҙамы менән төрлө эш төрҙәре аша һөйләргә өйрәтеү алымын ҡулланыу.

Сюжетлы һүрәттәр буйынса әкиәттәр, хикәйәләр төҙөү алымдары ҡулланабыҙ. Балалар өсөн әкиәттәр уҡыу, уларҙы инсценировкалау, бармаҡ театры, би-ба-бо ҡурсаҡтары театры, күләгә театры, ҡурсаҡ театры ойошторо туған телде теләп өйрәнеүҙә бик отошло юлдар булып тора.

Шулай итеп, тәҡдим ителгән телмәр үҫешенең заманса технологияларын ҡулланыу һөҙөмтәһендә телмәр эшмәкәрлегенең бөтә компоненттары үҫешә, коммуникатив күнекмәләр формалаша; иғтибар, аңлау яҡшыра.

Ата-әсәләр менән эш

Баланың телмәрен үҫтереүҙә ата- әсәнең сабый менән аралашыуы бик мөһим роль уйнай. Балаларға йорт, ҡырағай хайуандарҙың, ҡоштарҙың һүрәттәрен күрһәтеп, уларҙың сығарған тауыштарын ҡабатлап, исемен дөрөҫ итеп әйтеүҙәре һүҙлек байлығын арттырыуға булышлыҡ итә. Мәҫәлән: әтәс-кикрикүк, һыйыр-мө-ө-ө, ҡаҙ- ҡаҡ-ҡаҡ, себеш-сип-сип, һарыҡ-бә-ә-ә. Ата-әсәләр артынан баланың төрлө хәрәкәтте һәм һүҙҙәрҙе ҡабатлауы, уның һәләттәрен үҫтереүгә ярҙам итә. Был осраҡтарҙа инде башҡорт халыҡ уйындары мөһим роль уйнай. Мәҫәлән: бармаҡ уйындары, шаяртҡыстар, һикергестәр, һанашмаҡтар, табышмаҡтар, мауыҡтырғыстар.

Төркөмдөң ҡабул итеү бүлмәһендә ата- әсәләр өсөн махсус стендта дәрестә өйрәнелгән һүҙ, диалог, шиғыр һәм һүҙҙәрҙең грамматик формаларын биреп был эшкә ата- әсәләрҙе лә йәлеп итәбеҙ.

Беҙҙең педагогтар ата-әсәләргә балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә тәрбиәселәр төрлө консультациялар, йыйылыштар,практик эштәр үткәрә. Мәьҫәлән: «Бармаҡ уйындары аша – телмәр үҫешенә!», «Бергәләп артикуляция күнегеүҙәре эшләйбеҙ!» темаларына практикум һәм тренингтары, «Ни өсөн баланың телмәре тотлоға?», «3-4 йәшлек баланың телмәр үҫеше», «Балаларҙа китапҡа һөйөү тәрбиәләү», «Балаларҙы матур һөйләшергә өйрәтәйек!» һ.б. темаларға ата-әсәләр йыйылыштары үткәрелде. Баҡсала «Асыҡ ишектәр» көндәре ваҡытында белем биреү эшмәкәрлеген ҡарау, ата-әсәләрҙең балалар менән ғаилә шәжәрәләрен төҙөүө, балаларҙы шиғыр конкурстарына әҙерләүе, әкиәт уйлап сығарыу, ребустар сисеү, йомаҡтар ҡойоу кеүек берлектәге эштәр балалар менән ижади эҙләнеүгә этәрә, балаларҙың телмәрен, фекер ҡеүәһен арттыра һәм беҙҙең берлектәге эшкә ҙур һөҙөмтәләр бирә.

Шулай итеп, балалар баҡсаһы эшмәкәрлегең һөҙөмтәһе булып мәктәпкәсә йәштәге баланың үҙенә генә булған, тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтен асыу, уның төрлө яҡлап үҫешкән шәхес булараҡ формалашыуына нигеҙ һалыу, тиҫтерҙәре, ололар менән әҙәп-әхлаҡи ҡағиҙәләрен һаҡлап аралашырға өйрәтеү.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Нафиҡова З.Ғ., Ғәлиева Ғ.Ғ., Башҡорт балалар баҡсалары өсөн комплекслы уҡытыу-тәрбиә программаһы- Өфө, 2009 й.,[1,181].

2. Р.Аҙнағолов Хәҙерге дәрес: – Уҡыу ҡулланмаһы.Үҙгәрешле, икенсе баҫма. Өфө: Баш ДУ, 2011.
3 .И.Ғ. Ғәләүетдинов. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп.– Өфө, 1995 й.
4.О.С. Ушакова .Развитие речи детей 3-5 лет. Москва,2012.
5. И.Ғ. Ғәләүетдинов. "Башҡорт халыҡ балалар уйындары".- Өфө, 2006.

УДК 398.8

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ӨЛГӨЛӘРЕН ҠУЛЛАНЫУҘЫҢ ТӘРБИӘҮИ ӘҺӘМИӘТЕ

THE EDUCATIONAL VALUE OF USING SAMPLES OF FOLK ART IN THE LESSONS OF THE BASHKIR LANGUAGE AND LITERATURE

Алдырханова-Каримова А.Р.,
учитель башкирского языка и литературы Республиканской полилингвальной многопрофильной гимназии-интерната № 3, г. Сибай
A.R Aldyrkhanova-Karimova,
teacher of Bashkir language and literature of the Republican multilingual multidisciplinary boarding gymnasium N. 3, Sibai

Аннотация. На основании системного анализа автор выделяет существенные признаки башкирского фольклора, подчеркивает духовную и педагогическую ценность его жанров.

Annotation. Based on a systematic analysis, the author identifies the essential features of Bashkir folklore, emphasizes the spiritual and pedagogical value of its genres.

Ключевые слова: родной язык, родная литература, фольклор, жанры башкирского фольклора.

Key words: native language, native literature, folklore, genres of Bashkir folklore.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы дәрес төҙөлөшөнә үҙгәрештәр индерелде. Ҡалыпҡа һалынған ябай дәрестәр бөгөнгө көндә яңы технологияға ҡоролған, интернет ресурстары ҡулланылған дәрестәр формаһында заман талаптарына яраҡлаша. Компьютер, проект, уйын,үҫтереүсе технологиялар ҡулланылған дәрестәр, әлбиттә, бик ҡыҙыҡлы һәм һөҙөмтәле үтә. Бындай технологиялар яңы стандарт талаптарына ярашлы балаға дәрес башында уҡ ҡуйылған проблемалы һорауҙарҙы сисергә, интерактив таҡтала рәхәтләнеп яҙырға, һыҙырға, фекерләргә, ижад итергә, аралашырға, бәхәсләшергә, анализларға, дөйөм һығымта сығарып, төрлө асыштар яһарға этәрә.

Дәрестең уңышы уҡытыусы ҡулланған технологияларҙан ғына тормай. Көн һайын яңы талаптар буйынса ғына белем биреп, дәресебеҙҙең тәрбиәүи яғын да оноторға ярамай. Сөнки белем менән тәрбиә йәнәш бара. Был йәһәттән үҙемдең педагогик маҡсатыма ярашлы һәр дәрестә халыҡ педагогикаһына таянып, халыҡ ижадының аҫыл өлгөләрен файҙаланып, балаларға төплө белем һәм ныҡлы тәрбиә бирергә тырышам.

“Башҡорт халыҡ ижады – халыҡтың быуаттар буйы туплана килгән рухи культураһы, рухи байлығы, быуындан быуынға күсеп килгән аҫыл хазинаһы. Уның аша халыҡ үҙенең йыр-моңға күскән тарихы менән танышҡан, ата-бабаларҙан тапшырыла килгән яҙылмаған тормош тәжрибәһен һәм әхлаҡ нормаларын үҙләштергән, эстетик зауығын үҫтергән”-тип яҙған фольклорсы ғалим Салауат Галин.Әҙәбиәт дәрестәрендә халыҡ ижады жанрҙарына һәр әҫәрҙән миҫалдар табырға була. Әҫәрҙәрҙе уҡығанда уҡыусыларға иҫкәрмә яһала, Уҡыу барышында осраған халыҡ ижадын ҡәләмдәр менән билдәләп баралар һәм анализ ваҡытында фекер алышыу ойоштороло. Хатта ҡайһы романдарҙы кластан тыш уҡып, йәки фильмдарын ҡарап, проект –дәрес тә үткәреү мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, Ғ.Ибраһимовтың “Кинйә” романының өсөнсө китабы буйынса нәҡ ошондай типтағы проект-дәресе үткәрелде. Уҡыусылар төркөмдәргә бүленеп, әҫәрҙән халыҡ йырҙарын, ҡобайырҙарын эҙләп табып, анализ яһанылар. Яҙыусы романдың биш бүлеген халыҡ йырҙарынан, ҡобайырҙарынан өҙөктәр алынған эпиграфтар менән башлай.Түбәндәге таблицала Ғ.Ибраһимовтың йырлы ижады буйынса һығымта тәҡдим ителә.

№	Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә” романында халыҡ ижады өлгөләре	Иҫәбе
1.	Ҡобайырҙар	7
2	Йырҙар	46
3	һамаҡтар	2
4	теләктәр	2
5	Көйләп әйтелгән доғалар	2
6	сеңләүҙәр	1
7	таҡмаҡтар	3

Аҙаҡ уҡытыусылар өсөн видео яҙма ҡулланма ла эшләп ҡуйҙылар.

Әҙәбиәт дәрестәрендәге күҙәтеүҙәрҙән сығып, әҫәрҙә нисә мәҡәл осрауын ғына билдәләү маҡсат итеп ҡуйылмай, уларға аңлатма биреү, улар аша әҫәрҙең әһәмиәтен билдәләү ҙә тәүшарттарҙың береһе. Халҡымдың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, халыҡ медицинаһы, им-томдар, юрауҙар, һынамыштар, һанашмаҡтар, халыҡ йырҙары һ.б дәрес программаһына ингән, әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан. Н.Мусин әҫәрҙәрендә ер-һыу атамалары, Т.Ғиниәтуллиндың “Мәтрүшкә еҫе” хикәйәһендә халыҡ медицинаһы, З.Биишева романдарында, М.Буранғоловтың “Башҡорт туйы”нда халыҡ ижады өлгөләре күпләп осрай. Был йолаларҙы, уйындарҙы видео таҫмаларҙа ла өлгөләр күрһәтеү-дәрестең биҙәге. Йырҙар, ҡобайырҙарҙы уҡып ҡына бала күңеленә нығлап еткереп булмай. Йә видео яҙма тыңлатырға, йә дәрес –осрашыу, дәрес-бәйге үткәрергә мөмкин. Йыр, ҡобайырҙар темаһында мин мотлаҡ данлы йырсыларҙы дәрескә саҡырам. “Дини китап” темаһында дин әһелдәре, ҡурай темаһында ҡурайсылар дәрескә килә.

Фекеремде ҡеүәтләп, М.Бараҡаеваның һүҙҙәрен яҙыр инем. “Баланы туған мөхит-туған тел, халҡың тарихы, ижады, йыр-моңо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары тәрбиәләй!

Башҡорт теле дәрестәрендә лә һәр темаға ярашлы халыҡ ижады үрнәктәрен ҡулланырға була. Дәрес темаһын асыуҙа йомаҡтарҙы миҫалға алырға була, мәҡәлдәрҙән ребусты сисеү, ниндәй тема булһа ла мәҡәл алып темаға ярашлы һүҙҙәрҙе төшөрөп ҡалдырыу кеүек алымдар ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. “Антонимдар ” темаһында мәҡәлдәр ике баҒанала бирелә, ишен табыу, күнегеүҙә бирелгән мәҡәлдәргә аңлатма яҙыу, йәки ниндәйҙер темаға мәҡәл бирелә һәм кескәй инша яҙыу, шулай уҡ картина буйынса ижади эштәрҙе лә мәҡәл-әйтемдәр менән йомғаҡлап ҡуйыу ҙа күҙ уңында тотола. Диолог төҙөгән дә лә фекерҙе мәҡәл менән йомғаҡлап ҡуйыу кеүек эш төрҙәре тәҡдим ителә. Бер составлы һөйләмдәрҙә, фразеологик берәмектәрҙе үткәндә–һәр ҡайһыһында афористик жанрҙар файҙаланыла.

Һүҙ төркөмдәрен үткәндә һәр беренә ярашлы мәҡәлдәр ҡулланыла. “Алмаш”, “Һан” темаларында һәр төркөмсәләренә мәҡәл-әйтемдәрҙән миҫалдар табыу-уҡыусыларҙы эҙләнеү, уйланыуға этәргес көс бирә. Хәтер һандығына теркәп баралар, сөнки 9-сы класта имтиханда бирелгән мәҡәлгә ун һөйләм аңлатма яҙыу эшенә ярҙам буласаҡ.

Башҡорт теленән “Теҙемдәр” темаһында ла дәреслектә бирелгән ҡобайырҙар менән генә сикләнмәй, интернет селтәренән, йә халыҡ ижады томдарынан да үҙ миҫалдарын эҙләп табалар. “Исем” темаһында яңғыҙлыҡ исемдәргә миҫалдар ер-һыу атамалары әйтелә икән, легенда-риүәйәттәргә лаа туҡталыу кәрәк. Шулай уҡ һандарға “Бер тигәс тә ни яман” ҡобайырын да телмәр үҫтереүгә файҙаланыу отошло. [1]

Ҡай саҡ уҡыусыларға һорау бирһә, яуап бирергә ашыҡмайҙар, был мәлдә һанашмаҡ әйтәм. Мәҫәлән,

– Арғанан ,бырғанан,

Бесәй йөрөй ҡойманан,

Аҡ суҡ, ҡара суҡ .

Бында торма, йүгереп сыҡ”– [4] тип кемдә туҡтала, шул яуап бирә. Телмәр үҫтереүҙә тиҙәйткестәр, һынамыштар ярҙамға килә. Ижади эштәрҙә бәләкәй кластарҙа төрлө темаларға әкиәттәр яҙырға яраталар, яҙыу ғына түгел, уларҙың һүрәттәрен төшөрөп, сәхнәләштереп тә ҡуялар.

Башҡорт теле бүлмәһенә ткилеп инеү менән “Туғкан телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр ”тигән мәҡәл уҡыусыларымды ҡаршылай һәм дәрестә лә халҡымдың аҡыл хазиналарын күңелдәренә һалырға тырышам. Дәрестәрҙә дөрөҫ яуап биргән уҡыусыларға “бик хуп”, “мәслихәт”, “үәс-үәс”, “ һай, афарин”, “ дөрөҫ, хаҡ һүҙҙәр”, “бигерәк зирәкһең” , “бик шәп” кеүек боронғо хуплау, маҡтау һүҙҙәрен дә ҡулланам.

“Башҡорт халыҡ йола ижады – быуаттар буйы халыҡтың тормош-көнкүрешен, күңел, рух булмышының ыңғай, камил йәшәйешен тәьмин иткән боронғо мираҫ.Уны инҡар итеү-алтынды бысраҡҡа буяп ташлауға бәрәбәр,”- тип яҙа ғалим Ә.Сөләймәнов. [2, 152]

Тимәк, яңы технологияларға эйәреп, тик интернет ресурстары аша заманса ғына белем биреү генә уҡыусыларҙың белем кимәлен тулыһынса күтәрмәй, дәрес мотлаҡ халыҡ педагогикаһы, халыҡ ижады өлгөләре байытырға тейеш. Ошо ике төшөнсә бергә үрелеп барғанда ғына беҙ заманса ҡарашлы, ынтылышлы, маҡсатлы, рухлы, илһөйәр, телһөйәр киләсәк быуын әҙерләй алабыҙ.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт халыҡ ижады. X том. Икенсе китап. Өфө “Китап” 1995. Башҡортса-русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге/ И.М, Ғарипов.- Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994.-168 бит.

2. Журнал “Научный альманах” . Вып. 2023, N 5-3, с.152

3. Псянчин В.Ш., Псянчин Ю.В. Башҡорт теле:уҡытыу туған(башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 10-11-се кластары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. 5-се баҫма. –Өфө , Китап, 2018, –328

4. Солтангәрәева Р. Башҡорт халыҡ йола уйындары. – Өфө: Китап, 1997. – 271 бит.

УДК 398.8

ПРОФЕССОР С. ГАЛИН ХЕҮМӘТТӘРЕНДӘ БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҮАРЫН КЛАССИФИКАЦИЯЛАУ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

PROBLEMS OF CLASSIFICATION OF BASHKIR FOLK SONGS IN THE WORKS OF PROFESSOR SALAVAT GALINA

З.Р. Баширова,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ д.Сахаево МР Кармаскалинский район РБ
Z. R. Bashirova,
teacher of the Bashkir language and literature MBOU Secondary school named after d.Sakhaevo MR Karmaskalinsky district RB

Аннотация. Статья посвящена изучению башкирских народных песен как песенного типа текста и их классификации. Народная песня является типом текста с особым уровнем организации. Классификация данных песен может быть соотнесена с традиционными литературными и музыкальными жанрами с учетом основных лингвистических характеристик текста и мнения самого исследователя.

Ключевые слова: песня, исторические песни, лирические песни, поэзия, классификация, фольклор,

Abstract. The article is devoted to the study of Bashkir folk songs as a song type of text and their classification. A folk song is a type of text with a special level of organization. The classification of these songs can be correlated with traditional literary and musical genres, taking into account the main linguistic characteristics of the text and the opinion of the researcher himself.

Key words: song, historical songs, lyrical songs, poetry, classification, folklore.

Арҙаҡлы ғалим-педагог, филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Хөкүмәтенең мәғариф өлкәһендәге премияһы лауреаты, күрненекле фольклорсы, остазы – атаҡлы профессор һәм яҙыусы Ә.Н. Кирәйевтың шәкерте Салаут Әхмәҙиә улы Галин башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын, атап әйткәндә, халыҡ йырҙары һәм эпостарҙың поэтикаһын өйрәнеү йүнәлешендә бай ғилми мираҫ ҡалдырҙы. Йәш ғалимдың билдәле иң тәүге хеҙмәте – «Йылдар һәм йырҙар» Башҡортостан китап нәшриәтендә 1967 йылда ташҡа баҫылды, Башҡортостан комсомолының Ғәлимов Сәләм исемендәге премияһына лайыҡ булды. Ғилми етәксеһе Кирәй Мәргән баш һүҙҙә былай тип яҙған: «Йыр мираҫы – башҡорт халҡының күңел дәфтәрендә ятҡан гүзәл хазиналарҙыың береһе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был ҡиммәтле мираҫ ғилми яҡтан әле ныҡлап өйрәнелмәгән...Ошо ыңғайҙа автор, ғөмүмән, йыр культураһының дөйөм мәсьәләләренә күҙ ташлап, ҡайһы бер теоретик проблемалар күтәрә. Үҙаллы эш итә һәм ғилми фекер туплай башлаған йәш әҙәбиәтсе-фольклористың тәүге китабы булыу яғынан да «Йылдар һәм йырҙар» әҫәренең, һис шикһеҙ, әһәмиәте бар» [1, 4]. Ғалимдың тап халыҡ йырҙарына мөрәжәғәт итеүе юҡтан түгел: уҡытыусыбыҙ үҙе лә башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарҙы, музыкант булды, шуға ла ҡайһы саҡта лекция һәм семинарҙарҙа көслө баритон менән йырлап ебәреүе, өзләүгә тартым, тамаҡ төбөнән сыҡҡан моңо һоҡландыра ине.

Беҙ мәҡәлә сиктәрендә башҡорт халыҡ йырҙарын классификациялау проблемаһына туҡталабыҙ, сөнки ғалим шул ғилми мәсьәләгә һәр ваҡыт иғтибар итә килде. «Йылдар һәм йырҙар» китабының башында, тәүге һөйләмдә үк ошо мәсьәлә күтәрелеүе ғәжәп түгел: «Йырҙарҙы ғилми яҡтан өйрәнеүҙе, ғәҙәттә, тематик принципҡа нигеҙләнеп, уларҙы классификациялауҙан башлайҙар. Шуға күрә лә башҡорт халыҡ йырҙарының хәҙерге классификацияһы нигеҙендә тематик принциптың ятыуы бик тәбиғи. Билдәле булыуынса, башҡорт халыҡ йырҙары 8 тематик төркөмгә бүленеп йөрөтөлә» [1, 5]. Тематик принциптан тыш йәш ғалим, хеҙмәттәрҙән күренеүенсә, жанрҙар принцибына ла мөрәжәғәт итеүҙе таный. Тимәк, халыҡ йырҙарын өйрәнгәндә ике принцип өҫтөнлөк итергә тейеш: тематик һәм жанрҙар принцибы.

Салауат Галин халыҡ йырҙарын төркөмләү мәсьәләһендә бынан тыш йәнә бер принцип барлығын күрһәтә, ул – йырҙың характерынан сығып, йәғни оҙон көй, ҡыҫҡа көй һәм социаль билдәләре буйынса – кантон башлыҡтары тураһында, ҡасҡындар йәки зимагорҙарға арналған күҙлектән сығып баһалау. Ғалим фекеренсә, крайҙы өйрәнеүсе рус ғалимдары XIX быуатта уҡ халыҡ йырҙарын классификациялау мәсьәләһен күтәреп сыҡҡан. Мәҫәлән, С. Г.Рыбаков башҡорт халыҡ йырҙарын 5 төркөмгә бүлеп өйрәнгән. Уҙған быуаттың 60-70 йылдарында Ә.И. Харисов йырҙарҙы 9 тематик төркөмгә бүлеү кәрәклеген таныған. Профессор Салауат Галиндың был тәңгәлдә ошондай фекере бар: «Ләкин бындай төркөмләүҙә принцип берҙәмлегенең булмауы күҙгә ташлана, йәғни унда жанр һәм темтаик принциптарҙың бергә буталыуы күренә. Әйтәйек, ҡасҡындар, йә булмаһа түрәләр һәм кантон башлыҡтары тураһындағы йырҙартарихи йыр жанрының тематик төркөмдәре булараҡ ҡаралырға

тейеш»[2, 170]. Атап үтелгән хеҙмәттә Салауат Галин ошондай төркөмләү принцибын тәҡдим итә:

Тарих йырҙар буйынса:

а) Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһындағы йырҙар;

б) 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы йырҙар;

в) 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы йырҙар;.

г) кантон башлыҡтары һәм түрәләр тураһындағы йырҙар;

д) ҡасҡындар тураһындағы йырҙар;

е) әрме хеҙмәте һәм хәрби походтар тураһындағы йырҙар;

Лирик йырҙар буйынса:

а) тормош-көнкүреш йырҙары;

б) мөхәббәт йырҙары;

в) ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар;

г) шаян йырҙар;

д) йола йырҙары;

Ғалимдың «Башҡорт халҡының йыр поэзияһы. Йыр жанрының ҡайһы бер мәсьәләләре» кеүек фундаменталь хеҙмәтендә лә йырҙарҙы классификациялау мөһим күренеш булып тора. «Йырҙарҙың тәбиғәте. Уларҙы төркөмләү» ғилми очеркы - йырҙарҙың тәбиғәтен өйрәнеү өлкәһендә тәрән тикшеренеү өлгөһө ул. Ғалим Л.Н. Лебединскийҙың, С.Г. Рыбаковтың, Ә.И. Харисовтың хеҙмәттәренә күҙәтеү яһай. Байтаҡ йырҙарҙың тарихына, таралыу ареалына, варианттарына туҡтала. Ысынлап та, Салауат Галин йырҙарҙың тәбиғәтен өйрәнеүгә үтә етди ҡараған. Мәҫәлән, «Ҡарауанһарай» йыры, уныңса, ике тәбиғәтле: тәүгеһендә 1812 йылдағы Ватан һуғышы, тарихи ваҡийғалар һүрәтләнә, күренеүенсә, был тематик яҡтан тарихи йыр. Ә икенсе вариантта социаль проблемалар күтәргән аһ-зарлы халыҡ йыры. Ошондай уҡ күренеште «Ҡолой кантон» йырында ла күҙәтә автор.

«Халыҡ ижады әҫәрҙәренең төркөмләү принциптары фәндә әле булһа асыҡланып бөтмәгән тиерлек. Был иһә, фольклор әҫәрҙәренең синкретик характерҙа булыуы менән бәйләнгән. Шуға күрә лә, күп кенә фольклорсыларҙың фекеренсә, халыҡ ижады әҫәрҙәрен төркөмләгәндә әҙәби әҫәрҙәрҙә классификациялау алымдары менән генә эш итеп булмай. Был осраҡта теге йәки был әҫәрҙең, жанрҙың тормоштағы урыны, вазифаһы, башҡарылыу һәм йәшәү рәүеше, поэтикаһы, көйгә бәйләнешле кеүек сифаттарҙы берҙәй үк дәрәжәлә иҫәпкә алынырға тейеш» [3, 28]. Ғалимдың был бик мөһим фекере халыҡ йыры һәм уны классификациялау мәсьәләләре тәңгәлендә артабанғы тикшеренеүҙәрҙә иҫәпкә алынды. Мәҫәлән, Вәлит Илембәтов кандидатлыҡ диссертацияһында тап шуларҙы иҫәпкә алыуы билдәле. Тимәк, профессор Салауат Галиндың ғилми ҡараштары уҙған быуаттың 60-70-се йылдарында ғына фәнни яҡтан әһәмиәтле булмаған, ғалимдың халыҡ йырҙарына бәйле фекерҙәре бөгөн дә үҙенең актуаллеген юғалтмай. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн дә улар бик файҙалы.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Галин С. Ә. Йылдар һәм йырҙар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1967. – 157 б.

2. Галин С. Ә. Башҡорт фольклоры. Уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: БР Мәғарифты үҫтереү институты, 2002. – 236 б.

3.Галин С.Ә. Башҡорт халҡының йыр поэзияһы. Йыр жанрының ҡайһы бер мәсьәләләре. – Өфө: Китап, 1979. – 256 б.

УДК 93

НЕКОТОРЫЕ ШТРИХИ К ПОРТРЕТУ ГЕРОЯ СОВЕТСКОГО СОЮЗА ГЕНЕРАЛ-МАЙОРА КУСИМОВА ТАГИРА ТАИПОВИЧА

SOME STROKES TO THE PORTRAIT OF THE HERO OF THE SOVIET UNION, MAJOR-GENERAL KUSIMOV TAGIR TAIPOVICH

М.А. Бикмеев,
Институт развития образования Республики Башкортостан
M.A. Bikmeev,
Institute for the Development of Education of the Republic of Bashkortostan

Аннотация. В статье рассматриваются некоторые сведения из жизни и военной деятельности известного военачальника Кусимова Т.Т. Автор на основе имеющихся источников и литературы показывает заслуги генерала в укреплении обороноспособности государства, его мужество и героизм, проявленные в годы Великой Отечественной войны, а также многоступенчатую самоотверженную служебную деятельность в мирное время.

Ключевые слова: Советский Союз, Республика Башкортостан, герой, генерал, служба, военный комиссар, заслуги.

Abstract. The article discusses some information from the life and military activities of the famous military commander Kusimov T.T. The author, on the basis of available sources and literature, shows the merits of the general in strengthening the defense capability of the state, his courage and heroism shown during the Great Patriotic War, as well as multi-stage selfless service activities in peacetime.

Key words: Soviet Union, Republic of Bashkortostan, hero, general, service, military commissar, merits.

Фото из свободных источников Интернета

О Герое Советского Союза генерал-майоре Кусимове Тагире Таиповиче писали многие люди. О его личных и командирских качествах писал командир 16-й гвардейской кавалерийской дивизии генерал-лейтенант Белов Г.А. [1]. Отдельную книгу, посвященную его жизни и деятельности, посвятил Уметбаев Р.Г. [2]. Большую статью о генерале написал Сотников И.В. [3, с.184-194]. Ахмадеев Т.Х. на основе архивных источников приводит много интересных сведений о боевых действиях командира полка

Кусимова Т.Т. в годы войны. [4]. Несколько статей о знаменитом генерале были опубликованы Бикмеевым М.А. [5, с. 107]. Были и другие интересные материалы исследовательского характера, раскрывающие разные страницы большой и интересной жизни генерала Кусимова Т.Т. Следует отметить, что образовалась целая историография о жизни и военной службе Отечеству Кусимова Тагира Таиповича.



ПОСЛУЖНАЯ КАРТА

ЛИЧНЫЙ НОМЕР Г-002900

1. Фамилия, имя, отчество: Кусимов Тагир Таипович

2. Число, месяц и год рождения: 14 февраля 1909 г.

Национальность: Башкир

3. Место рождения (по административному делению ко дню заполнения): Дер. Кусимово Абзелиловский район, БашАССР

5. Партийность: Член КПСС с 1932 г. п/б № 0126240 1; Канд. КПСС с 19__ г. канд. карт. №; Член ВЛКСМ с 19__ г.; Беспартийный

7. Образование: Общее, политическое и специальное гражданское: Нац. сельской школы с. Возненское Славянского р-на. Тюрно-кол. шк. в 1926 г.

Военное, в том числе военно-политическое: 1. Татаро-Башк. объед. военная школа г. Казань в 1932 г. 2. Краснознаменные Ленинградские курсы усовер. командн. состава в 1937 г. 3. Военная Академия им. Фрунзе г. Москва норм. курс. 4. Военная Академия им. Ворошилова в 1959 г.

Знаки отличия имеет: Орденоносец, медалист

8. Присвоение воинских званий

	Чей приказ	№ приказа	Дата приказа
Ст. Лейтенант	НКО	02790	23.07.1937
Капитан	НКО	0725	23.03.1939
Майор	НКО	0946	8.04.1941
Подполковник	НКО	06120	25.09.1942
Полковник	НКО	015	22.02.1944
Генерал-майор	Пост. Совета Министров		31.05.54

9. Участие в войнах и других боевых действиях по защите Брянский фронт с 20.04.1942 г. по 20.11.1942 г. Юго-Западный с 11.09.1943 г. по 15.05.1944 г.

10. Семейное положение: Жена-Кусимова Самда Мустафеевна-1913 г. Сын-Самат-1942 г.

Из личного дела Кусимова Т.Т. [6]

Он родился 14 февраля 1909 года в крестьянской семье в деревне Кусимово Верхнеуральского уезда Оренбургской губернии. В Советскую Армию вступил добровольно в 1928 году, учился в Казанской военной татаро-башкирской объединенной школе. Окончил две военные академии: имени М.В. Фрунзе в 1947 и Генерального штаба в 1951 году. Последовательно занимал должности: командира взвода, эскадрона, полка, начальника штаба дивизии, заместителя, а затем командира дивизии, заместителя командира армейского корпуса. [6] Шесть последних лет службы, с 18 июля 1963 по 25 октября 1969 года, Кусимов Т.Т. являлся военным комиссаром Башкирской АССР. [7]

К началу Второй мировой войны он уже был капитаном, а в период Великой Отечественной войны стал майором. В 1944 году ему было присвоено воинское звание полковник. После войны, в 1954 году, стал генерал-майором.

Участник Великой Отечественной войны с февраля 1942 года по май 1944 года. Воевал в составе Брянского, Воронежского, Юго-Западного, Степного, 1-го и 2-го Белорусских фронтов. Дважды был ранен. За мужество и отвагу, проявленные в боях против немецко-фашистских захватчиков, Указом Президиума Верховного Совета СССР в январе 1944 года ему присвоено звание Героя Советского Союза. За заслуги перед Родиной Кусимов Т.Т. был награжден двумя орденами Ленина, медалью «Золотая Звезда», орденами Красного Знамени, Отечественной войны I степени, двумя орденами Красной Звезды и многими медалями.

После завершения учебы в Военной академии имени М.В. Фрунзе в 1947 году всем выпускникам, в том числе и Кусимову Т.Т., писали аттестацию. Руководитель учебной группы полковник Покровский его аттестовал так: «В

академии учебную программу усвоил на «отлично». Дипломную работу защитил на «отлично». Решителен. Сообразителен. Быстро схватывает и оценивает обстановку, правильно принимает решение. Может быть использован в должностях командира стрелкового полка, начальника штаба дивизии и на работе в Генеральном штабе». [8, с. 57-58].

Генерал Кусимов Т.Т. в 1966 году был избран делегатом 23-го съезда КПСС. Он являлся членом бюро Башкирского обкома КПСС.

Тагир Таипович скончался после продолжительной и тяжелой болезни в мае 1986 года. Похоронен в городе Уфе. [9, с. 184]

На родине, в деревне Кусимово Абзелиловского района, в честь генерала открыт мемориальный музей. Его жизнь и военная служба объективно отражаются в документальном фильме «Генерал Кусимов». В Уфе на доме, где он жил, установлена мемориальная доска. Ветеран труда Габриелов С.Я., который часто общался с военным комиссаром республики, генерал-майором Кусимовым Т.Т., отмечал: «Генерал Кусимов Т.Т. по своей сути был интернационалистом. Это его качество проявлялось во всем и особенно по отношению к ветеранам Великой Отечественной войны. Военный комиссар республики очень часто общался с ними. Он активно поддерживал Совет ветеранов 16-й гвардейской кавалерийской дивизии, неоднократно собирал своих однополчан. После сборов ветераны дивизии выступали среди рабочих на предприятиях города Уфы и в школах столицы республики. Тагир Таипович много раз собирал проживающих в республике Героев Советского Союза и полных кавалеров Орденов Солдатской Славы. Он дружил и сотрудничал с дважды Героем Советского Союза Гареевым М.Г. Генерал Кусимов Т.Т. был энергичным и целеустремленным человеком». Он постоянно стремился укрепить военный комиссариат способными и подготовленными в военном отношении людьми. Активно поддерживал старательных и целеустремленных офицеров, своевременно их повышал по службе. Огромный личный авторитет военного комиссара помогал всему личному составу в решении служебных задач. Генерал-майор Кусимов Тагир Таипович умело организовывал взаимодействие по различным вопросам с руководством республики. При нем шел процесс активного накопления мобилизационных ресурсов, успешно решались проблемы очередных призывов. Кроме того, военный комиссариат, сам генерал активно занимались военно-патриотической работой среди военнослужащих и всего населения республики. В эти годы военный комиссариат активно добивался улучшения жизни и быта участников Великой Отечественной войны. [8, с. 58-59]

В чем же проявились воинские способности генерала Кусимова Т.Т.?

*получил прекрасное военное образование. (Окончил татаро-башкирскую военную школу, военную академию имени М. В. Фрунзе и Военную академию Генерального штаба);

*получил опыт формирования и командования полком в ходе многочисленных боевых действий, как отдельно, так и в составе дивизии и корпуса;

*за проявленный героизм и мужество при форсировании Днепра стал Героем Советского Союза;

*обладал такими качествами командира как решительность, смелость, требовательность к себе и подчиненным. Он последовательно занимал должности: командира взвода, эскадрона, полка, начальника штаба дивизии, командира дивизии, заместителя командира армейского корпуса;

*постоянно проявлял заботу о личном составе;

*являясь военным комиссаром, умел тесно взаимодействовать с руководством республики в интересах укрепления обороноспособности государства.

Генерал-майор Кусимов Т.Т. прожил яркую и интересную жизнь. Он приложил много усилий для укрепления обороноспособности государства. Его жизненный путь, активная служебная деятельность, мужество и героизм являются примером для многих людей, особенно для подрастающего поколения.

Список использованных источников и литературы

1. Белов Г.А. Путь мужества и славы: [Воспоминания о боевом пути 16-й гвардейской Черниговской кавалер. Дивизии] / Г.А. Белов. – 3-е изд., доп. – Уфа: Башк.кн. изд-во, 1985. – 207 с.: ил.

2. Уметбаев Р.Г. Генерал Кусимов: документальная повесть / Рамазан Уметбаев; [пер. с башкир. Р. Максютова]. – Уфа: Китап, 2010. 221 с.: ил.

3. Сотников И.В. От волжских твердынь до седого Днепра. // Генералы Башкортостана. Организатор и составитель Г.Г. Булатов. – Уфа, Башкирское издательство «Китап», 1995. – 352 с.

4. Ахмадеев Т.Х. Башкирская гвардейская кавалерийская. -Уфа, Китап 1999. – 391с.

5. Бикмеев М.А. История Военного комиссариата Республики Башкортостан. Уфа, 1998 – 128 с.: ил.(с.107); Бикмеев М.А. Военные комиссары Башкортостана: монография. – 2-е изд., испр. – Уфа: Инеш, 2013. – 120 с. (с 57-62); Бикмеев М.А. Легендарная 16-я (112-я) гвардейская Башкирская кавалерийская дивизия. Уфа: Китап, 2020. -136 с.

6. Пенсионное дело генерал-майора Т.Т. Кусимова.

7. Штатно-должностная книга Военного комиссариата Республики Башкортостан.

8. Бикмеев М.А. Военные комиссары Башкортостана: монография. – 2-е изд., испр. – Уфа: Инеш, 2013. – 120 с.

9. Сотников И. От волжских твердынь до седого Днепра. // Генералы Башкортостана. Организатор и составитель Г.Г. Булатов. – Уфа, Башкирское издательство «Китап», 1995. – 352 с.

УДК 82

Ә.ХӘКИМОВТЫҢ РОМАНДАРЫНДА ФОЛЬКЛОР ЭЛЕМЕНТТАРЫНЫҢ СТИЛИСТИК ҠУЛЛАНЫШЫ

A.FOLKLORE IN KHAKIMOV'S NOVELS STYLISTIC USE OF ELEMENTS

З.М. Габитова,
канд.филол.наук, доцент ГАУ ДПО ИРО РБ, г. Уфа,
Z. Gabitova.M.,
Institute of Education Development of the Republic of Bashkortostan, Ufa

Аннотация. В статье рассматриваются стилистические особенности фольклора в исторических романах.

Ключевые слова: роман, стилитика, особенности, история, народное творчество, народ, традиция, фольклор.

Abstract. the article discusses the stylistic features of folklore in historical.

Keywords: novel, stylistics, features, history, folk art, people, tradition, folklore.

Халыҡтың мәҙәни тарихы, рухи байлығы тураһында һүҙ барғанда меңәр йылдар буйы телдән телгә күсеп, быуындан быуынға тапшырылып килгән халыҡ ижадын баһаламай мөмкин түгел. М. Горький: «Хеҙмәтсән халыҡтың ысын тарихын ауыҙ-тел ижадынан башҡа белеп булмай. Халыҡ — бөтә бөйөк драмаларҙы, Ер шарындағы иң гүзәл трагедияларҙы — бөтә донъя мәҙәниәтенең тарихын барлыҡҡа килтереүсе шағир һәм философ ул», — тигән [2,18].

«Халыҡ ижады бик боронғо замандарҙа уҡ барлыҡҡа килгән. Ул телдән һөйләү, хәтерҙә һаҡлау, отоп алыу рәүешендә йәшәгән. Халыҡ ижады әҫәрҙәрен боронғо һүҙ оҫталары — сәсәндәр, йырсылар, ҡобайырсылар уйлап сығарған. Халыҡ ижады күп төрлө. Уларҙы халыҡ отоп алған, йыр итеп йырлаған, әкиәт итеп һөйләгән. Телдән телгә, быуындан быуынға күсә-күсә, ул йыр, әкиәт, ҡобайыр, легенда, таҡмаҡ, йомаҡ, мәҡәл, әйтемдәрҙең күбеһе тағы ла яҡшыра, камиллаша барған. Уларҙы уйлап сығарған һүҙ оҫталарының исемдәре онотолоп, әҫәрҙәре генә халыҡ хәтерендә ҡалған», — тип яҙған Ә.Сөләймәнов.

Тимәк, телдән башҡарыла торған әҫәрҙәрҙе камиллаштырыуҙа халыҡ ҡатнашҡан. Уларҙа халыҡ үткәндәрен дә, бөгөнгөһөн дә, яҡты киләсәк тураһындағы хыял һәм өмөттәрен дә сағылдырған. Бындай әҫәрҙәрҙә халыҡтың донъяға ҡарашы ла сағыла: тормоштоң матурлығы данлана, кәмселектәр фашлана, ғәҙеллек хуплана.

Тарихи прозаларҙа ла халҡыбыҙҙың быуаттарға һуҙылған уҙған, ата-бабаларыбыҙҙың үткән оло юлын һәм килер быуындар хәтерендә ҡалдырырлыҡ күренештәр сағылдырыла.

Үткән быуаттың 80-се йылдар башында Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә”, Кирәй Мәргәндең “Бөркөт ҡанаты”, Ә.Хәкимовтың “Һауыр ҡумта”, “Думбыра сыңы” романдары донъя күрҙе.

Ә.Хәкимовтың “Һауыр ҡумта”, “Думбыра сыңы” романдары Алтын Урҙа иҙеүенән яфа сиккән башҡорт ырыуҙарының XIV быуаттағы үҙ-ара

мөнәсәбәттәренең бик ҡатмарлы осорона алып китә. Был романда башҡорт ырыуҙары башлыҡтары, сардар һәм нәүкәрҙәр, хан ялсылары, дин әһелдәре, көтөүселәр, халыҡ рухын данлаусы йырау һәм сәсәндәр образдары һынландырыла

Ә.Хәкимов романдарында башҡорт ырыуҙары – үҫәргән, юрматы, ҡыпсаҡ, түңгәүер мөнәсәбәттәре ентекле һәм ышандырырлыҡ ваҡиғалар аша яҙыла [1, 46].

Тарихи роман авторҙары үҙҙәренең әҫәрҙәрендә халыҡ йолаларын, халыҡ көн-күрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен бик ентекле һүрәтләгәндәр.

Үрҙә билдәләнгән тарихи романдарҙа авторҙар туй үткәреү йолаһын күрһәтә. Ҡыҙ оҙатыу, сеңләү, бүләктәр биреү, килен төшөрөү күренештәре лә бик оҫта бирелгән. Был йолалар аша авторҙар халҡыбыҙҙың матур йолаларын, халҡыбыҙҙың күңел асҡысын, донъяһын бөтә асылында һүрәтләй алғандар.

Романдарҙа шулай уҡ башҡа йолалар ҙа бик уңышлы файҙаланыла.

Романда шулай уҡ дин әһелдәренең музыҡа ҡоралдарында уйнауҙы тыйған йола ла иғтибарҙы үҙенә тарта.

Һуңғы замандарҙа, дин ныҡлап тамыр йәйә башлағаса, урағыттар өсөн бөтөнләй харамға сығарғайнылар. Ирҙәр генә ҡурайын тарта, тумраһын ҡаға. Хатта уларҙың ҡаҡканын да күп кенә муллалар хуп күрмәй. Дин әһелдәре ни хикмәт менәндер, ни бары ҡурайға ғына ҡағылмай әле. Йәнәһе, уны кеше яһамаған, хоҙай үҙе үҫтергән, шулай булғас, унда шайтан төйәге юҡ, тиҙәр.

Ә.Хәкимовтың “Һауыр ҡумта” романында ырыу башлығын һайлай йолаһы бик ентекле тасуирлана.

Йола буйынса ҡумта кем ҡулына күсә, ырыуға шул баш, шул хужа. Мәгәр был юлы ырыу икегә айырылды. Уйланды-уйланды ла аҡһаҡалдар бәхәсте майҙанға күсеререгә ризалашты.

Романда был йоланы үткәреү тәртибе лә бирелә.

Һапҡан сөйөү менән ҡылыс уйынында ла, мәргәнлектә лә Ҡара Ҡаплан ҡушаматлы Йәнтүрә исемле йәш батыр, данлыҡлы Аҡкужа улы, өҫтөн сыҡты, ләкин көрәште бил көрәше хәл итергә тейеш ине. Бынында Юлыштың ҡустыһы Сырым еңде. Үҙенә ҡаршы бола күтәргән Ҡара Ҡапландың тамағын быуып, бүтәнсә ҡарыулашмаҫҡа ант иттергәс, Сырым ырыу башы итеп танылды. Ҡумта уның ҡулына күсте.

Романда Юлыш батырҙың үлеме һәм йола буйынса батыр менән бергә күмеләсәк күк айғыр һәм был йоланы үткәреү тураһында бик көслө яҙыла.

Ә.Хәкимов романдарында легенда, риүәйәт, әкиәттәргә бик йыш мөрәжәғәт итәләр.

Хатта Александр Македонскийҙы ла иҫкә алалар. Йәнәһе, уларҙың ҡурай тарта башлауы ла шуға бәйле. Имеш, бөйөк полководец үҙенең башындағы ике ороһон белгертмәҫ өсөн, сәсен алған һәр кешене үлтерә барып, береһен, минең хаҡта һөйләйһе булма, уны ант иттереп, алыҫ далаға һөрөп ебәргән, ә теге башҡорт антына тоғро булып ҡалһа ла, үҙ күкрәгендә таш булып өйкәп ятҡан серҙе тышҡа сығарыр өсөн, үҫеп ултырған ҡурайҙы алған да, Искәндәрҙең

мөгөзө бар, Искәндәрҙең мөгөзө бар, тип өргән дә өргән. Ҡурай тартыу шунан башланған, тиҙәр. Легенда.

Ә.Хәкимов үҙ романдарына сәсән образы индереп, Һабрау сәсәндең халыҡҡа ни ҡәҙәр тәьҫир итеүҙәрен күрһәтеүгә өлгәшә алған. Ә.Хәкимов Һабрау сәсән образын һынландырыуҙа ышандыра алырлыҡ һәм ысын барлыҡҡа тап килгән дәллилдәр менән эш иткән.

Сәсәндәр - халыҡ вәкиле кешеләре булараҡ, уларҙың шатлыҡ-ҡыуаныстарын, хәсрәттәрен, аһ-зарын йыйған персонаждар. Авторҙар сәсән образдарын үҙ романдарына индереп, сәсәндәрҙе төрлө ситуацияларҙа ла уларҙы һынмаҫ рухлы, ғорур тәбиғәтле булыуҙарын аса. Сәсәндәрҙең тарихты бәйән итеүҙәре, халыҡтың ауыҙ-тел ижадының йәшәүен, тәрбиә сығанаҡтарын, башҡорттарҙың рухи донъяһын тулыуынса асыуҙа уңышлы булыуына өлгәшә алғандар.

Роман авторы айырым образдарҙы һынландырғанда уларҙың телмәрендә мәҡәл, әйтемдәр ҡуллана. Мәҡәл, әйтемдәрҙе ҡулланыуҙа авторҙар һүрәтләгән образдарҙың тормош тәжрибәһенән, аң кимәленән сығып билдәләй.

...Моғайын, хәйләкәр Туҡтамыш уны, ашҡа ҡаршы таш атмаҫ, ғүмере бәрәбәренә, үҙе теләп, алтын ситлеккә инер, тип иҫәп тотҡандыр. Ил ауыҙына иләк тотоу ауырлығын онотҡайны ул. Беткә үс тиеп, туңды утҡа яҡмайҙар, сәсән. (“Думбыра сыңы”)

Көмөш Тамсыны яратмаған Морат ырыуы егетенә кейәүгә оҙатыу ваҡытында Көмөш Тамсының ағаһы Йәнтүрә һылыуына кәңәштәр бирә.

…Ни хәл итәйек, Көмөш Тамсы, яҙмыштан уҙмыш юҡ. Өйрәнерһең. Бал да май эсендә байбисә булып йәшәй башлағас, уныһы-быныһы онотолор әле. Йәш саҡ – иҫәр саҡ. (“Һауыр ҡумта”).

Ә.Хәкимов романдарында әйтем, мәҡәлдәрҙең төрлө социаль ҡатламдағы кешеләрҙең телмәрендә бик оҫта ҡуллана. “Әҫәрҙәрҙә ҡулланылған мәҡәл һәм әйтемдәр билдәле булған башҡорт мәҡәлдәренә һәм әйтемдәренә иллюстрация ролен башҡара”, - тип билдәлй И.К.Янбаев. [5, 61].

Ҡарттарҙың күпселеге быны хуп күрҙе. Ятып ҡалғансы атып ҡалайыҡ, тиеште. Эйе, эйе, ышанығыҙ аллаға, күрмәгәнегеҙҙе күрһәтер әле һеҙгә. Эй, ахмаҡтар! Кем ҡулында көс, ана шул –алла. Ҡарт ҡыуаныстан бер иланы, бер көлдө. Әҙерәк тыныслангас:

– Беләм, тән яраһы төҙәлә, күңел яраһы оҙаҡ һыҙлай. (“Думбыра сыңы”)

Романдарҙа юғары ҡатлам кешеләренең телмәрендә мәҡәл, әйтемдәр йыш ҡулланыла. Персонаждар телмәрендә бындай берәмектәрҙе ҡулланыу персонаждарҙың характерын асыуға ярҙам итә.

Һүҙҙән арҡан ишеп булмай, баһадир, – тине Юлыш, ҡашын төйөп. Боғара уға тағы бер һоҡланып ҡараны ла:

– Күҫәкте сыбыҡ менән һуғып һындырып булмай шул, - тип көрһөндө. (“Думбыра сыңы”)

Ә.Хәкимов халыҡ теленең байлығын сағылдырыусы мәҡәл һәм әйтемдәрҙе бик күп файҙаланған. Романда ҡатын-ҡыҙ телмәрендә лә мәҡәл һәм әйтемдәр киң ҡулланылған.

– Үлгән артынан үлеп буламы?.. Тор инде, балам. Тереләргә йәшәү әмәлен хәстәрләү фарыз, - тине әсә. Үҙең беләһең, ете йәшәр юлдан ҡайтһа, етмеш йәшәр күрә килер. Ҡара уны, телеңде тыйып йөрө! – тип екеренде бикә. (“Думбыра сыңы”).

Тапҡыр һүҙҙәрҙе ҡулланып, яҙыусы әйтеләсәк фекерҙе ҡыҫҡа һәм йыйнаҡ итеп биреүгә өлгәшкән.

Нуғай урҙаһындағы ағалы–ҡустылы Исмәғил менән Йософ мырҙаның аралары туғандарса түгеллекте әйтеп бирә.

Шәйех Мамай үлгәс, Нуғай урҙаһында беренсе урынға менә алмай ҡалған Исмәғил, ағаһына ҡарата ҡуйынында ҙур бысаҡ йөрөтә ине. (“Думбыра сыңы”).

Йыйып әйткәндә, Ә.Хәкимов әҫәрҙәренең теле лексик-фразеологик яҡтан да, стлистик йәһәттән дә бай һәм һығылмалы. Яҙыусы тарафынан ҡулланылған фразеологик берәмектәр, мәҡәл һәм әйтемдәр әҙәби тел нормаларына тап килә. Ә романдарҙа авторҙар тарафынан бәйет, йыр, сеңләү, легенда, ҡобайыр кеүек халыҡ ижады жанрҙарын ҡулланыуҙары, әҫәргә стилистик нәфислек бирә һәм фекерҙе тулы, йыйнаҡ, уҡымышлы итеп еткерә алыуҙа мөһим урын алып тора. Тарихи роман авторының халыҡ ижадын оҫта ҡулланыуы, төрлө йолаларын бик ентекле һүрәтләүе, авторҙарға геройҙарға ҡылыҡһырлама биреүҙә, уларҙың тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләүҙә, уй-кисерештәрен асыуҙа бик уңышлы булыуын күрһәтә һәм әҫәр теленең халыҡсанлылығын, ябайлылығын тәьмин итә. Улар аша халыҡтың тәрән фекерле, зиһенле, ата-бабаларыбыҙҙың халыҡ ижады жанры менән оҫта эш итә белеүе, бик уйлап ҡулланыуына тағы ла бер тапҡыр инанабыҙ.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Ғәбитова З.М. Ә.Хәкимов романдарҙың стилистик һәм лексик үҙенсәлектәре. – Өфө: БМҮИ, 2004. – 51 б
2. Кирәев Ә.Н. Башҡорт халыҡ ижады. Уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Башҡорт дәүләт университеты баҫмаһы, 1982. – 244 б.
3. Рамазанов Ғ.Й.Тарихи прозала быуындар бәйләнеше. //Ағиҙел, 1993, №4. – 103-116-сы бит.
4. Хәкимов Ә.Х. Һауыр ҡумта: Роман. Өфө: Китап, 2000. – 295 б.
5. Янбаев И.К. Башҡорт теленең фәһемле хикәйәләрендә “Синбад-наме” мотивтары мәғрифәтсе Хәбибназар Үтәки // «Мәғариф: традиция һәм инновациялар», №1 (44), 2024. – 61-се бит.

УДК 811.512.141

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ПРОБЛЕМАЛЫ СИТУАЦИЯ ТЫУҘЫРЫУ ҺӘМ ХӘЛ ИТЕҮ АЛЫМДАРЫ

METHODS OF FORMING AND SOLVING PROBLEM SITUATIONS IN BASHKIR LANGUAGE LESSONS

И.А. Гадиева,
учитель башкирского языка и литературы, МБОУ СОШ с. Московo,
МР Дюртюлинский район, РБ.
I.A. Gadieva,
teacher вashkir language and literature, MBOU SOSH s. Moskovo,
MR Dyurtyulinsky district, RB

Аннотация. В статье изучена сущность термина «проблемная ситуация», выявлено, что она является одним из аспектов концепции проблемного обучения. Она включает в себя несколько целей. В зависимости от того, какие цели поставлены учителем при преподнесении того или иного учебного материала, могут быть использованы методические приемы и способы создания проблемных ситуаций. При использовании проблемных ситуаций создаются все условия для проявления познавательной активности. Учащиеся не получают готовые знания, а в результате постановки проблемной ситуации испытывают затруднения и начинают поиск решения, открывая новые знания самостоятельно.

Ключевые слова: проблемная ситуация, проблема, методы и приемы.

Abstract. The article examines the essence of the term "problem situation", it is revealed that it is one of the aspects of the concept of problem-based learning. It includes several goals. Depending on what goals are set by the teacher when presenting a particular educational material, methodological techniques and ways of creating problematic situations can be used. When using problematic situations, all conditions are created for the manifestation of cognitive activity. Students do not receive ready-made knowledge, but as a result of setting a problem situation, they experience difficulties and begin to search for a solution, discovering new knowledge on their own.

Keywords: problem situation, problem, methods and techniques.

Сығарылыш уҡыусыларын сетерекле ситуацияларҙы уңышлы йырып сығырҙай белем менән тәьмин итеү – хәҙерге мәктәптең төп бурысы.

Шул бурысты тормошҡа ашырыу өсөн уҡытыу-тәрбиә процесында ғәҙәти булмаған алымдарҙы ҡулланырға кәрәк.

Шундай алымдарҙың береһе, мәҫәлән, – дәрестә проблемалы ситуация ҡулланыу. Проблемалы ситуация тыуҙырыуҙа ҡулланылған эш алымдары:

Идеялар “кәрзине” алымы дәрестең беренсе этабында ҡулланыла.

“**Моделләштереү” алымын** дәрестең төрле этабында ҡулланып була.

Ми штурмы” алымы. “Штурм” – һорауҙарға коллектив яуап эҙләүҙең иң киң таралған методы. Идеялар күберәк булған һайын, яҡшыраҡ! Идеяларҙы

тәнҡитләү тыйыла. Насар идея булмай, барыһы ла хуплана, сөнки һәр идеяны үҫтереп була. Позитив тәнҡиткә өйрәтә.

“Конфликт-бәхәс” алымы. Ҡапма-ҡаршылыҡлы ситуация.

Һайлау ситуацияһы. Бер нисә төрлө әҙер яуап бирелә. Уларҙың араһында дөрөҫ булмаған яуаптар ҙа бар.

Ярашмаусанлыҡ ситуацияһы. Ғәҙәти тәжрибә сиктәренә “һыйып бөтмәү”. Был ысул уҡыусының ижади фекерләү даирәһен киңәйтә.

“Билдәһеҙлек” ситуацияһы. Мәғлүмәттең тулы һәм аныҡ булмауы сәбәпле, яуаптың теүәл һәм конкрет түгеллеге, йәғни, мәсьәләне бер төрлө генә хәл итеү мөмкинлегенең булмауы.

“Көтөлмәгәнлек” ситуацияһы. Парадоксаль булыуы менән ғәжәпләнеү тойғоһо уята.

“Туҡталыштар менән уҡыу” алымы.

“Һорауҙар менән эш” алымы.

“Төркөмдәр” алымы.

“Ижади эш яҙыу” алымы. Был алымды өйрәнелгән теманы нығытыу этабында ҡулланыу уңайлы. Уҡыусыларға йәки әҫәрҙе дауам итергә, йәки үҙгәртеп яҙырға, йәиһә үҙҙәренә әкиәт, хикәйә, шиғыр яҙырға тәҡдим итергә була. Әлбиттә, бындай эш төрҙәрен биргәндә уҡыусыларҙың тел белеү кимәлен күҙ уңында тоторға кәрәк.

Был алымдар түбәндәге һөҙөмтәләрҙе бирә:

Белемде сифатлы үҙләштереүҙе тәьмин итә.

Интеллект ҡеүәһен һәм ижади һәләттәрҙе үҫтерергә ярҙам итә.

Әүҙем шәхес тәрбиәләй.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Аҙнағолов Р.Ғ. Хәҙерге дәрес. Уның этаптары, төрҙәре: уҡыу ҡулланмаһы. Үҙгәрешле, икенсе баҫма. – Өфө: БашДУ, 2009. 155 бит.

2. Аҙнағолов Р.Ғ. Үҫтереүле уҡытыу методикаһына инеш. – Өфө: БашДУ, 2009. 193 бит.

УДК 81.342.1

«БУКВАБУК» КАК ЭФФЕКТИВНЫЙ ИНСТРУМЕНТ ФОРМИРОВАНИЯ ФОНЕМАТИЧЕСКОГО ВОСПРИЯТИЯ РЕЧИ И ЗВУКОВОГО АНАЛИЗА СЛОВ У ДЕТЕЙ ДОШКОЛЬНОГО ВОЗРАСТА С ОГРАНИЧЕННЫМИ ВОЗМОЖНОСТЯМИ ЗДОРОВЬЯ

"BUKVABUK" AS AN EFFECTIVE TOOL FOR THE FORMATION OF PHONEMIC PERCEPTION OF SPEECH AND SOUND ANALYSIS OF WORDS IN PRESCHOOL *CHILDREN WITH DISABILITIES*

А.Я. Газизова,
учитель –логопед детского сада «Курай» г. Сибай,РБ
A.Ya. Gazizova,
the teacher – speech therapist of the kindergarten "Kurai" Sibai, RB

Аннотация. Статья посвящена проблеме развития фонематического слуха у детей дошкольного возраста. В исследовании подтверждается мысль о том, что педагоги могут развить слух своих подопечных с помощью дидактического пособия «Буквабук».

Ключевые слова: фонетика, буква, звук, речь.

Abstract. The article is devoted to the problem of phonemic hearing development in preschool children. The study confirms the idea that teachers can develop the hearing of their wards with the help of the didactic manual "Bukvabuk".

Keywords: phonetics, letter, sound, speech.

«Знание букв без чувства звуков – это то же самое,
что знание цветов при дальтонизме»
(Е.А. Бугрименко, Г.А.Цукерман)

В соответствии с Федеральным государственным образовательным стандартом дошкольного образования необходимо создать равные возможности для получения качественного дошкольного образования, не зависимо от жизненных ситуаций и здоровья ребенка, что указывает на создание необходимых условий для реализации детей с ОВЗ, которые включают использование специальных образовательных программ, пособий и дидактических материалов.

Наибольшую категорию детей с ОВЗ составляют дети с нарушениями речи. Среди них значительную часть составляют дети 5 – 6 – летнего возраста, не овладевшие звуковой стороной языка. Проблемы речевого развития ребенка с ограниченными возможностями здоровья заключается в несформированной способности различать на слух звуки речи – фонемы. Имея слух и интеллект, они, как правило, не готовы к усвоению программы образования из-за недостаточного развития фонематического слуха. Эти дети составляют основную группу риска по неуспеваемости, особенно при овладении письмом и чтением.

Проблема развития фонематического слуха и восприятия у детей актуальна тем, что он является неотъемлемым составным элементом звукового анализа и синтеза. В связи с этим встает важная задача развитие фонематического слуха и восприятия у детей дошкольного возраста. Развитый фонематический слух является важным составляющим элементом в развитии речи ребенка.

Поиски путей устранения нарушений фонематического восприятия, детей дошкольного возраста, привели меня к методике модельного обучения, по дидактическому пособию «Буквабук».

Методики и технологии формирования фонематического восприятия и звукового анализа слов нашло отражение в работах таких авторов как, Л.Е. Журова, Е.И. Тихеева, Ф.А. Сохин, Н.А. Короткова.

По мнению известного психолога Д.Б.Эльконина, «чтение - есть воссоздание звуковой формы слова по его графической (буквенной модели)». Д.Ушинский отмечал, что ««сознательно читать и писать может только тот, кто понял звуко-слоговое строение слова».

Цель: формирование фонематического восприятия и звукового анализа слов у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья посредством дидактического пособия «Буквабук».

Работа по дидактическому пособию «Буквабук» построена в соответствии с возрастными и психологическими особенностями развития детей дошкольного возраста, с опорой на следующие **принципы**:

1. Научности (учет современных достижений науки и практики);
2. Целостности (гармоничное воздействие на всех участников);
3. Целенаправленности (цель и результат являются регуляторами направлений работы по пособию, творческий рост педагогов)
4. Динамичности (изменения и развитие педагогической деятельности);
5. Преемственность взаимодействия с ребенком в условиях детского сада и семьи.

Ожидаемы результаты:

- создание системы работы по формирования фонематического восприятия речи и звукового анализа слов у детей дошкольного возраста с ограниченными возможностями здоровья;
- положительная динамика по результатам диагностики формирования фонематического восприятия речи и звукового анализа слов.

Для работы по пособию я использовала **методы** наглядного моделирования, моделирования, метод проблемного обучения и практический метод.

В чем же заключается особенности работы по дидактическому пособию «Буквабук». Комплект «Буквабук» представляет собой органайзер с кармашками, где расположены по 198 карточек с предметными картинами, касса букв с комплектом всех букв алфавита, карточки синего, зеленого и красного цвета для обозначения гласных и согласных звуков (т.е. для звукового анализа), и наборное полотно для работы и демонстрации педагогу выполненных работ. Это очень удобно для индивидуальных работ, где каждый ребенок перед собой заполняет карточки необходимой картиной на тот или иной звук, и демонстративное наборное полотно. Дидактическое пособие многоразовое, отвечает санитарно гигиеническим и эстетическим требованиям. Обучать детей определять место звуков в слове, звуковому анализу слов с дидактическим пособием «Буквабук» очень удобно.

На подготовительном этапе проведен *мониторинг по методике Натальи Ильиничной Дьяковой*. Исходя из проблемы, были поставлены цели и задачи работы по фонематическому восприятию и звуковому анализу слов. Определены направления деятельности. Изучены научно методические материалы по фонематическому восприятию речи детей с ограниченными возможностями здоровья. Проведено анкетирование родителей (законных представителей). Разработано и укомплектовано пособие «Буквабук»

На основном этапе был составлен план работе по пособию «Буквабук» включающая в себя следующие виды работ:

-пополнение предметно пространственной развивающей среды демонстрационным материалом по пособию «Бувабук» (буквы, предметные картины)

- проведение индивидуальных, подгрупповых занятий по фонематическому восприятию

-привлечение родителей (законных представителей) к подбору предметных картин на разные звуки для дальнейшего определения места звука в слове.

-повышение компетентности педагогов по речевому развитию.

На заключительном этапе был проведен мониторинг фонематического развития и звукового анализа слов у детей с ОВЗ. По итогам диагностики были выявлены значительные повышение уровня речевого развития детей с ОВЗ.

Дидактическое пособие «Буквабук» развивает фонематический слух, имеет большое значение для овладения навыками чтения, положительно влияет на становление всей речевой системы дошкольника, а также закладывает основы успешного обучения в школе

С помощью «Буквабука» дети научились опознавать звук в речевом потоке, находить заданный звук в словах, «слышать» заданный звук в разных позициях (начале, середине, конце слова), устанавливать количество звуков в слове и их последовательность, различать гласные и согласные, твердые и мягкие согласные звуки, правильно выстраивать схему слова.

Каждый педагог может легко сделать как индивидуальный, так и демонстративный «Буквабук». Предложенное дидактическое пособие педагоги могут использовать для различных целей с детьми 4-7 лет.

Таким образом, ценность этого пособия в том, что дети не только определяют на слух наличие звука, а сами самостоятельно находят предметные картины и определяют место звука в слове, выполняют звуковой анализ в индивидуальном демонстративном полотне. Надеюсь что идея с использованием «Буквабука» будет полезна учителям – логопедам, воспитателям и студентам.

Литература

1.Тихеева Е.И. Развитие речи детей .– Москва : Издательство Юрайт, 2023. – 161 с.

2. Ткаченко Т. Развитие фонематического слуха у дошкольников. – Издательство ФЕНИКС. 2023. 54с

УДК 821.512.141

БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ТӘНҠИТЛЕ ФЕКЕРЛӘҮ ТЕХНОЛОГИЯҺЫНЫҢ ИНТЕЛЛЕКТ-КАРТА АЛЫМЫН ҠУЛЛАНЫУ

THE APPLICATION OF THE METHOD OF INTELLIGENCE MAPS OF CRITICAL THINKING TECHNOLOGY IN THE LESSONS OF BASHKIR LITERATURE

А.Т. Гайфуллина,
учитель башкирского языка и литературы МОБУ СОШ д. Улукулево Кармаскалинский район РБ
A.T. Gayfullina,
Teacher of Bashkir language and literature MOBU SOSH D. Ulukulevo Karmaskalinsky district of the RB

Аннотация. В статье рассматривается эффективный способ проектирования и реализации современного урока на основе метода интеллект-карт. Показана возможность формирования ключевых компетенций обучающихся на его основе. Продемонстрирована возможность применения метода интеллекткарт при обобщении и систематизации учебного материала школьниками, приведён пример организации учебной деятельности с применением данного метода. Рассмотрена возможность использования метода интеллект-карт в качестве инструмента диагностики учебных достижений обучающихся.

Ключевые слова: башкирская литература, критическое мышление, интеклект-карты.

Abstract: The article considers an effective way of designing and implementing a modern lesson based on the method of intelligence maps. The possibility of forming key competencies of students based on it is shown. The possibility of using the intellectcard method in the generalization and systematization of educational material by schoolchildren is demonstrated, an example of the organization of educational activities using this method is given. The possibility of using the method of intelligence maps as a tool for diagnosing students' educational achievements is considered.

Keywords: Bashkir literature, critical thinking, integrated maps.

Эшемдең төп маҡсаты һәм бурыстары:

Дәрестә ҡулланылған интеллект карталарҙың белем биреүҙәге әһәмиәтен билдәләү аша предметҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм коллегалар менән эш тәжрибәһен уртаҡлашыу.

Бурыстар:

“Интеллект-карта” алымының йөкмәткеһе менән таныштырыу;

логик, ижади фекерҙе үҫтереүҙәге мөмкинлекте күрһәтеү;

“Интеллект-карта” алымының һөҙөмтәле булыуын иҫбат итеү.

Заман башҡа –заң башҡа тигәндәй, заманалар үҙгәреү менән талаптар үҙгәрә.

Берәүгә лә сер түгел, хәҙерге ваҡытта балаларҙың телмәре ярлы. Был проблеманы сисеү маҡсатынан беҙ дәрестәрҙә төрлө алымдар ҡулланабыҙ.

Ә хәҙер иғтибарҙы экранға йүнәлтәйек әле. Ике һүрәтте сағыштырабыҙ. Нимәләр күрәбеҙ?

Улар оҡшашмы? Уларҙың оҡшаш яҡтарын әйтәйек.

Һүрәттәр бер-береһенә оҡшаған. Икеһендә лә үҙәк һәм унан сыҡҡан тармаҡтар бар.

1-се һүрәттә баш мейеһенең нейрондары,

2-се һүрәттә интеллект-карта өлгөһө һүрәтләнгән. Һүрәттәр ысынлап та бер береһенә оҡшаған.

Беренсеһе баш мейе менән бәйле фекерләү функцияһын башҡара,

2-се һүрәттәге интеллект-карта уйлауға, ижади фекерләүгә ҡоролған.

Шуға күрә лә бындай карталар иҫтә ҡала, күңелдә һаҡлана.

Алымдың авторы – ғалим һәм эшмәкәр Тони Бьюзен. Ул психолог, күп китаптар авторы. Уның фекеренсә, ябай схемалар, таблицалар төҙөгәндә баш мейеһенең бары һул яҡ ярымшары ғына эшләһә, интеллект карта яһағанда ике ярымшар ҙа эшләй. Тони Бьюзен уйлап тапҡан һәм был технология тураһында «Башың менән эшлә» тигән китабын яҙған. Был тема буйынса эшләгән профессорҙар Бершадская Елена Александровна, Бершадский Михаил Евгеньевич, ғалим Бехтерева Наталья Петровналар эштәрен билдәләп үтергә була. Интеллек - ул аҡыл картаһы.

“Интеллект-карта” алымын аңлатып китәм.

Ак ҡағыҙ алабыҙ, горизонталь рәүештә яһаһаҡ яҡшы булыр.

Һәр тармағын төрлө төҫтәге ручкалар, фломастер, ҡәләмдәр менән яһайбыҙ.

Дәрестә уҡыусыларға эшләткәндә, тема бирелә. Дәрестең ҡайһы этабында эшләтеүгә ҡарап, уҡыусы дәрестә дәреслек материалын файҙаланып төҙөй, ә өйгә бирелгән булһа, төрлө өҫтәмә материалдар менән тулыландыра.

Уртаға беҙҙең темабыҙҙы сағылдырған рәсем яһайбыҙ, темабыҙҙы яҙабыҙ, беҙҙең осраҡта М.Шайморатов. Рәсем яһау оҫталығы кәрәк түгел, иң мөһиме рәсем һеҙгә аңлашылһын.

Урталағы рәсемдән һығылмалы линиялар яһайбыҙ, рәсемгә яҡын ере ҡалыныраҡ, алға таба нәҙегәйә бара. Бына шул линияларға темаға ҡараған мөһим мәғлүмәттәрҙе яҙабыҙ.

Был алымды ҡуллана башлағанда йәки ауыр үҙләштереүсе балалар булғанда темаға ҡараған фекерҙәрҙе, карта тармаҡтарын уҡытыусы менән бергәләп билдәләйҙәр.

Һәр кеше бер тармаҡ тураһында һөйләй

Миннигәли Шайморатовтың тормошо: эшмәкәрлеге, халыҡ күңелендә, иҫтәлекле, урындар:

Балаларҙың фекерҙәрен тыңлағандан һуң, йомғаҡ яһала. Нимә белдем? Нисек белдем? Ни өсөн белдем? Һорауҙарына яуап биреп, ғөмүмән бер һөҙөмтәгә киләбеҙ.

Интеллект картаныңың ыңғай яҡтары:

Яҙабыҙ:

· Ҙур теләк менән
· Тиҙ

Күрәбеҙ:

· Үҙ-ара бәйләнеште
· Материалды аңлатыу структураһын
· Логиканы

Үҫтерәбеҙ:

· Фекер йөрөтөүҙе
· Хәтерҙе
· Күҙаллауҙы

Эш итә башлайбыҙ:

· Бөтә потенциал
· Ижадсылыҡ

Хәтерҙә ҡалдырабыҙ:

· Шунда уҡ
· Күп
· Сифатлы

Төрлө компьютер программаларын ҡулланып Интеллек Картаһын төҙөү (MindMaps, xmind,PowerPoint)

Интеллект карталар төҙөү өсөн алгоритм түбәндәгеләрҙән тора

Үҙәк образ. Ассоциациялар

Ассоциациялар төркөмдәре

Асҡыс һүҙҙәр

Асҡыс тармаҡтар

Төҫтәр, символдар

Логик бәйләнештәр

Был алымды дәрестә нығытыу, рефлексия этаптарында ҡулланырға мөмкин, шулай уҡ өй эше итеп биреү ҙә отошло.

Шулай итеп, дәрестә интеллект карталар төҙөү балаларҙың уҡыуға мотивацияны булдыра, коллективта эшләргә өйрәтә, иғтибарлылыҡ, түҙемлелек, ныҡышмалылыҡ тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын индереү балаларҙы мәғлүмәт менән генә туҡландырыу тигән һүҙ түгел, ә белемде табырға һәм ҡулланырға өйрәтеү ҙә ул. Интеллект карталар - һүрәтләү эшмәкәрлегенең ғәҙәти булмаған төрө.

Интеллект карталар төҙөү буйынса тупланған тәжрибәм түбәндәгеләрҙе күрһәтә:

- уҡытыусы үҙенең һәм уҡыусыларының ижади мөмкинселектәрен киңәйтә;
- башҡорт телен уҡыуға ҡыҙыҡһыныуҙы күтәрә;
- етди темаларҙы үҙләштерергә стимул булдыра.

Эшемдең һөҙөмтәләрен минең ютуб каналында, “Бәйләнештә” селтәрендә, минең сайтымда күрә алаһығыҙ. Уҡыусыларым менән төрлө төбәк-

ара, республика, район кимәлендә конкурстарҙа ҡатнашабыҙ. Белемебеҙҙе ҡамиллаштырабыҙ, тулыландырыбыҙ. Үҙебеҙҙе һынап ҡарайбыҙ. Көндән-көн, йылдан-йыл белемебеҙҙе үҫтерәбеҙ. Уҡыу сифатын артырабыҙ, Олимпиадаларҙа ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшәбеҙ.

Аҡыл карталары балаларға тулы картинаны бирә. Ул карталар бала өсөн хәтер үҫтереүҙә, анализ яһау өсөн бик яҡшы. Үҙемдең сығышымды М. Горькийҙың һүҙҙәре менән тамамлағым килә: “Һәләтлек - ул үҙ-үҙеңә һәм үҙ көсөңә ышаныу”.

Ышанысты булдырыу, тәрбиәләү, үҫтереү - эшемдең төп маҡсаты һәм бурысы.

УДК 8.81

АТАЙЫМ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

A WORD ABOUT THE FATHER

Г.С. Галина,
доктор искусствоведения, профессор Уфимского государственного института искусств им. Загира Исмагилова
G.S. Galina,
Doctor of Art History, Professor of the Ufa State Institute of Arts named after Zagir Ismagilov

Аннотация. В статье раскрывается образ отца глазами дочери. Каждая строка пропитата любовью, чувством гордости и уважения. Многие знают С.Галина как ученого, общественного деятеля, а данная статья ценна тем,что она открывает личность с другой стороны.

Ключевые слова: воспоминание, образ, музыка, наука, лейтмотив.

Abstract. The article reveals the image of the father through the eyes of the daughter. Each line is imbued with love, a sense of pride and respect. Many people know S. Galin as a scientist, a public figure, and this article is valuable because it reveals a personality from the other side.

Keywords: memory, image, music, science, leitmotif.

Атайым менән бәләкәйҙән ниндәйҙер эске бәйләнеш, күңелдәр ауаздашлығы, рухи яҡынлыҡ булды. Төрлө-төрлө эштәргә егелеүенә ҡарамаҫтан, мине ул бер ҡасан да күҙ уңынан ысҡындырманы, мине тәрбиәләүгә бик етди ҡараны. Уҡытыусылар, таныштар миңә йыш ҡына: «Профессия һайлағанда, атайығыҙҙың йоғонтоһо булдымы? Музыкаға уның мөнәсәбәте ниндәйерәк ине?» – тип һорайҙар. Атайымдың да, әсәйемдең дә был мәсьәләгә ҡарата йоғонтолары бик көслө булды. Улар булмаһа, мин музыка белгесе булмаҫ инем. Атайымдың әһәмиәте бигерәк тә тормошомдоң маҡсатын ап-асыҡ итеп билдәләүҙә, башҡорт музыкаһы, сәнғәте, теле менән ҡыҙыҡһындырыуҙа асыҡ сағылды.

Өйҙә атайым гел башҡортса һөйләште, «папа» тип русса өндәшһәң, йә ишетмәмешкә һалыша, йә русса әйткәнеңде тыңлай ҙа, шунан: «Ҡыҙым, инде шул уҡ һүҙеңде башҡортса ҡабатла», – ти торғайны. Башҡортса ҡабатлағас,

мәктап та ҡуя ине. Русса йыш әйтелә торған бер генә һүҙе булды: «Тебя ждут великие дела!».

Ул классик музыканы бик һәйбәт белде һәм яратты. Чайковскийҙы Глинканан, ә Вердины Россининан айырҙы. Әсәйем менән йәш сакта улар классик концерттарға, балет, операларға гел генә йөрөгәндәр, яҙышып арыһа, ул гел «Маяк» радиоһынан классик музыканы тыңларға ярата ине. Баянда ла, фортепианола ла бик ихлас уйнаны, аккомпанементын халыҡ музыканттары кеүек нисек етте шулай түгел, ә бик дөрөҫ алды. Шуға ла ул Мәғарифты үҫтереү институтында донъя һәм милли мәҙәниәт кафедраһын ойошторо п, уға етәкселек итә алды, тип уйлайым. Ғөмүмән, музыка тураһындағы уйҙары уның бик дөрөҫ ине. Моғайын, заманында тейешле шарттар булһа, ул музыкант булып китер ине.

Уның эшмәкәрлеген ике өлөшкә бүлергә була: фольклористикаға һәм юғары белем биреү өлкәһендәге уҡытыуға, методик хеҙмәттәр яҙыуға. Уҡытыу эшен ул иң изге эш тип һананы, бөтә студенттарын исемләп, кем ҡайһы ауылдан икәнен белде. Башҡорттар йәшәгән бөтә төбәктәрҙә лә булыуы менән ғорурланды. Ғүмер буйы уның эш бүлмәһендә Башҡортостандың элекке, 60-сы й.й. сығарылған бик ентекле карта эленеп торҙо, унда ул үҙе булған ауылдарҙы билдәләп килә ине.

Әле аспирантурала уҡ тәҡдим ителгән йырҙар (Ә.Н.Кирәев) һәм әкиәттәр (Ә.И.Харисов) темаларынан ул күңеленә яҡынырҡ ятҡан «Йырҙар» темаһын һайланы һәм был темаға ғүмере буйы тоғро булып ҡалды. Фәндәге остазы, ғүмеренең аҙағынаса бик яҡын дуҫы (уларҙы хатта Ишәй менән Ҡушай тип йөрөттөләр) Кирәй Мәргәндең башҡорт фольклорында эпик традицияларҙың йырҙарҙан эпосҡа, эпостан бәйеткә күсеү тураһындағы төп идеяһын үҫтерҙе. Бының менән риза түгелдәр ҙә булды, имеш фольклор жанрҙар сиратта тормай, әммә Әхнәф Нуриевич үҙе әйтмешләй, был осраҡта һүҙ сиратта тороу хаҡында бармай, ә төрлө тарихи осорҙарҙа төрлө фольклор жанрҙарҙың әһәмиәте йә кәмеүе, йә көсәйеүе хаҡында бара. Был идея атайымдың докторлыҡ диссертацияһының концепцияһы булып тора, минен иң яратҡан китабым – «Тарих һәм халыҡ поэзияһы»нда төп лейтмотив булып үтә.

Ул – ысын интеллигент ине. Был төшөнсәгә мин киң ҡарашлы булыуҙы ла, шаяртыу һәләтен дә, кешене сәйнәмәүҙе лә, этикетка эйә булыуҙы ла индерәм. Ғүмер буйы миңә биргән кәңәштәре бик тә дөрөҫ булып сыҡты. Нисек әйтте – тап шулай килеп сыҡты. Абруйы ла сикһеҙ булды атайымдың. Кешеләр уны яратты, уға ынтылды. Баймаҡҡа ҡайтырға сыҡһаң, үткән район һайын ҡунаҡ була-була ҡайтып етеп булмай торғайны. Күп кешенән «Салауат Әхмәҙиевич минән башҡорт яһаны, миндә милли рух уятты», – тип ишеттем. Эйе, атайымда был тойғо бик көслө ине. Баҡһаң, гел дә шулай булмаған икән, хәтирәләрендә үҙе яҙыуынса, «беҙҙең быуын заманында милли рух тәрбиәләү тигән нәмә булманы, сөнки милләт хаҡында һөйләү милләтселек һанала ине». Был хис, башҡортлоҡ уға институтта уҡыған сакта ятаҡта бер бүлмәлә башҡорт ир-егеттәре – Булат Дауытов, Әхмәтсәлим Яҡупов, Мөхтәр Әхтәмовтар менән

йәшәгән сақта килә һәм был йылдарҙы ул ғүмеренең иң бәхетле йылдары тип иҫәпләй.

Атайым өсөн иң ҙур байлық – ул китап булды. Әле уның бай китапханаһы миндә тора. Башҡорт әҙәбиәтен ул бик яҡшы белде, тип әйтеү артыҡтыр. Бик күп китаптары автографтар менән. Мин уларҙы берәй заман музей ойоштормаҫтар микән, тип айырып һалып ҡуйҙым. Яҙыуҙары бик тә фәһемле. Мәҫәлән:

Салауат дуҫ Галингә – башҡорт фәненең Салауаты булыуыңды өмөт итеп Ким (Әхмәтйәнов. «Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге», 1965).

Салауат Әхмәҙиә улы Галингә был китап күнелдәр берлеген күрһәтә алһа, мин бик шат булыр инем. Кирәй Мәргән («Күңел дәфтәре», 1971).

Сәләм лауреатына археологик сәләм менән Нияз Мәжитов («Башҡортостан археологияһы», 1968).

Салауат, «күҙҙәреңә ҡарап туя алманым». Назар Нәжми («Ер һәм йыр», 1962). Бында Н.Нәжми һүҙҙәренә атайым яҙған шул уҡ исемле йыр күҙ уңында тотола. Йәш сақта ул йырҙар ижад итеп, музыка теорияһын китаптар буйынса өйрәнеп, республикабыҙҙың Халыҡ ижады үҙәге эргәһендәге Р.В.Сәлмәнов етәкләгән үҙешмәкәр композиторҙар секцияһында шөғөлләнеп йөрөнө. «Күҙҙәреңә ҡарап туя алманым» йыры әле Башҡортостан радиоһында Фәрит Бикбулатов башҡарыуында һаҡлана.

«Хөрмәтле Салауат Әхмәҙиә улына – китабымды тәрән аңлап, яратып баһалауың өсөн ҙур рәхмәттәр менән Ғайса Хөсәйенов» («Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев», 1991) һ.б. Атайым өсөн Ғайса Батыргәрәевич ғүмере буйы фән эшмәкәренең өлгөһө булды. Уның һөҙөмтәлелегенә һоҡлана торғайны.

Бәлки, иң йылы, иң һоҡланғыс һүҙҙәрҙе атайыма татар эшмәкәрҙәре Хәмит Йәрми, Хәтип Ғосман, Хужи Мәхмутов, Илбарис Надиров, Фәтих Урманче, Ибраһим Нуруллин, Нурмөхәммәт Хисамов, Ким Миннуллиндар әйткәндер. Әле 1971 йылда уҡ телгә алынған ағайҙарҙың күбеһе Стәрлетамаҡҡа башҡорт филологияһы мәсьәләләре буйынса фәнни-ғәмәли конференцияға килеп, ундағы педагогия институтын һелкетеп алғайнылар! Аңлауымса, профессиональ сифаттарҙан тыш атайымды улар иң элек башҡорт халыҡ оҙон көйҙәрен моңло итеп башҡарғаны өсөн һәм Ҡазанға килеү менән ватып-емереп булһа ла, татарса һөйләшергә маташмағаны өсөн яраттылар. *«Салават, күңелне бер жырлауың белән арбаның! Теләсә ҡачан шалтырат! Ҡазанда булғанда рәхим ит!»* кеүек яҙмалар менән көндәлектәре тулған. Минең иһә бер генә цитата килтергем килә: *«Ҡадерле яҡын дустым, моңло замандашым Салауатҡа ихлас күңелдән Хәмит абый»,* тип яҙған билдәле фольклорсы Хәмит Йәрми «Татаро-мишарские песни» (1979) тигән йыйынтығында. Кандидатлыҡ диссертацияһын Ҡазанда яҡлағанға күрә, Татарстандың баш ҡалаһы атайымды оло ғилем юлына сығарҙы, унда уға тағы ла Мирфатих Зәкиев, Мөхәмәт Ғәйнуллин һ. б. бик күп бөйөк ғалимдар менән осрашыу-аралашыу форсаты тейҙе. Һәм тағы ла бер факт: 1971 йылдың декабрендә атайым ни сәбәп менәндер Ҡазанға фольклорсылар конференцияһына бара алмаған һәм ул сақтағы дуҫы, татар халыҡ йырҙарын өйрәнгән Илбарис Надиров уға шул

конференцияла төшкән коллектив фотоны иҫтәлек итеп ебәргән! Ул фотоны мин атайымдың архивын аҡтарғанда табып, хәҙер үҙ булмәмә элеп ҡуйҙым, сөнки унда илдең бөтә атаҡлы фольклорсылары йыйылған. Үҙемә илһам һәм дәрт биреп торһон, тинем.

Ғүмере буйы атайым көндәлектәр алып барҙы. Унда көндөң нисек үткәнен, төрлө цитаталар һәм конспекттар, танышҡан кешеләрҙең адрес-телефондарын, һаяа торошон, төштәрен, уйҙарын, пландарын табырға була. Миңә лә бер заман: «Кешенең яҙа торған фекерҙәре булырға тейеш», – тип ошо уҡ эшкә этәргәйне. Бына, мәҫәлән, көндәлектәрендәге ҡайһы бер репликалары:

- *Башҡортса һөйләшә тигәндә, башҡорт әҙәби телен күҙ уңында тотабыҙ һәм ҙур хата эшләйбеҙ. Әҙәби телдә бер кем дә һөйләшмәй.*

- *Ни өсөн уҡытыусы абруйы төшә? 1. Минеңсә, уларға интеллигентлыҡ етмәй. 2. Үҙеңде тота белмәү. 3. Кейем. 4. Үҙ өҫтөңдә эшләмәү.* Бөгөнгө көндә тел тураһында һүҙ ҡуйырғанда, был фекерҙәр шул тиклем актуаль янғырай! Уҡытыу кимәлен күтәрмәйенсә, был эште уңышлы хәл итеп тә булмай икәнлеге көн кеүек асыҡ! Студенттар менән эшләү өсөн дә атайым инеш һүҙ темаларын билдәләгән икән:

1. «Элек һәм хәҙер». Кафедра һәм уның мөмкинлектәре.

2. Уйларға өйрәтеү. Һүҙмә-һүҙ әйтеп уҡыған һәм һөйләп аңлатҡан уҡытыусы. Яратҡан фән өлкәһе һәм программа.

3. Бәхәсләшегеҙ! Китапты ла кеше яҙа.

4. Дуҫтарың кем?

5. Дөйөм кругозор.

Һуңғы йылдарында атайым «Үткән ғүмер – ҡалған хәтер» исемле хәтирәләрен яҙып, вафатына бер нисә ай ҡалғас, уларҙы йоҡа ғына булһа ла китап итеп сығарып ҡуйҙы. Унда ул бала сағын, студент һәм аспирантура йылдарын, күңелендә уңалмаҫ яра булып ҡалған Стәрлетамаҡ институтында эшләү осорон тасуирлай. Ғилми эшмәкәрлеге буйынса З.Г.Муллағәлиева менән Х.А. Толомбаев әҙерләгән биобиблиографик белешмә лә шул ваҡытта донъя күрҙе. Унда 396 пункт! Киләсәктә был ике китап та уның тормошон менән ижадын өйрәнеүҙә мөһим сығанаҡ булыр тип ышанғы килә.

Атайымдың вафатынан һуң Әхмәт ағай Хисмәтуллин фатихаһы менән Йәмғиәт ойошмалары дәүләт архивында (хәҙер – Милли архив) атайымдың шәхси фонды булдырылды, күп кенә ҡағыҙҙарын тәртипкә килтереп, уларҙы папкаларға бүлеп, был яҙмаларҙы, башҡа материалдарҙы шунда тапшырҙым. Күбеһе әле үҙ сиратын көтөп өйҙә ята. Исемен мәңгеләштереү буйынса эшләйһе эштәр ҙә бар әле.

Уның яҡты образы гел минең күҙ алдымда, мине яңы ижади үрҙәргә саҡырып тора.

УДК 37.035

Һ.ТАКТАШ ИҖАТЫНДА СУРӘТЛЕЛЕК

IMAGERY IN THE WORK OF H. TAKTASH

В.В. Галлямова,
учитель татарского языка и литературы МБОУ СОШ с.Базитамак Илишевский район РБ
V.V. Gallyamova,
teacher of the Tatar language and literature MBOU SOSH S.Bazitamak Ilishevsky district of the RB

Аннотация. В статье рассматривается поэтика Х. Такташа в контексте основных тенденций развития татарской поэзии 1910–1920-х гг. Поэтическая система Х. Такташа исследуется с точки зрения смены картин мира в татарской литературе начала XX века.

Ключевые слова: образ, стиль, творчество,поэт.

Abstract. The article deals with the poetics of Khadi Taktash in the context of the main tendencies in the development of Tatar poetry in 1910-1920. The poetic system of Khadi Taktash is investigated from the point of view of the change of world picture in Tatar literature of the beginning of the XX century.

Keywords: image, style, creativity, poet.

Шигърият өчен сурәтлелек (образлылык), мәгънә-фикер (идеялылык), хис-тойгы (эмоциональлек) хас. Шуларның берсе генә дә җитешмәсә , поэтик ялкын көчле булмый. Һ.Такташ 1916 елда (унбиш яшьлек чагында) язган “Газраилләр” исемле шигырендә үк әлеге өч сыйфатның матур үрнәкләрен күрсәтте. Сурәтлелек өчен җил образын сайлый ул. Тау өстендә уйга баткан фәрештә утыра. Канатлары талган килеш җиргә яткан. Маңгаенда – нурлы йолдыз. Күзләренең шәүләсеннән офыкларда таңнар аткан. Ерак илләр күренеп тора. Җилләр яшерен генә килеп, менә ниләр сөйли аңа :

– Фәрештәкәй, кач бу илдән! Монда вәхшәт.

Монда үлем. Монда патша – газраилләр!

Җил образы Кол Галинең “Кыйссаи Йосыф” поэмасында Якъкуб пәйгамбәргә улы Йосыфның дөнъяда барлыгы, кешелекле шәфкатьле булуы турындагы изге хәбәрне алып килгән иде. Дәрдмәнднең “Кораб” исемле шигырендә җил образы туган ил төншенчәсе белән бәйле. Такташ аны дөнья язмышы белән бәйләү осталыгына ирешә. Моны шигыре астында җәяләр эченә алынган (1914 елгы Европа сугышына каршы) сүзләр дә аңлатып тора. Димәк, шагыйрь 1914 елда башланган империалистик сугышка протест белдерә. Сурәтлелекнең эчке мәгънәсе яки шагыйрь фикере шуның белән аңлашыла да. Һәм ул эмоциональ дә. Чөнки укучының хис-тойгысына кагыла.

Тукайда җил шул чордагы халыкның авыр тормышын сурәтләү өчен кулланылган иде:

– Көзге төн. Мин йоклый алмыйм. Өй түрендә җил җылый.

Җил еламый, ач үлемнең куркуыннан ил җылый.

Такташ башка тарихи чорда яши. Анда инде җилне елатып бирү чынбарлыкка туры килеп бетмидер. Җил Такташта искелекне туздыручы символик образга әверелә.

Җил.

Җил бүген хезмәт батыры,

Җил урамда кар көри,

Җил-молодец !

Карт авылны

“Ду-у-у” килеп күмеп йөри.

Шулай да Такташ, сүз сәнгате остасы буларак, җилне тиз генә революцион көчкә әйләндерми. Җил ач әле. Шуңа күрә ишекләрдән нан(икмәк) сорап борнын суза:

Җил бүген ач,

Җил ишектән

Нан сорап борнын суза..

Димәк, җил, Тукайдагыча, сүз-сурәт буларак, шул чордагы авыр, ярлы тормышны чагылдыра. Җил, кеше сынына кереп, халыкның киләчәк бәхете өчен көрәшкә чыга.

Табигать күренешләрен сурәтләү-тасвирлауда Такташ классик үрнәкләр күрсәтте. Һәр әсәрнең идея-эчтәлегенә яраклаштырып, образларны җанландырып-сынландырып файдалана белде ул.

Март аеның нечкә билле җиле

Сузылып ятып җирдән кар ашый, – дигән юлларга гына игътибар итик.

Җил,суз-сурәт буларак, халык җырларында да киң кулланыла. Бер генә мисал:

Исә җилләр, исә җилләр,

Исә чәчемне тарап,

Күңелләремне юатам,

Сезнең якларга карап.

Такташта бу традицион образ һәр очракта яңартылган фәнни телдә әйтсәк, трансформациялап бирелә. Нечкә билнең кешедә генә булуы мөмкин. Ә менә март аеннан нечкә жил ясау Такташның чын мәгънәсендә нәфис сүз сәнгате остасы икәнлеген раслый. Аның сузылып ятып кар ашавында күпме жанлы картина.

Кечкенә бер мәкаләдә Такташ шигриятенең сурәтлеге турында җитди фикер әйтү бик кыен. Без моны бер образ нигезендә генә күрсәтү максатын куйдык.

Кулланылган әдәбият

1. Ф.Хатипов. Әдәбият теориясы.-Казан:,2002.

2. С.Поварисов. Сүз һәм сәнгатьле сөйләм. – Уфа: Китап, 1997.

УДК 372.881.1

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ АЛҒЫШТАР ҠУЛЛАНЫУ

USING WISHES IN BASHKIR LANGUAGE LESSONS

Г.Г.Ганиева,
к. ф.н., доцент Бирского филиала ФГБОУ ВО «УУНиТ». г. Бирск
G.G.Ganieva,
Ph.D., Associate Professor Birsk branch of the Federal State Budgetary Educational Institution "UUNiT". Birsk

Аннотация. В статье рассматриваются национально-культурные особенности пожелания добра у башкир. Отмечается, что исследуемые единицы языка представляют собой древнейший пласт народной словесности, происхождение которого связано с верой древних людей в магическую силу слова. Сходство внутренней формы анализируемых единиц на материале башкирского языка позволяет рассматривать их с позиции культурологических универсалий.

Ключевые слова: табу, пожелания, тюркский фольклор.

Abstract. The article examines the national and cultural characteristics of the wishes of kindness among Bashkirs. It is noted that the studied units of the language represent the oldest layer of folk literature, the origin of which is associated with the belief of ancient people in the magical power of the word. The similarity of the internal form of the analyzed units based on the material of the Bashkir language allows us to consider them from the perspective of cultural universals.

Keywords: taboos, wishes, Turkic folklore.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, бөгөнгө тел уҡытыусыһына уҡыусыларҙа лингвистик, этнолингвистик һәм коммуникатив компетенцияларҙы формалаштырыу маҡсаты ҡуйылған. Башҡорт теленә уҡытҡанда телдең милли һәм мәҙәни үҙенсәлеген иҫәпкә алыу, телмәр этикеты нормаларын үҙләштереү, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү мөһим. Шуға күрә мәктәптә коммуникатив маҡсатты тормошҡа ашырыу, телен, халҡының мәҙәниәтен белгән шәхес тәрбиәләү белем биреү менән бер рәттән төп бурыстарҙан һанала.

Йәмғиәттәге үҙгәрештәр, компьютер технологияһының алға китеүе өлкәндәрҙең генә түгел, уҡыусы балаларҙың аң һәм психологик үҫешенә, телмәренә йоғонто яһамай ҡалмай. Уҡыусыларҙың телмәрендә тупаҫ һүҙҙәрҙән торған лексик берәмектәр, арго һәм жаргон лексика активыраҡ ҡулланыла бара. Халыҡтың юғары мәҙәни кимәлен билдәләүсе һүҙҙәр әкренләп онотола, йәки бөтөнләй ҡулланылыштан төшөп ҡала бара. Шундай күренештәрҙең береһе – алғыштар.

Теләктәр әйтеү, алғыштар һәм ҡарғыштар башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады комартҡыларының бер төрө һанала. Улар халыҡ ижадында, балалар фольклорында ҙур урын алған. Алғыш – башҡорт халыҡ ижадында һәйбәт кешегә теләк, маҡтау, дан рәүешендә ижад ителгән шиғри жанр ул. Был һүҙ

татарҙарҙа – алҡыш, ҡараҡалпаҡта, сахала – алғыс, ҡарасәйҙә – алғышла тип йөрөтөлә. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән был һүҙ *фатиха* тигәнде аңлата. Кеше нимәлер эшләү, ниәтләү алдынан алғыш әйтелгән. Улар кешегә уңыш теләү, башлаған, ниәтләгән эшен ҡеүәтләү, фатиха биреү маҡсатында һамаҡланған. Әйтергә кәрәк, алғыш жанрының яҙма әҙәбиәткә йоғонтоһо һөҙөмтәһендә көнсығыштан килеп ингән мәдхиә, көнбайыштан үҙләштерелгән ода жанры үҫешкән. Башҡорт халыҡ ижадының беренсе томында балыҡсыға, солоҡсоға, һуғым һуйыусыға, эш башлап тороусыға, өй ҡотлаусыға әйтелгән алғыштар бар.

Улар барыһы ла ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше формалары йәки нигеҙ ҡылымға иҫкелек ҡалдығы булып һаҡланып ҡалған *–ҡыры/ -кере, -ғыры/-гере* ялғауҙары эйәреү юлы менән яһала. Мәҫәлән, балыҡсыға, аусыға әйтелгән теләк:

Тәңре һиңә дарман бирһен,
Тау эйәһе фарман бирһен

Ҡортсоға: *Солоғоң ҡотло булһын!*
Күс артынан күс ҡунһын!

Малсыға: *Көткән малың – түккән тирең хәләл мәнфәғәтеңә яҙһын!* – тип изге теләктәр әйтелә.

Эш башлап тороусыға: *Алла ярҙам ҡылһын!*
Эшең уң булһын!

Берәй эште беренсе булып башлаусыға: *“Ҡул артың еңел булһын!” “Аяғың еңел булһын!”* – тип, теләйҙәр.

Шулай уҡ өй ҡотлағанда, башҡа сыҡҡан йәштәрҙе тәбрикләгәндә, ҡунаҡ һыйлаусыға, яңы кейем кейеүсегә, алыҫ юлға сығыусыға теләгән әйтемсәләр ҙә күп: *Кейемең ҡотло булһын, Йылы тәнеңдә туҙһын.*

Бындай теләктәрҙе “дәрт уҡыу” тип тә әйтәләр. Улар кешегә нимәнелер башҡарырға ашҡыныу тойғоһон көсәйтә, рухи күтәренкелек бирә, дәрт өҫтәй. Теләк тормошҡа ашҡан осраҡта ҡулланылған *“дәрт мөйөшләнеү”* фразеологик берәмеге лә ошо һүҙ менән бәйле.

Дәрт уҡыуҙы бөгөн рус теле аша инглиз теленән килеп ингән “тост” һүҙе алмаштыра. Тост әйтеү шулай уҡ теләк, ҡотлау һүҙе менән бәйләнгән. Ләкин был теләктәр бокалдарҙы күтәреү тәҡдиме менән тамамлана. Күренеш халыҡтың менталитеты, этномәҙәни нигеҙҙәре үҙгәрә барыуын дәлилләүсе һыҙат булып тора.

Башҡорттарҙа алғышҡа алғыш менән яуап ҡайтарыу йолаһы бар. Теләк теләүсенең изге һүҙҙәрен йөпләп, мотлаҡ тормошҡа ашыуын теләп *“Амин”,“Шулай булһын”, “Бергә булһын”, “Алланың амин тигән сағына тура килһен”* кеүек һүҙҙәр әйтеү менән бергә, матур теләк һүҙҙәре менән яуап ҡайтарыла. Мәҫәлән: Дәрүиш: *“Йорт-ерең, мал-тыуарың именлектә, күңел-хәтерҙәрен бөтөнлөктә булһын, байбисә. Баш осондан ырыҫ ҡошо китмәһен”.* Тәңкәбикә: *“Рәхмәт, мосафир, амин, шулай булһын. Һинең дә күңелен таплы, күҙең яман булмаһын. Төклө аяғың менән рәхим ит. Әйҙә” (М.Кәрим).*

Туйҙа – килен менән кейәүгә, бала тыуғас – балаға әйтелгән теләктәр башҡорт халҡының изге йолаларының береһе. Ҡыҙ никахлағанда йәки ҡыҙ оҙатыуҙа ата-әсәләр бата теләктәр әйтеп үҙҙәренең фатихаһын бирә. Бата теләккә бәйле *“Атаһы башҡаның батаһы башҡа”* тигән халыҡ мәҡәле ата-әсә фатихаһының, теләктең мөһим әһәмиәткә эйә булыуы тураһында һөйләй. Әйтергә кәрәк, ҡыҙ менән егеттең йәрәшеүе, никахлашыуы “бата уҡытыу” һүҙе менән атап йөрөтөлә. Ләкин һуңғы йылдарҙа был һүҙ ҡулланылыштан әкренләп юғала бара. Уның “никах уҡытыу”, йәки Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш диалекттарында “ижап уҡытыу” тигән варианттары йышыраҡ ҡулланыла.

Туй йолаһының бер өлөшө булған килен төшөрөү, килен һөйөү эпизодтарында теләк йыры йырлана. Ул кейәү йортона төшкән киленгә киләсәк тормошта нисек булырға, үҙеңде ҡайны-ҡәйнә алдында ҡайһылай тоторға өгөт-нәсихәт, кәңәш бирә:

Өлкәндәргә ҡайҙа ла
Хөрмәт күрһәт, киленсәк.
Кеселәргә ҡайҙа ла
Үрнәк күрһәт киленсәк.

Бала тыуғас әйтелгән һамаҡтарҙа баланың оҙон ғүмерле, тәүфиҡле, ата-әсәле булыуы теләнә: *Кеше артты донъяла, ризығың менән, төклө аяғың менән. Бәхетле, сәләмәт бул, тәүфиғең, ақылың үҙеңдә булһын, әсәйеңә ярҙамсы, атайыңа иш бул, уҡып ҙур кеше бул, кешеләргә изгелекле, игелекле бул.* Бындай изге теләктәргә һөйләү телмәре һәм китап теле лексикаһын үҙенә туплаған нәфис әҙәбиәттә матур үрнәктәр байтаҡ:

Артабан “аҡ” теләк сәңгелдәк йырҙарында, баланы һикертеп уйнатҡанда, мунса индергәндә, теле асылғанда, уның тәү тәпәй баҫҡанында һамаҡлана:

Һап, һап, һап!
Мунса ташы, бүрәнә башы.
Әбейҙе “әбей” тип әйт,
Бабайҙы “бабай” тип әйт.
Айыу балаһы,
Бүре балаһы.
Татлы табан бул,
Алабуға бул,
Һыуҙан таҙа бул,
Һөлөктәй бала бул!

Күк есемдәренә, тәбиғәткә, йыл миҙгелдәренә, көн торошона бәйле өндәштәр, теләктәр, алғыштар ауыҙ-тел ижадында айырым урын алып тора. Шулай уҡ төрлө арбауҙарҙа, күҙ тейеүҙән һаҡланғанда, ауырыуҙы имләгәндә, ҡурҡыуҙан ҡот ҡойғанда һамаҡланған матур теләктәр бар.

Тантаналы ваҡиға уңайы менән ҡотлауҙарҙа, хәйерле сәфәр теләгәндә, яңы кейем кейгәндә, ризыҡ төшкәндә әйтелгән теләк, мәрхүмдәрҙе ерләгәндә һыҡтап оҙатыу алғышы халыҡтың йәнле һөйләү телмәрендә, көндәлек тормош-көнкүрештә бөгөн дә актив ҡулланыла. Улар тышҡы төҙөлөшө менән

ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше формаһы менән тап килһә, йөкмәткеһе яғынан теләктең төрлө мәғәнә нескәлектәрен күрһәтә: *иҫән-һау йөрөп ҡайт, бәхетле бул, оҙон ғүмерле бул, аяҡ-ҡулын һыҙлауһыҙ булһын, балаларындың изгелеген күр, аҙағы хәйерле булһын, имен-аман тотонорға яҙһын, йылы тәнендә туҙһын, оҙон ҡыуанысҡа булһын, бергә-бергә йәшәргә яҙһын, алла бәрәкәт бирһен, хәйерле ҡаза булһын, иманы юлдаш булһын, ауыр тупрағы еңел булһын һ.б*

Артабан изге теләк модаллеге ҡылымһыҙ һөйләм төрҙәрендә ҡулланыла. Миҫалдар:*Тыныс йоҡо! (тыныс йоҡо теләйем), Байрам менән! (байрам менән ҡотлайым), Тыуған көнөң менән! (тыуған көндә әйтелгән теләк), Хәйерле иртә! (хәйерле иртә теләйем), Хәйерле юл! (юлға сыҡҡан кешегә әйтелгән изге теләк). Хәйерле сәғәттә! (эш башлағанда әйтелә торған яҡшы теләк), Төклө аяғың менән! Еңел аяғың менән! (килен төшөргәндә әйтелгән изге теләк), Ҡотло аяғың менән! (муллыҡ, байлыҡ килтерһен), Ауыҙыңа бал да май! (яҡшы хәбәр һөйләгәндә "шул алдыңа сыҡһын, "әйткәнең тормошҡа ашһын").*

Алғышта изге, саф күңелдән әйтелгән теләктәр теләнһә, ҡарғышта, киреһенсә, яуыз уйлы, яман ниәтле уйҙар әйтелә. Ҡарғыш халыҡ ижадының боронғо жанры булараҡ та билдәле. Кешенең күңелен төшөрөү, рухын һындырыу маҡсатында әйтелгән бындай рәнйеш әйтемсәләре кешегә шом һалыу, ҡурҡытыу, насар теләк теләү маҡсатында әйтелеп, һөйләүсенең кире хис-тойғоһон, рәнйеүен белдерә. Әгәр һөйләм көслө интонация менән әйтелһә, теләктең ҡаты иҫкәртеү, ҡәһәрләү, һөйләүсенең ныҡ рәнйеүен белдереү кеүек мәғәнә төҫмөрҙәре бойомға ашырыла: *Ҡәһәр төшһөн, һуғышты уйлап сығарған бәндәләргә! Ҡәһәр төшһөн сабыйҙарҙы үлән ашарға мәжбүр иткән хаиндарға! (Т.Ғарипова).*

Изге теләк халыҡ ижады жанрҙарында йыш осраған кеүек, ҡарғыш та фольклорҙа үҙ урынын тапҡан. Боронғоларҙың һүҙ ҡеүәһенә, тел тылсымына бик ныҡ ышаныуҙары ҡарғыш әйтемсәләренең киң таралыуына килтергән. Им-том, арбау йолаһында алғыштар менән бер рәттән ҡарғыштар әйтелә. Улар сир-зихмәттең ҡотон алыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Ҡарғыш кешеләрҙен бер-береһенә, дошманына ҡарата әйтелгән яуыз уйлы, яуыз ниәтле һүҙҙәрендә һамаҡлана. Бындай осраҡта ҡарғышҡа ҡаршы ҡарғыш әйтемсәләре – яман һүҙҙе, ҡарғышты кире борор һүҙҙәр әйтелә: *Ауыҙыңдан ел алһын! Тартай теленән табыр, һин дә телендән тап! һ.б.*

Кире тәьҫир итеүсе бындай һүҙҙәр телмәрҙе боҙоу менән бер рәттән кешенең культура кимәленең түбән булыуын билдәләүсе сара булып тора. Был йәһәттән башҡорт халыҡ яҙыусыһы М.Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендә түбәндәге фәһемле һүҙҙәр бар: *Күрше-күләндең төрлөһө бар бит. Ҡайһы берәүҙәр балаларын: "Эй, Хәмит, хоҙай орғоро!" йә: "Эй, Тәскирә, Алла һуҡҡыры!" тип әрләр ине әүәл заман ауылыбыҙҙа. Балаларын гел хоҙайҙан һуҡтыра ла Аллаһынан язалаталар. Ә минең Оло Инәйем: "Алла бирһен, хоҙай ярлыҡаһын, хоҙай насип итһен!"– тип әйтә торғайны (М.Кәрим).* Боронғолар һүҙендә был мәғәнә *теләй белһәң – теләк, теләй белмәһәң – имгәк* рәүешендә урын алған. Яҡын кешенде әрләгәндә, уның эшенә, холҡона ҡарата ризаһыҙлыҡ күрһәткәндә *"йәшәгере", "бәхетле булғыры",* "тип изге теләк теләү тәбиғи

күренеш. Сөнки халыҡ насарлыҡ теләүҙән мөмкин тиклем һағыраҡ булырға тырышҡан. *Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң.* мәҡәленең тәрбиәүи емеше бар.

Ғөмүмән, телмәрҙә ҡулланылған ыңғай мәғәнәле һүҙҙәр арҡылы кешенең аралашыу мәҙәниәтен билдәләргә, образдың характер һыҙатын асырға мөмкинлек тыуа. Шуға күрә дәрестә ҡылымдың морфологик категорияларын үҙләштергәндә, уларҙың лексик-семантик үҙенсәлектәренә лә туҡталырға, алғыштарға мөрәжәғәт итеү, уларҙы уҡыусыларҙың телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү мөһим

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры. 1-се том. - Өфө: Китап, 1995. – 560 бит.
2. Балалар фольклоры: бала саҡ- уйнап көлөп үҫер саҡ. - Өфө: Китап, 1994. – 160 бит.
3. Дмитриев Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы. Ғилми баҫма. – Өфө, 2008. – 326 бит.
4. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. - Өфө: Китап, 2005. - 264 бит.
5. Хөсәйенов Б.Ғ. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. - Өфө: Китап, 2006. -248 бит.

УДК 37.035

ТЕЛ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ БҮЛЕГЕН ӨЙРӘНЕҮ МЕТОДИКАҺЫ

THE METHODOLOGY OF STUDYING THE WORD FORMATION SECTION IN LANGUAGE LESSONS

Г.Г.Ганиева,
к.ф.н., доцент Бирского филиала ФГБОУ ВО «УУНиТ». г. Бирск
G.G.Ganieva,
Ph.D., Associate Professor Birsk branch of the Federal State Budgetary Educational Institution "UUNiT". Birsk

Аннотация. В статье выделяются и рассматриваются устойчивые направления развития современного башкирского словообразования, а также осмысляются причины активности определенных словообразовательных процессов.

Ключевые слова: язык, слово, словообразование,принципы.

Abstract. The article highlights and examines the stable directions of development of modern Bashkir word formation, as well as the reasons for the activity of certain word-formation processes.

Keywords: language, word, word formation, principles

Һүҙьяһалыш мәсьәләләре башҡорт тел белемендә XX быуаттың икенсе яртыһынан ныҡлап өйрәнелә башланы һәм лингвистиканың үҙ аллы тармағы кимәленә күтәрелде. Был йәһәттән М.Х.Әхтәмов, К.Ғ.Ишбаев, Г.Р.Абдуллина,

М.И. Ҡарабаев кеүек телсе ғалимдарҙың күләмле хеҙмәттәрен атап китергә мөмкин. Шулай ҙа башҡорт телен уҡытыу теорияһында һәм методикаһында һүҙьяһалыш бүлеген уҡытыуҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәрен билдәләү зарурлығы бар.

Башҡорт теле дәрестәрендә һүҙҙең төҙөлөшө тураһында башланғыс мәктәптә үк өлөшсә белем бирелә. Башланғыс класс уҡыусылары тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, һүҙ яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар менән иркен эш итергә өйрәнә. Бишенсе класта һүҙьяһалыш, һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар тигән темалар үҙләштерелә. Шулай уҡ бишенсе һәм алтынсы класс дәреслектәрендә төп урынды һүҙ төркөмдәрен өйрәнеү алып тора һәм грамматик үҙенсәлектәрен үҙләштереү менән бер рәттән уларҙың яһалыу юлдарын, дөрөҫ яҙылышын өйрәнеү маҡсат итеп ҡуйыла. Юғары кластарҙа иһә һүҙьяһалыш буйынса үтелгәндәр системалаштырыла, нығытыла.

Мәктәптә һүҙ составын һәм һүҙьяһалышты өйрәнеүҙең теоретик һәм практик әһәмиәте бар. Һүҙҙәрҙең яһалыу законлыҡтарын белеү һүҙ байлығын арттыра, телмәрҙе грамматик яҡтан дөрөҫ төҙөүгә килтерә, башҡорт теленең грамматик төҙөлөшөн аңларға булышлыҡ итә. Практик йәһәттән иһә грамоталы дөрөҫ яҙыуҙы формалаштыра. Һүҙҙең структураһын тикшереү һөҙөмтәһендә тамыр һәм яһалма һүҙҙәрҙең мәғәнә нескәлектәрен айырырға өйрәнеү уҡыусыларҙың башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуын арттыра.

Билдәле булыуынса, һүҙьяһалыш лексик, фонетик, стилистик, морфологик һәм синтаксик күренештәр менән тығыҙ бәйләнгән. Һүҙьяһалыштың был үҙенсәлеген һәм теманы өйрәнеүгә сәғәттәр һаны аҙ бирелеүен иҫәпкә алып, уны үҙләштереүҙе тел ғилеменең башҡа бүлектәре менән бәйләнештә алып барыу зарур. Мәҫәлән, лексик темаларҙы үҙләштергәндә башҡорт теленең һүҙлек фондын тулыландырыуҙа һүҙьяһалыштың ролен асыҡларға, стилистикала яһалма һүҙҙәрҙең үҙ урыны, үҙ стиле булыуын билдәләргә, морфологияла һәр бер һүҙ төркөмөнөң яһалыу үҙенсәлеге барлығын күрһәтергә, синтаксиста һүҙбәйләнештәрҙең йәки һөйләмдәрҙең яңы һүҙ барлыҡҡа килтерә алыуын һүҙьяһалыш менән бәйләп аңлатырға була.

Тел ғилеменең башҡа тармаҡтары кеүек һүҙьяһалышты өйрәнеү ҙә дөйөм дидактик һәм методик принциптарға таяна. Фәннилек, системалылыҡ, тарихилыҡ, аңлы үҙләштереү принциптары, күргәҙмәлелек һәм техник саралар ҡулланыу, яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереүҙән тыш һүҙьяһалышҡа өйрәтеүҙең үҙенә хас методик принциптары бар.

Структур-һүҙьяһалыш принцибы – һүҙҙәрҙе анализлағанда һүҙҙең структураһы менән уның яһалыу юлы тығыҙ бәйләнештә алып барыла. Мәҫәлән, һүҙ яһаусы ялғау ярҙамында яһалған һүҙҙәр (бел-гес, ауыл-даш, аҡса-лата) синтетик һүҙҙәр тип (бер һүҙҙән тора), ә синтаксик юл менән яһалған һүҙҙәр (тимер юл, ҡурай еләге) ике һәм унан артыҡ һүҙҙән тороп, аналитик һүҙҙәр тип йөрөтөлә.

Лексик-һүҙьяһалыш принцибы – һүҙьяһалыш моделенең лексик һәм грамматик мәғәнә менән бәйлелеге. Мәҫәлән, *еләк* тамыр һүҙе бер еләкте

белдерһә, *елək-лек* күп елək үçә торған урынды аңлата, *күлдək-лек* – күлдək тегеү өсөн кәрәк булған материал. Шулай итеп, *-лык/-лек, -лоқ/-лөк* ялғауҙары урын, күләм һ.б. мәғәнәне белдереүсе ялғау рәтен барлыҡҡа килтерә.

Семантик-һүҙьяһалыш принцибы – һүҙҙең структураһын, составын билдәләү һүҙҙең аңлатмаһын тылҡыу менән аңлатыла. Миҫал: *ашау - аш, атҡаҙанған – аты ҡаҙанған, аты (исеме) билдәле.*

Һүҙҙең морфематик составы һәм һүҙьяһалыш буйынса төп теоретик төшөнсәләрҙе формалаштырыуҙа традицион методтар менән бер рәттән төрлө йүнәлештәге морфематик күнегеүҙәр уҡыусыларға һүҙ төҙөлөшөн дөрөҫ билдәләргә өйрәтә:

һүҙҙәрҙең ялғауҙарын айырып күрһәтегеҙ;

ялғауҙың төрөнә ҡарап һүҙҙәрҙе төркөмләгеҙ;

һүҙҙәрҙе составы буйынса анализлағыҙ;

график диктант яҙығыҙ.

Һүҙьяһалыш буйынса күнегеүҙәр уҡыусыларҙы һүҙҙәрҙең яһалышын һәм структур-семантик бәйләнешен анализларға ярҙам итә:

һүҙҙең ниндәй һүҙҙән һәм нисек килеп сығыуын асыҡлағыҙ;

бирелгән һүҙгә тамырҙаш һүҙҙәр табығыҙ;

һүҙҙәрҙең яһалыу юлын билдәләгеҙ;

бер үк тамырҙарҙан яһалған һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙығыҙ;

һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатмалы һүҙлектән асыҡлағыҙ.

Бындай күнегеүҙәр грамматик теманы үҙләштереүҙән тыш уҡыусыларҙың автоматик дөрөҫ яҙыу һәләтен үҫтерә, һөйләү телмәрен байытырға ярҙам итә.

Дәресте төрлөләндереү, уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлеген булдырыу һәм дәрес һөҙөмтәһен юғары кимәлгә күтәреү маҡсатында дәрестә лингвистик уйындар ҡулланыу, төркөмдәрҙә йәки парҙар менән эшләү, бүлек буйынса йомғаҡлау дәрестәрен традицион булмаған формала үткәреү эффектлы буласаҡ.

Һүҙьяһалыш структураһын һәм һүҙҙең грамматик формаһын дөрөҫ аңлау өсөн һүҙ составы (морфематик) һәм һүҙьяһалыш буйынса анализ эштәре ыңғай һөҙөмтә бирәсәк. Һәр төр анализдың үҙ бурыстары һәм башҡарыу методикаһы булыуға ҡарамаҫтан, мәктәп практикаһында был төр анализдар бер-береһенән артыҡ айырылмай. Шулай ҙа һәр төр анализдың үҙ тәғәйенләнеше барлығын оноторға ярамай.

Һүҙ составы буйынса анализ:

Һүҙҙең үҙгәреү-үҙгәрмәүен асыҡлау, һүҙ төркөмөн күрһәтеү.

Һүҙҙең ялғауҙарын билдәләү, грамматик үҙенсәлектәрен асыҡлау.

Һүҙҙең нигеҙен табыу.

Һүҙҙең тамырын күрһәтеү һәм уға тамырҙаш һүҙҙәр һайлау.

Һүҙьяһалыш буйынса анализ хәҙерге башҡорт телендә һүҙ ниндәй нигеҙҙән, нисек, ниндәй юл менән яһалған булыуын асыҡлауҙы маҡсат итеп ҡуя. Был йәһәттән профессор К.Ғ.Ишбаев юғары уҡыу йорттарында һүҙьяһалыш анализын синтез һәм анализ методы менән тикшереү юлдарын асыҡланы. Анализ методы ярҙамында һүҙҙең яһалышын асыҡлау һөҙөмтәнән

сығанаҡҡа ҡарата, йәғни процестың аҙағынан башына табан кире йүнәлештә алып барылһа, һүҙьяһалыш системаһын ыңғай йүнәлештә тикшереү синтез методы тип ҡарала [1; 69-70]. Ике методтың да үҙ урыны бар. Уларҙы параллель йәки аралаштырып ҡулланыу һүҙҙәрҙең яһалыу үҙенсәлектәрен төрлө яҡлап тикшерергә мөмкинлек бирә. Шулай ҙа мәктәп практикаһында анализ методы актив ҡулланыла һәм отошло һанала.

Бирелгән яһалма һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын билдәләү.

Һүҙҙең төҙөлөшөн асыҡлау, нигеҙен һәм үҙгәртеүсе ялғауын күрһәтеү.

Нигеҙ һүҙ ниндәй һүҙҙән яһалған? Һүҙ яһаусы ялғауҙы күрһәтеү.

Тамыр һүҙҙе әйтеү.

Яһалма һүҙҙең ниндәй юл менән барлыҡҡа килеүен асыҡлау.

Һәр тамыр һәм яһалма һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу.

Анализды телдән йәки яҙма формала даими башҡарыу ыңғай һөҙөмтә бирә. Әйтергә кәрәк, уҡыусылар һүҙьяһалыш анализында байтаҡ ҡаршылыҡтарға осрай. Билдәле булыуынса, һүҙьяһалыш һүҙ төркөмдәре менән тығыҙ бәйле. 5-се класта һүҙьяһалыштың мәғәнәүи, фонетик, морфологик, синтаксик юлдары өйрәнелә. Ләкин шул уҡ класта уҡыусы исем, ҡылым һүҙ төркөмдәренең яһалыу юлдарын үҙләштергәндә уларҙың бөтөнләй икенсе атама менән йөрөтөлөүе менән осраша:1) ялғауҙар ҡушыу юлы менән исемдәрҙең яһалышы; 2) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһалыу; 3) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу; 4) һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу. Ҡылымдың яһалыу юлдары: 1) һүҙгә ялғау ҡушыу юлы менән ҡылым яһалышы; 2) ҡушма ҡылымдар. Дәреслектәрҙә һүҙьяһалыш юлдарының төрлө исемдәр менән бирелеүе лә иғтибарлы балаларҙа ҡыйынлыҡ тыуҙыра. 5-се кластан айырмалы, 10-сы класта һүҙьяһалыш юлдары морфологик, лексик-семантик, лексик-морфологик, лексик-синтаксик тигән терминдар аша бирелә.

Һүҙьяһалыш бүлеген өйрәнгәндә уҡыусыларҙы этимологик анализ менән таныштырыу мөһим. Был төр анализ һөҙөмтәһендә улар һүҙҙең төп башҡорт һүҙе йәки үҙләштерелгән булыуын, һүҙҙең структураһы ниндәй үҙгәрештәр кисереүен күҙәтә ала. Мәҫәлән: ут – утлау; һалмаҡ – һәлмәк, ҡуласа – ҡулса.

Әлбиттә, фонологик, лексик-семантик (мәғәнәүи), лексик-грамматик юлдар менән яһалған һүҙҙәрҙең ҡайһы осрағы беренсел барлыҡҡа килеүен билдәләү уҡыусыларға ауырлыҡ тыуҙырыуы ихтимал. Шулай ҙа өндәрҙең үҙгәрешен, бер һүҙҙең икенсе һүҙ төркөмөнә күсә алыуын уҡыусылар “тотоп”, “ҡапшап” ҡарарға тейеш, шул уҡ ваҡытта балаға үҙ фекерен әйтергә, бәхәстә ҡатнашырға мөмкинлек тыуҙырыла.

Хәҙерге башҡорт теле лексикаһының байыу юлдарын, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатҡанда һүҙлек эштәре ыңғай һөҙөмтә бирә. 10-сы класс дәреслегендә һүҙьяһалыш темаһы менән бәйле “Башҡорт теленең һүҙлеге”н, “Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге”н файҙаланып үтәү өсөн уңышлы күнегеүҙәр бар. Шулай уҡ дәрестә телдең лексик байлығын ғына түгел, ә уның булмышын, асылын билдәләү, тамыр һүҙҙәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәрҙең һәр төрөнөң яһалыу юлдарын тикшереү өсөн К.Ғ.Ишбаев һәм З.К.

Ишкилдинаның «Башҡорт теленең ҡыҫҡаса һүҙьяһалыш һүҙлеге» н (2014) ҡулланыу ыңғай һөҙөмтә бирәсәк.

Ғөмүмән, һүҙьяһалыш бүлеген өйрәнеүҙең теоретик һәм практик әһәмиәте бар. Һүҙҙәрҙең структураһын һәм яһалыу юлдарын белеү уҡыусыларың коммуникатив, лингвокультурологик, тел һәм лингвистик компетенцияларын формалаштырыуҙа ла мөһим роль уйнаясаҡ.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З.К. Башҡорт теленең ҡыҫҡаса һүҙьяһалыш һүҙлеге. – Өфө: Ғилем, 2014. – 552 бит.

УДК 342.725

«…ҠАЙҘА ҒЫНА СӘСЕЛМӘГӘН ОРЛОҒОҢ... »

"WHEREVER YOUR SEED IS SOWN..."

Ф.Б. Дик,
Казахстан,г. Кустанай.
F.B. Dick,
Kazakhstan, Kostanay.

Аннотация. Статье расматривается проблема сохранения языка, культуры и традиций башкирского языка в Казахстане. Автор раскрывает перед читателем современные реалии и ареал функционирования башкирского языка зарубежом.

Ключевые слова: культура, традиции, сохранение, акции, мероприятия.

Abstract. The article examines the problem of preserving the language, culture and traditions of the Bashkir language in Kazakhstan. The author reveals to the reader the modern realities and the area of functioning of the Bashkir language abroad.

Keywords: culture, traditions, conservation, promotions, events.

Милләттәштәребеҙ илебеҙҙең төрлө ерҙәрендә, сит илдәрҙә йәшәй. Әммә ҡайҙа ғына йәшәмәһен кеше, үҙ телен, үҙ мәҙәниәтен һаҡлай, үҙ асылына ҡайта. Тамыр йәйеп, ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп йәшәгәндә лә күңел үҙ иленә тартыла. Үҙ балаларыңа һутлы башҡорт телен, илаһи башҡорт моңдарын, үҙ мәҙәниәтебеҙҙе еткерергә тырышаһың. Минең балаларым тыуған телендә аралаша. Беҙҙең йәшәгән ерҙәрбеҙҙә башҡорт милләтенән булған кешеләргә башҡорт телен өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр булдырылған.

Мәҫәлән, Ҡостанай ҡалаһында «Тілдарын» облыстық тілдерді оқыту орталығы”нда инглиз, корей, ҡаҙаҡ телдәре менән башҡорт теле лә бар. «Тілдарын» Ҡостанайҙың “Дуҫлыҡ йорто” менән берлектә эшләй. Унда Башҡорт «Азатлыҡ» этномәҙәниәт урталығы эшен алып бара.

Шаҡай айында «Халыҡ-ара тыуған тел көнө» ыңғайына һәр йыл һайын күркәм саралар ойошторабыҙ. 2024 йылда «Халыҡ-ара тыуған тел көнө» байрам сараһын «Беҙ бер тамырҙан» тип аталаныҡ. Ул ҡаҙаҡ шағиры Абай һәм башҡорт шағирҙары Аҡмулла, Рәми Ғарипов**,** Айһылыу Йәғәфәрова һәм башҡа яҙыусыларҙың ижады буйынса алып барҙыҡ.

Байрамыбыҙҙың актив ағзаларының береһе Фирҙәүес: «...ҡаҙаҡ телен белеү беҙҙең өсөн ыңғай күренеш, беҙ бер тамырҙан булған халыҡ, ҡәрҙәш телдәрҙе белеү кәрәк», - тине. Башҡорт халҡында иллегә яҡын ырыу булһа, улар араһында - Табын, Ҡыпсаҡ, Мең, Юрматы һәм башҡалар кеүек атамалар булһа, шул уҡ ырыу исемдәре ҡаҙаҡ халҡында ла бар. Беҙ байрамыбыҙҙы бөйөк Абай Ҡонанбаевтың «Ғылым таппай мақтанба» шиғыры менән башлап ебәрҙек. Абай (Ибраһим) Ҡонанбаев (1845—1904) — ҡаҙаҡ шағиры, философ, композитор, мәғрифәтсе, аҡыл эйәһе, йәмәғәт эшмәкәре, ҡаҙаҡ яҙма әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы һәм уның беренсе классигы.

Ғылым таппай мақтанба,
Орын таппай баптанба,
Құмарланып шаттанба,
Ойнап босқа күлуге.

Абай Ҡонанбаевтың бик матур «Коземнен ҡарасы» йырын бергәләшеп йырланыҡ.

Халҡыбыҙҙың бөйөк мәғрифәтсе-шағирының «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк» шиғырын барыбыҙҙа ятланыҡ.

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, әҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!

Башҡорт ҡыҙы Фәрзәнә Аҡмулланың шиғырын ҡаҙаҡ телендә һәм үҙенең Рәмзәнә Абуталипова апаһының шығырҙарын матур итеп уҡып бирҙе. Башҡорт телен өйрәнеуселәр Рәшиҙә, Гөлфиә, Зәйтүнә, Фирүзә, Фәрхәт, Ришат һәм башҡалар үҙ телебеҙҙә матур итеп шығырҙар уҡып байрамыбыҙҙы йәмләнеләр. Байрам бик матур үтте. Был сарала төрлө телдә шиғырҙар яңғыраны, моңло йырҙар ағылды.

“Дуҫлыҡ йорто” тарафынан уҙғарылған сараларҙа ҙур теләк менән ҡатнашабыҙ Унда милли кейемдәребеҙ менән сығыш яһайбыҙ, милли аштарыбыҙҙы бешереп күрһәтәбеҙ, моңло йырҙарыбыҙҙы башҡарабыҙ. Мәктәп уҡыусылары ла бындай сараларҙа актив ҡатнаша. Диана «Бөҙрә сәсле малай», ә Яна – «Бүләк», «Йүрүҙән» һәм башҡа күп кенә йырҙарҙы йырҙарын бик оҫта башҡаралар.

Башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн махсус курстар ойошторола. Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусылар, йәштәр һәм оло апай, ағайҙарыбыҙ ҡатнаша. Уҡыу курсы өс йыл дауамында бара. Курсты уңышлы тамамлаусыларға сертификат тапшырыла. Дәрестәребеҙҙе офлайн һәм онлайн форматта алып барабыҙ. Хаҡлы ялда булғандарға онлайн формат тәүге выҡытта ауырыраҡ булһа ла, аҙаҡтан улар балаларынан һәм ейән-ейәнсәрҙәренән хәҙерге мәғлүмәти-коммуникацион технологияларҙы өйрәнеп, үҙҙәрелә ZOOM платформаһындағы дәрестәргә инә башлайҙар. Бындай эш төрө беҙҙе бик ныҡ берләштерә. Дәрес программаһында грамматиканы еңелләштереп өйрәнәбеҙ, күберәк аралашабыҙ, башҡорт телендә дөрөҫ итеп һөйләшергә өйрәнәбеҙ. Һаya торошо, минең ғәиләм, һөнәрем, урамда, китапханала һәм башҡа күп кенә

темалар буйынса диалогтар ҡорабыҙ. Бындай дәрестәребеҙҙә башҡорт телен яҡшы белгән милләттәштәребеҙ ҙә ҡатнаша. Улар беҙгә төлө яҡлап ярҙам итәләр.

Йыл һайын Башҡорт теленән Халыҡ-ара диктант яҙыуҙа ихлас ҡатнашабыҙ. Тәүге йылдарҙа ҡурҡа-ҡурҡа ғына, икеләнеп кенә тотонған инек, ҡатнашыусылар һаны ла аҙ ине. Йылдан-йылға яҙыусылар һаны арта бара. Диктант яҙыу беҙҙең өсөн бик мөһим сараларҙың береһенә әүерелде. Яҙып бөткәндән һуң беҙ бер-беребеҙҙ менән кәңәшләшәбеҙ, яҙыу өсөн ауыр булған һүҙҙәр буйынса фекер алышабыҙ. Ҡыҫҡаһы, бергәләшеп кәңәшләшәбеҙ, хаталар өҫтөндә эшләйбеҙ. Бындай эш төрө башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы үҫтерә.

“Дуҫлыҡ йортында” урынлашҡан кабинетыбыҙҙа матур әҙәбиәт, электрон китаптар бар. Уларҙы беҙгә «Казахстан Республикаһында экспорт үҙәге» Акционерҙар йәмғиәте вәкиле Урал Аҙнабаев килтерҙе. Костанайҙың «Азатлык» башҡорт урталығының рәйесе Салауат Вальшин да күпләп китаптар һәм Башҡорт халҡының ырыуҙар энциклопедиялярын бүләк итте. Ул энциклопедиялар беҙҙең өсөн бик ҡыҙыҡлы, сөнки үҙ тамырыңды табыу – милли ғорурлыҡ.

Матур мәҙәни саралар ойошторо п, бер-беребеҙ менән аралашып йәшәй Костанай башҡорттары. Тыуып-үҫкән еребеҙ менән бәйләнеште юғалтмаҫҡа тырышабыҙ. Йәйен-ҡышын барып йөрөйбөҙ, телевидениянан, радионан Башҡортостан телевидение тапшырыуҙар программаларын тыңлап, ҡарап йәшәйбеҙ. Мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап, киләсәк быуынға тапшырырға тырышабыҙ.

УДК 373.2

МӘКТӘПКӘСӘ ЙӘШТӘГЕ БАЛАЛАРҘЫ ХАЛЫҠ ЙОЛА-БАЙРАМДАР МЕНӘН ТАНЫШЫРЫУ

INTRODUCING PRESCHOOLERS TO FOLK RITUALS AND HOLIDAYS

Н.Ю.Жуламанова,
педагог дополнительного образования МАДОУ центр развития ребенка - детский сад "Бэпембэ" с. Акъяр МР Хайбуллинский район РБ
N.Y.Zhulamanova,
teacher of additional education MADOU child development Center - kindergarten "Bepembe" S. Akyar MR Khaibullinsky district of the Republic of Bashkortostan

Аннотация. В статье рассказывается о значении национальных праздников башкирского народа в формировании патриотических чувств дошкольников.

У каждого национального народа есть свои обычаи и традиции, уходящие корнями в древность и имеющий в себе глубокий культурный смысл, который служит им для укрепления и усовершенствования духовно-морального общинного строя. Башкиры в этом плане не являются исключением. Поэтому

наша башкирская культура и праздники не утрачены, не забыты и не запрещены.

Ключевые слова: история, народное творчество, народ, традиция, фольклор.

Abstract. . The article describes the importance of national holidays of the Bashkir people in the formation of patriotic feelings of preschoolers. Each national people has its own customs and traditions, rooted in antiquity and having a deep cultural meaning, which serves them to strengthen and improve the spiritual and moral community system. Bashkirs are no exception in this regard. Therefore, our Bashkir culture and holidays have not been lost, forgotten or banned.

Keywords: history, folk art, people, tradition, folklore.

Беҙ ҡыҙыҡлы, тиҙ һәм киң мәғлүмәтле ваҡытта йәшәйбеҙ, күп нәмәгә икенсе төрлө ҡарай башлайбыҙ, күп нәмәне яңынан асабыҙ һәм баһалайбыҙ. Тәү сиратта был беҙҙең үткәнгә ҡағыла. Балалар баҡсаһында белем биреү эшмәкәрлеген дөйөм нормативтар нигеҙендә генә планлаштырыу һәм тормошҡа ашырыу, балаларҙың социаль мәҙәни йәшәү шарттарының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмайынса, белем биреү сифатының заманса кимәлен тәьмин итеү мөмкин түгел. Белем биреү процессын һығылмалы планлаштырыу һәм балаларҙын, уларҙың ғаиләләренең йәшәйеш ерҙәрен, тәбиғәтен, рәүешен, ундағы мөмкинлектәрҙе файҙаланып белем биреү йөкмәткеһен тулыландырыу мөһим.

Бөгөнгө социаль хәлдә, дәүләт сәйәсәте рухи ҡиммәттәрҙе тергеҙеүгә йүнәлтелгән илдә, халыҡ ижадын пропагандалау көндән-көн актуаль әһәмиәткә эйә була бара. Быуындар күсәгилешлеген тергеҙеү, балаларға өлкән быуын кешеләренең тәжрибәһен, булған әхлаҡи нигеҙҙәрҙе, патриотик ҡиммәттәрҙе биреү мөһим. Мәктәпкәсә өлкән йәштәге балаларҙа тыуған ил, уның халҡы, көнкүреше, телмәр һәм мәҙәниәт үҙенсәлектәре тураһында төшөнсәләр формалаша, улар байрамдарҙы, ваҡиғаларҙы ҡабул итә һәм уларҙың мәғәнәһен аңлай ала. Шуға күрә, мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы рухи-әхлаҡи тәрбиәләүҙең, тыуған телдәрен үҫтереүҙә мөһим этап булып уларҙы халыҡ традицияларына йәлеп итеү тора. Был ҙур эштә беҙгә балаларҙы тематик йола байрамдар менән таныштырыу ярҙам итә ала. Сөнки йола, байрамдарҙың йөкмәткеһе - ул халыҡ тормошо, быуаттар буйына йыйылған һәм таралған кеше тәжрибәһе, кешенең рухи донъяһы, уның уйҙары, тойғолары һәм кисерештәрен сағылдыра.

Беҙҙең балалар баҡсаһында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы халыҡ йола-байрамдар менән таныштырыу буйынса эш календарь-тематик планға ярашлы ойошторола. Был йүнәлеш федераль дәүләт белем биреү стандарттарынын принциптарына таянып төҙөлә:

– баланы белем биреү мөнәсәбәттәрендә тулы хоҡуҡлы ҡатнашыусы (субъект) тип таныу;

– балаларҙы социаль-мәҙәни нормаларға, ғаилә, йәмғиәт һәм дәүләт традицияларына йәлеп итеү;

– танып белеү мәнфәғәттәрен формалаштырыу һәм баланың төрлө эшмәкәрлек төрҙәрендә танып белеүен үҫтереү;

– балаларҙың этно, мәҙәни үҫеш хәлен иҫәпкә алыу.

Балаларҙы халыҡ йола-байрамдары менән таныштырыуҙың йөкмәткеһе үҙ эсенә төрлө эш төрҙәре, алымдарҙы ала һәм баланың үҫешенә бик күп ыңғай тәҫьир итеүсе бурыстарҙы үтәүгә йүнәлтелгән:

– балаларҙың башҡорт халыҡ йырҙары, уйындары, әкиәттәре һәм легендалары тураһында белем, төшөнсәләрен нығытыу, арттырыу, камиллаштырыу;

– балаларҙың тыуған телдәрен үҫтереү, бәйләнешле телмәр үҫтереү, һүҙ байлыҡтарын арттырыу;

– балаларҙа үҙ халҡының боронғо һәм хәҙерге кәсеп, тормош эшмәкәрлеге тураһында күберәк белергә ынтылыш һәм теләк үҫтереү;

– балаларҙа мәҙәниәткә, йәмғиәт менән бәйләнеш тойғоһо тәрбиәләү, халыҡ тәжрибиәһен байлыҡ булараҡ ҡәҙерләргә тырышыу.

Башҡорт халҡының милли йола-байрамдары аша беҙ кескәйҙәрҙе тыуған яҡ, уның тәбиғәте, кешеләре, уларҙың үткәндәге һәм хәҙерге тормошо, кәсеп-һөнәрҙәре, аш-һыуҙары, кейем-һалымдары, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре, сәнғәт, ижад өлгөләре менән таныштырабыҙ, ҡыҙыҡһыныу тыуҙырабыҙ, улар менән ғорурланыу тойғоларын тәрбиәләйбеҙ. Ғөмүмән, бөтә төр эшмәкәрлектә лә халыҡ ижадын,балалар фольклорын ҡулланабыҙ.

Уҡыу йылы дауамында балалар милли музыка ҡоралдары, уйындар, ауыҙ-тел ижады менән танышыуҙан тыш, үҙҙәре лә проекттар әҙерләй, уларҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, «Башҡорт халыҡ кәсептәре» тематик аҙналығы сиктәрендә мәктәпкә әҙерлек төркөмө балалары балаҫ һуғыу станогы менән танышты, үҙҙәре балаҫ һуғып ҡаранылар. Ҡыҙҙар һәм малайҙар, традицион булмаған һүрәт төшөрөү алымын ҡулланып, кейемдәрен башҡорт халыҡ орнаменты менән биҙәнеләр. Балалар баҡсаһының тематик планына ярашлы, «Мин һәм минең ғаиләм» аҙналығы барышында кескәйҙәр үҙҙәрен ғаилә ағзаһы ғына түгел, ә үҙ нәҫеленең, хатта бер нисә быуат вәкиле булыуын да белә. Башҡорт халҡының йолаларында үҙендең шәжәрәнде белеү мотлаҡ булғанлыҡтан, балалар шәжәрә ағасы менән таныша, үҙ ғаиләһенең, нәҫеленең ағасын төҙөй. «Ғаиләм-ҡәлғәм» байрамы, кескәйҙәрҙең ауылдын ағинәйҙәре менән берлектә үткәрелгән төрлө саралар ғаиләлә институтын нығыта, уларҙың балаларҙа ата-бабаларына, халҡына хөрмәт тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Милли байрамдар көндәрендә, мәҫәлән, Республика Конституцияһы көнөндә ойоштороло ған викторина, квест кеүек сараларҙа балалар башҡорт халҡының тарихи үткәне тураһында белемдәрен арттырып, төшөнсәләрен киңәйтә, тыуған илгә, ергә, теленә һөйөү тәрбиәләнә. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы халыҡ йолалары һәм байрамдары менән таныштырып, башҡа милләт вәкилдәренә лә толерантлы мөнәсәбәт тәрбиәләргә мөмкин, тип уйлайбыҙ.

Бындай йыл буйына, тәбиғәт миҙгелдәренә ярашлы байрам-йола сараларын үткәреү һөҙөмтәһендә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа үҙ халҡының тарихы һәм мәҙәниәтенә, ауыҙ-тел ижадына ҡыҙыҡһыныу формалаша. Кескәй

дуҫтарыбыҙ Сөмбөлә, Ҡарға бутҡаһы, Һабантуй, Исем туйы, Ҡаҙ өмәһе h.б. халыҡ йола-байрамдары менән таныша, уйын-эшмәкәрлек аша үҙ фекерен булдыра.

Милли йола-байрамдар менән танышыу аша мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәниәтенә йәлеп итеү тарихи милли шәхесте һәм үҙенсәлекте һаҡлауға булышлыҡ итә. Һөҙөмтәлә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа үҙ халҡының тарихы, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныу формалаша, теле үҫешә, байый, халыҡ байрамдары, йолалары аша уның үҙенә генә хас үҙенсәлекле фекерҙәре барлыҡҡа килә, милли рух тәрбиәләнә, бала шәхес булараҡ формалаша.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Аҙнабаева Ф.Ғ., Фәизова М.И., Әгзәмова З.А. “Баласаҡ академияһы”, Уфа, 2016.

2. Галин Салауат Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулланмаһы. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. — һүрәттәре менән 224 бит.

3.Нафиҡова З. Г., Березина А. Г. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында традицион булмаған педсовет. Методик әсбап. Өфө: Нәшриәт. Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты, 2010, 70 б.

4. “Тәбиғәт һәм кеше”, Ф.Г. Азнабаева, Г.Р. Шафикова, Уфа: Китап, 2012.

УДК 372.8

ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ӨЛГӨЛӘРЕН РУХИ-ӘХЛАҠИ ТӘРБИӘ СЫҒАНАҒЫ БУЛАРАҠ ҠУЛЛАНЫУ

THE USE OF SAMPLES OF FOLK ART AS A SOURCE OF SPIRITUAL AND MORAL EDUCATION

А.Г. Ильмухаметов,
канд.филол.наук, доцент ГАУ ДПО ИРО РБ. ГО г. Уфа,
A.G. Ilmukhametov,
Candidate of Philological Sciences, Associate Professor, State Educational Institution of Professional Development IRO RB. Ufa city

Аннотация. В статье рассматриваются вопросы этнопедагогики и возможности использования народного творчества в духовно-нравственном воспитании и формирования обучающихся общеобразовательных организаций.

Ключевые слова: образование, обучение, духовно-нравственное воспитание, этнопедагогика, народное творчество, фольклор, культура, традиции, сказки.

Annotation. The article deals with the issues of ethnopedagogy and the possibility of using folk art in spiritual and moral education and the formation of students of educational organizations.

Keywords: education, training, spiritual and moral education, ethnopedagogy, folk art, folklore, culture, traditions, fairy tales.

Мәғариф өлкәһендә яңыртылған Федераль белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу шарттарында мәктәп уҡыусыларына рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү көнүҙәк мәсьәләгә әүерелде. Илһөйәрлек, толерантлыҡ, әхлаҡ темалары күтәрелде [2, 3]. Уҡыусыны дөйөм кешелек мәҙәниәтенә ылыҡтырыу аша рухи яҡтан үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләүҙе күҙ уңында тотҡан белем биреүҙе гуманлаштырыу методологияһы ла яңы һулыш алды. Шул уңайҙан камертон мәҙәниәт формалаштырыу проблемаһы ла күтәрелеп сыҡты [6, 22].

Белем биреү ойошмаларында рухи яҡтан үҫешкән, толерантлы, илһөйәр шәхес тәрбиәләүҙә халыҡтың традицион мәҙәниәтенә (этномәҙәниәт) нигеҙләнеү – отошло алымдарҙың береһе булараҡ таныла [4, 55]. Халҡың тарихын, үҙ тамырҙарыңды белеү, халҡыңдың рухи-мәҙәни ҡиммәттәрен һәм символдарҙы таныу рухи-әхлаҡи тәрбиәле шәхесте тәрбиәләүҙең нигеҙен булдыра, күп мәҙәниәтле һәм күп кимәлле социаль тормошта балаларҙың комфортлы йәшәйешен тәьмин итә [5, 72].

Һәр халыҡ үҫеп килгән быуында ижтимағи тормошта һәм тәбиғәттә гармониялы йәшәй алған, әҙәп-әхлаҡ яғынан үҙен камиллаштырырға ынтылған, рухи яҡтан үҫешкән шәхестәр итеп күрергә теләй. Ошо маҡсатта быуаттар дауамында халыҡ педагогикаһын тәшкил иткән төрлө тәрбиә саралары тыуҙырған. Халыҡ педагогикаһының йәш быуынды тәрбиәләү өсөн иң бай сығанаҡтарының береһе – ул фольклор – ауыҙ-тел ижады. Фольклор – ул быуаттар дауамында халыҡ тәжрибәһен туплаған халыҡ аҡылы. Тап уның аша үҙенең тормошҡа ҡарашын, донъяны танып белеү үҙенсәлеген сағылдырған. Заман талаптарына яраҡлаштырып шымартып быуаттар буйына фольклор өлгөләре ярҙамында йәш быуынды тәрбиәләгән. Бала әкиәт, йомаҡ образдары аша донъяны танып белә, ҡарһүҙҙәрҙә, легендаларҙа, риүәйәттәрҙә һароуҙарына яуаптар таба, әйтешмәк, тиҙәйткестәр аша телмәрен шымарта, уйындарҙа сыныға, йолалар аша хеҙмәткә өйрәнә, байрамдарҙа эстетик зауығын үҫтерә. Дамир Вәлиев билдәләүенсә, халыҡ ижады – халыҡтың тормошо, уның үткәне, эстетик һәм этик ҡараштары, шулай уҡ идеалдары тураһында бөткөһөҙ мәғлүмәт сығанағы [1, 8]. Халыҡ ижадының әҙәби эшкәртелгән яҙма әҙәбиәт өлгөләре лә шулай уҡ тәрбиә биреү ролен башҡара [7, 60].

Бала шәхесен, уның рухи-әхлаҡи сифаттарын тәрбиәләүҙә беҙ был иҫкермәҫ рухи ҡиммәттәргә мөрәжәғәт итә алабыҙ. Халыҡ педагогикаһы өлгөләре бит кешене ғүмере буйы, тыуғанынан алып ҡәбергәсә, оҙата килә.

Халыҡ педагогикаһы, әлбиттә, күп яҡлы һәм бик бай жанрлы. Мәктәптә белем биреү процесында төрлө дәрестәрҙә һәм дәрестән тыш эшмәкәрлектә киң ҡулланырға мөмкин. Ҡайһы бер фольклор өлгөләрен белем биреү процесында файҙаланыу өсөн материаль-техник саралар, махсус бина, йыһаздар, алдан әҙерлек талап ителһә (мәҫәлән, йола байрамдарын ойоштороу, халыҡ уйындарын үткәреү, бейеү ҡуйыу һ.б.), күпселек фольклор материалын тәрбиә маҡсатында дәрестәрҙә файҙаланыу ауырлыҡ тыуҙырмай. Балалар баҡсаһында, башланғыс кластарҙа дәрестәрҙә балаларҙың телмәрен шымартыу өсөн алғыштар, һөйҙөргөстәр, тиҙәйткестәр, һанамышуҙар, үсекләшеүҙәрҙе ҡулланырға мөкин булһа, әйтештәр менән оҙылып барыусы ябай уйындар ял

минуттарын ойошторoуҙа отошло. Мәҫәлән, “бутыр-бутыр бутҡа бешә”, “ун бармаҡ”, “себештәр ни әйтә” уйындары барышында балалар уйынсаҡ иркен шарттарҙа өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнә, лексик берәмектәр үҙләштерә.

Әкиәттәр – хатта ололарға ла ят булмаған тылсымлы донъя. Әкиәт яратмаған бала юҡтыр. Мәктәпкәсә йәштән тәрбиә маҡсатында әкиәттәрҙе киң ҡулланырға мөмкин. Тәү ҡарашҡа ғына, әкиәт киҫкен сюжетлы фантастик әҫәр кеүек, ә ысынында иһә “ әкиәттәрҙә уйҙырма менән ысынбарлыҡ бер бөтөндө тәшкил итә. Унда һүрәтләнгән ваҡиғалар йәки образдар ни хәтле әҙәм ышанмаҫлыҡ булһалар ҙа, әкиәттең нигеҙендә реаль ысынбарлыҡ ята” [3, 246]. Әкиәт – халыҡ ижадының бик боронғо жанры, уларҙа халыҡтың характеры, менталитеты, донъяға ҡарашы сағыла, шуға күрә һәр халыҡтың тик үҙенә генә хас әкиәттәре була. Әкиәт һәр ваҡыт яҡшылыҡ еңеүе менән тамамланған, изгелек менән яуызлыҡ көрәшенә нигеҙләнгән мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролған була. Әкиәттәрҙе халыҡтың йәшерен коды тип тә атап булыр ине. Ғәҙәттә балаларҙың әкиәт геройҙарына оҡшарға тырышыуҙарын иҫәпкә алып, халыҡ был геройҙар характерына балаларында күрергә теләгән рухи ҡиммәтәрҙе һалған. Мәҫәлән, “Аҡъял батыр” әкиәтендә мөғжизәләр менән бер рәттән, буласаҡ ир-егеттәр өсөн “ғәмәли кәңәштәр” ҙә бик күп. Бәләкәйҙән үҙеңдә көс, таҫыллыҡ тәрбиәлә, белемгә ынтыл, лайыҡлы тоғро дуҫтар һайла, дуҫтарыңа ышан, дуҫлыҡҡа тоғролоҡ һаҡла, намыҫлы бул һ.б. Мәкер, көнсөллөк, ҡомһоҙлоҡ, нәфсе, үс алыу кеүек хистәрҙән юғарыраҡ булырға, ғәфү итә белергә лә өйрәтә был әкиәт. Шуныһы ҡыҙыҡлы, “Синбад-диңгеҙсе” кеүек донңя әкиәттәренән айырмалы рәүештә, башҡорт әкиәте геройҙары байлыҡҡа, власҡа ынтылмайҙар, ә ябай халыҡҡа ихлас ярҙам итергә ынтылалар, уларҙы яман түрәләрҙән, дейеүҙәрҙән, сығырсыларҙан азат итәләр. Мәҫәлән, шул уҡ Аҡъял батыр батырлыҡтары аша дан-шөһрәткә лә, байлыҡҡа ла, власҡа ла эйә була, ләкин ер аҫты донъяһы халҡын яуыз иргәйелдән ҡотҡарып, батшаһын еңеп, тыныс тормош ҡорғас, төп бурысын үтәне тип һанай һәм үҙ халҡын ярлылыҡтан ҡотҡарырға була байлығын алып, ата-әсәһенә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтергә тыуған йортона ашыға. Бында бөйөк филсәфәүи тәрбиә идеяһы йәшеренгән – йәшәү мәғәнәһе байлыҡта һәм власта түгел, ә рухи үҫештә, рухи камиллыҡта. Хәйлә, ялған, мәкер, ғәҙелһеҙлек, байлыҡ, власть, дан-шөһрәт, нәфсе, физик һынауҙар аша үтеп, ғәфү итә белгән, тыуған яғын һөйгән, ата-әсәһен ҡәҙерләгән, игелек эшләргә һәләтле, дуҫлыҡҡа тоғро, илһөйәр кеше булып ҡалыу идеяһы. Был идея халыҡ аҡылын туплаған мәҡәлдәргә һалынған идея менән дә ауаздаш. “Үҙ илең – алтын бишек”, “Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул”, “Һыуға үҙәнендә, иргә илендә яҡшы” - бала саҡтан тәрбиәләнгән рухи сифаттар ярҙамында кешегә көнләшмәй, намыҫлы хеҙмәт менән хәләл икмәк табырға, үҙ эштәрең, үҙ батырлыҡтарың, изге эштәрең менән дан ҡаҙанырға өйрәтә улар. Шулай уҡ үҙеңдә төрлө ымһыныуҙарға, нәфсегә, яуызлыҡтарға ҡаршы торорҙай рухи көс тәрбиләргә ҡуша.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә лә “алдашма”, “урлашма”, “ғәйбәт һөйләмә”, “хәрәмләшмә” нәсихәттәре ярылып ята. Хайуандар образдары аша

ялғандың фашланыуы, яуызлыктың еңелеүе, изгелектең еңеүе, рухи көстөң физик көстән өстөнлөгө иҫбатлана.

Халыҡ педагогикаһында хеҙмәт тәрбиәһенә мөһим урын бирелә. “Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ”, “Эшләүең кеше өсөн булғанда ла өйрәнеүең үҙең өсөн” тиелә. Тормошоңда кәрәк булыр һөнәрҙәрҙе теләп үҙләштерергә өндәй. Мәҫәлән, “Әминбәк” әкиәтендә герой атаһы күҙлегенән һис кәрәкһеҙ һөнәрҙәргә өйрәнә, әммә быны тап ошо һөнәрҙәр уға тормошонда уңыштарға ирешергә ярҙам итә. Ошонда уҡ, кинәйә лә бар – һөнәр үҙләштерәһең икән, уны камил кимәлдә үҙләштер.

Шулай итеп, уҡыусыларҙы рухи-әхлаҡи тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһының көслө сараһы булараҡ фольклор әҫәрҙәрен ҡулланыу отошло алым тип баһаларға мөмкин.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Валеев Д.Ж. История башкирской философской и общественно-политической мысли. Основные тенденции развития. – Уфа: Китап, 2001. – 352 с.
2. Федераль дәүләт белем биреү стандарты - https://www.garant.ru/products/ipo/prime/doc/401333920/
3. Галин С.А. Народной мудрости источник. Толковый словарь башкирского фольклора. – Уфа: Китап, 2007. – 304 с.
4. Чехордуна Е.П. Героический эпос как ресурс духовно-нравственного развития и воспитания личности // Педагогика. № 6, 2012. С. 54-60.
5. Шаваева М.О. Этнопсихологический контекст современного образования // Педагогика №9. 2012. С. 71-74.
6. Маджуга А. Г., Воровщиков С. Г., Головнева Е. В., Салимова Р. М. Камертонная культура человека: концептуальные подходы к изучению феномена // Перспективы науки и образования. 2019. № 6 (42). С. 20-30. doi: 10.32744/pse.2019.6.2
7. Янбаев И.К. Мотивы «Синдбад-наме» в поучительных рассказах башкирского просветителя Хабибназара Утяки // Образование: традиции и инновации. – 2024. – №1(44). – С. 59-64.

УДК 159.123.3

АУЫЛДАШТАРЫ ХӘТЕРЕНДӘ

THE MEMORY OF THE VILLAGERS

Ф.Г. Килмакова,
учитель башкирского языка и литературы СОШ им. Б.Юлыева с. 1–е Иткулово
МР Баймакского района РБ
F.G. Kilmakova,
teacher of Bashkir language and literature B. Yulaeva Secondary School. 1st Itkulovsky MR of the Baymaksky district of the RB

Аннотация. В статье дана оценка деятельности С. Галина как ученого, как соратника. Автор уделяет большое внимание к аспекту сотрудничества

великого человека с педагогами образовательных организации нашей республики. В статье также поднимается вопрос увековечения личности.

Ключевые слова: воспоминание, личность, вклад.

Annotation. The article evaluates the activities of S. Galin as a scientist, as an associate. The author pays great attention to the aspect of cooperation between the great man and teachers of educational organizations of our republic. The article also raises the issue of perpetuation of personality.

Keywords: memory, personality, contribution.

Филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһы академигы, Рәсәй Федерацияһының Хөкүмәт премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың мәғариф отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Ғ.Сәләм исемендәге премия лауреаты Салауат Галин һуңғы китаптарының береһен “Үткән ғүмер – ҡалған хәтер” тип атағайны. Был китабында автор үҙенең тормош хәтирәләре менән уртаҡлаша. Нисәмә йылдарҙан һуң ауылдашым, уҡытыусым Салауат Әхмәҙиә улы Галин тураһында мин дә хәтирләр яҙырмын, тип кем уйлаған?

2024 йыл – Ғаилә йылы, тип иғлан ителгән, Салауат Галиндың 90 йыллығын билдәләгән йылда, ғалимдың үҫкән ғаиләһен иҫкә алып китеү урынлылыр, тип уйлайым. Салуат Галин сығышы менән Баймаҡ районының Ғәҙелбай ауылынан, атаһын ауыл Советы рәйесе итеп һайлағастар, Беренсе Этҡол ауылына күсеп киләләр. Әхмәҙиә һәм Маһикамал Галиндар ғаиләһендә ете бала тәрбиәләнә: дүрт малай һәм өс ҡыҙ. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: аталары иртә генә үлеп ҡалғас, ете баланы үҫтереп, кеше итеү әсәләре Маһикамал апай өҫтөнә төшә. Шуға ҡарамаҫтан, Маһикамал апай ныҡ тырыша, бөтә балаларына ла юғары белем алыуға ҙур көс һала. Иң өлкәндәре Салауат Галин – фән докторы, Фуат Галин – рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,оҙаҡ йылдар мәктәп директоры булып эшләне, Марат Галин –экономист, Венера Галина – рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, Булат Галин – Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, хаҡлы ялға сыҡҡансы Беренсе Этҡол ауыл дауаханаһының баш табибы булып эшләне, Айһылыу Галина – химия уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Рәшиҙә Галина – урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидиты, хаҡлы ялға сыҡҡансы Сибай институтында эшләне. Бөгөн ете баланың иң кесеһе – Рәшиҙә апай ғына тере, ул Сибай ҡалаһында йәшәй. Был ғаилә белемле генә түгел, талантлы ла булдылар. Салауат, Фуат, Булат Галиндар бергәләп башҡорт халыҡ йыры “Урал”ды йырлай торғайнылар. Галина Рәшиҙә апайҙың тауышы моңло, әле лә йырлай, ә Галина Венера апай көслө спортсы була. Галиндар үҫкән йорт, атай нигеҙе бөгөн дә бар. Йәй көндәрендә төп йортҡа туғандары ҡайтып йәшәп китәләр, ает мәжлестәре үткәрәләр, әйткәндәй, Салауат Галиндың ҡыҙы Гөлназ да йәйге ялында, бала саҡ хәтирәләрен иҫкә төшөрөп, ауылда булырға ярата.

Салауат Әхмәҙиә улы Галин ауыл менән һәр саҡ бәйләнештә булды, уның ҡайтыуын халыҡ белеп торор ине. Ул үҙ туғандары менән аралашыуҙан тыш, ауыл Советына, мәктәпкә, китапханаға, дауаханаға инеп, хәл белешеп,

ҡыҙыҡһынып торор, халыҡтың тын алышын белер ине. Салаут ағай бигерәк тә өлкән быуын кешеләре менән осрашырға яратты.

Күренекле ғалим, ауылдашыбыҙ Салауат Галин мәктәп уҡыусыларын филология фәне менән ҡыҙыҡһындырыу маҡсатынан ҙур эш башҡара.Уның ярҙамында Беренсе Этҡол урта мәктәбе менән Стерлетамаҡ педагогия институтының филология факультеты араһында бәйләнеш булдырыла, башҡорт телен, әҙәбиәтен, Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен,башҡорт фольклорын, ғәрәп графикаһын тәрәнерәк өйрәнеү маҡсатында биш йыл дауамында эксперимент үткәрелә. Был эксперимент дәрестәрҙе мәктәптә Башҡортостандың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ҡолмурзина З.З. ҡыҙы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан Респуликаһының мәғариф алдынғыһы Монасипова З.З. ҡыҙы алып бара. Ошо йылдарҙа Галин С.Ә. улы мәктәпкә йыш килә, үҙе лә уҡыусыларға башҡорт фольклорынан, Башҡортостан мәҙәниәтенән лекциялар уҡый, дәрестәр бирә. Шул осор уҡыусылары Салауат Галиндың ябайлығын, теманы яҡшы аңлатҡанын онотмайҙар, беҙҙең менән ихлас һөйләшә торғайны, тип хәҙер ҙә иҫләп алалар. Эксперимент һуңында фән докторы Салауат Әхмәҙиә улы Галин, педагогика фәндәре кандидаты, профессор Булат Баҡый улы Ғафаров, педагогика фәндәре кандидаты, профессор Төхвәт Хәлим улы Аслаев мәктәптә уҡыусыларҙан имтихан алалар. Имтихан һөҙөмтәләре буйынса ете уҡыусы Стәрлетамаҡ институтының филология факультетына уҡырға инә, ә эксперимент эшен Беренсе Этҡол мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика кимәлендә үткәрелгән коференция менән йомғаҡлап ҡуялар. Әйткәндәй, уҡыуға ингән ете студент уҡыу йортон уңышлы тамамлайҙар, уларҙың бишеһе бөгөнгө көндә һайлаған һөнәрҙәре буйынса уңышлы эшләп йөрөйҙәр: Мәхмүтов Ш.А. улы – Беренсе Этҡол мәктәбе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Йортбәков Р.Р. улы оҙаҡ йылдар Баймаҡ ҡалаһының 3-сө һанлы мәктәбен етәкләне, Мурзина Г.Х. ҡыҙы – Баймаҡта, ә Ғәлекәева Н.С. ҡыҙы, Ҡасҡынов Р.М. улы Сибай ҡалаһы мәктәптәрендә уҡыталар.

Ауылыбыҙҙың күренекле шәхесе Галин С.Ә. улы бер нисә уҡыу йылы буйына Беренсе Этҡол мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән, ошо фәндәрҙән олимпиадаларҙа алдынғы урын алған уҡыусыларға ай һайын үҙенең стипендияһын биреп барҙы. Ысынлап та, был телһөйәрҙәр өсөн ҙур стимул булды. Шуныһы ҡыуандырҙы: стипендия алған уҡыусыларҙың күбеһе филология юлынан киттеләр, юғары белем алдылар һәм бөгөн дә ошо йүнәлештә хеҙмәт итәләр. Килмәкова Г.Н. – Башҡортостан Респәбликаһының мәғариф министрылығыда, ә Иҫәнғолова Г.Д, Ҡасҡынова И.М., Килмәкова Ә.Н., Вәлитова Г.Р. – республиканың ҡала, район мәктәптәрендә һәм республиканан ситтә лә мәғариф өлкәһендә эшләйҙәр.

Салауат Әхмәҙиә улының ауыл халҡы өсөн тағы ла бер изге эшен иҫләп китмәү яҙыҡ булыр. Беренсе Этҡолда мәсет төҙөү башланғысын ауыл халҡы менән бер рәттән ситтә йәшәгәндәр ҙә дәррәү күтәреп алдылар. Был изге эшкә,

әлбиттә, Салуат ағай ҙа битараф ҡалманы.Ул тәүге көндәрҙән үк үҙ өлөшөн индерә башланы, ҙур сумма менән аҡсалата ярҙам итте, мәсет манараһы фәҡәт уның ярҙамы менән күтәрелде. Галин С.Ә. улы баҡыйлыҡҡа күскәс, ауыл хакимиәте башлығы Азаматова Г.Й. ҡыҙы, мәсеттең имам-хатибы Ғәҙелмурзин А.Х. улы, ауыл халҡы бер ҡарарға килеп, мәсеткә Салауат Галин исемен бирергә хәл иттеләр. Был тантаналы сарала ғалимдың туғандары,ҡатыны Лиза Шәмсулла ҡыҙы, ҡыҙы, сәнғәт фәндәре докторы, профессор Гөлназ Галина ла ҡатнашты.

Беренсе Этҡол ауыл хакимиәте, ауыл халҡы, мәктәп коллективы һәм уҡыусылар үҙ ауылының күренекле шәхесен онотмай, хәтерҙән сығармай. Ауыл китапханаһында, мәктәп музейында Салауат Галинға арналған мөйөш булдырылды, хәтер кисәләре үкәрелә. Район китапханаһы ойошторған “Һүҙ ҡөҙрәте” марафон – эстафетаһында беҙҙең ауыл да ҡатнашты, ғалимдың тормошон һәм ижадын яҡтыртҡан кисә ойошторҙо. Галин Салауат Әхмәҙиә улының 90 йыллығын билдәләп,мәктәптә күргәзмә булдырылды, шулай уҡ тормошона һәм ижадына арналған викторинала уҡыусылар әүҙем ҡатнашты. Мәктәптең театр түңәрәгенә йөрөгән уҡыусылар “Тел асҡысы халыҡта” исемле сәхнәләштереү менән “Башҡортостан ынйылары” бәйгеһенең район этабында ҡатнашты.Унда Салауат Галиндың ғаиләһен һәм экспедицияла йөрөгән ваҡытын күрһәттеләр. Быйыл февраль айында Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө гимназияһы ойошторған “Кейекбай уҡыуҙары” исемле республика фәнни-практик конференцияһында беҙҙең мәктәптең 7-се класс уҡыусыһы Азаматова Алтынай “Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүсе ғалим Салауат Әхмәҙиә улы Галиндың тормош юлы” темаһы менән сығыш яһаны һәм 1-се урын алды.

2009 йылдың май айында ауылдашыбыҙ, билдәле ғалим Салауат Галиндың 75 йәшлек оло юбилейын мәктәптә үткәрҙек. Был сараға юбиляр үҙе лә саҡырылғайны. Кисә-осрашыу шул тиклем ойошҡанлы үтте, фәһемле булды. Уҡыусылар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын бирҙеләр, ә Салауат ағай ихлас яуап бирҙе. Салауат Галиндың мәктәпкә һуңғы килеүе булған, тип кем уйлаған... Салауат Әхмәҙиә улы Галинды һуңғы юлға оҙатыуға бөтә ауыл халҡы сыҡты. Эйе, үткәнде ҡайтарып булмай, ә хәтирәләр мәңгелек...

УДК 80

ФИЛОЛОГИЧЕСКОЕ ОБРАЗОВАНИЕ В УСЛОВИЯХ ЭЛЕКТРОННО-ЦИФРОВОЙ СРЕДЫ

PHILOLOGICAL EDUCATION IN AN ELECTRONIC AND DIGITAL ENVIRONMENT

Л.Ф. Масалимова
учитель английского языка, МАОУ СОШ № 2 им.А.М.Мирзагитова
с. Кандры МР Туймазинский район РБ
L.F. Masalimova English teacher,
MAOU Secondary School No. 2 named after A.M.Mirzagitov
Kandry village, Tuymazinsky district of the Republic of Belarus

Аннотация: В статье рассматриваются применение информационных технологий в филологическом образовании.

Ключевые слова: Цифровизация, филологическое образование, информационные технологии, цифровая среда.

Annotation. The article discusses the use of information technology in philological education.

Keywords: Digitalization, philological education, information technology, digital environment.

Включение в филологическое образование информационных образовательных технологий позволяют достигать высоких уровней усвоения знаний, развития творческих активность, приобретать практические навыки и умения.

В информатизации общества основная цель – создать интегральный интеллект, который сможет взять в себя управление над развитием человечества. Такое общество ставит перед образовательной системой высокие требования, она должна идти на опережение, которое должно базироваться на активном использовании цифровых и информационных технологий.

Комплекс информационных образовательных ресурсов, цифровые образовательные ресурсы, нейросети являются составляющей частью информационно-методических условий по реализации основных общеобразовательных программ, которые должны быть обеспечены современной информационно-образовательной средой.

В Республике Башкортостан тоже активно идет развитие филологического образования в условиях электронной цифровой среды. Каким же образом происходит развитие?

В нашей многоязычной Республике Башкортостан развитие и роль русского языка является приоритетной задачей, он выполняет функции межнационального общения, объединяя различные национальные особенности, культуру он так же создает некий мост, позволяющим национальностям выйти на мировой уровень. Для многоязычных учащихся русский язык – это средство общения, и поэтому очень важно развития у школьников связанной речи, которая обусловлена коммуникативной направленностью.

При планировании процесса обучения русского языка и литературы в условиях реализации ФГОС и современной социокультурной среды предметниками создаются «путевые или дорожные карты». Эти карты создаются до начала учебного года, для планирования и проектирования работы, и включить в процесс электронно-цифровые ресурсы. Это способ дает отличную возможность развития интереса у учащихся изучать русский язык, достигать хороших результатов, но, безусловно, работа должна нести систематический характер. Для решения задач по овладению русским языком учащимися важно применять различные методы. Это может быть проведение литературных конкурсов, конкурсов сочинений, диспутов, конференций, викторин, квестов, тематических вечеров, классных часов, дебатов, участие на олимпиадах различных уровней.

Проведение в школе недели русского языка и литературы, недели родных языков так же способствует приобщению учащихся всех классов к русскому языку. В нашей школе так же учащиеся ежегодно принимают активное участие в конкурсе «Жива классика». Участникам конкурса предоставляется свобода отрывка, которого они будут учить наизусть. Заучивание стихотворений, прослушивание других участников помогает им работать над улучшением произношения и артикуляции.

В ходе учебно-воспитательного процесса часто возникают изменения педагогических ситуаций, и в этом важно, чтобы педагог оперативно среагировал. Во время организации учебной деятельности надо проводить как фронтальную, так и самостоятельную работу с применением информационных технологий, также использовать и работу за компьютером, с последующим обсуждением и общением с учащимися.

Во время закрепления и повторения изученных тем целесообразно использовать тесты на компьютерах, которые используются для контроля усвоения и овладением пройденных тем. Для закрепления изученных частей речи актуально применение метода мини-проектов. Данный метод подразумевает сначала работу в тетрадях, а затем создание презентацией, которые включают всевозможные анимации, мультимедийные эффекты, текстовые слайды, речь диктора. После изучения каждой части речи ученики составляют мини-проекты по каждой части речи отдельно. Сначала работают в отдельных тетрадях, потом создают слайды с текстовым изображением, снабжают анимацией, речью диктора, мультимедийными эффектами.

Эти презентации также очень эффективны при подготовке к экзаменам (ОГЭ, ЕГЭ), к олимпиадам.

После проведения комплексных анализов произведений на уроках литературы учащимся предлагается выполнять различные творческие задания. Например, составить свой сборник стихотворений любимых поэтов, эти работы также выполняются как проектные работы и потом презентуются перед классом.

Групповые и парные работы активно используются при проведении комплексных анализов стихотворений. К организации групповой работы тоже можно отнестись творчески. У каждой группы своя задача, например, одна группа отвечает лексическое оформление, другая за художественное, и так, потом каждая группа представляет свои мини проекты по каждой составляющей стихотворения, в конце всех выступлений группа «экспертов» дают оценку работ групп.

Такие работы также целесообразно проводить и во время работы с небольшими рассказами, или после просмотров художественных фильмов, анализируя систему образов, настроения, тему каждого произведения.

Управление темпами подачи материала во время использования мультимедийных презентаций очень важно, потому что это даст возможность учащимся делать какие пометки в тетрадях, списать какие-то цитаты. Также можно останавливаться на сложных моментах, объяснить или обсудить с

учащимися, обращать внимания детей особенно важных моментах, чтобы они могли применять полученную информацию. Таким образом, у учащихся сформируются учебные и информационные умения и навыки.

Итак, можно сделать вывод, что надежный помощник филолога – это электронно-цифровая среда, так как она идет на опережение всех других форм образовательной системы.

Список использованных источников и литературы

1. Воищева Э.Л., Ларина И.Б. Сочетание традиций и новаций при обучении русскому языку в условиях цифрового образования // Нижегородское образование. 2022. №3. URL: https://cyberleninka.ru/article/n/sochetanie-traditsiy-i-novatsiy-pri-obuchenii-russkomu-yazyku-v-usloviyah-tsifrovogo-obrazovaniya (дата обращения: 02.04.2024).

2. Миркурбанова Рахима Азимовна, Арипджанова Мухайё Камиловна Положительные аспекты использования ИКТ при обучении русскому языку // Достижения науки и образования. 2018. №4 (26). URL: https://cyberleninka.ru/article/n/polozhitelnye-aspekty-ispolzovaniya-ikt-pri-obuchenii-russkomu-yazyku-1 (дата обращения: 04.04.2024).

3. Шевченко Алла Николаевна ЦИФРОВАЯ ОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ СРЕДА КАК УСЛОВИЕ ПОДГОТОВКИ БУДУЩИХ ФИЛОЛОГОВ // Проблемы современного педагогического образования. 2022. №74-2. URL: https://cyberleninka.ru/article/n/tsifrovaya-obrazovatelnaya-sreda-kak-uslovie-podgotovki-buduschih-filologov

УДК 378

ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР МЕНӘН ЭШЛӘҮ ТӘЖРИБӘҺЕНӘН

FROM EXPERIENCE WORKING WITH GIFTED CHILDREN

Л.Р.Муллагалиева,
учитель башкирского языка и литературы МОБУ “Гимназия № 2 с. Бураево” МР Бураевский район РБ
L.R.Mullagalieva,
teacher of Bashkir language and literature MOBU "Gymnasium No. 2 named after Buraevo " MR Buraevsky district of the RB

Аннотация: Статья посвящена проблеме работы педагога с одаренными детьми. Автор отмечает необходимость и важность обнаружения у ребенка уникальных способностей, а также говорит об особенностях работы с одаренными детьми.

Ключевые слова: уникальные способности, одаренные дети, дети-лидеры, конкурсы.

Annotation. The article is devoted to the problem of the teacher's work with gifted children. The author notes the need and importance of discovering a child's unique abilities, and also talks about the peculiarities of working with gifted children

Keywords: unique abilities, gifted children, child leaders, contests.

Һәләтле балалар – беҙҙең киләсәгебеҙ. Уникаллек, талантлылыҡ, һәләтлек Платон заманынан уҡ кешелекте ҡыҙыҡһындырған мәсьәлә. Һуңғы йылдарҙа быға бигерәк тә иғтибар артты: Дәүләт кимәлендә маҡсатлы программа сиктәрендә “Рәсәй балалары” һәм “Һәләтле балалар “ тигән программалар ҡабул ителде. Һәм был мәсьәлә бөгөнгө көндә лә бик актуаль булып тора.

Һәләтле һәм талантлы балаларҙы асыу, уҡытыу, тәрбиәләү – мәғрифәт системаһының төп проблемаларының береһе. Быны хәҙерге йәмғиәткә белемле, әүҙем, ижади ҡарашлы, төрлө ситуацияларҙа ла юғалып ҡалмайынса эффектив ҡарар ҡабул итә алырҙай шәхестәрҙең кәрәклелеге менән аңлатырға була.

Тәбиғәт кешегә сикһеҙ мөмкинселектәр биргән. Шуға ла һәр бер бала тыумыштан нимәгә булһа ла һәләтле. Тик был һәләттәрҙе ваҡытында күреп, уны үҫтерә белеү зарур. Был үтә лә яуаплы эш ата-әсәнең һәм уҡытыусыларҙың ҡулында.

Һәләтле бала үҙенең фекерләү ҡеүәһе, төрлө фәндәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлығы менән башҡаларҙан айырылып тора. Ғәҙәттә, уларҙың хәтере яҡшы үҫешкән, фекерләүе үҙенсәлекле була. Улар бөтә фәндәрҙән дә яҡшы өлгәшәләр, төрлө түңәрәктәргә йөрөйҙәр, мәктәптә, ҡала һәм республика кимәлендә үткәрелгән төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, конференцияларҙа әүҙем ҡатнашалар.

Балаларҙың һәләтен асыу ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Бының өҫтөндә бер көндә, бер аҙнала, бер айҙа, хатта бер йыл эсендә генә эшләү мөмкин түгел. Уның өҫ өндә уҡыу процесында ла, дәрестән тыш ваҡыттарҙа ла – бер туҡтауһыҙ өҙлөкһөҙ эшләргә кәрәк. Был процесты баһалау өсөн оҙайлы рәүештә эш алып барыу мөһим. Уҡытыусы баланың һәләтен ваҡытында күреп, уны үҫтереүҙә, дөрөҫ юл күрһәтеүҙә баһалап бөткөһөҙ ҙур роль уйнай.

Эш тәжрибәһенән сығып әйткәндә, һәләтле балалар менән ошондай төрҙәге эштәр алып барыла:

- башҡорт теленән төрлө олимпиадалар (шул иҫәптән дистанцион);
- конкурстар;
- ғилми-ғәмәли конференциялар.

Бөгөнгө көндә башҡорт теленән байтаҡ олимпиадалар бар. Әлбиттә төп олимпиада Башҡорт теленән регион-ара олимпиада. Ул этаплап үткәрелә: мәктәп этабы, муниципаль этап һәм аҙаҡтан регион-ара этабы. Олимпиадаларҙа, әлбиттә, әҙерлекһеҙ генә уңышҡа өлгәшеп булмай. Шуны ла әйтергә кәрәк, олимпиадала призер, бигерәк тә еңеүсе әҙерләү өсөн унда ҡатнашыусы уҡыусыны башҡа уҡыусылар менән бер рәттән уҡытыу, әҙерләү генә етмәй. Индивидуаль ҡараш, шәхси әҙерлек талап ителә. Һәм бер йылда ғына олимпиада призерын, бигерәк тә еңеүсеһен етештереп, әҙерләп булмай. Йылдар буйына эшләү тәжрибәһенән сығып уның өсөн эште йыл буйына өҙлөкһөҙ алып барырға кәрәклегенә төшөндөм һәм ҡулымдан килгәнсә шулай эшләйем. Был тик олимпиадаға әҙерләнеп ултырабыҙ тигән һүҙ түгел. Олимпиадала иң беренсе кәртә беҙҙең юлда , бигерәк тә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнселергә, - уҡыусыларҙың телмәре. Сөнки беҙҙең уҡыусылар төньҡ-көнбайыш диалектында аралашалар. Уҡыусылар диалектта һөйләшә

икәне беҙгә билдәле, ә олимпиадала тыумыштан башҡорт әҙәби телендә аралашыусы уҡыусылар менән көс алышырға тура килә уларға. Теоретик материалды яҡшы белгән осраҡта ла, әгәр уҡыусының телмәре юҡ, ҙ,ҫ өндәрен әйтә белмәй, әҙәби телдәге һүҙҙәрҙе ҡуллана белмәй, йәки диалекталь һүҙҙәр йыш ҡуллана икән уңышҡа юл бикле тигән һүҙ. Шуның өсөн иң беренсе нәүбәттә телмәр өҫтөндә эшләйбеҙ. Быны мин дәрестә үк рәткә һалғанмын: дәрестә үҙем дә, уҡыусылар ҙа тик әҙәби телдә һөйләшәбеҙ, хаталарҙы төҙәтә барабыҙ. Мин бер ҡасан да ярай инде, шулай һөйләшә инде тигәнгә юл ҡуймайым, уны уҡыусылар белә, шуға күрә тырышалар. Телмәр өҫтөндә эшләү һуңғы йылда бигерәк тә ҡатмарланды. Сөнки бишенсе класҡа уҡырға килеүсе уҡыусылар тик рус телендә генә һөйләшә әҙәби телде түгел, диалектты ла белмәй, аңламай, һөйләм төҙәй алмайҙар. Шуның өсөн үткән йылды бөтә уҡытыу системамды тулыһынса үҙгәртергә тура килде. Дәрес башында байтаҡ ваҡытты һөйләм төҙөүгә, телмәр үҫтереүгә бүлергә тура килә. Һәр дәрестең башында бөтә уҡыусы менән дә эшләп сығабыҙ. Үҙҙәре һайлаған йәки мин тәҡдим иткән тема буйынса кескәй генә текст, кемгә ауырыраҡ айырым һөйләмдәр төҙәйбеҙ. Быға тиклем ошо тема буйынса терәк һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр яҙам таҡтаға, шулар менән эш итәбеҙ. Алға китеш бар.

Телмәрҙәре үҫешеү йәһәтенән ошо уҡыусыларҙы башҡа төрлө бөтә сараларҙа ҡатнаштырам: башҡорт телендәге төрлө сараларҙа, концерттарҙа йә алып барыусы, йә берәй персонаж булараҡ. Башҡорт теленән КВН да ҡатнашыуыбыҙ ҙа тап шул йәһәттән. Был осраҡта инде улар ҙур аудитория алдында ла иркенләп сығыш яһарға өйрәнә, телмәрҙәре үҫешә, байый. Шуның өсөн һәләтле балаларҙы үҫтереүҙә дәрестән тыш саралар һәм түңәрәктәр эше мөһим фактор булып тора.

Белеүебеҙсә һуңғы йылдарҙа олимпиадаларҙа тап телмәр үҫешкәнлеген тикшереү буйынса эштәр бирелә: диалог төҙөү, ниндәйҙер проект әҙерләү, зум аша түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыу. Әҙерлекһеҙ бирелгән темаға сығыш яһау, жюри ағзаларының, олимпиадала ҡатнашыусы башҡа уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап биреү. Бында телмәр үҫешкәнлегенән тыш уҡыусының үткерлеге, батырлығы ла кәрәк. Улар башҡаларҙан алдараҡ яҡшыраҡ сығыш яһарға, башҡа кеше әйтеп өлгөргәнсе үҙ фекереңде еткерә алыу мөһим булып сыҡты. Психологик яҡтан да ныҡлы әҙерлек кәрәк ине. Бөтә ерҙә лә ҡатнашып йөрөгән уҡыусыға, әлбиттә, был проблема түгел. Ә теретик материалға килгәндә, йыл да әҙерләнеп йөрөгән уҡысыға күпкә еңел. Ул байтаҡ материалды үҙләштергән, онотолғанын йыл да, ҡабатлап, хәтергә генә төшөрә бара. Был йәһәттән һәр береһенең махсус дәфтәре бар. Ҡайҙа нимә яҙғанын үҙҙәре белә, кәрәк саҡта йәһәт кенә хәтергә төшөрөп алалар. Был, беренсенән. Икенсенән, башҡа олимпиадаларҙа ҡатнашыу ошо төп олимпиадаға ныҡлы әҙелек булып тора. Мәҫәлән Гагарин олимпиадаһы. Шул уҡ уҡыусылар бында ла ҡатнаша, башҡа бөтә олимпиадға ҡарағанда ла уның һорауҙары ҡатмарлыраҡ тойола. Ул да бер нисә этапта үткәрелә. Һәм бер нисә йыл инде Аҡмулла олимпиадаһында ҡатнаштыҡ. Был олимпиада ла өс этаптан тора, һуңғы йылдарҙа бигерәк тә ҡатмарландырылды: БДИ формаһында, ижтимағи проект һ.б. Йыл һайын

БДУның Стәрлетамаҡ филиалы дистанцион олимпиада үткәрә, Бөтә рәсәй кимәлендәге Глобус платформаһында үткән башҡорт теле олимпиадаһы ла бар. Олимпиадалар, конкурстар байтаҡ, тик ваҡытын белеп, әҙерләнеп ҡатнашып ҡына өлгөрөргә кәрәк.

Йомғаҡлап шуны әйткем килә: һуңғы йылдарҙа уҡыусыларҙың үҙҙәренә лә был еңеүҙәр, ҡатнашыуҙар байтаҡ файҙа килтерә. Беренсенән, уҡырға ингәндә өҫтәмә балдар бирә. Белеүегеҙсә БГМУ ға ингәндә лә хатта 10 балға тиклем өҫтәй. Хатта еңеүсе, призер булмаған осраҡта ла был ҡатнашыуҙарҙың уҡыусыларға файҙаһы иҫ киткес. Сөнки улар кеше алдында сығыш яһарға өйрәнә, юғалып ҡалмай башлай, үткер, үҙ фекерен әйтә ала торған шәхес булып үҫешә. Киләсәктә ниндәй генә уҡыу йортона ингәндә лә был күнекмәләр уларға кәрәк (универсаль уҡыу эшмәкәрлектәре формалаша: коммуникатив, шәхсән, регулятив, танып-белеү (өҫтәлмә материалдар ҙа ҡарайбыҙ), уларҙы уңыш көтә.

Һәләтле баланың бер сифаты – яңылыҡҡа ынтылыусан, тип билдәләгән инек. Ысынлап та, замана балаларына заманса ҡараш кәрәк. Тимәк, уҡытыусы ла заманға тура килергә: заманса фекерләргә, үҙенең эшендә заманса технологиялар менән эш итергә бурыслы.

Балаларҙың һәләттәрен асыу һәм үҫтереү өсөн түбәндәге шарттарҙың булыуы мотлаҡ:

- уҡытыу һәм тәрбиә эшендә яңы технологиялар;
- уҡытыусыларҙың квалификацияһы;
- уҡыу йортоноң матди-техник базаһы.

Был йәһәттән дә беҙгә уңайлы. Мәктәпкә, конкурста еңеп, өр-яңы йыһаз ҡайтты. Уҡыусыларҙы олимпиадаға әҙерләүҙә “ЯКласс” платформаһы ла миңә ярҙамға килә. Мин унда үҙемдең махсус башҡорт теле предметын булдырғанмын һәм һуңғы йылдарҙа федераль кимәлдә булдырылған “Башҡорт теле” предметы ла бик ҡулай. Әйтәйек, уны булдырыуҙа ла мин әүҙем ҡатншатым. Тел ғилеменең бөтә бүлектәре буйынса эштәр төҙөлгән. Ундағы эштәрҙе уҡыусыларға үҙем дә һалам, улар үҙҙәре лә инеп, эшләп шәхсән олимпиадаға әҙерлек алып бара ала.

Һәләтле балаларҙы асыҡлау һәм уларҙы үҫтереүҙә ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә эшләү ҙә ҙур роль уйнай. Уҡыусының үҙенең теләге, ата-әсәһенең ризалығынан тыш эшләп булмай.

Һүҙҙе йомғаҡлап шуны әйтке килә: һәләтле балаларҙы асыу, уларҙы үҫтереү эше системалы эш алып барғанда ғына үҙенең емештәрен бирәсәк. Шуның өсөн был эштә бөтә көстәрҙе берләштерһәк, йәғни, ғаилә, мәктәп, юғары уҡыу йорттары, ғилми коллективтар ойошоп эшләгәндә яҡшы һөҙөмтәләр үҙен оҙаҡ көттөрмәҫ, тип уйлайым.

УДК 370.35

ИЛҺӨЙӘР ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮ – ТУҒАН ТЕЛ УҠЫТЫУСЫҺЫНЫҢ ТӨП БУРЫСЫ
EDUCATION OF A PATRIOTIC PERSONALITY IS THE MAIN TASK OF A NATIVE LANGUAGE TEACHER

М. Н. Муратшина,
учитель башкирского языка и литературы, МБОУ «Лицей № 161», г. Уфа
M. N. Muratshina,
teacher of Bashkir language and literature, MBOU"Lyceum No. 161", Ufa

Аннотация: Статья посвящена воспитанию патриотизма у подрастающего поколения. В статье рассматривается значение слова патриотизм, показываются различные формы, и приемы воспитания детей через пример личности.

Ключевые слова: патриотизм, личность, пример.

Annotation. The article is devoted to the education of patriotism among the younger generation. The article examines the meaning of the word patriotism, shows various forms and methods of parenting through the example of a personality.

Keywords: patriotism, personality, example.

Йәш быуынды патриотик йәғни илһөйәрлек рухта тәрбиәләү - белем биреү усағының уҡытыу программаһына индерелгән мөһим йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Ни өсөн тигәндә, тап Ватан яҙмышы, кешелектең киләсәге ана шул уҡыусыларҙың бөгөн ниндәй тәрбиә алыуына бәйле. Тап бөгөн һалынған изгелек орлоғо шытып сығып, киләсәктә үҙ емешен бирер..

Беҙ, туған тел уҡытыусылары, быны һәр ваҡыт күҙ уңында тоторға һәм ошо йүнәлештә эшләргә тейешбеҙ. Әлеге көндә йәмғиәтебеҙ үҙгәрештәр осоро кисерә, тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрендә лә тиерлек юғары технологиялар, яңы алымдар ҡулланыла. Туған телдәрҙе уҡытыуҙың яңы концепцияһын булдырыу, был өлкәлә этнопедагогика ҡаҙаныштарына нигеҙләнеп эш итеү үтә мөһим һәм көнүҙәк проблема булып иҫәпләнә. Тел уҡытыусыларының маҡсаты – уҡыусыларға телдең рухи һәм мәҙәни хазина икәнлеген аңлатыу һәм уны танып белеүҙең мөһимлегенә төшөндөрөү, этномәҙәни ҡиммәттәрен формалаштырыу**.** Бөгөн белем алыу һәр шәхестең үҙ аллы эшмәкәрлегенә ҡайтып ҡала, йәғни уҡытыу-тәрбиә эше уҡыусыла үҙе өсөн кәрәкле белемде артабан үҙ аллы алыу ихтыяжын булдырыуға нигеҙләнә. Минеңсә, дәрестәрҙә, дәрестән тыш та уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ мәғлүмәттәр килтерергә кәрәк. Мәҫәлән,

– Зәки Вәлиди, ябай ауыл малайы, 16 тел белгән. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ – быға ул нисек өлгәшкән? Йә иһә, ул ниндәй телдәр белгән?

– Кем ул И.Тасимов?

– 1812 йылда француздарҙы еңгәс, башҡорттар матур кейемдә парадта ҡатнашҡан. Шул тиклем һуғыш юлын үткән һалдаттар уны ҡайҙан алған? h.б.

Уҡыусыларҙа башҡорт рухы, милләткә ҡарата ихтирам, телгә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа был алым иң отошлоһо, тип уйлайым. Һәр арҙаҡлы шәхес буйынса төҙөлгән ЛОТО уйынын да уҡыусылар бик ярата.

Фольклорҙың тәрбиә нигеҙе булыуын Әхмәтзәки Вәлиди Туған миҫалында ҡарап үтәйек. Вәлиди Туған – башҡорт халҡының, бөтә төрки халыҡтарҙың, донъя халыҡтарының бөйөк шәхесе. Австрия ғалимы Герберт Янски 1950 йылда: “Зәки Вәлиди Туған – бөйөк ғалим һәм бөйөк инсан”, - тип әйткән. Ысынлап та, ул беҙҙең өсөн баһалап бөткөһөҙ ғорурлыҡ, тормош маяғы, күптәребеҙҙең йәшәү идеалы. 1937 йылда уҡ күренекле немец профессоры П. Каале: ” Рус профессоры Бартольд үлгәндән һуң, Зәки Вәлиди үҙенең Урта Азияның тарихын һәм географияһын шәп белеүе менән был өлкәнең тере корефейы (йәғни, иң күренекле эшмәкәре. авт.) булып тора”, - тип әйтә. Ә шәрҡиәтсе Карл Ян Әхмәтзәки Вәлидиҙең вафатына ҡарата: ”19 быуат аҙағы 20 быуат башындағы рус тарихсылар мәктәбе йәшәүенән туҡтаны, сөнки В.Бартольд һәм В. Минорский артынан Әхмәтзәки Вәлиди Туған да китте”,- ти.

Сит ил ғалимдары тарафынан ниндәй оло баһалауҙар!

Халҡымдың бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тормош юлын, тәрбиә ҡанундарын өйрәнгән, белгән кеше һис шикһеҙ яҡшылыҡҡа ынтыласаҡ, тыуған иле яҙмышы өсөн ниндәйҙер кимәлдә яуаплылыҡ тойғоһо кисерәсәк. ”Әхмәтзәки Вәлиди ябай ауыл малайынан бөтә донъяға билдәле булырлыҡ шәхес кимәленә нисек күтәрелгән?”-тигән һорау күптәрҙе борсой. Әлбиттә, барыһы ла тәрбиәнән килә, ә тәрбиә нигеҙе - ғаилә, ата- әсәй.

Ата- әсәһенә Әхмәтзәки Вәлиди ғүмер буйы рәхмәтле булған. Ни өсөн? Беренсенән, әсәйе улындағы һәләттәрҙе ваҡытында күреп, дөрөҫ йүнәлеш бирә белгән. Икенсенән, ул бәләкәй Әхмәтзәкигә әҙәби фарсы телен өйрәткән; ғәрәп, фарсы телдәрендә шиғырҙар ятлатҡан, халҡының үткәндәре тураһында хикәйәләр һөйләгән; Тыуған иленә, халҡына һөйөү осҡондары сәскән. Намаҙ ниәттәрен дә фарсы телендә өйрәткән. Кемдер:”Ниңә барыһы ла фарсы, ғәрәп телдәрендә?”- тип һорар. Әсә күңеле алдан һиҙеүсән, улының донъя кимәленә сығырын, тарихты, күберәк телдәрҙе белһә, бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясағын белеп, алдан әҙерләгәндер. (Ғөмүмән, үҙен мосолман тип һанаған кеше кәм тигәндә өс тел белергә тейеш булған. Тәү сиратта ғәрәп, фарсы телдәре). Әхмәтзәки Вәлиди:”1918 йылда Ырымбурҙа Советтар һәм 1944 йылда Төркиәлә Исмәт паша тарафынан төрмәгә ябылып, китап уҡыуҙан мәхрүм ителгәс, әсәйемдән өйрәнгән шиғырҙарҙы, Йәсәүи мөнәжәттәрен уҡыр инем. Шул ваҡыт әсәйем тәьҫиренең ни тиклем мөһим булғанлығын аңланым. ... әсәйем иһә һаҡсы фәрештә кеүек һәр саҡ янымда булды. Әсәйемдең иң ныҡ йәлеп иткән сифаты – күңелендә әҙәпкә өндәгән бихисап әхлаҡи шиғырҙар һаҡланыуы. … Уның миңә өйрәткән фарсыса һәм төрөксә шиғырҙары тик әхләҡи шиғырҙар ғына түгел ине, улар араһында әҙәби- эстетик шиғырҙар ҙа бар ине”,- тип яҙа (1. 31-32) Бына ҡайҙан килә икән ғалимыбыҙҙың юғары әхләҡи тәрбиәһе! Әхмәтзәки Вәлиди әсәһе һүҙенең кинәйәле һәм зауыҡлы булыуына, һәр саҡ шиғыр ҡушып, һәр һөйләмен боронғолар һүҙе менән нығытып, тапҡыр мәҡәлдәр әйтеп һөйләшеүе тураһында ла ғорурланып яҙа.

Әхмәтзәкиҙең тормошонда атай тәьҫире сикһеҙ ҙур. Ул үҙенең “Хәтирәләр”ендә:”Атайым ябай һәм изгелекле кеше булды... Абруйы ҙур

булыуға ҡарамаҫтан, шәкерттәренә һәм улдарына арҡадаш һәм ғәҙел атай булараҡ мөғәмәлә итә торған ине. Ғүмер буйы ауыҙына бер тамсы эсемлек алманы, ғаиләлә намаҙ мәжбүри булды. Сиктән тыш тәртип яратҡан кеше ине. ... атайымдың"дин" менән "тормош" эштәрен айырым тота белеүе һәм, "тормош"эштәрен шәриғәткә ҡапма- ҡаршы ҡуймайынса, ғөрөф- ғәҙәткә тоғро ҡалыуы миңә ыңғай тәьҫир яһаны",-тип яҙа. (1.29) Атайы улдарына халҡының ғөрөф –ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәтеп, күренекле кешеләр менән аралаштырып үҫтерә. "Яҡшыға юлыҡһаң-уңырһың, яманға юлыҡһаң- туңырһың",- тигән мәҡәл дә бар бит. Әхмәтзәки Вәлидигә был шәхестәрҙең йоғонтоһон күреү өсөн, уларҙың исемдәрен һанап китеү ҙә етәлер тип уйлайым. Бына улар: Маҡар ауылынан Ҡармыш улдары: Ғүмәр хажи-кантон рәйесе, Йософ – майор (халҡыбыҙ уға арнап йырҙар ҙа сығарған. Был йырҙарҙы доктор Ғәлимйән Таған һәм профессор Янски Вена Фәндәр академияһы нәшриәтендә баҫтырып сығаралар); Алағуян ауылынан Ҡасҡынбай улдары: Шәмсетдин мулла-унтер-офицер, Ибраһим Ә. Вәлидиҙең иң яҡын дуҫы, бик уҡымышлы, һәләтле кеше булған; Стәрлетамаҡта йәшәүсе Нуғай улдары Шәрәфетдин һәм Камал, Ғәриф Һайрани һәм Хызыр мулла; Һайран ауылынан Әбсәләм һәм улы Бикбулат мулла; Йомағужа ауылынан Солтангәрәй; Ҡоншаҡ ауылынан Ғәлләм; Стәрлебаштан Ниғмәтулла һәм Зәйнулла; Уралдың көнсығышынан Муллаҡай ауылынан Сәйет улы Ғабдулла; Ҡулбахтынан Ханнан һәм Троицкиҙан Зәйнулла ишан һәм башҡа бик күп үрнәк алырлыҡ шәхестәр. Әзмәтзәки Вәлидиҙең рухи үҫешенә халыҡ ижады аша ҙур өлөш индергән кешеләрҙең тағы береһе Муллағол диуана була. Әсәһе был дәрүиштең төркисә һәм фарсыса шиғырҙарын ятлап, ҡайһыларын яҙып алып, бәләкәй Әхмәтзәкигә аңлатыр булған. Уларҙың барыһы ла дини һәм әхлаҡи шиғырҙар.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең атаһы йылына бер тапҡыр был дуҫ-иштәренең хәл-әхеүәлен белешеп, кәңәш ҡороп ҡайтҡан. Ошо сәйәхәттәрҙең өсөһөндә Әхмәтзәки ҙә ҡатнашҡан. Уларҙың сәйәхәте һәр ваҡыт Троицк ҡалаһында Зәйнулла шәйехте барып күреү менән тамамланған. "Сәйәхәт ай ярымға һуҙыла ине",-тип яҙа Ә. Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә. 1906 йылда барғандарында Зәйнулла шәйех Әхмәтзәкиҙе һанап та ҡарай. Ун тинлек алтын аҡса бирә һәм бер нисә көндән нимәгә тотонғанын һораша, уның алған китаптарын хуплай."Русса беләһең, французса ла өйрәнә алһаң, бик яҡшы булыр",- тигән кәңәшен дә әйтә. Аҙаҡ ул был турала:"Әгәр шәйехтең дәртләндереүе булмаһа, мин, ихтимал, күптәр кеүек, ун биш йәшемдән сауҙа эшендә приказчик булып китер инем",-ти. Атайының бик яҡын дуҫы Ризаитдин Фәхретдин дә Ырымбурҙа осрашҡандарында Әхмәтзәкигә бик яҡшы кәңәштәр бирә. Ҡазанға килгәс, Ә. Вәлиди Катанов һәм Ашмарин менән таныша, сит ерҙә уларҙың уға йоғонтоһо көслө була.

Әхмәтзәкиҙе тәрбиәләүҙә уның олатайҙарының, яҡын туғандарының өлөшө ҙур булған. Атайының ҡустыһы Вәли мулла боронғо дастандарҙы бик күп белгән (Әхмәтзәкигә лә өйрәткән, ул унан бер нисәүен яҙып та алған). Әҙип "Хәтирәләр"ендә: "Быларҙың барыһы ла, ырыуыбыҙҙың үткәндәре хаҡындағы риүәйәттәр булыу менән бергә, минең рухи үҫешемә тәьҫир итеүсе көс ине",-

тип яҙа. Төркиәлә ул Туған фамилияһы ала, ул уның, Кәмәлек яғында рустарға ҡаршы һуғышта үлеп ҡалған, бишенсе быуын Иштуған бабаһының исеменең бер өлөшө. Хәбибназар олатаһына Әхмәтзәки ихтирам менән ҡараған. Уның бай китапханаһында ул ятып –тороп йөрөгән. Олатаһы заманында Шиһабетдин Мәржәни мәҙрәсәһендә уҡыған, шунда уҡ эшкә ҡалдырылған, китап яҙған, тәржемә менән шөғөлләнгән. Аҙаҡ Үтәктә үҙ мәҙрәсәһен асҡан. Әхмәтзәкигә ғәрәп телен, әҙәбиәтен өйрәткән. Ейәненең етешһеҙ яҡтарын да ваҡытында күреп, уларҙы төҙәтеп ебәреүсе лә ул була. Атайы менән аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡҡанда ла олатайы матур итеп, бер кемде лә үпкәләтмәй, ата менән ул араһын яйға һала.

Халыҡта: “Дуҫ дуҫтың көҙгөһө”,- тиҙәр. Әхмәтзәки Вәлидиҙең дуҫтары ла уҡыуға һәләтле, тырыш, йыр- моңға маһир, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белгән егеттәр була. Балалыҡ дуҫы - Ибраһим Ҡасҡынбай тураһында Ә.Вәлиди: “Ул …ғәрәп, фарсы, рус телдәрен миңә ҡарағанда яҡшыраҡ белде. …ҡурайҙа уйнаған көйҙәренең иҫәбе юҡ. Тауышы ғәжәп моңло һәм яғымлы булды”,- тип яҙа үҙенең “Хәтирәләр”ендә. Шулай уҡ Әхмәтзәки дуҫының кешелекле, аҡыллы булыуына ла һоҡлана. Ғәзиз дуҫы тураһында Әхмәтзәки Вәлиди: “…аҡыллы һәм шағир егет ине ”,- ти. Русса уҡый, аҙаҡ ғәскәри мәктәпте тамамлай. 1917 йылда милли хәрәкәткә ҡушыла, Әхмәтзәки менән бергә була. Ошо исемлектән, күренеүенсә, әҙиптең дуҫ-иштәре әҙәпле, аҡыллы, уҡыуға ынтылған, Тыуған Башҡортостанының үткәнен яҡшы белгән, уның киләсәге өсөн янған –көйгән егеттәр булған.

Күренекле әҙип, һоҡланғыс шәхес, аҡыллы сәйәсмән Әхмәтзәки Вәлидиҙең кеше булараҡ формалашыуына уның ата - әсәһенең, туғандарының, дуҫтарының, таныш-белештәренең йоғонтоһо ҙур.

Список источников и литературы

1. Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Өфө,1997
2. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. «Хәтирәләр». Өфө,1996
3. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. «Башҡорттарҙың тарихы». Өфө,1998
4. Шәкүр Рәшит. «Арҙаҡлы башҡорттар». Өфө,1998

УДК 159.923

КИҢ ҠАРАШЛЫ ШӘХЕС

A PEACEFUL PERSON

Д.В.Мухамадеева,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ №2 г. Ишимбай
D.V.Mukhamadeeva,
teacher of Bashkir language and literature, MBOU Secondary School No. 2 Ishimbai

Аннотация. Статья – слово студента о своем педагоге, о его влиянии в становление личности, о его уроках жизни.

Ключевые слова: личность, жизненные уроки, научные труды.

Annotation. The article is a student's word about his teacher, about his influence in the formation of personality, about his life lessons.

Keywords: personality, life lessons, scientific works

Үткән ғүмер һуғылған аҫалы балаҫ кеүек.Ундағы һәр аҫаның үҫ көсө, үҫ ырымы,үҫ мәғәнәһе бар. Ошондай фәлсәфәле сағыштырыуым башҡорт әҫәбиәтен, уның ауыҫ-тел мираҫын һаҡлаусы, халыҡҡа таратыусы күренекле ғалим һәм педагог, профессор Салауат Әхмәҫиә улы Галинға арнала. Уның да аҫалы балаҫы халыҡсанлығы, эпик мәғәнәһе, зауыҡлы төҫтәрҫә балҡышы менән күңелемде имләй**,** шәхес булараҡ уйландыра, ирекһеҫҫән ҡулға ҡәләм алаһың.

Үҫенең ижад емешен остазым халыҡтан берәмтекләп – бөртөкләп йыя һәм ғалим – фольклорсы дәрәжәһен яулай.

Эйе, 1981 йылда Ҡол Ғәлиҫең «Йософ һәм Зөләйха» темаһына диплом эшен яҫғанда, уның оло аҡыл эйәһе булыуына ҡарамаҫтан, ер кешеһенә хас ябайлығын, ярҫамсыллығын шул уҡ ваҡытта талапсанлығын тойҫом һәм әле лә уға рәхмәтлемен. Иғтибар итегеҫ, төрки донъяһына билдәле оло дастан буйынса ғилми эш яҫыу - 5-се курс студенты өсөн ҡатмарлы бурыс - үрелеп етә алмаҫлыҡ бейеклек кеүек ине... Ләкин янымда көслө рухлы, Шәреҡ донъяһына мөкиббән ғашиҡ Салауат Әхмәҫиә улы булыуы барса ҡыйынлыҡтарҫы еңеп сығырға ярҫам итте. Хатта шул Шәреҡ донъяһы матурлығы, 13-сө быуаттың беренсе яртыһында йырланған саф кешелек мөнәсәбәттәре –аҡыл, тоғролоҡ, кешене ярлыҡау һәм ғәфү итә белеү мине әсир итте һәм бөгөн дә исламдың рухи ҡиммәттәренә таянып йәшәүем менән көслөмөн.

Айырыуса эшләй башлағас, 1994, 2001йылдарҫа Өфөлә белемде камиллаштырыу курстарында остазымдың лекцияларын һыуға сарсаған үҫемлек кеүек йотлоғоп тыңланым, уны – уҡытыусымды бөтөнләй икенсе яҡтан астым. Ғалимыбыҫ «Дин тарихы», «Ислам һәм мәҫәниәт» темаларын халыҡ ижадына бәйләп алып бара һәм беҫҫе – рухиәтебеҫҫе, таҫарта барған.

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйтә бит: «Ҡөрьән фекер итә белеүселәр өсөн», тип. Шул рәүешле фекерләү даирәһен киңәйтеүгә юл ярылды һәм тормошомда яңы һулыш асылды тиһәм, хата булмаҫ. Салауат Әхмәҫиә улы үҫ өлгөһөндә беҫҫе төрлө яҡлы шәхес итеп күрергә теләне.

Остазымдан рухи яҡтан сәләмәт, үҫ аллы, маҡсатлы, был донъяла үҫ урынын таба алырлыҡ көслө шәхесте нисек үҫтерергә һуң, тигән һорауға дөрөҫ йүнәлеш алдым. Көндәлек педагогик эшемдә уның ижад аша тәрбиәләү концептын һәр ваҡыт ҡулланам һәм телде ихтирам иткән, халҡыбыҫ традицияларын һаҡлай белгән ҡыҫ һәм улдар тәрбиәләйем. Был хеҫмәтем дә уҡытыусыма оло рәхмәтем ул...

Салауат Әхмәҫиә улы исламдың бөйөклөгөн, ҡөҫрәтен, диндең ысын мәғәнәһен асып бирә алды, уны ғилем аша ябай тел менән аңлата алды. Шуға диндең халҡымдың йолаларын, тарихын, телен һаҡлауҫағы роле ҫур икәнлеген ул һәр саҡ һыҫыҡ өҫтөнә ала килде.

«Тел –Аллаһтың хикмәте, бүләге, туған телең менән күп нәмә күсә. Мәҫәлән, мәҡәлдәр аща телде өйрәнеү күпкә еңелерәк. Күп мәҡәлдәребеҫ хәҫистәрҫән килә бит», – ти торғайны ул. Хәҫис – Аллаһы Тәғәләнең Мөхәммәт

пәйғәмбәргә әйткән һүҙәре, тип миҫалдар килтерер ине: «Ашыҡҡан ашҡа бешкән », «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы», « Әйткән һүҙ – атҡан уҡ » һ.б.

Ә йолаларҙы һаҡлауҙа әҙәбиәттең ролен ул Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы миҫалында күрә : унда 38 йола табырға тип эш бирә торғайны. Ысынлап та, беҙ быға хайран ҡалып ултыра инек. Шулай итеп, Салауат Әхмәҙиә улының алдан күреүсәнлеге, ижади тойомлауы көслө ине. Диндең ысын мәғәнәһе – әхлаҡи тәрбиә икәнлегенә баҫым яһап, кешенең кеше булып ҡалыуына иғтибарын йүнәлтә торғайны.

Нинһайәт, йәмғиәтебеҙҙә рухи – әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәре билдәләнде – 2022 йылдың 9 ноябрендә тап ошо хаҡта Указға ҡул ҡуйылды һәм рухи – әхлаҡи ҡиммәттәрҙең төп 17 йүнәлеше тылҡып бирелде. Юғары әхлаҡлылыҡ – тимәк, ул илһөйәрлек, Тыуған илгә хеҙмәт итеү һәм уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡ, коллективлыҡ тойғоһо, ғәҙеллек, изгелек, тарихыңды белеү, матур, татыу ғаиләле булыу. Был документтағы фекерҙең остазым һүҙҙәренә тап килеүе мине һоҡландыра.

Һүҙемде йомғаҡлап, уның әле лә ҡолағымда сыңлаған фәһемле кәңәшен яңғыратырға уйлайым: «... Милләттең бөтөнлөгөн һаҡлау – милләт балаларының үҙ халҡындағы изге ғәҙәттәрен һаҡлап, башҡа милләт тәьҫиренә бирелмәү менән генә була. Әгәр кеще үҙенең милли йолаларын тащлаһа, ул милләт бөтөүгә бара тигән һүҙ. Ғилем алыу – бөйөк бер ғәмәл, уны өйрәнгәндә милләткә хеҙмәт итеү маҡсаты менән өйрәнергә кәрәк ».

Мәҡәләмдең башында халҡыбыҙҙың аҫалы баласы ҡиммәте тураһында фекер әйтелгәйне. Бына Остазымдың да аҫалы күңел баласы илебеҙгә рух, иман һәм терәк – таяныс булып хеҙмәт итә...

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Галин С.А. Заман һәм фольклор. Өфө. 1967
2. Галин С.А. Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары. Өфө. 1981.
3. Галин.С.А. Һүҙ күрке – мәҡәл. Өфө, 2003.
4. Галин.С.А. тел асҡысы халыҡта. Өфө. 1993. 1999.
5. Галин.С.А. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Өфө, 2004, 2009.
6. Галин.С.А.Народной мудрости источник.Уфа, 2007.
7. Дәүләтшина Һ.Һайланма әҫәрҙәр. –Өфө:Китап,2005.-428 бит.
8. Ибраһимов Х. Йәмғиәтебеҙҙә бөгөн әхлаҡлылыҡ кимәле ниндәй дәрәжәлә һәм был юҫыҡта һеҙҙе борсоған йәки ҡыуандырған мәсьәләләр бармы? // Киске Өфө . - 2024. -№ 14, 2- се бит.

УДК 398

СӘСӘН ҺҮҘЕ – АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ

SASEN'S WORD IS THE MIND ITSELF

Р.М.Мухаметова,
учитель башкирского языка и литературы ГБОУ БКК ПФО им. А.В.Доставалова
R.M.Mukhametova,
Teacher of Bashkir language and literature GBOU BKK PFD named after A.V.Dostalovo

Аннотация. Статья посвящена юбилею ученого-фольклориста С.Галина. Прослеживаются основные этапы его научной биографии, вклад ученого в исследование творчества сэсэнов. В качестве основных методологических параметров выявляется опора на многочисленные факты и события, их знание и скрупулезный подбор.

Ключевые слова: педагог, учитель, ученый, фольклор, сэсэны.

Annotation. The article is dedicated to the anniversary of the folklorist scientist S. Galina. The main stages of his scientific biography are traced, as well as the scientist's contribution to the study of sesenov's work. Reliance on numerous facts and events, their knowledge and scrupulous selection are identified as the main methodological parameters.

Keywords: teacher, teacher, scientist, folklore, sesens.

Беҙҙеҥ – студенттарҙың яратҡан уҡытыусыбыҙ – Галин Салауат Әхмәҙиә улының тыуыуына 90 йыл. Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының яҙыусылыр союзы ағзаһы, Башҡортостан комсомолының Ғәлимов Сәләм исемендәге премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы алдынғыһы, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Филология фәндәре докторы, профессор, Гуманитар фәндәр академияһының академигы, Рәсәй Федерацияһының Хөкүмәт премияһы лауреаты дәрәжәһендәге остазыбыҙ беҙҙеҥ әҙәбиәтебеҙ донъяһына киҥ ҡолоас менән ингән ҙур ғалим, уны һаҡлау эшндә арымай – талмай эшләгән шәхес..

Салауат Әхмәҙиә улы беҙҙеҥ яратҡан уҡытусыбыҙ ғына түгел, ә белемгә әйҙәүсе. халыҡ ижадына иғтибар, уны өйрәнеүгә, йыйыуға ынтылыш тәрбиәләүсе булды. Һәр беребеҙҙә үҙ ырыуы тарихы, ырыу башлыҡтары тураһында мәғлүмәт, йәшәгән ауылыбыҙ, ундағы йылға, күлдәр, тауҙар атамалары тураһында ололарҙан белешмә алырға, халыҡ араһында таралған йыр, легенда-риүәттәрҙе өйрәнеүгә ыңғай ҡараш тәрбиәләне.ошо йәһәттән мин байтаҡ фольклор материалдары алып барып, уны шатландырғанымды хәтерләйем.

Салауат Әхмәҙиә улы – башҡорт халыҡ ижадын йыйыуға ҙур өлөш индергән күп яҡлы кеше ине. Ғалимдың бөтә хеҙмәттәре беҙҙеҥ-уҡытыусыларҙың өҫтәл китаптарына әйләнде.

Минеҥ бөгөнгө сығышым сәсәндәр ижады тураһында. Туған әҙәбиәт дәреслегенә индерелгән сәсәндәр ижады менән бөтә уҡытыусылар, уҡыусылар

яҡшы таныш. Ғалимыбыҙ “Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады” китабында мәктәп программаһына индерелмәгән йырау, сәсәндәр: Ғатаулла сәсән, Ғиндулла сәсән, Нурмөхәмәт сәсән, Шәйҙулла сәсән, Сәйфулла сәсән, Әсәҙулла сәсән, Мөхәммәтйән сәсәндәр ижады тураһында бай мәғлүмәт туплаған. Хатта ул ошо исемдәрҙең онотола барыуына әсенеп, был мираҫты дауам итерҙәй кешеләрҙе эҙләй торғайны.

Беҙ оло ғалим һәм яҙыусы Кирәй Мәргән әҫәрҙәре менән яҡшы танышбыҙ, әммә уның атаһы – сәсән, шағир, уҡытыусы Нурмөхәммәт Йомрани ижадын белеп бөтмәйбеҙ. Нурмөхәммәт Йомрани күп кенә йылдар ситтә йөрөгәндән һуң, ауылына ҡайтып, мәҙрәсә асып, балалар уҡытҡан. Был ауылда русса яҙа белгән берҙән-бер кеше булған. Шиғырҙар ҙа яҙған. Шиғырҙарында (бөгөн дә актуаль булған тема) ерен һатып, өлөшһөҙ ҡалған башҡорт байҙарына тапҡыр һүҙ әйтә, уйландыра.

Уның ижадында башҡортлоҡ хисе ярылып ята. “Башҡорт ер һата, татар сәй һата”, ти ул бер шиғырында һәм, ерҙәрен һатып, урман эсенә инеп боҫҡан ата-бабаларына зарлана. Ҡан –ҡәрҙәштәренә :

Әй, туғандарым, ерҙе һаҡлағыҙ,
Әрәм итмәгеҙ, ерҙе һатмағыҙ!
Белегеҙ алдан ер ҡәҙерҙәрен,
Ереңдә булһын үҙ ҡәберҙәрең, – тип үтенә сәсән.

Сәсәндең бөгөнгө көндә билдәле шиғырҙарының яҙылыу ваҡыты 1906-1912 йылдарға тура килә. Улы Кирәй Мәргән хәтерләүҙәре буйынса, Нурмөхәмәт Йомрани үҙе өсөн генә яҙған һәм уларҙы матбуғатҡа бирергә ашыҡмаған. Революциянан һуң да балалар уҡытыуын дауам иткән, шиғырҙар яҙыуын да ташламаған. Сәсәндең күп шиғырҙары беҙҙең көндәргә килеп етмәгән. Шиғырҙарының килеп етмәү сәбәптәрен ҡыҙы Нажиә апайҙың хәтирәләренән аңлап була.Сәсәндең вафатынан һуң бик күп китаптары ҡалыуын ҡыҙы ошолай хәтерләй:”Әткәйемдең вафатынан һуңбик күп шиғыр дәфтәрҙәре ҡалды. Был ваҡытта ағаһы Кирәй Мәргән Өфөлә йәшәгән.1937, 1938 йылдарҙа (аныҡ ҡына хәтерләмәй Нәжия апай) абзыһынан хат килеп төшә. Унда Кирәй Мәргән атаһының барлыҡ ҡағыҙҙарын, дәфтәрҙәрен йәшерергә ҡуша. Тик Нәжиә дәфтәрҙәрҙе кем ҡайҙа йәшереүен әйтә алмай. Был бола заманында Кирәй Мәргәндең өҫтөнән “Ул Шәйехзада Бабич нәҫеленән”,- тип хәбәр еткереүселәр булғанлығы ла билдәле. Кирәй Мәргәндең ҡартатаһы Мәсәлим исемле бай ҡаты ҡуллы, уйын-көлкө яратмаған, тик мал артынан ҡыуған кеше булған. Үҙе күренекле шағир Шәйехзада Бабичтың атаһына яҡын туған була. Был хәл Нурмәхәммәт сәсән Йомрани дәфтәрҙәренең юғалыуына сәбәп булған. Быға тиклем баҫылған шиғырҙары ла сәсәндең оло талант эйәһе булыуын раҫлай. Бик күп сәсәндәр кеүек, Нурмөхәммәт Йомрани шиғырҙарында мәғрифәтселек ҡараштарын яҡтырта. Ул тыуған халҡын аңбелемгә саҡыра. Европа халыҡтарынан үрнәк алырға өндәй. Сәсән йәшәүҙең, ғүмерҙең, донъяның асылы хаҡында уйлана. Ауылдаштарының уны аңламауына зарлана. Нурмөхәмәт сәсән ижадында лирик шиғырҙарҙы ла, мәҫәлдәрҙе лә, хатта бәләкәй генә хикәйәләрҙе лә күрергә мөмкин.

Бағы ла бер үҙ заманы өсөн билдәле шәхес – Ғәлиев Ғатаулла – Әлшәй районы сәсәне. 18 йыл төрлө мәҙрәсәләрҙә уҡыған, аҙаҡ ғүмере буйы балалар уҡытҡан. Сәсәндең әҙәби мираҫы бик бай.Уның ижадында донъя, ғәләм, кеше, уның йәмғиәттәге урыны,төрлө кисерештәре, ғүмере, йәшәйеше тураһындағы фәлсәфәүи уйланыуҙары төп урында тороуын билдәләй китап авторы Салауат Әхмәҙиә улы. Сәсәндең “Донъя шатлыҡ йорто” , “Донъя үҫеше” шиғырҙары таң ҡалдыра.Атһыҙ арбалар, бер көндә Ҡытайға барып еткән осҡостар, һыу аҫтынан йөҙгән йөҙгөстәр,кәрәк һүҙҙе сыбыҡ буйлап оҙатҡан аппараттар хаҡындағы шиғырҙары кешенең аҡыл-зиһененең сикһеҙ мөмкинлетәренә дан йырлай. Сәсәндең бөйөк астроном Николай Коперник хеҙмәттәре хаҡында хәбәрҙар булыуы ла таң ҡалдыра китап авторын.

Сәсәндең “Ғилем тураһында йәштәргә бер һүҙ” шиғырындағы “ғилем – хазина, уны урлап булмай, ғилемле милләт уҙыр, үҙ халҡын алға әйҙәр, ғилем – алтын. Ә алтынды сүплектә ятһа ла алалр, ти. “Сәсән-шағирҙың ижадын өйрәнеү әле башлана ғына.Уның мираҫы үҙенең тикшеренеүселәрен көтә,”- тип яҙып ҡалдырған китап авторы. Тағы ла, Дүртөйлө районында тыуып, Илеш районында йәшәгән Шәрифуллин Шәйҙулла ижады, Ғафури районы Үтәш ауылында йәшәгән Сәғитов Сәйфулла ижады ла үҙ өйрәнеүселәрен көтә.

Хөрмәтле уҡытыусылар, халыҡ ижадын йыйыусы, өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙ хеҙмәттәрен дауам итеп, уҡыусыларыбыҙ менән берлектә халыҡта һаҡланған ауыҙ-тел ижадын өйрәнеп, үҙебеҙ ҙә “Башҡорт халыҡ ижады” китаптарына инмәгән, әммә телдән-телгә күсеп, яҙып алынмаған ауыҙ-тел ижадын эҙләүҙе, өйрәнеүҙе дауам итәйек.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Галин С.А. Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары. Өфө. 1981. – 413б.

2. Галин.С.А. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады: - Өфө,Китап. – 2004, 2009.- 364б

3.. Галин С.А. Заман һәм фольклор: Өфө.Китап. – 1967. – 258 б.

4. Галин.С.А. Тел асҡысы - халыҡта:- Өфө, Китап. – . 1993. 1999.

5. Галин.С.А.Народной мудрости источник: - Уфа, Китап. – 2007. – 387с.

6. Тарих һәм халыҡ поэзияһы: – Өфө,Китап. 1996.

УДК 811.512.141

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ БЕР ИЖЕКЛЕ ТАМЫР НИГЕҘҘӘРЕ БУЛАРАҠ «ЙӘШ» ЛЕКСИК БЕРӘМЕКТӘРЕНЕҢ КОГНИТОЛОГИК ҺӘМ ИДЕОГРАФИК ХАРАКТЕРИСТИКАҺЫ

COGNITIVE AND IDEOGRAPHIC CHARACTERISTICS OF "YOUNG" LEXICAL UNITS AS MONOSYLLABIC ROOT BASES OF THE BASHKIR LANGUAGE

А.А.Нигаматова,
аспирант БГПУ им. М. Акмуллы ГО г.Уфа,
A.A.Nigamatova ,
Postgraduate student of the BSPU named after M. Akmulla, Ufa

Аннотация. В этой статье рассматривается понятие корневой основы. Целесообразность ее обосновывается планом сопоставления лексемы «молодой» с данными говоров и диалектов башкирского, татарского, чувашского и некоторых других родственных языков.

Ключевые слова: лексика, семантика, диалект, корень, возраст.

Annotation. This article discusses the concept of a root basis. Its expediency is justified by the plan of comparing the lexeme "young" with the data of dialects and dialects of Bashkir, Tatar, Chuvash and some other related languages.

Keywords: vocabulary, semantics, dialect, root, age.

Лексика яҡынса бер кимәлдәге үҙ-ара бәйләнгән компоненттар сифатында тәҡдим ителергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта лексик берәмектәрҙең күпселеге теге йәки был тематик төркөмдәргә берләштерелергә мөмкин [7, 12]. Был этапта беҙҙең «тематик төркөм» һәм «когнитив өлкә» төшөнсәләрен тейешлесә бүлеүҙе билдәләргә кәрәк. Беренсеһе лексиканы, уның семантикаһын иҫәпкә алып, классификациялаһа ла, социаль, эмоциональ һәм культурологик факторҙарҙан ситтә ҡала [6, 16].

Эш барышында дөрөҫ когнитологик интерпретация һаҡланһын өсөн 2000-се йылдар башында профессор А.Г. Шәйхулов тәҡдим иткән өлкәләр сиктәрендә идеографик классификация ҡулланыла. Уның төп идеяһы телдең бөтә лексикаһы дүрт өлкәлә классификациялана алыуына нигеҙләнә: Ғилем (априори), Тәбиғәт (Йәнһеҙ, Йәнле), Кеше (физик-биологик йән), Йәмғиәт.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, бер төркөм оҡшашлыҡтарға ҡарамаҫтан, мәҫәлән, көнбайыш тел ғилемендә популяр булған Сводеш исемлеге менән, үрҙә әйтелгән классификация беҙгә тәртиплерәк система булып күренә. Мәҫәлән, Йыйынтыҡ исемлеге теге йәки был телдәрҙең туғанлыҡ кимәле тураһында һүҙ алып барырға мөмкинлек биргән лексемалар һайлау булараҡ билдәләнә. Шул уҡ ваҡытта төрлө тел ғаиләләре өсөн үҙ сағыштырма һүҙҙәр исемлеге тәҡдим ителә [12, 452]. Бөтәһе исемлектең ике тибы бар: стандарт (100 һүҙ) һәм киңәйтелгән (207 һүҙ). Автор билдәләүенсә, исемлеккә лексемаларҙың тик аңлашылып торған, ябай мәғәнәһе генә инергә тейеш. Сводеш Исемлеге эсендә ниндәй ҙә булһа эске структура юҡ һәм ҙур ареалдарҙың диалект лексикаһын классификациялау өсөн ул бөтөнләй яраҡһыҙ.

Когнитив өлкәләр системаһы сиктәрендә беҙҙең тикшеренеүҙә «йәш» лексемаһы түбәндәге бүлектәрҙә ҡарала: «Кеше» - «Кеше - тере физик-биологик йән»; «Кеше тормошо, тормошоноң осорҙары». Анализланған ҡайһы бер берәмектәр «Тәбиғәт» (йәнһеҙ, йәнле), «Йәмғиәт» бүлектәре менән ауаздаш.

Материалды йыйыу һәм классификациялау барышында беҙ шартлы рәүештә түбәндәге семантик оялар билдәләнек: «Ваҡыт – ваҡыт арауығы – миҙгелдәр», «Кешеләрҙең ғүмерен иҫәпләү – Ваҡытлыса хәл иткес», «Туғанлыҡ терминдары – ғаилә ағзаларының йәше» артабан вағыраҡ мәғәнәүи категорияларға бүлеү ҡарала. Асылда, тап ошо ҡараш «йәш» төшөнсәһенең бөтөн интерпретацияһын айырым концепт булараҡ ҡына түгел, ә башҡорт теленең һәм Урал-Волга буйы ҡайһы бер туғандаш телдәренең когнитив системаһындағы күренеш булараҡ та биреү өсөн алғышарттар булдыра.

Үткән быуат уртаһына төрки (киңерәк Алтай) тел ғилемендә тамыр төшөнсәһе күбеһенсә Европа лингвистикаһы алымдарына нигеҙләнгән. Күп тикшеренеүселәр, төрки морфемикаһы үҙенсәлеген иҫәпкә алмайынса, «тамыр» һәм «нигеҙ» билдәләмәләрен өйрәнелгән телдәргә механик рәүештә күсергән.

Алтай (төрки) телдәрендәге һүҙҙең автономиялы булыуын түбәндәге төп билдәләрҙе иҫәпкә алып билдәләргә мөмкин: беренсенән, тамырҙан, аффикстарҙан (лексик-грамматик, шулай уҡ функциональ һүҙьяһалыштан) торған асыҡ морфологик структура; икенсенән, һүҙҙе сингармонизм күренешен иҫәпкә алып төҙөү; өсөнсөнән, ныҡлы баҫым яһап (ҡағиҙә булараҡ, һүҙҙең һуңғы ижеге). Икенсе төрлө әйткәндә, һүҙ ҡоролошоноң үҙ сиге бар. Унан айырмалы рәүештә тамыр морфемаһының эске (фонетик) структураһы түбәндәгесә характерлана: 1) односложностью; 2) трехзвучием 1) бер ижекле; 2) күп тауышлы (3) [8, 29]. Статистик яҡтан төбәктең төрки телдәрендәге тамыр нигеҙҙәренең күпселеге ТҺТ (тартынҡы һуҙынҡы тартынҡы) тибындағы ябыҡ ижектәрҙән ғибәрәт. Мәҫәлән, Боронғо Төрки һүҙлек мәғлүмәттәре буйынса, ТҺТ һәм (Т)ҺТ тибындағы структуралар башҡа бер ижекле тамырҙарҙың 91,4 процентын тәшкил итә [8, 31]. ТҺТ структураһы беҙ тикшергән телдәрҙә һәм һөйләштәрҙә фонетик редукцияның төрлө формаларына эйә булырға мөмкин: ТҺТ, (Т)ҺТ, (Т)Һ(Т), ТҺ(Т) . Төрки теленең иң ябай һүҙ формалары үҫешенең башланғыс этабында тамыр нигеҙҙәренән ғибәрәт була, уларҙың күпселеге моносиллабл була. Г. И. Рамстедт билдәләүенсә, төп тамыр нигеҙҙәре ысынлап та башта бер ижекле, һирәгерәк күп ижекле булған [11, 29].

Тамырҙар барлыҡҡа килеүҙең күп кенә процестары өйрәнелгән тел фонетикаһының төрлө законлыҡтары менән бәйле. Фонетик составтың вариативлығы өндәрҙең диалектҡа тап килеүе менән аңлатыла. Был осраҡта морфеманың тышҡы йөҙө үҙгәргәндә уның лексик мәғәнәһендә нигеҙле үҙгәрештәр бара. Ләкин шул уҡ диалекттар буйынса үҙгәреүсән нигеҙҙәр тәүге ҡиммәттәрҙән алыҫ булған тамырҙар барлыҡҡа килтерә ала. Был, мәҫәлән, тыйылған лексикаға, һунар йәки социаль жаргондарға h. б. ҡағылырға мөмкин.

Бер ижекле тамыр нигеҙҙәрен төп тикшеренеү объекттарының береһе итеп һайлау осраҡлы түгел. Тәү сиратта был төрки (алтай) телдәрендәге һүҙҙең үҙенсәлегенә, атап әйткәндә, нигеҙҙең үҙенә бәйле. Һинд-Европа һәм төрки телдәрҙә тамыр нигеҙҙәрен ентекле тикшергәндә, һуңғыларының сағыштырмаса еңел айырылып тороуы асыҡлана [9, 7]. Был тамырҙар яһалма формаларҙан тыш, айырым үҙ аллы һүҙ-типтар ҙа булыуы мөмкин.

Иң ябай иҫәпләүҙәр буйынса хәҙерге төрки телдәрендә төрлө типтағы 4 меңгә яҡын нигеҙ ҡулланыла. Шул уҡ ваҡытта уларҙың яртыһы тиерлек мәғәнәһеҙ үҙ аллы булмаған элементтар булып тора. Уларҙан башҡа, билдәле бер семантик йөкләмәне үҙендә йөрөткән, ике ҡатмарлы, айырылғыһыҙ нигеҙҙәр бар.

Хәҙерге телдәрҙә һәм диалекттарҙа нигеҙ үҙгәрешһеҙ тиерлек осрай: *йәш* башҡ. әҙәб., *яшь* тат. әҙәб. h.б.

Кеше ғүмерен иҫәпләүҙе аңлатҡан лексема сифатында «йәш, тормош» мәғәнәһендә -ЙӘШ-те нигеҙ һалыусы тип иҫәпләү ҡабул ителгән. Ул Орхон һәм

башҡа бик күп яҙма ҡомартҡыларҙа осрай. Алтай телдәренең этимологик һүҙлегендә түбәндәге нигеҙҙәр билдәләнә: PTurk. *jāĺ «йәш; йыл»: иҫке төрки. *jaš* (нигеҙ шулай уҡ уйғыр телендә лә билдәләнгән); ҡарағалпаҡ *jaš*; төрөк *jaš;* ғағауыз *jaš*; әзербайжан *jaš*; төркмән *jāš*; үзбәк *jəš*; уйғыр *jaš*; ҡырым татар. *jaš*; ҡырғыҙ *ǯaš*; ҡаҙаҡ *žas*; ҡарағалпаҡ *žas*; ҡумыҡ *jaš*; нуғай *jas*; хакас *čas*; шор *čaš*; сыуаш *śol;* яҡут *sās.* Тамыр монгол нигеҙҙәрендә лә һәйбәт күренә: PMong. ***na-su(n)*** «йәш, тормош йылы»): көнбайыш монгол *nasu(n)*, бурят *naha(n)*; ҡалмыҡ *nasn* [2, 961]. Башҡорт теленең һөйләштәрендә күрһәтелгән тамырҙан торған түбәндәге берәмектәр күҙәтелә: арғаяш., миәс., әй. *йәшбикә* «йәш ҡатын»; миәс., ҡыҙыл, ыҡ-һаҡм. *йәшет* «йәштәш»; арғаяш., һалйығ. *йәштәк* «тиҫтер»; ғәйнә. *йәшулан* «яңы тыуған бала». *йәшүҫтермә* «йәштәр» [1, 133]. Сағышт. сыуаш теле: *ешӗл* [5, 35].

Йәш " семантик ҡыры менән туранан-тура «ваҡыт», «ваҡыт арауығы», «миҙгелдәр» төшөнсәләре үҙ-ара эш итә. Ваҡыт арауығын аңлатҡан ТҺТ тибындағы дөйөм төрки тамыр нигеҙе булып–***CAҠ- (cia:k)*** тора**.** Шуныһы иғтибарға лайыҡ, ул Мәхмүт Ҡашғари хеҙмәттәрендә йәки «Ҡотадғу Белек» әҫәрендә осрамай. Был тамыр нигеҙ XV быуатта ғына сағатай сығанаҡтарында теркәлә башлай [3, 67-68]. Монгол параллеле лә ҡыҙыҡлы: ****cag*** - «ваҡыт, осор, ваҡыт, йәш». Нигеҙ маньчжур ciksin «өлкән, бәлиғ, ир-егет» лексемаһында ябыҡ компонент булып сығыш яһауы ихтимал. В языках и говорах рассматриваемого региона корень зафиксирован в качестве одного из составных компонентов лексем, описывающих возраст: Тикшергән төбәктең телдәрендә һәм һөйләштәрендә тамыр йәште һүрәтләгән төҙөлөш компонентының бер өлөшө булараҡ теркәлгән: башҡ. *бала саҡ* «бала саҡ», *бала-саға* «балалар», ҡыҙыл. *сағына йетеү* «бәлиғ булыу» [1, 266].

Тамырҙы күрһәтмә нигеҙ тип тә иҫәпләргә мөмкин-***ӘСӘ/АСА/ӘҠӘ- (ača)*** –дөйөм мәғәнәлә «өлкән ир йә ҡатын, әсә, әбей, апай»: уйғыр *ača*; татар *aǯa, aǯi, εǯi*; татар (мишәр диалекты) *azɨj, εzi*; башҡ.әҙәби теле *äsä;* ҡырғыҙ *ačaj, aǯa*; ҡумыҡ *aǯaj, ečiw*; хакас аǯа; сыуаш aźa « атаһы, ата-әсәһе »; яҡут *ehe* «олатай»; долған *ehe* «олатай» [2, 272]. Был нигеҙ үҙенә иғтибарҙы күп һанлы мәғәнәләргә эйә булыуы менән дә йәлеп итә (башлыса, туғанлыҡ, өлкәнлек), әммә мәғәнәһе буйынса бик яҡын. Башҡорт әҙәби телендә нигеҙ «әсә, әсәй»тип ҡулланыла. Башҡорт диалекттарында ошо тамыр менән түбәндәге лексемалар теркәлгән: урта h. *әзәй* «өләсәй,оло йәштәге ҡатын», ғәйнә. *әкәй* «өләсәй», арғаяш. *әкәй* «ағай», [1, 424] миәс. *әсә* «инә ҡорт», урта. *әсәй* «кендек әбей» [1, 426].

-ДАМ/ЙАМ (jAm) нигеҙе, семантик мәғәнәһе - «иҫке, туҙған, насар»: алтай нигеҙе ***dam-***; боронғо төрки *jAman;* төрөк *jaman;* әзербайжан *jaman;* уйғыр *jaman;* татар *jaman;* башҡорт *jaman;* ҡырғыҙ *ǯaman;* ҡаҙаҡ *žaman;* ҡарағалпаҡ *žaman;* ҡумыҡ *jaman* [2, 463]. Башҡорт әҙәби телендә һәм күпселек диалекттарҙа был нигеҙҙең «насар» мәғәнәһендә ҡулланылыуы һәм йәш төшөнсәһе менән шартлы рәүештә корреляцияланыуы иғтибарҙы йәлеп итә.

-ҠАР- (-qar-) нигеҙе киң таралған бер ижекле тамыр һүҙ, мәғәнәһе «ҡарт, оло, көсһөҙ, шырт». Төрки телдәрҙә генә осрамай (төрөк *karɨ, kart*; ғағауыз *qarɨ*; әзербайжан *Garɨ, Gart* «ҡарсыҡ»; үзбәк. *qari-*; уйғыр. *qeri*; татар. *qarɨ, qart*;

башҡорт *qarɨ, qart*; ҡырғыз *qarɨ, qart*; ҡаҙаҡ *qarɨ ~ qɛri, qart*; ҡарағалпаҡ *qarɨ, γarrɨ*; ҡумыҡса *qart*; хакас *kirə, kirə*; яҡут *kɨrɨj;* долғ. *kɨrɨ*), шулай уҡ монгол телдәрендә: *kari-, *kar-si-* «ҡартайырға, көсһөҙәйергә» мәғәнәләрендә [2, 672]. Күрәһең, бында башҡорт телендәге «ҡарсыҡ»ты ла индерергә мөмкин. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, нигеҙ тәүге төрки ҡомартҡыларҙа, шул иҫәптән ҡырағай һәм йорт хайуандарына ҡарата адъектив мәғәнәлә лә осрай [3, 85].

-КЕН/КИН (-ken-) – тамыр нигеҙе «йәш» мәғәнәһен йөрөтә. Башҡорт телендәге *кинйә* нигеҙе «кесе ул/һуңғы бала» боронғо төрки телендәге **gEnč* [4, 145] һәм монгол формаһы **kenǯe* «һуң уңыш, һуңғы бала» нигеҙҙәре менән сағыштырылырға мөмкин. Сағышт.: бурят т. *xenze;* ҡалмыҡ т. *Kenzə* [2, 664]. Башҡорт традицияһында термин үҙенең социаль йөкләмәһе буйынса социаль-көнкүреш титулына бик яҡын. Күрәһең, минорат йолаһы менән бәйләнеш кинйә терминына антропонимдар рәтенә күсергә мөмкинлек биргән: Кинйә [3, 658]. Шуныһы иғтибарға лайыҡ, был шәхси исем Үҙәк Азияла, Урал-Волга Буйында, Кесе Азияла һәм Кавказ Алды Территорияһында таралған.

Шулай итеп, тамыр нигеҙҙәренең когнитив өлкәләре сиктәрендә лексиканы классификациялау ярҙамында асыҡланғандарҙың күпселеге ТҺТ (тартынҡы һуҙынҡы тартынҡы), ҺТҺ (һуҙынҡы тартынҡы һуҙынҡы) һәм уларҙың вариациялары тибындағы тотороҡло бер ижекле конструкцияларҙан ғибәрәт. Башҡорт диалекттарының «йәш» төшөнсәһе боронғо төрки нигеҙҙәренә тулыһынса оҡшаш, монгол һәм тунгус тамырҙары менән тап килә.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. ДСБЯ – Диалектологический словарь башкирского языка / М.И. Дильмухаметов, Э.Ф. Ишбердин, Н.Х. Максютова, У.Ф. Надергулов, С.Г. Сабирьянова, Г.Г. Гареева – Уфа: Китап, 2002 – 432 с.
2. ЭСАЯ – Этимологический словарь алтайских языков - An Etymological dictionary of the Altaic languages (S. A. Starostin, A. V. Dybo, O. A. Mudrak). Vol. 1-3. – Leiden, 2003. — 2096 p.
3. СИГТЯ 2001 – Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Лексика: 2-е издание. М.: Наука, 2001. – 822 с.
4. ДТС - Древнетюркский словарь. — Л.: Наука, 1969 – 676 с.
5. ЧРРЧ - Скворцов М.И., Скворцова А.В. Чувашско-русский и русско-чувашский словарь. – Изд. 6-е, стереотип. – Чебоксары: Чуваш. кн. изд-во, 2012. – 432 с.
6. Асмондьяров В.Н. Когнитологические аспекты башкирской диалектной лексики в контексте языкового союза Урало-Поволжья: диссертация ... кандидата филологических наук: 10.02.02 / Асмондьяров Венер Надирович; [Место защиты: Казанский федеральный университет]. - Казань, 2020. - 293 с.
7. Акилова Ф.М. Когнитологические аспекты лексических взаимосвязей башкирского языка и языка памятников орхоно-енисейской письменности [Текст]: специальность 10.02.02 - языки народов Российской Федерации (башкирский язык): автореф. дис. на соиск. ученой степ. канд.

филолог. наук / М. Ф. Акилова; [науч. рук. З. Ф. Шайхисламова]. - Уфа, 2016. – 24 с.

8. Баскаков Н.А. Историко-типологическая фонология тюркских языков / Отв. Ред. Э.Р. Тенишев. –М.: Наука, 1988. – 208 с.

9. Кажибеков Е.З. Глагольно-именная корреляция гомогенных корней в тюркских языках: (явление синкретизма). – Алма-Ата: Наука, 1985. – 272 с.

10. Мусаев К.М. О некоторых особенностях общеалтайских синкретичных корней. – Altaica. PIAC. XIX. Helsinki, 1977. – 197.

11. Рамстедт Г.И. Введение в алтайское языкознание. – М.: Издательство иностранной литературы, 1957. – 254 с.

12. Swadesh, Morris. Lexicostatistic Dating of Prehistoric Ethnic Contacts / Swadesh, Morris // Proceedings of the American Philosophical Society. – 1952. - Vol. 96. − P. 452 – 463.

УДК 38.22

ОБЩИЕ МОТИВЫ И ОТРАЖЕНИЕ ЕДИНОБОРСТВА С БЫКАМИ В ЭПОСАХ «УРАЛ-БАТЫР» И «СКАЗАНИЕ О ГИЛЬГАМЕШЕ»

COMMON MOTIVES AND REFLECTION OF DUELINGTHE BULLS IN THE EPICS "URAL-BATYR" AND "THE EPIC OF GILGAMESH"

Ф.Б. Саньяров,
канидат филологических наук, преподаватель ГБПОУ УМПК, г.Уфа
F.B. Sanyarov,
Candidate of Philological Sciences, teacher of GBPOU UMPK Ufa

Аннотация. По мнению большинства исследователей, древнейшие духовные памятники как шумер-акадский мифологический эпос «Сказание о Гильгамеше» и башкирский мифологический эпос «Урал-батыр» имеют общие генетические корни, которые идентифицируются по идее поиска живой воды, омолаживающего цветка, проблеме смерти и жизни, дружбы и любви. В башкирском эпосе родные братья Шульген и Урал становятся антиподами, т.к. старший Шульген - носитель зла, нарушивший завет родителей. Гильгамеш и Энкиду становятся верными друзьями. «Сказание о Гильгамеше», как известно, сохранилось в течение 3500 лет в глиняных клинописных таблицах, «Урал-батыр» – памятник устного народного творчества, записанный М.Бурангуловым в 1910 году из уст певцов-сесенов. По мнению башкирских историков (Н.А. Мазитов, А.Н. Султанова, С.А. Абдрахманов, С.А. Галлямов и др.) эпосу не меньше 4000 лет.

Ключевые слова: мифология, эпос, единоборство, жизнь, смерть, космогония.

Annotation. According to researchers, the most ancient spiritual monuments such as the Sumerian-Acadian mythological "The Epic of Gilgamesh" and the Bashkir mythological epic "Ural-Batyr" have common genetic roots that are identified by the idea of looking for living water, a rejuvenating flower, the problem of death and life, friendship and love.

In the Bashkir epic brothers Shulgen and Ural become antipodes, because the elder Shulgen is the bearer of evil who violated the covenant of his parents.Gilgamesh and Enkidu become faithful friends."The Epic of Gilgamesh" is known to have been preserved for 3,500 years in cuneiform clay tablets, andthe "Ural-batyr" is a monument of verbalfolk art, recorded by M. Burangulov in 1910 from the lips of sesens (singers).According to Bashkir historians (N.A. Mazitov, A.N. Sultanova, S.A. Abdrakhmanov, S.A. Gallymov and others), the epic"Ural-batyr" is at least 4000 years old.

Key words: mythology, epic, duel, life, death, cosmogony.

К проблеме сходства древних духовных памятников, в том числе мифологических эпосов, фольклористы и литературоведы не раз обращали свое внимание. Академик В.М. Жирмунский еще в начале 60-х годов прошлого столетия писал: «Вопрос о наличии между сходными фольклорными сюжетами типологических аналогий или контактных взаимодействий есть прежде всего вопрос исторический. Он должен рассматриваться не абстрактно, а с учетом конкретных условий исторического развития народов и культурного взаимодействия между ними... <…>. В другом месте мы говорили, что сходные черты в героическом эпосе различных народов в значительной степени объясняются типологическими аналогиями; как писал Д.С. Лихачев, он воплащает в поэтической форме понимание и оценку народом своего прошлого. Поэтому эпос не «мигрирует» и сравнительно редко заимствуют сюжеты и образы у других народов»[1]. Несмотря на авторитетное академическое мнение, «сравнительно редко заимствуют сюжеты и образы у других народов» - мы полагаем, между древними шумер-акадским и башкирским эпосами «Сказание о Гильгамеше», «Урал-батыр» все же есть сходства сюжета, общие типологические и генетические черты. Академик АН РБ Г.Б. Хусаинов, указывая на проблему сходства мировых мифологий, полагает: «В данном эпосе можно обнаружить общие мотивы, ситуации, толкования, архаические элементы, детали сугубо однотипные с такими древнейшими эпическими памятниками как «Авеста», «Гильгамеш», которые, по общему мнению исследователей, генетически или типологически восходят к ним. Анализ поэтики башкирского эпоса так же подтверждает такое мнение. В тоже время в течение многих веков башкирскими йыраусы и сесенами в эпос были внесены определенные лексические, стилистические, поэтичесикие элементы, которых можно назвать следами поздних периодов. Однако устоявшиеся архаические мифологичесие основы сохранились, в том числе мифологическая поэтика, и, таким образом, до наших дней дошли сущностные качества древнейшего башкирского эпического памятника изустного слова»[2]. Башкирский исследователь Р.Ф. Рязяпов также отмечал некоторые сходства шумерского и башкирского эпосов: «Между башкирским и шумерским эпосами наблюдается близкое сходство – что для науки давно явление не новое. Следует отметить на наиболее общие черты: цель эпических героев одна - достижение таинства бессмертия. События разворачиваются на клочке суши, после всемирного потопа. В «Гильгамеше» бессмертие находится в руках у

Утнапишти (*Ут – огонь, Пишти – беште> баш. курсив Ф.С.*), в «Урал-батыре» почти испита бессмертным стариком…Борются с быками и побеждают» [3].

Краткая история шумер-акадского эпоса. «Эпос о Гильгамеше», или поэма «О всё видавшем» (аккад. ša nagba imuru) — одно из старейших сохранившихся литературных произведений в мире, самое крупное произведение, написанное клинописью, одно из величайших произведений литературы Древнего Востока.

«Эпос» создавался на аккадском языке на основании шумерских сказаний на протяжении полутора тысяч лет, начиная с XVIII—XVII веков до н. э. Его наиболее полная версия была обнаружена в середине XIX века при раскопках клинописной библиотеки царя Ашшурбанипала в Ниневии. Она была записана на 12 шестиколонных табличках мелкой клинописью, включала около 3 тысяч стихов и была датирована VII веком до н. э. Также в XX веке были найдены фрагменты других версий эпоса, в том числе и на хурритском и хеттском языках.

Главными героями эпоса являются Гильгамеш и Энкиду, о которых также дошли отдельные песни на шумерском языке, некоторые из них были созданы ещё в конце первой половины III тысячелетия до н. э. У героев был один и тот же противник — Хумбаба (Хувава), охраняющий священные кедры. За их подвигами следят боги, которые в шумерских песнях носят шумерские имена, а в эпосе о Гильгамеше — аккадские. Однако в шумерских песнях отсутствует связующий стержень, найденный аккадским поэтом. Сила характера аккадского Гильгамеша, величие его души — не во внешних проявлениях, а в отношениях с человеком Энкиду. «Эпос о Гильгамеше» — это гимн дружбе, которая не просто способствует преодолению внешних препятствий, но преображает, облагораживает.

Также в эпосе отражены многие взгляды философии того времени на окружающий мир (элементы космогонии, история о «Большом потопе» в поздней редакции), этику, место и судьбу человека (поиски бессмертия). Во многом «Эпос о Гильгамеше» сравнивают с произведениями Гомера — «Илиадой», которой он старше на тысячу лет, и «Одиссеей».

В 1849 году английский археолог Остин Генри Лейард в результате раскопок обнаружил ассирийский город Ниневию. Во время дальнейших раскопок в городе была найдена клинописная библиотека царя Ашшурбанипала. Клинописные таблички из этой библиотеки ассистент Лейарда, Ормузд Расам, раскопавший в 1852 году вторую часть библиотеки, передал в Британский музей[1].

Позже исследованиями найденных табличек занимался талантливый самоучка, ассистент египетско-ассирийского отделения музея Джордж Смит. 3 декабря 1872 года он выступил с докладом в «Обществе библейской археологии». В докладе он заявил, что обнаружил миф о потопе, сходный с изложенным в Библии. Это сообщение вызвало сенсацию и всеобщий интерес. Газета «Дейли телеграф» даже пообещала 1000 фунтов тому, кто найдёт отсутствующие фрагменты сказания. Джордж Смит воспользовался этим и отправился в Месопотамию.

Продолжая дешифровку табличек, Смит обнаружил, что сообщение о потопе является частью какой-то большой поэмы, называемой вавилонянами «Сказаниями о Гильгамеше». По утверждениям писцов, «Сказания» состояли из 12 песен, каждая из которых составляла около 300 строк. Вскоре он понял, что части рассказа не хватает, поскольку несколько табличек отсутствуют. В результате организованной им в 1873 году экспедиции удалось найти 384 таблички, среди которых оказалась и недостающая часть «Эпоса».

Таким образом, поиск генетических и типологических общих черт двух мировых мифологий, действительно, для современной науки явление не новое, однако, мы полагаем, что пришло время не только указывать на эти общие черты, а приступить контрастивному и типологичесому аназизу памятников, сопоставляя конкретные языковые и текстовые материалы. Современные коммуникативные средства, благо, их позволяют.

Нас, к примеру, прежде всего, заинтересовал тот исторический факт: в древнем шумер-акадском государстве была известна III династия царей Ура, основателей города Ур-Намму и царь Шульга. Не исключено, что главными героями башкирского эпоса «Урал-батыр» вполне могли стать имена шумерских царей. В мифологии народов мира других подобных совпадений не обнаруживаются. В тоже время, наличие сегодняшних географических названий (горонимы, гидронимы, ойконимы, антропонимы) дают основание утверждать о том, что в Башкортостане широко известны гора Урал (Ура-III), озеро Шульган (Шульга), пещера Шульган-таш, в Татышлинском, Бурзянском

районах РБ есть деревни Шульган. Имя Урал также является весьма распространенным мужским именем. В эпосе «Урал-батыр» есть еще один эпический образ - дочь Солнца Ҫомай (Хомай). «Исходя из того, что Шульген, нарушивший закон предков, потерял свой человеческий облик и превратился в змея, живущего в темноте, в пучинах мировых вод, тогда как его законопослушный брат Урал за почтение к заветам предков вознесся на небо и вступил в брак с Хомай, дочерью Солнца» [4].

Умай, как известно, в тюркской мифологии – богиня, олицетворяющая женское, земное начало. Некоторые исследователи предполагают, что образ Умай генетически связан с иранской мифологической птицей Хумай, которая, бросая свою тень на человека, делает его счастливым» [5]. У многих тюрских народов встречается в форме Умай, например, Май – у шорцев, Май-энеси у телеутов, Май-эне у казахов. В эпосе «Урал-батыр» мифоним употребляется как Ҫомай. Данный пример еще раз указывает на генетическую связь мифологических образов, на сходство фольклорных сюжетов разных народов и культур. Приступим теперь к анализу некоторых конкретных генетических и типологических сходств двух мировых мифологий – эпоса «Сказание о Гильгамеше» и башкирского эпоса «Урал-батыр».

1. В обоих мировых памятниках присутсвует упоминание о всемирном потопе:

В старину, а когда – не известно,
Было, говорят, такое место,
Куда ничья нога не ступала
(И душа ни одна не знала,



Что там суша была одна);

С четырех сторон окружала Эту сушу морская вода.(1-8 «Урал-батыр»). «Первый день бушует Южный ветер, Быстро налетел, затопляя горы, Словно войною, настигая землю. Не видит один другого; И с небес не видать людей. Боги потопа устрашились». Такие общие черты всемирного потопа, уазанные в обоих эпосах, как известно, было позже заимствовано в «Библии» христиан.

2. В исследуемых мифологиях активно употребляются образы львов, которые верно служат как Гильгамешу, так и Янберде, Янбике и их сыновьям:

...На охоту коней не седлали,
Стрелы-копья в руках не держали;
Приспособили для себя
Льва-арслана, чтобы их возил,
Сокола, чтобы пернатых бил,
Пиявку, чтобы кровь сосала,
Щуку, чтобы рыбешек хватала. (34-41 «Урал-батыр»)

Ученые-археологи на раскопках древнего города Урук сегодня находят множество статуй львов, что указывает на то, что львы были популярны и в шумерской мифлогии.

3. В создании мифического сюжета борьбы с быками в эпосах немаловажную роль играет мотив выбора в качестве супруга главных героев Гильгамеша и Урал-батыра. Вот как отражается исходный эпический конфликт. На красоту Гильгамеша подняла очи государыня Иштар: *«Давай, Гильгамеш, будь мне супругом, Зрелость тела в дар подари мне! Ты лишь будешь мне мужем, я буду женою! Приготовлю для тебя золотую колесницу, С золотыми колесами, с янтарными рогами»*. В эпосе «Урал-батыр» царская дочь так же выбирает среди множества мужчин Урал-батыра, однако, от дочери царя Катила Урал-батыр отказывается, чем вызвал царьский гнев, что привело к поединку батыра с царьским быком.

4. Рассмотрим теперь как отражается единоборства Гильгамеша, Энкиду и Урал-батыра с быками в двух сопоставляемах эпосах.

…Спустился к Евфрату, в семь глотков его выпил – река иссякла.
От дыханья Быка разверзлась яма,
Сто мужей Урука в нее свалились.
От второго дыханья разверзлась яма.
Двести мужей Урука в нее свалились.
При третьем дыханье стал плеваться на Энкиду;
Прыгнув, Энкиду за рог Быка ухватился»
Бык в лицо ему брызнул слюною,
Всей толщей хвоста его ударил.
Энкиду уста открыл и молвит, вещает он Гильгамешу:
«Друг мой, гордимся мы нашей отвагой,
Что же мы ответим на эту обиду?»
«Друг мой, видал я Быка свирепость,
Но силы его для нас не опасны.

Вырву ему сердце, положу перед Шамашем, —
Я и ты – Быка убьём мы,
Встану я над его трупом в знак победы,
Наполню рога елеем – подарю Лугальбанде!
За толщу хвоста его ухвати ты,
А я между рогами, меж затылком и шеей, поражу его кинжалом,
…….. ».
Погнал Энкиду, Быка повернул он,
За толщу хвоста его ухватил он,
А Гильгамеш, как увидел дело храброго героя и верного друга, —
Между рогами, меж затылком и шеей
Быка поразил кинжалом.
Как Быка они убили, ему вырвали сердце
«Урал-батыр»:
…И вот, как гора, огромная туша,
Скребя копытами голую землю,
Брызжа слюной, вдруг появилась,
Из ворот дворцовых к майдану пустилась.
Народ испуганный разбежался.
Бык страшно всхрапнул и, рога склонивши,
Кинулся яростно на Урала,
Чтобы поддеть и поднять высоко
Рогами насквозь пронзенное тело.
Урал, говорят, не растерялся,
От удара ловко увернулся,
Руками крепко рога схватил,
Начал шею быку ломать
И голову ниже к земле пригибать.
Над майданом раздался страшный рык -
Не может вырваться грозный бык,
В землю уходит ногами бык,
Не может туловище повернуть,
Не может рогами Урала боднуть,
Из пасти черпая кровь потекла,
Из челюсти выпал верхний зуб.
А Урал слово свое сдержал,
Убивать быка он не стал,
Из земли его выдернул, говорят,
На ноги поставил, так говорят.
Урал
Твои прямые рога изогнулись -
И вечно будут теперь такими!
Плотные копыта твои разомкнулись -
И вечно будут теперь такими!

Не только у тебя - у всего рода!
Силу человека сейчас испытал ты,
Слабость свою сейчас узнал ты.
Рогами людей устрашить не пытайся,
Одолеть людей никогда не надейся.

В первых же строчках памятников мы обращаем на единую мифическую картину, в которых изображается безмерная сила быков: *«И вот, как гора, огромная туша, Скребя копытами голую землю, Брызжа слюной, вдруг появилась, Из ворот дворцовых к майдану пустилась. Народ испуганный разбежался»* («Урал-батыр»). *«От дыханья Быка разверзлась яма, Сто мужей Урука в нее свалились. От второго дыханья разверзлась яма. Двести мужей Урука в нее свалились… Бык в лицо ему брызнул слюною, Всей толщей хвоста его ударил»* («Гильгамеш»). Разница лишь в том: в башкирском эпосе борьба с быком ведется Урал-батыром, а шумерском – сотни мужчин пытаются одолеть его, наконец, побеждают Энкиду с Гильгамешем. *«Друг мой, видал я Быка свирепость, Но силы его для нас не опасны. Вырву ему сердце, положу перед Шамашем, — Я и ты – Быка убьём мы»*, - говорит Энкиду. Интересно, в конце борьбы со свирепым быком Гильгамешу удается с помощью кинжала избавиться от небесного быка. Урал-батыр не убивает быка царя Катила, а заставляет его в дальнейшем служить людям. *«Твои прямые рога изогнулись - И вечно будут теперь такими! Плотные копыта твои разомкнулись - И вечно будут теперь такими! Не только у тебя - у всего рода!»*, что, безусловно, совпадает с главной идеей башкирского эпоса – спасение народа от «катилов», драконов и злых духов. Мотивы действий Гильгамеша более земные: *«Встану я над его трупом в знак победы, Наполню рога елеем – подарю Лугальбанде!»*. Древность «Урал-батыра» подтверждается, как видно, орудием уничтожения быка: Урал-батыр сражается в рукопашную, а Гильгамешу удается одолеть с помощью железного кинжала. Изобретение которого относится более к поздним историческим эпохам. Таким образом, попытка сопоставительного изучения великих мифологических памятников позволяет установить типологическое и генетическое сходство памятников. «Сказание о Гильгамеше», как известно, имеет мировую славу как письменный памятник древних шумеров. Башкирский эпос – памятник изустного фольклора. Сходство башкирского эпоса «Урал-батыр» с данной мировой мифологигией, безусловно, позволяет утверждать мнение о том, что башкирский эпос «Урал-батыр» - тоже явление мировое. По нашему мнению, «Сказание о Гильгамеше» еще не известно широкому кругу башкирских читателей, что подталкивает нас к осуществлению перевода шумерской мифологии на башкирский язык и приступить к лингвистическому и литературоведческому исследованию. Скрупулезный анализ поэтики двух мифологий придаст еще больший мировой интерес к башкирскому эпосу.

Литература

1. Жирмунский В.М. К вопросу о международных сказочных сюжетах. // В кн.: Русская фольклористика. Хрестоматия. – М.: Высшая школа, 1970. – с.30

2. Хусаинов Г.Б. Поэтика эпоса «Урал-батыр» // В кн.: Эпос «Урал - батыр» и мифология // Материалы Всероссийской НПК 27-29 мая2003г. – Уфа, 2007. – с.30

3. Резяпов Р.Ф. «Урал-батыр» һәм боронғо цивилизацияларҙың эпик ҡомартҡылары. // Материалы Всероссийской НПК 27-29 мая 2003г. – Уфа, 2007. – с.136

4. Галлямов С.А. Башкордская философия. Этика. Т.3. – Уфа: Китап, 2005. – с.6

5. Саньяров Ф.Б. «Урал-батыр»: опыт лингвистического исследования. Монография. - Уфа: РИЦ БашГУ, 2006. – с. 175

УДК 811.512.141

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ МАТЕМАТИК ГРАМОТАЛЫЛЫҠТЫ ФОРМАЛАШТЫРЫУ

THE FORMATION OF MATHEMATICAL LITERACY IN THE LESSONS OF THE BASHKIR LANGUAGE AND LITERATURE

Г.Ф. Сиразетдинова,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ № 4 г. Дюртюли.
G.F. Sirazetdinova, teacher of Bashkir language and literature, MBOU Secondary School No. 4 Ufa Durtyuli.

Аннотация. В статье приводятся эффективные приемы формирования математической грамотности на уроках башкирского языка и литературы. Практическая значимость состоит в том, что материалы исследования могут быть использованы в практике работы учителей башкирского языка и литературы и математики.

Ключевые слова: функциональная грамотность, математическая грамотность, игравая деятельность.

Annotation. The article presents effective methods for the formation of mathematical literacy in the lessons of the Bashkir language and literature. The practical significance lies in the fact that the research materials can be used in the practice of teachers of the Bashkir language and literature and mathematics.

Keywords: functional literacy, mathematical literacy, gambling activity.

Бөгөнгө көн кешене үҙен уратып алған донъяға тиҙ арала яраҡлашыу, үҙ аллы фекер йөрөтөргә өйрәнеүҙе талап итә, уҡыусыларҙың белем сифатын үҫтереүҙә уҡытыусылар алдында яңы бурыстар ҡуя. Белем биреү системаһында функциональ грамоталылыҡты формалаштырыу юғары маҡсаттарҙың береһе. Функциональ грамоталылыҡ – тормош бурыстарын хәл итеү өсөн, кешенең ғүмер буйына алған белемдәрен йәшәйештә, аралашыуҙа ҡуллана белеү һәләте ул. Ул уҡыу грамоталылығын, математик грамоталылыҡты, финанс грамоталылығын, глобаль компетенциялар, креатив фекерләүҙе үҙ эсенә ала. Бөгөнгө цифрлаштырыу осоронда, уҡыусыларҙа математик грамоталылыҡты үҫтереү айырыуса әһәмиәткә эйә тип уйлайым. Дәрестәрҙә уҡыусыларҙың

ирекле аралашыуы һәм күнекмәләрҙе практик ҡуллана белеүе эшебеҙҙең төп маҡсаты булып тора.

Башҡорт теле дәрестәрендә математик грамоталылыҡҡа өйрәтеү башланғыс класта башлана, уҡыусылар һандар менән таныша, телмәрҙә рәт һандарын ҡулланып һанарға, ваҡытты дөрөҫ әйтергә өйрәнә. Һандарҙы дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҫтерергә ярҙам итә.

Һандар беҙҙең тормошта бик ҙур роль уйнай. Йылдар,айҙар, көндәр һанала. Сәғәт телдәре лә һандарҙы күрһәтә. Магазинда аҙыҡ-түлек алғанда ла улар ярҙамға килә. Бөгөнгө көндә уҡыусылар рус мәктәптәрендә тик рус телендә генә яҡшы итеп һанай белә. Баланы нисек итеп башҡортса дөрөҫ итеп һандарҙы уҡырға, һанарға өйрәтеү бөгөнгө көндә проблема булып тора.

Беренсе кластан уҡ балаларҙы иҫәп-хисапҡа өйрәтәбеҙ. Башта 1-ҙән 10-ға тиклем, һуңынан 20-гә тиклем, 100-гә тиклем h.б. дәрестән дәрескә датаны яҙабыҙ, китап битенең йәки күнегеүҙең номерын атайбыҙ, әммә һигеҙенсе синыфҡа балаларҙың 14 һәм 40, 15 һәм 50 һандарын дөрөҫ әйтмәүе, даталарҙың нисек уҡылыуын онотоуы асыҡлана.

Текста һандарҙы күреү менән уларҙы уҡығанда бала юғалып ҡала, ярҙам һорап уҡытыусыға ҡарай, йәки рус телендә әйтеп китә. Китаптың ниндәй битен асырға кәрәклеген әйткәндә лә рус теленә тәржемә итеп бирәбеҙ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресендә ҙурыраҡ һандар осраһа, оло проблемаға әйләнә. Уҡыусыларҙың һандарҙы телмәрҙә аңлап ҡулланыуына нисек ирешергә? Математик грамоталылыҡты формалаштырыу өсөн эшемдә ҡулланған бер нисә алым менән таныштырып үтәм .

Аудиялау төрөн үҫтереү өсөн дәресте башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшәм тип аталған күнегеүҙән башларға мөмкин. Таҡтала алдан яҙып ҡуйған һандарҙы уҡытыусы уҡып күрһәтә, унан уҡыусылар менән дөрөҫ әйтеү күнекмәләре башҡарыла (һигеҙ , туғыҙ, утыҙ,ҡырҡ, йөҙ...).

Башланғыс мәктәптә төрлө уйын алымдары ҡулланыла, мәҫәлән, «Лото», «Домино», h.б. «Мин ниндәй һан уйланым» уйыны барышында балалар иҫәпләү күнекмәләре өҫтөндә эшләй.

«Аҙна исемдәрен һанайбыҙ» уйыны иҫәпте әүҙемләштереүгә генә түгел, көндәрҙең исемдәрен иҫкә төшөрөүгә лә ярҙам итәсәк. Бала аҙна исемдәрен рус телендә генә әйтә, ә бит уларҙың һәр береһенең үҙ исеме бар. Көн исемдәрен онотоп ебәрмәҫ өсөн, бик кәрәкле күнегеү. Быныҡ өсөн класс ике төркөмгә бүленә. Артабан шәмбенән өстө алабыҙ, тигән бирем башҡарыла һәм башҡа шундай һорауҙар бирелә. Дөрөҫ яуап биргән команда еңеү ала . Был күнегеү логик фекерләүҙе лә үҫтерә.

Юғары кластарҙа мәсьәлә ҡатмарлана, балаларҙың телмәре байый, уҡыусылар үҙ телмәрен даталар, процентар ярҙамында төҙөй. Уҡыусылар ҙур һандарҙы иҫтә тотоп, улар менән эшләргә өйрәнһен өсөн, төрлө алымдар ҡулланырға мөмкин.

Әҙәбиәт дәрестәрендә портреттар менән эшләү бик тә уңай нәтижәгә килтерә. Күренекле әҙиптәребеҙҙең портреттары бирелә. Кем икәнен әйтеп ,

йәшәгән йылдары билдәләнә. Был эш төрө ярҙамында уҡыусылар танырға өйрәнәләр, ҡушма һандар менән эшләү күнекмәләре булдырыла, күнегеү хәтерҙе үҫтерергә ярҙам итә.

«Футбол» уйынын үткәреү йомғаҡлау дәрестәрендә бик ҡулайлы. Бер уҡыусы ҡапҡаға баҫа. Уға "Һандар" темаһы буйынса 5 һорау бирелә. Дөрөҫ яуап булһа, "туп" ҡапҡанан ситкә китә, дөрөҫ булмаһа – эсенә инә. Нисә "тупты" индермәй, шундай билдә ала.

Һандар ингән тексты уҡыу – төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙың йөкмәткеһен аңлау, мәғлүмәтте һайлап алыу күнекмәләрен формалаштыра.

Предмет һөҙөмтәләре булараҡ, һөйләү уҡыусыларҙың аралашыу ситуацияһына ҡарап, текст төҙөй белеүе, иптәштәре алдында сығыш яһай алыуҙарынан тора. Һандарҙы ҡулланып, автобиографияны һөйләтергә мөмкин.

Уҡыусыларҙы яңы белем алырға, уларҙы практик ситуацияларҙа ҡулланырға, күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы баһалау һәм алынған белем нигеҙендә ниндәйҙер ҡараҙар ҡабул итергә өйрәтеү – бөгөнгө көндә уҡытыусыларҙың маҡсаты булып тора.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. Өфө: БДУ, 2002.

2. Ермоленко, В. А., Перченок, Р. Л., Черноглазкин, С. Ю. Дидактические основы функциональной грамотности в современных условиях: Пособие для работников системы образования [Текст] / Российская академия образования, теории образования и педагогики. – М. : ИТОП РАО,1999.

3. Симановский Я. Е. Развитие математической грамотности младших школьников, 1996.

УДК 37

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ АУДИОЯҘМАЛАРҘЫ «ИНТЕРАКТИ» ПЛАТФОРМАҺЫНДА ҠУЛЛАНЫУ АША УҠЫУ ГРАМОТАЛЫЛЫҒЫН ҮҪТЕРЕҮ ЮЛДАРЫ

WAYS TO DEVELOP EDUCATIONAL LITERACY IN BASHKIR LANGUAGE LESSONS THROUGH THE USE OF AUDIO RECORDINGS ON THE INTERAKTI PLATFORM

Г.Ф. Суярембитова,
учитель башкирского языка и литературы,
МАОУ “СОШ № 33 им. Н.И. Суханова”, г. Стерлитамак РБ,
G.F. Surembitova,
teacher of Bashkir language and literature,
MAOU "Secondary school No. 33 named after N.I. Sukhanov", Sterlitamak RB,

Аннотация. В статье рассматривается пути формирования и развития читательской грамотности обучающихся на уроках башкирского языка и литературы. Большое внимание удиляется интерактивным образовательным платформам, в том числе платформе «Интеракти».

Ключевые слова: читательская грамотность, образовательная платформа, аудио файлы.

Annotation. The article examines the ways of formation and development of reading literacy of students in the lessons of the Bashkir language and literature. Much attention is paid to interactive educational platforms, including the Interakti platform.

Keywords: reading literacy, educational platform, audio files.

Оҫталыҡ дәресе

Маҡсаты: Башҡорт теле дәрестәрендә аудиояҙмаларҙы «Интеракти» платформаһында ҡулланыу аша уҡыу грамоталылығын үҫтереү юлдарын күрһәтеү.

Бурыстары: эшлекле аралашыу, үҫеш өсөн профессиональ мөхит булдырыу; белем биреүсе «Интеракти» платформаһын үҙләштереү, аудиояҙмалар үҙенсәлектәре менән таныштырыу.

– Хәйерле көн, хөрмәтле уҡытыусылар! Һеҙҙе үҙемдең оҫталыҡ дәресемдә ҡатнашыр алдынан бер яҙма тыңлап үтергә саҡырам. (*Сафуан Әлибаев башҡарыуында йыр)*

– Хөрмәтле коллегалар, нисек уйлайһығыҙ, кем башҡарыуында булды был йыр?

– Эйе, афарин! Ни өсөн был аудиояҙма менән мин оҫталыҡ класын башланым? Нисек уйлайһығыҙ?

– Рәхмәт, төрлө яуаптар булды. Эйе, беҙ Сафуан Әлибайҙың күренекле башҡорт шағиры икәнен беләбеҙ. «Мәктәп”, “Йәйғор”, “Яҙҙы көтәм”, “Тылсымлы шар”, “Серле шишмә” шиғырҙары менән танышбыҙ. Шиғырҙарын яратып уҡыйбыҙ. Ә инде уның башҡарыуында йырҙы ишетеү был шәхесте тағы ла нығыраҡ күҙ алдына баҫтырырға һәм уның булмышын тойорға ярҙам итә.

– Мин бөгөн һеҙҙе ***“Тере тауыш – тере тарих ”*** тип аталған оҫталыҡ дәресемә саҡырам.

– Һуңғы тапҡыр ниндәй шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡынығыҙ? Уҡый белгән кеше грамоталы кешеме?

– Уҡый белеү генә – ул грамоталы тигәнде аңлатмай әле. Бөгөнгө көндәрҙә белем биреү системаһында “Уҡыу грамоталылы”ғы тигән төшөнсә ҡулланыла. Йәғни уҡылған мәғлүмәтте аңлау, баһалау, сағыштырыу, социаль тормошта файҙаланыу – былар барыһы ла грамоталылыҡты күрһәтә. Уҡыу грамоталылығы - ул кешенең үҫеше өсөн нигеҙ. Тимәк, тормошта үҙ маҡсатына ынтылыу, уңыштарға ирешеү өсөн барыбыҙға ла уҡыу грамоталылығын формалаштырыу кәрәк.

Оҫталыҡ дәресемдең маҡсат һәм бурыстарын һеҙ слайдта күрәһегеҙ**.**

Яҙыусы-шағирҙарҙың тауыштарын йыйып аудиояҙмалар булдырҙым һәм “Интеракти” – Рәсәй платформаһында үҙ эшемде башланым. Был платформа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы итеп үткәреү өсөн бик күп мөмкинлектәрҙе үҙ эсенә ала. Уҡыусыларҙың уҡыу грамоталылығын үҫтереүҙә “Интеракти” сайтында интерактив күнегеүҙәр банкы булдырҙым. Был интерактив күнегеүҙәрҙә компьютер технологияларының өҫтөнлөгөн баһалап китмәксемен. Йәғни



күргәҙмәлелек, мәғлүмәттәрҙең һүрәтләнеш, стереотауыш берлегендә бирелеүе белем биреү эффектын көсәйтә, материалды үҙләштереүҙең сифаты күтәрергә булышлыҡ итә, уҡыусыла предметты өйрәнеүгә мотивация тыуҙырыу сараһы ла булараҡ хеҙмәт итә. Шул уҡ ваҡытта уҡыусыларҙың ишетеп аңлау һәләтен үҫтереү өҫтөндә эшләү өсөн дә был текстар аудиояҙмаға яҙылған һәм куар код менән махсус ҡушымтала был аудиояҙма асыла.

Платформаға теркәлеү ҡыйынлыҡ тыуҙырмай, электрон адрес ҡына талап ителә. Ә йөкмәткеһе бөйөк шәхестәрҙең, шулай уҡ әле ижад итеүсе йәш яҙыусыларҙың да әҫәрҙәрен, улар башҡарыуында яҙмаларға тәҡдим ителә.

Беренсе эш төрө. – Һеҙҙең иғтибарға дүрт шағир һәм авторҙар башҡарыуында аудиояҙмалар бирелгән. Билдәләгәндә, яҙма эргәһенә шәхестең портретын килтереп ҡуя барығыҙ. (Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Рәми Ғарипов) Һылтанма буйынса үтергә: (https://interacty.me/projects/f57f51b15e70f511)



Һығымта: Әйткәндәй, мин бындай эш уҡыусыларға бүлекте дөйөмләштергәндә бирәм. Ә һәр шәхестең үҙ тауышы менән уның биографияһын йәки ижадын өйрәнгәндә тыңлатып үтәм. Хөрмәтле студенттар, тик шуны оноторға ярамай, автор башҡарыуындағы яҙмаларҙы урынлы ҡулланырға тейешбеҙ. Шулай уҡ яҙма ялҡытҡыс булмаҫҡа тейеш, юғиһә иғтибар юғала. Мотлаҡ яҙма өйрәнеләсәк материал йәки шәхес менән бәйле булырға тейеш, шулай уҡ һәр дәрестә ҡулланыу ҙа ғәҙәти күренешкә инеп, иҫтә ҡалмаҫҡа мөмкин.

Икенсе эш төрө. – Ниндәй китаптарға өҫтөнлөк бирәһегеҙ: баҫма, аудио? Миҙалдың ике яғы булған кеүек платформа һеҙгә баҫма, аудио вариантын тәҡдим итә. Әйҙәгеҙ, беҙ һеҙҙең менән заман һәм әлеге ваҡытта актуаль проблемаларҙы яҡтыртҡан әҫәрҙәргә туҡтап китәйек. Өс төрлө әҫәр һәм авторҙар тәҡдим ителгән. Иғтибар менән тыңлағыҙ. Автор-әҫәр исемен билдәләргә тырышығыҙ һәм ишетелгән аудифайлдан һеҙҙең алдығыҙҙағы фекерҙәрҙе “дөрөҫ” йә “дөрөҫ түгел” тип билдәләп сығыу кәрәк. Һылтанма буйынса үтергә: (https://interacty.me/projects/6c2d451ff9930bdb).



Һығымта: Тимәк, әҫәрҙәр беҙгә тормошто күҙ алдына баҫтырырға, һығымта яһарға ярҙам итә. Авторҙарҙың йөрәк тауышын беҙ ҡабул итеп алабыҙ. Әйткәндәй, мин был эш төрҙәрен туған

башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусылар өсөн тәҡдим итәм. Текстарҙы авторҙарҙың үҙҙәре уҡыуы уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята. Аудиояҙма ялҡытҡыс булмаҫҡа тейеш, юғиһә иғтибар юғала. Был аудиояҙмалар яҙҙыртыу өсөн авторҙар менән үҙем бәйләнешкә сығам йә иһә “Ашҡаҙар” радиоһының «Илһам» бүлегенә мөрәжәғәт итәм. Унда бик күп авторҙарҙың үҙ тауыштары менән яҙылған яҙмалар һаҡлана.

Өсөнсө эш төрө. – Киләһе эш төрөнә күсәйек. Был эш бигерәк мауыҡтырғыс та, ҡыҙыҡ та. Уҡыу грамоталылығы ул текстар ғына уҡыу түгел. Ә төрлө схемалар, таблицаларҙы ла уҡыу, унан информация ала белеү ҙә. Һеҙгә 3 яҙыусы тураһында мәғлүмәт тәҡдим ителгән. Тик был мәғлүмәттә авторҙың исем-фамилияһы, бер тапҡыр ҙа телгә алынмай. Бары асҡыс һүҙҙәр, әйҙәгеҙ, был эште башҡарығыҙ.

Һығымта: Ошондай эш төрҙәре уҡыусылар ҙур теләк менән башҡарып сығалар. Дәрес башында йәки өйгә эш итеп бирелә. Был инде уҡыусыла артабан уҡырға ҡыҙыҡһыныу уятһа, әҫәрҙе уҡый башлағанға тиклем автор менән таныш та була. Әлбиттә быны платформала һәм баҫма вариантта ла эшләп була. Иғтибар, экранға (Динис Бүләков, Ноғман Мусин, Жәлил Кейекбаев). Һылтанма буйынса үтергә: (https://interacty.me/projects/e59e90007e0550fc)

Был платформала шулай уҡ, 3-сө линиялағы уҡыусылар, йәғни башҡорт дәүләт телен өйрәнеүселәр өсөн аудиояҙмалар бар. Һеҙҙең иғтибарға 5-се кластарҙың уҡыу программаһына ярашлы “Йыл миҙгелдәре”, “Ғаилә”, “Мәктәп” һәм башҡа темаларға аудиояҙмалар тупланды. Был аудиояҙмалар диктор уҡыуында булдырылды.

Шулай итеп, платформаның беҙҙең эшебеҙҙә кәрәкле йүнәлештәрен ҡарап үттек. Ысынлап та, башҡорт телен үҫтерер, дәрестәребеҙ сағыу һәм ҡыҙыҡлы булһын өсөн күп эҙләнергә, эш тәжрибәлә төрлө алым һәм методтар ҡулланырға тейешбеҙ. Оҫталыҡ дәресен йомғаҡлап, ҡулымдағы ике әйбергә ҡарап, нимә әйтә алабыҙ. Был таштар һеҙгә ниндәй мәҡәлде хәтерләтә. Ысынлап та, ятҡан таш мүкләнер, йөрөгән таш шымарыр тигән тапҡыр бер мәҡәл бар. Быныҡ менән нимә әйтергә теләйем мин, эҙләнәйек, эшебеҙҙә төрлө метод һәм алымдар ҡулланайыҡ. Шәхестәр тауыштарҙы замандаштарыбыҙға еткерә алайыҡ! Улар бит тере тарих! Илһөйәр һәм телһөйәр булып ҡалығыҙ!

УДК 159.923

ҒИЛЕМ ҺӘМ МОҢ ЭЙӘҺЕ

THE OWNER OF KNOWLEDGE AND MELODY

А.Б. Суяргулова
учитель башкирского языка и литературы МБОУ лицей №12, г. Ишембай
A.B. Suyargulova teacher of Bashkir language and literature
MBOU Lyceum No. 12, Ishimbai

Аннотация. Статья – слово студента о своем педагоге, о его влиянии в становление личности, о его уроках жизни.

Ключевые слова: личность, жизненные уроки, научные труды.

Annotation. The article is a student's word about his teacher, about his influence in the formation of personality, about his life lessons.

Keywords: personality, life lessons, scientific works.

1974-1979 йылдарҙа мин, Сөйәрғолова Әнисә Булат ҡыҙы, Стәрлетамаҡ педагогия институтының рус-башҡорт бүлегендә уҡыным. Салауат Әхмәҙиә улы беҙгә башҡорт халыҡ ижады, иҫке ғәрәп теле буйынса лекциялар уҡыны. Беренсе парҙа уҡ студенттарға стипендия алып уҡырға кәрәклеге тураһында әйтте:

– Ҡыҙҙар һәм егеттәр, стипендия алып уҡыһағыҙ, тимәк, һеҙ өлгәшеүселәр рәтендә, икмәк-сәйлек аҡсағыҙ була, атай-әсәй биреп ебәргән аҡсаға өҫтәмә ярҙам буласаҡ, - тип һөйләп торғаны әле лә иҫтә.

Халҡыбыҙҙың боронғо оҙон көйҙәренә мөкиббән ғашиҡ булған остаз ине ул. Үҙе менән бәләкәй генә портатив магнитофон йөрөттө, ә унда тик оҙон көйҙәр тупланғайны. Лекция ваҡытында берәй көйҙө тыңлата ла: “Был ниндәй көй?” – тип һорай.

Ауылдан килгән балаларға ҡала мөхитенә нисек өйрәнергә, үҙ-үҙеңде нисек тоторға, нисек йәшәргә өйрәтер ине. Үҙенең башынан үткәндәре менән дәлилләп, ныҡышмал булырға, алдыңа ҡуйған маҡсатҡа, нисек кенә ауыр тойолмаһын, тырышып барырға өйрәтте:

– Мин бит институтҡа уҡырға сентябрь башында ғына килдем. “ Ҡабул итеү бөттө, һуңланың”, – тиҙәр. Шулай тип ҡат-ҡат әйтеүҙәренә ҡарамай, “Мин уҡырға килдем!” тигән өс һүҙҙе ҡабатлап тик торам. Аптырағас, “ирекле тыңлаусы” итеп алдылар мине, – тип һөйләгәйне ул.

Талапсан, етди уҡытыусы булды Салауат ағай, әммә әрләгән саҡта ла, үҙ балаһылай, яратып, яҡын итеп, аңлап асыуланыр ине. Берәй студент ләрес ҡалдырһа, илке-һалҡы уҡый башлаһа, “язаһы” ла йомшаҡ, атайҙарса уйланған була. “Әсәйеңә хат яҙам, бар, конверт алып кил”, тип ебәрә һине. Конверт алып килгәнсе, хат яҙылғансы күпме ваҡыт үтә! Шул арала һин уйланаһың, хатаңды аңлайһың, етмәһә, хатты ебәреү ҙә үҙеңә ҡушыла. Мөмкин ебәрергә, мөмкин ебәрмәҫкә..., тигәндәй.

Салауат Әхмәҙиә улының күләмле, бәҫле хеҙмәте – күп томлы “Башҡорт халыҡ ижады” йыйынтыҡтарын сығарыуҙа ҡатнашыуы. Башҡорт халыҡ эпосын өс томға туплап, ата-бабаларыбыҙҙың изге аманатын беҙҙең быуынға тиклем еткереүсе редакция коллегияһы ағзаһы ла ул.

Салауат ағайҙың фәнни эшмәкәрлеге башҡорт фольклористикаһы тарихына ғына түгел, төрки халыҡтарының уртаҡ поэтик ҡомартҡыларына ла тарала ине. Ошо йүнәлештәге диплом эшемдең етәксеһе – Салауат Әхмәҙиә улы булды. Диплом темаһы – Йософ Баласағуниҙың “Ҡотадғу билиг” (“Ҡот килтереүсе белем”) әҫәре буйынса ине. Ул мине атаҡлы фән эшмәкәрҙәренең ошо темаға яҙылған хеҙмәттәре менән таныштырҙы. Хәҙерге аҡылым менән шулай уйлайым: Йософ Баласағуниҙың уҡымышлылығын, аҡыл менән эш итеүен, ғәҙеллекте яҡлауын Салауат ағайҙың үҙенә лә тулыһынса ҡайтарып була икән. Иҫемдә, әҫәрҙең төҙөлөшөн, сюжетын ентекләп тикшертте, мәҡәл-әйтемдәрен сүпләтте, башҡорт халҡында ла ҡулланыуын асыҡланыҡ,

мәснәүиҙәр оҫтаһының шиғри үлсәмдәре лә беҙҙе ҡыҙыҡһындырҙы. Күп йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, был диплом эше онотолмаған, һәм Салауат ағай боронғо тарихыбыҙҙы төрлө яҡтан өйрәнеүгә йүнәлеш биргән.

Ошондай фундаменталь белемгә эйә булыу өҫтөнә, Салауат ағай күңеле тулы моң, йыр йөрөткән кеше ине. Уның шәхесе тураһында уйланғанда, халыҡ йырҙарын өйрәнеүе, тикшереүе, системаға һалыуы тураһындағы хеҙмәттәрен баһаламай мөмкин түгел. Башҡорт халыҡ тарихи йырҙарын жанр – тематик яҡтан төркөмләүе, “Йылдар һәм йырҙар”, “Башҡорт халҡының йыр поэзияһы” ,“Башкирские народные песни” методик ҡулланмаһы - тиҫтәләгән быуынға етерлек бай хазина. Һуңғы китабын беҙҙең ғаиләгә автографы менән бүләк иткәйне. Унда шундай юлдар яҙылған: “Маратҡа, Әнисәнең иптәшенә, хәләл ефете Әнисәгә тигеҙ ғүмер итегеҙ, балаларығыҙҙың изгелеген күрегеҙ, тип Салауат Галин ”. Һуңынан остазымдың таныш имзаһы һәм дата – 21.02.1996й.

Башҡорт ғилем донъяһына, мәғрифәтенә, милли мәҙәниәте үҫешенә тормошон бағышлаған Рәсәй Федерацияһы Гуманитар фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор Салауат Әхмәҙиә улы Галиндың 90 йыллыҡ юбилейы айҡанлы рәхмәт һүҙемде әйтә алыуым менән мин бәхетлемен. Уның яҡты исеме халҡым күңелендә мәңге йәшәр.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. III том: Өфө, Китап.- 1981,344б.
2. Башҡорт әҙәбиәте анталогияһы:I том, Өфө, Китап.- 469б.
3.Галин С.Ә. Тел асҡысы – халыҡта: Өфө, Китап.-1993, 224б.
4. Галин С.Ә. Йылдар һәм йырҙар: Өфө, Китап. – 1979, 456б.
5. Галин С.Ә. Башҡорт халҡының йыр поэзияһы: Өфө, Китап. – 1980, 523 б.
6. Галин С.А. Башкирские народные песни: методическое пособие: Уфа, БИРО. 1994, 55с.
7. Беҙҙең календарь. Салауат Галин //Ағиҙел №2, 2024й., 191б.

УДК 811.512.141

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ УҠЫУ ГРАМОТАЛЫЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ ЮЛДАРЫ

WAYS OF FORMING STUDENTS' EDUCATIONAL LITERACY IN BASHKIR LANGUAGE LESSONS

С.А.Тагирова,
к.п.н., доцент, заведующий кафедрой башкирского языка и литературы БГПУ им. М.Акмуллы ГО г.Уфа;
Б.З.Астанова,
учитель башкирского языка и литературы ООШ № 21 г. Белорецк;
Р.С.Шаяхметова,
учитель башкирского языка и литературы Республиканского центра дистанционного образования детей-инвалидов г. Белорецк.

S.A.Tagirova,
Associate Professor, Head of the Department of Bashkir Language and Literature of the BSPU named after M.Akmulla GO G.Ufa;
B.Z.Astanova,
teacher of Bashkir language and literature of Secondary School No. 21 in Beloretsk;
R.S.Shayakhmetova,
teacher of Bashkir language and literature of the Republican Center for Distance Education of Disabled Children in Beloretsk.

Аннотация. В статье рассматриваются дидактические приёмы и педагогические технологии, способствующие формированию читательской грамотности школьников. Автор отмечает необходимость учить детей относиться критически к информации, осмысливать её, учить читать инструкции, проверять источники и делать выводы.

Ключевые слова: функциональная грамотность, читательская грамотность, совершенствование навыков осознанного чтения, дидактический материал.

Annotation. The article discusses didactic techniques and pedagogical technologies that contribute to the formation of reading literacy of schoolchildren. The author notes the need to teach children to be critical of information, to comprehend it, to learn to read instructions, check sources and draw conclusions

Keywords: functional literacy, reading literacy, improvement of conscious reading skills, didactic material.

Бөгөн йәмғиәттә, бигерәк тә мәғариф өлкәһендә, функциональ грамоталылыҡ, уҡыу грамоталылығы, финанс грамоталылыҡ терминдары йыш осрай. Тәү сиратта был күренеш төп белем биреү ойошмаларының Федераль белем биреү стандарттарының яңыртылыуы менән бәйле. Норматив талаптар йыйылмаһы булған документта яңы төп төшөнсәләрҙең бере̇he булараҡ функциональ грамоталылыҡ айырып күрһәтелә.Уның төп йөкмәтке берәмектәре итеп уҡыу грамоталылығы, математик грамоталылыҡ, тәбиғи фәндәрҙе белеү буйынса грамоталылыҡ, финанс грамоталылығы, глобаль компетенциялар һәм креатив фекерләү айырып күрһәтелә. Белгестәр билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа уҡыусылар айырым фәндәр буйынса юғары һөҙөмтәләр күрһәтһәләр ҙә, ул белемде тормош ситуацияларында файҙалана белеүҙә билдәле ауырлыҡтар кисерәләр. Булған белем, оҫталыҡ һәм күнекмәләрҙе тормошта төрлө донъяуи мәсьәләләрҙе хәл иткәндә файҙалана белеү һәләте булараҡ ҡаралған функциональ грамоталылыҡ ошо бушлыҡты тулыландырыуға үҙ өлөшөн индерер тип күҙаллана. Функциональ грамоталылыҡ уҡыусыла мәктәптә алған теоретик белемен төрлө эшмәкәрлек өлкәләрендә ҡалыплашҡан тормош ситуацияларын хәл итеү аша формалаша. Функциональ грамоталы шәхес – ҡыҙыҡһыныусан, маҡсатлы, киң даирәле, башҡалар менән дөрөҫ мөғәлләмә, үҙ аллы ҡарар ҡабул итергә һәләтле кеше. Функциональ грамоталылыҡ формалаштырыуға йүнәлтелгән компетенция-

ларға түбәндәгеләрҙе индерәләр:тексты аңлау, ундағы мәғлүмәтте дөйөмләштерә белеү оҫталығы, бурыстарҙы хәл итеү өсөн төп мәғлүмәтте айырып ала белеү, мәғлүмәтте кәрәкле форматҡа әйләндерә белеү, алдан белгәндәрҙән яңы өҫтәлмә мәғлүмәтте айырып ала белеү. Уның мөһим компоненттарының береһе – уҡыу грамоталылығы. Уҡыусыларҙың өлгәштәге уңыштары аңлы, төплө булыуы уҡыу грамоталылығы күнекмәләренең үҫеш кимәле менән туранан-тура бәйле. Уҡыусыларҙың белем ҡаҙаныштары кимәлен баһалаусы халыҡ-ара PISA программаһы уҡыу грамоталылығын кешенең яҙма текстарҙы үҙ маҡсаттарына ирешеү өсөн (белем арттырыу, аң даирәһен киңәйтеү, социаль тормошта маҡсатлы ҡатнашыу оҫталығын үҫтереү) файҙалана белеү һәләте тип билдәләй.

Белем биреү системаһында уҡыу грамоталылығы бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла. Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыу грамоталылығы «тәжрибәле» уҡыусы кеүек ҡылыҡһырлана, уҡыусының художестволы әҫәрҙе ҡабул итергә һәләте,анализлай белеүе,төрлө стилдәге текстарҙы айыра,телмәр төҙөй, уҡылған китап буйынса фекер алышыуҙа ҡатнаша белеү һәләтен күҙаллай. Тел дәрестәрендә уҡыу грамоталылығы тексты танышыу, өйрәнеү, ҡарап сығыу маҡсаттары менән уҡыуҙы һәм танышҡан текст йөкмәткеһен үҙләштереүгә ҡайтып ҡала. Метапредмет һөҙөмтәләргә ирешеү аңлы уҡыуҙы һәм ҡайһы бер дөйөм күнекмәләргә (мәҫәлән. дөйөмләштерә белеү, төркөмләү, бәйләнеш табыу, эҙмә-эҙлелек билдәләү, һығымталар сығарыу һәм башҡалар) эйә булыуҙы күҙаллай. Функциональ грамоталылыҡта иһә текст – йәмғиәттә үҙ урыныңды табырға өйрәнеү,маҡсаттарыңа ирешеүҙә мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итергә өйрәтеү ысулы. Был осраҡта уҡыу грамоталылығы мәктәп сиктәренән сығып, донъяуи һәм һөнәри маҡсаттарҙы күҙаллай. Шул уҡ ваҡытта текст эшмәкәрлегенең предмет һәм метапредмет тәбиғәте һаҡланыуы мөһим.

Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, башҡорт теле дәрестәрендә текст менән эшләү, башлыса. уҡыусыларҙың тел буйынса теоретик белемен һәм телмәр күнекмәләрен үҫтереүгә йүнәлтелә. Әммә уҡыу активлығын дәрестән тыш эшмәкәрлектең башҡа сфераларына сығарырлыҡ коммуникатив биремдәр һирәк осрай.

Уҡыу грамоталылығы формалаштырыу буйынса эшмәкәрлекте башланғыс кластарҙан юғары кластарға тиклем дәрестә һәм дәрестән тыш эшмәкәрлектә, өйгә эш башҡарғанда ла маҡсатлы ойошторо п була. Был төр эшмәкәрлекте дәрестең ҡайһы этабында ла уңышлы файҙаланып булыуы ла иғтибарға лайыҡ. Дәрес башында текст нигеҙендә проблемалы ситуация булдырыу, теманы үҙләштереү барышында уҡытыусы етәкселегендә уҡығанды төшөнөү, анализлау. ныҡытыу этабында төрлө биремдәр башҡарыу, контроль-баһалау этабында өлгө нигеҙендә текстар төҙөү мөмкин. Дәрестең ҡайһы этабында башҡарылһа ла уҡыу грамоталылығын формалаштырыу һәм баһалау дәрес һөҙөмтәлелеген арттырыуға йүнәлтелеүе шарт. Уҡыусыларҙың үҙ уҡыу эшмәкәрлеген дөрөҫ ойошторорға өйрәнеү процесы нигеҙендә аңлы, мәғәнәне төшөнөп уҡыу оло әһәмиәткә эйә. Уҡыусыларҙа уҡыу грамоталылығын уңышлы формалаштырыуҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре ҙур роль

уйнай. Уҡыусыларҙа шәхси, метапредмет, предмет һөҙөмтәләрен формалаштырыу барышында был дәрестәрҙә текст менән эшләүгә киң мөмкинлектәр асыла. Беҙҙең тарафтан, был проблеманың актуаллеген күҙ уңында тотоп, «Уҡыу грамоталылығы» тип аталған күнегеүҙәр йыйынтығы төҙөлдө. Унда тәҡдим ителгән эш төрҙәре уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнгән 5-9-сы класс уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән. Текстарҙың темаһы, маҡсат, һөҙөмтәләр Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына, өлгө программаларға һәм В.И.Хажин, Ә.Х.Вилданов, Ф.Ә.Аҡҡужина, М.И.Ҡарабаев, З.Р.Әминева авторлығында төҙөлгән дәреслектәрҙәге лексик темалар менән ауаздаш. Һеҙҙең иғтибарға ошо хеҙмәттән эш төрҙәре тәҡдим итәбеҙ.

Еүеш салфеткалар ҙа тәбиғәткә зыянлы!

Тәбиғәттә ял иткәндә, сәфәргә сыҡканда күптәр үҙҙәре менән ала. Ҡыҙғаныҫка күрә, ҡайһы берәүҙәр уларҙы ҡулланып, ҡайҙа етте шунда ырғыта. Халыҡ күпләп ял иткән урындарҙа, юл буйҙарында бындай сүп-сарҙы күпләп осратырға мөмкин. Ҡайһылар еүеш салфеткаларҙы хәүефһеҙ, бәҙрәф ҡағыҙы кеүек тиҙ арала серей тип уйлайҙыр. Асылда, был сүп-сар үтә зыянлы тип иҫкәртә экологтар.

Беренсе зыян еүеш салфеткаларҙың нимәнән эшләнеүенән тора. Етештереүселәр тәүҙә уларҙы целлюлозанан эшләгән. Бындай салфеткалар тиҙ кипкән һәм оҙаҡ һаҡлауға яраҡһыҙ булған. Һуңынан синтетик матдәләрҙән, пластиктан етештерә башлайҙар. Етмәһә, уларға төрлө химик ҡушылмалар һәм консерванттар менән һеңдерәләр.

Еүеш салфеткаларҙы утилләштереү менән Рәсәйҙә һәм донъяның күп илдәрендә шөғөлләнмәйҙәр. Рентабелһеҙлек һәм махсус ҡоролмаларҙың булмауы быға сәбәп булып тора. Шунлыҡтан улар сүплек полигонына әләгә. Бында улар йөҙ йылдан ашыу ваҡыт эсендә генә саҡ юҡҡа сыға. Унда ла эҙһеҙ юҡҡа сыҡмай, ә тиҫтә йылдар буйы, микроөлөшсәләргә таркалып, тупраҡҡа, һыуға, үҫемлектәргә әләгеп, аҙыҡ сылбыры буйлап, кеше организмына инеп, бөтөн тереклекте ағыулай. Ергә ташланған салфеткаларҙы ел осора, урман һәм һыу яҡтылыҡтары бысрана. Йәнлектәр, ҡоштар һәм балыҡтар уларҙы аҙыҡ, йә ем урынына ашап, һәләк була.

Был проблеманы хәл итеү һәм тәбиғәткә зыян килтермәү өсөн нимә эшләй алабыҙ һуң?

Иң тәүҙә еүеш салфеткаларҙан баш тартырға! Уның урынына антисептиктар һәм бактерицид гелдәр ҡулланырға була. Ҡулды һабын менән йыуыу тағы ла файҙалы булыр. Әгәр тормошто еүеш салфеткаларһыҙ күҙ алдына килтерә алмайһығыҙ икән, тәбиғи епсәләрҙән торғандарына күсегеҙ. Улар тиҙерәк таркала һәм тәбиғәткә зыяны ла әҙерәк.

Тәбиғәт - сүп-сар урыны түгел. Уның таҙалығы беҙҙән башлана!

Азамат Байрамғәлин

Көньяҡ Урал ҡурсаулығы методисы

Биремдәр

1. Түбәндә бирелгән факттар араһынан текстағы информацияға тура килгәнен һайлап алығыз.

а) Күп тапҡыр ҡулланыла торған еүеш салфеткаларҙы үҙ ҡулығыз менән эшләй алаһығыз.

б) Бер тапҡыр ҡулланыла торған тарелкалар, стакандар һәм пакеттар менән бергә еүеш салфеткалар донъя экологияһы өсөн хәүеф тыуҙыра.

в) Еүеш салфеткалар менән Йыһанда осоусы йыһангирҙар ҙа ҡуллана.

г) Сүп-сар йәки етештереү ҡалдыҡтарын яңынан ҡулланыу, әйләнешкә кире ҡайтарыуҙы – икенсел эшкәртеү тип атайҙар.

2. Целлюлозанан эшләнгән салфеткаларҙың етешһеҙлеге нимәлә?

Һорауға яуапты текстан яҙып алығыз.

3. Бирелгән фекерҙәр дөрөҫмө, дөрөҫ түгелме?

	дөрөҫ	дөрөҫ түгел
1. Еүеш салфеткалар ҡағыҙ кеүек тиҙ серей.		
2. Еүеш салфеткаларҙы Рәсәйҙә утилләштермәйҙәр.		
3. Еүеш салфеткалар ун йыл эсендә юҡҡа сыға.		
4. Еүеш салфеткалар кеше организмын ағыуламай.		
5. Еүеш салфеткаларҙы антисептиктар һәм бактерицид гелдәр менән алыштырырға мөмкин.		

4. Беренсе баҡанала бирелгән һүҙҙәрҙең аңлатмаһын икенсе баҡананан табып билдәләгеҙ.

Һүҙҙәр	Аңлатмалар
1. сәфәр 2. ҡоролма	а) алыҫ юл, сәйәхәт. б) юл эше менән шөғөлләнгән кеше в) берәй эш-хеҙмәт төрөн башҡарыу өсөн төҙөлгән ҡаралты г) кешене уратып алған матди донъя

5. Тәбиғәтте еүеш салфеткаларҙан нисек һаҡларға? Текстан өс яуап яҙып алығыз.

Баһалау критерийҙары

<u>1-се эш.</u> Баһалау критерийы: текста туранан-тура бирелмәгән мәғлүмәтте билдәләй алыу оҫталығы.

Балл	Критерий йөкмәткеһе
2	“Сүп-сар йәки етештереү ҡалдыҡтарын яңынан ҡулланыу, әйләнешкә кире ҡайтарыуҙы – икенсел эшкәртеү тип атайҙар.”
0	Башҡа яуаптар билдәләнгән, йә иһә яуап юҡ.

<u>2-се эш.</u> Баһалау критерийы: текстан туранан-тура бирелгән мәғлүмәтте эҙләп табыу оҫталығы

Балл	Критерий йөкмәткеһе
1	Дөрөҫ яуап – Бындай салфеткалар тиҙ кипкән һәм оҙаҡ һаҡлауға яраҡһыҙ

	булған.
0	Башҡа яуаптар билдәләнгән, йә иһә яуап юҡ.

3-сө эш. Баһалау критерийы: тексты интерпретациялау оҫталығы

Балл	Критерий йөкмәткеһе		
2	Был фекер дөрөҫмө, дөрөҫ түгелме?	Дөрөҫ	дөрөҫ түгел
	1. Еүеш салфеткалар ҡағыҙ кеүек тиҙ серей.		*
	2. Еүеш салфеткаларҙы Рәсәйҙә утилләштермәйҙәр.	*	
	3. Еүеш салфеткалар ун йыл эсендә юҡҡа сыға.		*
	4. Еүеш салфеткалар кеше организмын ағыуламай.		*
	5. Еүеш салфеткаларҙы антисептиктар һәм бактерицид гелдәр менән алыштырырға мөмкин.	*	
1	1-2 хата ебәрелә		
0	Башҡа яуаптар билдәләнгән, йә иһә яуап юҡ.		

4-се эш Баһалау критерийы: текста бирелгән мәғлүмәтте интерпретациялау оҫталығы

Балл	Критерий йөкмәткеһе
2	Дөрөҫ яуап - 1 - а, 2 - в
1	Ике яуаптың береһе генә дөрөҫ.
0	Башҡа яуаптар билдәләнгән, йә иһә яуап юҡ.

5-се эш. Баһалау критерийы: текста бирелгән мәғлүмәтте практикала ҡулланыу оҫталығы

Балл	Критерий йөкмәткеһе
2	Дөрөҫ яуап - 1. Иң тәүҙә еүеш салфеткаларҙан баш тартырға! 2. Ҡулды һабын менән йыуырға. 3. Тәбиғи епсәләрҙән торған салфеткаларға күсергә.
1	Ике йәки бер генә дөрөҫ яуап билдәләнгән.
0	Башҡа яуаптар билдәләнгән, йә иһә яуап юҡ.

Уҡыусыларҙа уҡыу грамоталылығы формалашыуын баһалау кимәлдәре

Уҡыу грамоталылығын формалаштырыу кимәлен баһалауҙа биш кимәлде айырып күрһәтәләр:

1-се кимәл, база кимәленән түбән кимәл, уҡыусыла уҡыу грамоталылығы база кимәленән кәм, түбән булыуын аңлата.Ул көндәлек тормоштағы таныш ваҡиғаны сағылдырған ябай тексты аңламай , төп фекерҙе төшөнмәй, тема һәм маҡсатын билдәләй алмай. **(0-2 балл).**

2-се кимәл, база кимәле.Уҡыусының текстағы бер йә бер нисә ябай фекерҙе,идеяны(фекер ҡапма-ҡаршылыҡлы ла булырға мөмкин) таба һәм айырып күрһәтә белә.Шәхси тормош тәжрибәһенә һәм белеменә нигеҙләнеп, эҙмә-эҙлелек һәм бәйләнештәр аша ябай һығымта яһай ала. **(3-4 балл).**

3-сө кимәл, уртаса кимәл,текстағы бер нисә идея нигеҙендә текстың айырым өлөштәрен таныу һәм улар араһында мөнәсәбәттәр

булдырыу.Көндәлек тормош, белем кимәле,дөйөм үҫеш нигеҙендә айырым һүҙҙәрҙе һәм фразаларҙы берләштерә,сағыштыра, айырым деталдәрен күреп төшөнә белә. **(5-6 балл).**

4-се кимәл, юғары (анализ) кимәле, уҡыусының күләмле һәм ҡатмарлы текстарҙы төшөнөүе. Текстың айырым өлөштәренең бер бөтөндө барлыҡҡа килеүен аңлауы.Эш барышында формаль белемен файҙалана белеүе. **(7-8 балл).**

5-се кимәл, юғары (синтез) кимәле, уҡыусының ҡатмарлы текстарҙы төплө аңлай, кәрәкле мәғлүмәтте анализлай, һығымталар яһай белеүе.Тел нескәлектәрен, логик эҙмә-эҙлелекте төшөнөүе. **(9-10 балл).**

“Уҡый белеү – йәнһеҙ хәрефтән тере мәғәнәле һүҙҙе һурып алыу”, - тигән К.Д.Ушинский, “...Диңгеҙ төптәрендә – ынйы һүҙ”, - тип яҙа Р.Шәкүр. Тәҡдим ителгән ҡулланма уҡытыусы-филологтар өсөн уҡыусыларҙың уҡыу грамоталылығын формалаштырыуҙы эҙмә-эҙлекле ойошторороуҙа, формалашыу кимәлен контролдә тотоуҙа һәм үҫешен асыҡлауҙа ярҙамсы булыр, ундағы текстар, ижади эш төрҙәре уҡыусыларға телебеҙ гәүһәрҙәрен күрергә һәм баһаларға өйрәтеүҙә, уларҙы оло тормошҡа әҙерләүҙә тос өлөш индерер, тигән өмөттәбеҙ.

УДК 811.512.141.

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ЗАМАН ТӨШӨНСӘҺЕН БИРГӘН ЯЛҒАУҘАРҘЫҢ МӘҒӘНӘҺЕ ҺӘМ ФУНКЦИЯҺЫ: ЯҢЫ ҠАРАШ

IN THE BASHKIR LANGUAGE, HE GAVE THE CONCEPT OF TIME MEANING AND FUNCTIONS OF ENDINGS: A NEW APPROACH

Усманова М.Г.,
руководитель терминологической службы
при Правительстве Республики Башкортостан, ГО г. Уфа
Usmanova M.G.,
Head of the Terminology Service under the Government
of the Republic of Bashkortostan, Ufa

Аннотация. В статье дается новый взгляд на катерию времени в башкирском языке. Большое внимание удиляется окончаниям, их семантике и функциональности в речи.

Ключевые слова: морфология, глагол, время, окончание, функция окончаний.

Annotation. The article gives a new look at the kateriya of time in the Bashkir language. Much attention is paid to endings, their semantics and functionality in speech

Keywords: morphology, verb, tense, ending, function of endings.

Билдәле булыуынса, башҡорт теле буйынса булған бөтә фәнни хеҙмәттәр менән дәреслектәрҙә заман төшөнсәһен белдереү биш ялғауҙың ***(-а, -ды, -ған, -р, -саҡ)*** иңенә төшкәне тураһында яҙыла. Уларҙа шулай уҡ ***-ды, -саҡ*** ялғауының *үткән* һәм *киләсәк заманда* булған эш-хәлдәрҙең һөйләүсе өсөн *билдәле*, ***-ған, -р***

ошо замандарҙың *билдәһеҙ* булғанын белдереүе әйтелә; ә *хәҙерге заманда* булып ятҡан эштәрҙе күрһәткән бер генә ***-а*** ялғауының *билдәле/билдәһеҙ* булыуы тураһында бер ни әйтелмәй. [Кулаев, 1930, 61-68; Әхмәр, 1941, 91; Фәритов, Ғүмәров, 1949, 210; Мансуров, 1953, 135; Дмитриев, 1950, 156; Зәйнуллин, 2002, 133; 2017, 102; Ишбаев, 2012, 372; Кейекбаев, 1983, 214; В.Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин, 1995, 201: 2001, 136; Псәнчин В.Ш., h.б., 2018, 203, 223, 231; ГСБЛЯ, 1981, 279].

Әммә тормошта әлеге мәлдә барған эш-хәлдәрҙең дә һөйләүсегә билдәле йә билдәһеҙ булыуы, икеләнеү, шик тыуҙырыуы, фараз ғына ителеүе бар. Шуға ла беҙ башҡорт телендә *билдәле* һәм *билдәһеҙ хәҙерге заман* бар тигән ҡараштабыҙ.

Әйтергә кәрәк, башҡорт халҡының телендә заман төшөнсәһен белдереү әлеге биш ялғауға ғына (***-а, -ды, -ған, -р***) ҡайтып ҡалмаған. Билдәһеҙ булғанды, икеләнеүҙе, үтәлере шик тыуҙырған эш-хәлде белдергән махсус тел саралары халыҡ телендә бихисап. Әммә улар заман төшөнсәһен биргәндә ни өсөндөр телсе-ғалимдарҙың иғтибарынан бөтөнләй ситтә ҡалған.

Шулай итеп, башҡорт телендә өс заманды (*үткән, хәҙерге, киләсәк*) күрһәткән эш-хәлдең *билдәле йә билдәһеҙ* булыуы бар һәм улар махсус лексик-грамматик саралар менән бирелә. Заман ялғауҙары билдәле/билдәһеҙ эш-хәлде күрһәтеүгә генә ҡайтып ҡалмай. Уларҙың мәғәнәһе байтаҡ һәм улар кешенең үҙ-ара мөнәсәбәтен, төрлө эш, йомоштарҙы ҡушыу, эшләтеүҙәге төрлө үҙенсәлектәрҙе - хис-тойғо, теләк-ынтылыштарҙы h.б. белдереүгә ҡайтып ҡала.

-а, -р, -ған – күп мәғәнәле ялғау. Улар өс заманды ла, шулай уҡ һәр ваҡыт булған йә ҡабатланып торған эш-хәл, торош, күренеш, үҙенсәлектәрҙе белдерә (*дөйөм заман*). Был ваҡытта телмәрҙә булған **ваҡыт рәүештәре, дата** йә текст аша булғанды, була торғанды белдергән (һиҙҙерткән) **махсус һүҙҙәр** мөһим роль уйнай; ҡайһы ваҡыт заман төшөнсәһен белдереүҙе үҙ иңенә ала.

1. - а ялғауы. Мәғәнәһе

а) **-а** мотлаҡ була, эшләнә торған ***билдәле*** эш-хәлде, *вәғәҙә биреүҙе, янау, ҡурҡытыуҙы, ант итеүҙе* белдерә. Миҫалдар,

– Хәҙер үк Әхмәтов ағайға **барам** да, туп-тура **һөйләшәм*.*** (С.А.);

- **Бара тор**, хәҙер **барып етәм.**

– Был хикәйәңде журналдың май һанында **баҫабыҙ**. Шул көйө, бер ниндәй төҙәтеүһеҙ **баҫабыҙ**. Аңлайһыңмы? (З.Б.).

Иртәгә үк хөкөм ҡулына **тотоп бирәм** был йыртҡысты. (Р.Ө.);

Ант итеүҙе, мотлаҡ булырҙы белдергән айырым һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, төҙөмдәр (конструкциялар) бар. Уларға *барыбер, бер нигә (бер нәмәгә) ҡарамай, тыңлап та тормайым, аллаһи- биллаһи, вәссәләм, исемем ... булмаһын* h.б. ҡарай:

Барыбер үс алам мин һеҙҙән, **барыбер ҡон ҡайтарам**! (И.Н.)

– Ә беҙ **барыбер сәсәбеҙ!** (Р.Ө.);

Ҡыҙ Кәкүкте көтөргә **вәғәҙә биргән: «Өҫтөмә таш яуһа ла,** һине бүтәнгә **алмаштырмам**», – тигән. («Кәкүк» легендаһы);

Брагиндың һөмһөҙ күҙҙәре маңлайына менде: ҡыҙ шәп, мин **алам и – вәссәләм**. (Ғ.Х.);

Шул Йәгүр ямандан үсем алмаһам, халыҡ ҡоһорон ҡайтармаһам, Әмин **ир исемем булмаһын**. (Ғ.Х.);

Телдә хатта ант иткәнде белдергән ҡыҫҡа ғына әҙер һөйләмдәр, текстар бар: Йүгереп ҡайтып, ғәжәпләнеп, әсәйҙәргә һөйләйбеҙ:

– Йомағужа ҡарт үлергә йөрөй!

– Нимә бушты ҡаңҡылдайһың? Ыстағафирулла тәүбә, тиген!

– Ыс-сын! Ант-мант, биллаһи-валлаһи, бер табаҡ ҡан эсәм, ике табаҡ тоҙ ялайым ... (М.Ә.).

Анттың бик ҡәтғи, яуаплы бер ҡарар икәнен белдереү булып, башҡортта бүрек ташлап ебәреү, йә шул турала әйтеү ҙә торған:

Шунан Нәғим мине бикләтеп ҡуям тип яғамдан алғайны, мин ни, көс бирәмме һуң, осора төрттөм дә сығып киттем. – Ул ҡыҙып башындағы **ҡалпағын** ергә **алып бәрҙе:**

Антты белдереүҙә интонация, экспрессив һүҙҙәр ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, *үлтерәм* һүҙе урынына *ҡаҙалдырам, дөмөктөрәм* h.б.:

Бөгөн теге һыйырҙы осраттым, тауыҡбаш бүрене күрһәм мөгөҙҙәрем менән эсен ҡойоп, тояҡтарым менән **иҙеп китәм**, тине, **аллаһи-биллаһи**, алдаһам, **ер йотһон** үҙемде, – ти, дингә тамсы ла ышанмаған төлкө. (Әкиәттән);

Ҡазаһы-ние төшһә, үҙем **ҡаҙалдырам** мин ул әҙәм аҡтығын **барыбер**. **Дөмөктөрәм**!

-а ялғауының **функцияһы**

1. Хәҙерге заманды белдереүе. **-а** ялғауы һөйләү мәлендә барған эш-хәлде белдерә, күп ваҡыт *бар-, ят-, ултыр-, йөрө-, башла-, ташла- маташ-* h.б. ярҙамлыҡ һүҙҙәр менән бирелә:

- Етәрегеҙ, малайҙар, Әмир, һин юҡҡа **ҡыҙып бараң**... (Р.Ғарипов).

2. Үткән заманды белдереүе:

-а ялғауы эш-хәлдең һөйләү мәленән алда булғанды белдерә:

Ж.Кейекбаев 1911 йылда Башҡортостандың Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында крәҫтиән ғаиләһендә **тыуа**;

3. Киләсәк заманды белдереүе. Ошо турала Н.К. Дмитриев үҙенең “Башҡорт теленең грамматикаһы” тигән хеҙмәтендә былай тип яҙа: “... -а ялғауы **үтәлеше шикһеҙ булған киләсәк эште** лә белдерә (**башҡорт телендә был айырыуса йыш ҡулланыла**): мин Өфөгә барам. [Дмитриев 1950, 157–158]. Миҫал: Имтихан сәғәт туғыҙҙа **башлана**.

4. Дөйөм заманды белдереүе.

Конкрет заманға бәйле булмаған, һәр ваҡыт булған йә ҡабатланып торған эш-хәлде (*йә үҙенсәлекте*) белдерә:

Әҙәмде өмөт **йәшәтә**, ғәм **ҡаҡшата**. (Мәҡәл).

2. **-р**(-ыр/-ер, -ор/-өр, -ар/-әр) **ялғауы: мәғәнәһе**

-р ялғауы алда булған билдәле эш-хәлдәрҙе белдерә. Бынан тыш ул *өмөт итеү, вәғәҙә биреү, ҡарарға килеү, һығымта яһау, икәү-ара (йә күмәкләшеп) һөйләшеп, кемгәлер йомош ҡушыу, ант итеү, янау, ҡурҡытыуҙы,*

кемгәлер, нимәгәлер хас үзенсәлекте, билдәле хәкиәтте белдерә. Миҫалдар: Тора-бара бөтәһе лә **асыҡланыр**. (И.А.); Әсәйем, күҙ нурым, Көт мине, **ҡайтырмын**. (Йырҙан); Юлда йырлатып, һынап ҡарарбыҙ ҙа, ысынлап шулай шәп йырлаһа,

ярышта **ҡатнаштырырбыҙ**, тибеҙ. (З.Б.); Ҡарағай ҙа **үҫәр** ай йәм өсөн, Бал ҡорттары **осар** бал өсөн. (Башҡорт халыҡ йыры "Йәйләүлек"); Ҡуҙ төшкәс, ҡаҙандағы һыуҙы самауырыңа **һалырһың**. Ҡайнап сыҡһа, баҫ та ҡуй — мин **оҙаҡламам**. (Т.Ғарипова), Ауыҙ-морономдан ҡан **китһә китәр** – ышанысығыҙҙы аҡларға була барыһын да **эшләрмен**, ҡәҙерлеләрем минең! (И.Н.), **Сығарырмын** мин һине, сығармай ни. Ана ултыр, китабыңды уҡы! Тыңламаһаң, кәрәгеңде **бирермен**! Мин һиңә атаң түгел!

-р ялғауының функцияһы.

1. Хәбәр ҡылым, сифат ҡылымда:

хәҙерге заман: Бер ерендә кеше **сығар** урын юҡ, мисәтләнгән була бишек. (Сәйфелмөлөк эпосы);

киләсәк заман: Беҙҙә тамаҡҡа **ашарбыҙ**, баянда тағы берәй көй уйнарға **өйрәнербеҙ** ҙә унан һуң һеҙгә **барырбыҙ.** (З.Б.); Хажға килгәнемде аңлатҡас, дуҫтарса арҡамдан ҡағып, **барыр** яҡты күрһәтеп ебәрҙе. (Г.С.).

2. **Дөйөм заманды белдереүе**: Аҡылһыҙ башҡа алтын бүрек файҙа **бирмәҫ**; Йөрөй белмәгән юл **боҙар**, һөйләй белмәгән һүҙ **боҙар**. (Мәҡәлдәр).

Исем ҡылым булыуы: Рәтләп **кейеренә**, **ашарына** ла юҡ бит, ә балаларҙың күҙҙәрен **асыу** кеүек яҡшы теләккә тотонған! (Б.Б.).

3. -ған ялғауы. Мәғәнәһе.

-ған – күп мәғәнәле ялғау. **-ған** ялғауы булған исемләшкән һүҙҙәрҙә, исем ҡылымдарҙа заман төшөнсәһе наҡлана.

Үткән заманды белдереүе: Башҡорт халҡы ете быуат ярым буйы сит баҫҡынсыларҙың, тәүҙә — татарҙарҙың, шунан һуң рустарҙың аяуһыҙ иҙгәненә ҡаршы азатлыҡ яулап, милли суверенитет яулап **көрәшкән**. (Ә.Бейеш);

Хәҙерге заманды белдереүе: **-ған*** аффиксы ниҙеңдер үткәндә башланып, хәҙерге заманға күскәнен, дауам иткәнен белдерә; ул хәҙерге заманға үҙенең үткән заман ялғауы **-ған** менән бергә күсә:

– Барыбыҙ ҙа йыйылып бөткәнбеҙ ҙә бөтөүен, Килдебай ағай **килеп етмәгән** бит әле, уны бәләкәс көтмәйбеҙме ни? (Ғ.Д);

***Ғалим Н. К. Дмитриев фекеренсә, уны (-ған ялғауын - М.У.) үткән заман формаһы тип кенә әйтеп булмай, бер үк кимәлдә хәҙерге заманға бәйле булғанын да сағылдыра. Ул был аффиксты үткән-хәҙерге заман формаһы тип атай. [Дмитриев 2007, 132, 134].

Дөйөм заманды белдереүе. **-ған** ялғауы шулай уҡ бер заманға ла ҡарамаған, тормошта ғөмүмән була торған (ҡабатланып торған йә һәр ваҡыт булған) эш-хәрәкәтте лә белдерә: **Тырышҡан** — ташҡа ҡаҙаҡ **ҡаҡҡан**.

Үтә буянғандан **күңел болғанған.** (Мәҡәлдәр).

-ған ялғауының функцияһы

Сифат ҡылым. Үткән заман: Ә йөҙҙәре **ағарып киткән** бисәләр кузовтан төшә-төшә уны ысынлап әрләй ине. (Р.Б).

Хәҙерге заман: Ленин урамына боролоп сығыуға, ҡаланы **яңғыратҡан** радио һуңғы хәбәрҙәрҙе бирә ине. (Һ.Д.); Миңә **кәрәк булған** нәмәләр бында күп икән. (*Миңә ул нәмәләр әле кәрәк*);

Киләсәк заман: Музейға ансамбль концерттары **үткән** көндә йәки алдан яҙылып килергә мөмкин. (Б., 27.04.2018); Район кимәлендә **еңеү яулаған** команда ҡала бәйгеһендә ҡатнашыу хоҡуғын ала. (Т., 22.11.2019);

Дөйөм заман**:** Ары**ған** ат соҡор һанай, асыҡ**ҡан** ат ҡулыңды ялай, ярат**ҡан** ат күҙеңә ҡарай. (Мәҡәл); Үҙең ишеткең **килмәгән** һүҙҙе кешегә һөйләмә. (Мәҡәл).

Киләсәк заманды сығанаҡ килештә торған һүҙ менән **һуң** бәйләүесенән торған төҙөлмә лә белдерә: Бынан һуң **сыҡҡан** дәреслектәрҙе яңы ҡағиҙә буйынса төҙөргә кәрәк. *Сығасаҡ* дәреслек тип яҙыу дөрөҫ булмай.

Исемләшеүе: ХәленДән **килмәгәнгә** тотонма. (Мәҡәл);

Исем ҡылым булыуы. Был ваҡытта **-ған** ялғаулы сифат ҡылым заман мәғәнәһен һаҡлай. Ошо яғы менән ул заманды күрһәтмәгән **-у** ялғаулы исем ҡылымдан айырыла: Сәлих шунда уҡ һеңлеләренә ауыл күстәнәстәре **алып килмәгәнгә** үкенде. (С.А.) - үткән заман.

Төш **еткәнде** көтәләр. – киләсәк заман.

Ҡылымды алмаштырып булмаһа, ни өсөн **алмаштырып булмағанын** төшөндөрөп бирегеҙ. (Ж.К.) – хәҙерге заман.

4. -саҡ ялғауы.

Башҡорт телендә киләсәктә мотлаҡ була торғанды белдергән **-а** ялғауын 5-се класта бирмәү (*10-сы класс дәреслегендә генә килеп сыға ул!*), **-саҡ** ялғауын *билдәле,* **-р** ялғауын *билдәһеҙ* эште күрһәтә тип һанау бөтә ерҙә **-саҡ** ялғауын яҙыуға – башҡорт телен күрәләтә боҙоуға алып килгән.

Телде боҙоуға **-р** ялғауының юҡлыҡта **-ç** -ға әйләнгәнен белмәү ҙә үҙенең “өлөш”өн индергән.

- **саҡ** ялғауы маҡтаныу, маһайыу, мин-минләнеүҙе, бер нигә ҡарамай эшләйем тигәнде, ант итеүҙе аңлата.

Дөрөҫ төҙөлмәгән һөйләмдәр йыш осрай ғына түгел, тулып ята. Миҫал:

Ошо көндәрҙә **килеп етәсәк**, тигәндәр. (А., 2013, 7)

Пенсияға оҙатабыҙ. Беҙ уны барыбер **һағынасаҡбыҙ**. (Т., 4.09.2020).

Ниндәй темаларҙан һеҙ бер ҡасан да **көлмәйәсәкһегеҙ**? (Т., 29.07.2020).

– Күрҙегеҙме, снарядтарҙың береһе аша китте, икенсеһе барып етмәне, өсөнсөһө маҡсатына мотлаҡ **етәсәк**. (А., 2013, 10)

Ошо проекттар менән киләһе йылда **ҡатнашыу мөмкинлеге буласаҡмы**? Быйыл мал ҡорбаны **килтереләсәкме**? Видеокамералар **ҡуйыласаҡ, ... эшләй башлаясаҡ..., ... ярҙам итәсәк**. (Т., 2019)

Татарстан Республикаһы **көндәре сиктәрендә** “Нур” театры алдында ... һәйкәл **асыласаҡ**, мәҙәни һәм спорт саралары **ойошторолосаҡ**. (Б., 3.04.19).

Артист һөйләй: Фильм **күрһәтеләсәк**, ул башҡортса **барасаҡ**. (Т., 2019).

Ошоларҙы уҡығас та башҡорт теленең хәле күҙ алдына баҫа. Иламалы хәл. Зәғифләнеп, ярҙам көткән ғәзиз телебеҙ.

Ә хаталарҙы нисек төҙәтеп була һуң?

Халыҡ теленә йөҙ бороп; грамматиканы өйрәнеп.

Башҡорт **-саҡ** ялғауы менән киләсәктә була торған эш-хәлде күрһәтмәй. Уның урынына ул **-а, -р, -маҡсы, -аһы, -ған** ялғауҙарын тотона.

-саҡ ялғауы тыуҙырған хаталар

1. -а(-ә, -й) **ялғауы урынын -саҡ-тың баҫып алғаны**

17–18 апрелдә Өфөлә Татарстан Республикаһы көндәре **үтәсәк**. (Б., 3.04.19) - дөрөҫө: 17–18 апрелдә ... **үтә.**

Тағы бер шундай операция – һәм беҙ һинең менән **хушлашасаҡбыҙ**!». (Р.С.), Әле **ваҡыт бар**, бына ергә **рөхсәт алғас та** шуға **тотонасаҡбыҙ.** (Р.С.): Дөрөҫө: Бында **-саҡ** ялғауын менән ант итеү килешкән ғәмәл булмаҫ; икенсенән, башҡорт улай һөйләмәй. Ҡылымдарҙы **хушлашабыҙ, тотонабыҙ** рәүешендә ипле генә һүҙ биреү дөрөҫ булыр.

2. -р ялғауы урынын -саҡ ялғауы алғаны.

Тиҙҙән үҙегеҙ ҙә кешеләрҙе дауалай **башлаясаҡһығыҙ**. (Р.Ө.) - дөрөҫө: Бында киләсәкте күрһәткән **тиҙҙән** һүҙе бар, шуға ла **-саҡ** ялғауын яҙыу артыҡ: дөрөҫө – **башларһығыҙ**.

Тәүбәгә килгән малай иртәгә йәнә эш **боҙасаҡ**, унан йәнә **зыян күреүселәр** менән «аңлашырға» **тура киләсәк**. (А., 2013) – дөрөҫө: иртәгә йәнә эш **боҙор**, **...зыян күргәндәр** менән «аңлашырға» **тура килер**

3. -маҡсы, -а, -р ялғауы урынын **-саҡ** ялғауы алыуы

Унда һеҙҙең кеүек халыҡ бейеүҙәре ансамбле **ойошторасаҡмын**!. (Р.К.) – дөрөҫө: **ойоштормаҡсымын.**

Ун етеһе тулғас, уға **тапшырасаҡмын**. (М.К.) – дөрөҫө: Ун етеһе тулғас, уға **тапшырмаҡсымын // тапшырам**

Кәләшен ата йортона **алып ҡайтасағы** ап-асыҡ күҙ алдына баҫты. (Ф.Аҡбулатова) – дөрөҫө: Кәләшен ата йортона **алып ҡайтыры** ап-асыҡ күҙ алдына баҫты;

Иренең тәүге ғаиләһенә **ҡайтмаясағына ныҡлы** ышанды. (Б., 10.04.2020) – дөрөҫө: **... ҡайтмаҫына ныҡ** ышанды.

III. -р ялғауының -ҫ-ға күсеүе. Эш-хәлдең киләһе ваҡытта булмаҫын юҡлыҡ киҫәксәһе **ма/-мә** белдерә. **-р** ялғауы **-ма/-мә**-нән һуң **-ҫ**-ға әйләнә:

бар**ыр**мын – бармаҫмын, бармаҫым,

әйт**ер**мен – әйтмәҫмен, әйтмәҫем. Миҫалдар:

Һеҙ уларҙы ағас ултыртырға сыбыҡ менән ҡыуып та **ҡуша алмаясаҡһығыҙ**. (З.У.) – дөрөҫө: **ҡуша алмаҫһығыҙ.**

Халыҡ бик һиҙгер: телде боҙғанды яратмай, йәне көйә… Ауыҙ асып бер әйтеү ҙә етә. Шуға ла **-саҡ** ялғауының, берҙән, “белем күрһәткесе” икәнен, икенсенән, һинең тәрбиә, әҙәп яғынан ниндәй булыуыңды ла күрһәткәнен оноторға ярамай.

Әҙәпле, үҙен башҡаларҙан өҫтөн ҡуймаған кеше, **-саҡ** ялғауы менән **барасаҡһың, алып киләсәкһең** тип, фарман биреп, йомош ҡушмаҫ;

башы булған әҙәм **ул барасаҡ, алып киләсәк** тип, кеше өсөн ант биреп тә ултырмаҫ. Был яҙылмаған хәкиҙәт. Тел мөнәсәбәтте лә күрһәтә, унда **йылылыҡ** та булырға тейеш.

Кешенең булмышы теленән үк күренә. Ант итеп, фарман биреп ултырған яһил, ҡаты бәғерле булып үҫмәһен ине йәш быуын. Уларҙы өйрәткән ата-әсә менән уҡытыусы ғына түгел. Кеше көнө буйы мәғлүмәт донъяһында йәшәй (*мәктәп, радио, телевидение, концерт* һ.б.). Шуға ла эше мәғариф, матбуғат, мәҙәниәт менән бәйле булғандар эшенә яуаплы ҡараһын ине.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Дмитриев Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы. Л., 1950; Өфө, 2008.
2. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. Өфө: БДУ, 2002.
3. Ишбаев К.Ғ. Ҡылым // Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2012. 353-397-се б.
4. Кейекбаев Ж.Ғ., Ғәлләмов А.А., Фәритов Х.С., Аҙнабаев Ә.М.,
5. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле. Педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. 398 б.
6. Кулаев М. О глаголах башкирского языка. – Казань, 1930.
7. Мансуров Ә. Башҡорт теле грамматикаһы. I киҫәк. Фонетика һәм морфология. Ете йыллыҡ һәм урта мәктәптең 5-6 кластары өсөн дәреслек. Өфө: Башгосиздат, 1945, 1947, 1949, 1951, 1953, 1961.
8. Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В. Әсә теле. 5 кл. – Өфө: Китап, 1995 б.; Әсә теле. 10-11 кл. Өфө: Китап, 2001. 319 бит; 2018. 328 бит.
9. Усманова М.Ғ. Башҡортса дөрөҫ һөйләйек. Башҡорт теленең функциональ грамматикаһы. Өфө: Китап, 2020. 164 бит.
10. Фәритов Х.С., Ғумәров Ғ. Башҡорт теленең грамматикаһы. Фонетика һәм морфология. Педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө: Башгосиздат, 1949.
11. Әхмәр Ҡ. Башҡорт теле. Педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө, 1941.

УДК 159.923

ТЕЛ АСҠЫСЫ – ХАЛЫҠТА

THE KEY TO LANGUAGE IS IN THE PEOPLE

Утяшева Г.М.,

учитель башкирского языка и литературы филиала МОБУ СОШ с. Благовар МР Благоварский район РБ ООШ с. Верхние Каргалы

G.M. Utyasheva, Bashkir language teachere and literature of the MOBU branch SOSH S. Blagovar MR Blagovarsky district RB OOSH S. Upper Kargaly

Аннотация. Статья посвящена юбилею ученого-фольклориста С. Галина, где раскрывается его личность в двух ипостасях: ученого и человека.

Ключевые слова: башкирский фольклор, труд, память.

Annotation. The article is dedicated to the anniversary of the folklorist scientist S. Galina, where his personality is revealed in two guises: a scientist and a human being.

Keywords: Bashkir folklore, labor, memory.

Халыҡ үҙенең шәхестәре менән бөйөк. Һәр заман үҙенең батырын тыуҙыра, һәр заман үҙенең Салауатын булдыра. Беҙ ҙә Республикабыҙҙы данлаусы Салауат Әхмәҙиә улы Галин менән ғорурланырға хоҡуҡлыбыҙ. Ул бөтә тормошон фәнни эшмәкәрлеккә, башҡорт фольклористикаһы тарихына, фольклор жанрҙарын, башҡорт ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын тикшереүгә арнаған.

Салауат ағай Галиндың “Тел асҡысы халыҡта” тигән башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлегендә бындай юлдар бар:

“Башҡорт фольклоры – халҡыбыҙҙың күңел түрендә быуаттар буйына хаҡланып килгән һәм уның тарихын, тормош-көнкүрешен, уй-теләктәрен поэтиклаштырған гүзәл хазина ул. Был мираҫ борон-борондан халыҡтың рухи донъяһында мөһим урынды биләп торған һәм быуындан-быуынға, телдән-телгә изге аманат итеп тапшырыла килгән. Уның аша халыҡ үҙенең йыр-моңға күскән тарихы менән танышҡан, ата-бабаларҙан тапшырыла килгән тормош тәжрибәһен һәм әхлаҡ ҡанундарын үҙләштергән зауығын, үҫтергән... Унда халыҡтың тарихы ла, теле лә, әҙәбиәте лә, музыҡаһы ла, им-том саралары ла, һынлы сәнғәте лә, тәрбиәүи ҡараштары ла, этнографияһы ла тупланған. Бына шуға күрә лә борон аҡһаҡалдар һүҙен тыңлау сәсәндәр телен өйрәнеү йолалар үҙләштереү яҙылмаған ҡанундар кимәлендә булған.” [1, 5]

Әйтелгән һүҙҙәрен, аҡһаҡалдарҙың һүҙҙәре менән, ныҡытып ҡуйған:

Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт
Боронғоларҙан аманат,
Уға ҡылһағыҙ аманат
Һеҙгә булыр яманат... [4,3]

Уның тураһында яҙмамды яҙа башлағансы күп кенә эштәре менән танышырға тура килде. Салауат ағай бик тә белемле, гәҙел, принципиаль, кәрәк саҡта ҡаты һәм талапсан булғанын аңланым. Ул оҫтаҙ ғына түгел, киң ҡарашлы шәхес. Иптәштәре уны төплө, һәрьяҡтан үсешкән шәхес тип иҫкә ала.

“Ул уҡытыусы кеүек ябай, ғалим кеүек олпат. Уның хеҙмәттәре халыҡҡа, мәғариф эшенә хеҙмәт итә.”(Рафаэль Аҙнаҡолов, педагогия фәндәре докторы). *“Монография яҙамы, дәреслек төҙөймө, уҡытыусылар өсөн методик йәки уҡыу ҡулланмаһы яҙамы, уҡыу программалары әҙерләйме – Салауат Галин иң элек фольклорсы булып ҡала. Өҫтәүенә, ул мәғариф эшенә хеҙмәт иткән арҙаҡлы педагог”.* (Әхмәт Сөләймәнов, филология фәндәре докторы). Ул фольклорҙы йыйыусы, системалаштырыусы һәм халыҡҡа кире ҡайтарыусы (Рәйсә Хәким ҡыҙы).Уҡытыусылар ҙа, студенттар ҙа уны хәтерҙә ҡалдырған. Һәрваҡыт һағынып иҫкә алабыҙ.

Уның яҙмышы үкенерлек түгел “Бөтә нәмә ул хеҙмәт емеше, эш емеше, тынғыһыҙ эш емеше. Эш менән генә, хеҙмәт менән генә нимәгәлер ирешеп була,” – тип әйткән ул. Әйе, бик хаҡ әйтелгән һүҙҙәр. Ул башҡорт фольклорын

бөртөкләп йыя. Күп кенә йыраусыларҙы халыҡҡа таныта. Башҡортостандың һәрбер өлкәһендә фольклор, ауыҙ-тел өлгөләре яҙып ала. [1]

Салауат Әхмәҙиә улының тағы ла бер иң мөхим сифаттарының береһе үҙ теленә һәм халҡына миккүбән киткән кеше. Ул милләт, тел яҙмышына борсола. Татар мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыусылары әҙерләүҙә ҙур хеҙмәт күрһәтте. Уҡытыуҙа методик әсбаптар эшләү буйынса ҙур эштәр башҡарҙы.Төрлө милләт балаларында һөю һәм ихтирам тәрбиәләүдә был фәндең әхәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Башҡорт мәҙәниәте фәнен булдырыуға ҙур өлөш индереүселәрҙең береһе.

Хозур тәбиғәт күренештәренә һоҡланыуы күкрәгенән йыр булып урғыла, ләкин кешеләрҙең тәбиғәткә мәрхәмәтһеҙ ҡараштары йөрәген әрнетә.Шуның кеүек телде һаҡлау өсөн дә яна-көйә. Башҡорт халҡының данын күтәргән, үткәнен данлаған.

Уның хеҙмәттәре күп кенә өлкәләрҙә өҫтәл китабына әйләнгән. Минең дә өҫтәл китабым булып уның “Балалар фольклоры”, “Башҡорт фольклоры”, “Тел асҡысы халыҡта”, “Заман һәм фольклор”, “Башҡорт халыҡ эпосы” китаптары тора. Был китаптар балаларға халыҡ ижадын тәрәнәйтеп өйрәнеү өсөн киң мөмкинлектәр асты, беҙҙең эште лә еңеләйтеүгә булышлыҡ итте. Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн дә яйлы ҡулланма.

Республикабыҙҙа ошондай оло шәхестәр булғанлығы менән беҙ ғорурланырға тейешбеҙ. Ғаиләһенә оло рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе юллыйбыҙ.

Салауат ағай Галин тураһында йылы хәтирәләр беҙҙең күңелдәрҙә оҙаҡ хаҡланыр.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Салауат Галин. Тел асҡысы – халыҡта. Өфө. Китап. 1999
2. Салауат Галин. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Өфө. Китап. 2009.
3. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡалдәр һәм әйтемдәр. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте. 1980.
4. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө. Китап. 1998.

УДК 37.035

БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУҘА ИНТЕРАКТИВ БЕЛЕМ БИРЕҮ РЕСУРСТАРЫН ҠУЛЛАНЫУ

THE USE OF INTERACTIVE EDUCATIONAL RESOURCES IN TEACHING THE BASHKIR LANGUAGE

А.А. Фаршатова,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ №1 г. Янаул
A.A. Farshatova,
teacher of Bashkir language and literature,
MBOU Secondary School No. 1 Yanaul

Аннотация. Данная статья посвящена вопросу использования интерактивных образовательных технологий на уроках

башкирского языка и литературы. Раскрыты приемы активизации познавательной деятельности обучающихся с применением этих технологий с целью повышения эффективности педагогического процесса в школе.

Ключевые слова: язык, электронные ресурсы, сайты, образовательные платформы.

Annotation. This article is devoted to the use of interactive educational technologies in the lessons of the Bashkir language and literature. The techniques of activating the cognitive activity of students using these technologies are revealed in order to increase the effectiveness of the pedagogical process at school.

Keywords: language, electronic resources, websites, educational platforms.

Һәр бер милләт өсөн үҙ туған теле – иң ҙур байлыҡ. Ә туған телде һаҡлап, быуындан-быуынға тапшырыу - һәр кемдең изге бурысы. Яңыртылған Федераль белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы, инновацион технологиялар ҡулланыу-уҡыу сифатын күтәреүҙә, яңы белем алыуҙа, уҡыусыларҙың мотивацияһын күтәреүҙә ярҙам итә. Шуға ла ижади эшләүсе уҡытыусы традицион методтар,алымдар менән бергә телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ яңы алымдар эҙләй, ҡуллана.

Интерактив белем биреү ресурстарын ҡулланыу - башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙа, өйрәнеүҙә ҙур ярҙамсы. Халҡыбыҙҙа 7 һаны-изге һан тиҙәр. Сығышымды, изгелеккә юрап, 7 йүнәлешкә бүлдем.

1-се йүнәлеш “Сайттар аша хеҙмәттәшлек” Уҡытыусының шәхси сайты айырым шәхси мәсьәләне генә хәл итеп ҡалмай, ә педагогик процеста ҡатнашыусыларҙың (уҡытыусыларҙың, уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең) интерактив үҙ-ара эш итеүен ойоштороу сараһы булып тора. Юғарыла әйтелгәндәр уҡытыусының шәхси сайтын интерактив функциональ электрон дидактик сара булараҡ билдәләргә мөмкинлек бирә. Мин шуны иҫтә тотоп республикала беренселәрҙән булып үҙемдең шәхси сайттарымды астым. Ижади фекерләүгә өйрәтеүҙә шәхси сайтты ҡулланыу бик ҙур алымдарҙың береһе тип уйлайым. Беренсенән, уҡыусы иптәштәренең эштәре менән таныша, икенсенән, зауыҡ менән биҙәлгән һүрәттәр,презентациялар, интерактив күнегеүҙәр уны ылыҡтыра, һәм ул үҙе лә һиҙмәҫтән яйлап ижади эшләүгә ҡушыла.

Уҡытыусының шәхси сайты https://farshatova.jimdofree.com/- уҡыусы менән белем системаһы араһында араҙашсы, белем алыу сараһы. Сайтты ҡулланыу уҡытыу эшсәнлеген байыта, уҡытыу процесын ҡыҙыҡлы, нәтижәле һәм ижади итеп ойошторорға мөмкинлек бирә. Үҙемдең дәрес эшкәртмәләрем, эш тәжрибәм менән уртаҡлашам, шулай уҡ уҡыусыларға онлайн-тестарҙа, викториналарҙа, конкурстарҙа, дистанцион олимпиадаларҙа ҡатнашырға мөмкинлек бирәм.

2-се йүнәлеш “Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу процесында дистанцион эшмәкәрлек” https://anvarovna.jimdofree.com/ тип аталған сайт астым һәм авторлыҡ программаһы төҙөнөм, шуның буйынса дәрестән тыш эш алып барам. Дистанцион эшмәкәрлек башҡорт телен өйрәнеү процесында ниндәй бурыстарҙы сисергә ярҙам итеүен ҡарап китәйек:

1.Дәрестән тыш эшмәкәрлек аша балаларҙың телмәр байлығын арттырыу.

2.Аң - белем даирәһен киңәйтеү, хәтерен, зиһенен үҫтереү.

3.Илһөйәрлек тойғоһон үҫтереү аша башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Сайттағы эшмәкәрлегем коллегаларым тарафынан да юғары баһалана, йәш уҡытыусыларға методик ярҙам да булып тора. Яңыртылған стандарттар буйынса төп иғтибар уҡыусының эшмәкәрлеген үҫтереүгә һәм үҙаллылығына бирелә. Башҡорт телен өйрәнеү,үҙләштереү уҡыусыларҙы ижади эшкә өйрәтә,тормошҡа әҙерләй. Дистанцион эшмәкәрлек ҡулланыу башҡорт телен, уның мәҙәниәтен, башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүҙә ҙур мөмкинлектәр аса.

3-сө йүнәлеш «Интерактив белем биреү ресурстары»Интерактив белем биреү ресурстары - уның элементтары менән әүҙем үҙ-ара эш итеү, материалды диалог режимында өйрәнеү, кире бәйләнеш алыу мөмкинлеге булған ресурстар. Үҙ аллы эшләү процесына интерактив ресурстарҙы индереү материалды үҙләштереү кимәлен күтәрергә мөмкинлек бирә.



4-се йүнәлеш LearningApps платформаһы интерактив мультимедиа күнегеүҙәрҙе уңайлы һәм еңел булдырырға мөмкинлек бирә. Мөмкинлектәр киңлеге, навигация уңайлылығы, ҡулланыу ябайлығы. Бында күнегеүҙәр төҙөү өсөн айырым белем дә талап ителмәй. ИКТ менән эшләү буйынса иң минималь күнекмәләргә эйә булған уҡытыусы үҙенең ресурсын – яңы материалды аңлатыу, нығытыу, тренинг, контроль өсөн бәләкәй күнегеү булдыра ала. LearningApps инструменттары төрлө төрҙәге интерактив биремдәр булдырырға мөмкинлек бирә: викторина, сортировкалау, төркөмләү, кроссворд һәм башҡалар.Бында күнегеүҙәрҙе үҙеңә төҙөргә лә, шулай уҡ, әҙер эште “Оҡшаш ҡушымтаны булдырыу”функцияһы ла бар. Биремдәр төҙөү өсөн платформала электрон почта аша теркәлеү үтергә,үҙеңә шәхси бит асырға һәм әҙер шаблондар ҡулланып эшләргә кәрәк.Был платформала башҡорт теленән 100 – ҙән артыҡ күнегеү төҙөнөм.

5-се йүнәлеш «Wordwall» сервисында күнегеүҙәр төҙөү. Популяр булған Learningapps платформаһы Wordwall сервисы менән бер аҙ оҡшаш та. Уларҙа эшләү тәртибе лә бер төрлө тиерлек. Ә шулай ҙа Wordwall эш төрҙәренең төрлөлөгө,бер эште бер нисә форматҡа әйләндереп булыуы менән отошлораҡ.Бындағы эштәрҙе интернеты булған бөтә сығанаҡтарҙа ла ҡулланып була. Бында тиҙ арала дәрескә,өй эшенә күнегеүҙәр төҙөп булыуы ла уңайлы. Шуныһы тағы ҡыҙыҡлы,эш йомғаҡтары уҡытыусының шәхси битендә

яуаптар һәм диаграммалар статистикаһы менән һаҡлана. Уҡыусының эшен баһалауы, шулай уҡ хаталар өҫтөндә эшләү өсөн дә еңел. **6-сы йүнәлеш CoreApp белем биреү материалдарын булдырыу һәм камиллаштырыу өсөн онлайн-платформа.** Бында вебинарҙар үткәрергә, интерактив дәрестәр булдырырға, курстар әҙерләргә һәм башларға, уҡыусыларҙың уңыштарын баһаларға мөмкин. Бынан тыш, CoreApp сит сервистар функцияларын ҡулланырға мөмкинлек бирә: Wordwall интерактив шаблондар коллекцияһы, LearningApps уйын формаһындағы күнегеүҙәр менән сервистарын ҡулланыу мөмкинлеге ла бирә. Теркәлеү үтмәйенсә лә күнегеүҙәр төҙөү мөмкинлеге булыуы ла уҡытыусы өсөн уңайлы.

7-се йүнәлеш "Башҡорт теле белермәндәре" интеллектуаль уйыны Районыбыҙ күп милләтле.Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуҙа интеллектуаль уйындар ҡулланыу бик тә әһәмиәтле.Районыбыҙҙа 4-се тапҡыр Республика «Шафиҡова уҡыуҙары» ғилми-практик конференцияһы сиктәрендә "Башҡорт теле белермәндәре" интеллектуаль уйыны үткәрелә.Был уйын белем, етеҙлек, иғтибарлылыҡ талап итә. Талап итеп кенә лә ҡалмай, үҙ эсенә алған һорауҙар аша туған телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә, тарихыбыҙға, билдәле шәхестәребеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, башҡорт халыҡ ижадына һөйөү хисе уята.

Туған телде һаҡлау, киләсәк быуынға еткереү бурысы һәр кемдең иңенә берҙәй тигеҙ һалынған. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ элек-электән телде һаҡлауҙың әһәмиәтен аңлаған, уны киләсәк быуынға еткереү хәстәрлеген күргән.Башҡорт телен уҡытыуҙа интерактив белем биреү ресурстарын ҡулланыу беҙгә телде һаҡлауҙа,уны ҡыҙыҡһынып өйрәнеүҙә ҙур ярҙамсы тип уйлайым.

УДК 8.81

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ Ф.Ғ. ХИСАМИТДИНОВАНЫҢ ҒИЛМИ ХЕҘМӘТТӘРЕН ҠУЛЛАНЫУ

USE OF F.G. KHISAMETDINOVA'S SCIENTIFIC WORKS AT BASHKIR LANGUAGE LESSONS

З.А. Хабибуллина,
ф.ф.к., доцент доцент кафедры башкирского языка и литературы
Г.Т. Шарафетдинова, студент,
БГПУ им. Акмуллы , г. Уфа
Z.A. Khabibullina, PhD, associate professor
G.T. Sharafetdinova student,
AKMULLA BSPU, UFA

Аннотация: Научная деятельность профессора Ф.Г. Хисамитдиновой охватывает такие области языкознания как фонетика, лексикология, терминология, мифология, ономастика и др. Данная статья посвящена описанию методов использования ее научных трудов на уроках башкирского языка и литературы.

Ключевые слова: лингвистика, башкирский язык, методика преподавания башкирского языка, формирование языковой компетенции.

Annotation. Professor F.G. Khisamitdinova's scientific activity covers such areas of linguistics as phonetics, lexicology, terminology, mythology, onomastics and others. This article is devoted to the description of the methods of using her scientific works at the lessons of Bashkir language and literature.

Keywords: linguistics, Bashkir language, Bashkir language teaching methodology, language competence formation.

Уҡыусыларҙың лингвистик компетенцияһын формалаштырыуҙа уларҙы телсе-ғалимдар, уларҙың хеҙмәттәре менән таныштырыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Үкенескә күрә, бөгөнгө көндә уҡыусылар ғалимдар менән тейешле кимәлдә таныш түгел, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә улар менән таныштырыу буйынса системалы эш алып барыла тип әйтеп булмай. Ошо бушлыҡты бер ни тиклем тулыландырыу маҡсатында башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙы күренекле ғалимә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, тел белгесе Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисамитдинованың тормош юлы һәм эшмәкәрлеге һәм хеҙмәттәре менән таныштырырға мөмкин.

Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисамитдинова – киң диапозонлы ғалимә, уның хеҙмәттәрендә башҡорт тел ғилеме мәсьәләләре генә яҡтыртылмаған, ә башҡорт телендәге фактттар төрки телдәр материалдары менән сағыштырып өйрәнелгән.

Уның хеҙмәттәренең күп яҡлы булыуы, тел бүлегенең төрлө кластарҙа өйрәнелеүсе темалары менән бәйлелегеге ғалимә менән балаларҙы таныштырыу мөмкинселектәрен бермә-бер киңәйтә. Мәҫәлән, 5-се класта фонетика темаһы менән танышҡанда уҡыусыларҙы ғалимәнең ижады менән ҡыҫҡаса таныштырырға һәм уның өйрәнелгән тема буйынса хеҙмәттәренә таянып, проект эше бирергә була.

«Ҡушма һүҙҙәр» темаһын өйрәнеү барышында ла уның һүҙлектәренә мөрәжәғәт итеп, ҡушма һүҙҙән торған кеше исемдәрен, ауылдар исемдәрен яҙып алырға, килеп сығышын һәм дөрөҫ яҙылышын аңлатырға мөмкин.

Лексикология буйынса дәрестәрҙә уҡыусылар ер-һыу атамалары менән дә танышалар. Ф.Ғ. Хисамитдинова төҙөгән ер-һыу атамалары исемлегенең әһәмиәтен уҡыусыларға төшөндөрөү – бик кәрәкле эш. Ғалимәнең «Мифологик һүҙлек» китабына ингән әҫәрҙәре тел шәхесе формалаштырыу маҡсатында бик уңышлы файҙаланырға була. Фәһемле мәғлүмәттәрҙе уҡытыусы төрлө кластарҙа дәрестең төрлө этабында уңышлы файҙалана ала. Ғалимәнең юбилей йылында мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте аҙналығында уның ижадына бағышланған саралар үткәреү ҙә уҡыусыларҙың лингвистик компетенцияһын үҫтереү менән бер рәттән, уҡыусыларҙы оло шәхес өлгөһөндә кеше булараҡ тәрбиәләү ҙә ул.

Башҡорт теле дәрестәрендә уҡытыусылар Фирҙәүес Хисамитдинова тураһында материалдарҙы, уның тормошо һәм фәнни эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәрҙе, төрлө өҙөктәрҙе ҡуллана ала. Мәҫәлән, шундай күнегеүҙәр тәҡдим итергә мөмкин.

«Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр» темаһы буйынса:

а) *Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙының эште төбөнә тиклем аңлап, беҙҙеңсә әйткәндә, еренә еткереп башҡаоыуы менән бергә һәр нәмәлә ғәҙеллек булырға тейеш тигәне — холҡондағы иң төп һыҙаттыр, моғайын. Мәғариф министры итеп тәғәйенләнгәс, иң элек ул республика мәктәптәрен йөрөп сығырға була. Бер йыл эсендә һәр районда булып, Илеш, Дүртөйлө, Туймазы, Саҡмағош, Ауырғазы һәм башҡа райондарҙа типовой, яҡты, йылы мәктәптәр күреп ҡыуанһа, Бөрйән, Йылайыр, Архангел, Белорет, Учалы, Әбйәлил, Ғафури, Ҡыйғы, Нуриман, Асҡын, Иглин, Ҡариҙел райондарында бәләкәй, иҫке, ҡараңғы, һыуыҡ ағас мәктәптәрҙең күп булыуына ҡайғырып ҡайта. Хафаланыуҙарын халыҡҡа, район, республика етәкселәренә еткерер өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынла сығыш яһай* (Ф. Латыпова).

Был күнегеүҙе башҡарыу барышында ғалимә тураһында мәғлүмәттәр, район исемдәрен дөрөҫ яҙыу күнекмәһе лә бирелә. Уҡыусылар яңғыҙлыҡ исемдәрҙе яҙып алалар.

б) *Ышаныуҙар буйынса, кешенең дүрт йәне була. Исем — шуларҙың береһе. Ышаныуҙар буйынса, йәш бала хатта исем һорап илай ҙа икән. Исем ышаныуҙар буйынса, баланы һаҡлай, тәбиғәтен, киләсәген билдәләй. Мәҫәлән, Таштимер, Булат, Йәноҙаҡ, Бүребай, Этбикә кеүек исемдәр бала ауырымаһын, үлмәһен тип ҡушылған, йәғни һаҡлау функцияһын үтәгән. Гүзәл, Аҡһылыу, Гөлназ һ.б. исемдәр ҡыҙҙар матур, наҙлы булһын тип ҡушыла. Күп ғаиләләрҙә балаларына бай, бөйөк, бәхетле булһын тип Байғилде, Солтан, Бәхет, Ырыҫкол тигән исемдәр ҡушылған. Исем хатта баланың һаулығына ла тәьҫир итә ала тип уйлағандар. Шуға миң сыҡһа, кешегә «миңле» исем бирелгән. Мәҫәлән, Сулпан, Сәрүәр, Ямал, Кинйәсолтан, Йыһан, Ишсолтан, Алтын кеүек исемле балаларҙы шайтан алмаштыра алмай икән.*

Өҙөк буйынса түбәндәге эш төрҙәре үткәрелә:

– Тексты уҡып сығығыҙ.

– Исемдәр менән бәйле ниндәй ышаныуҙар йәшәй?

– Үҙегеҙҙең исемегеҙҙең белдергән мәғәнәһен Ф. Хисамитдинованың һүҙлегенән табығыҙ.

– Үҙегеҙгә оҡшаған исемде һүҙлектән табығыҙ, уның мәғәнәһен аңлатығыҙ һ.б.

Һүҙлектәр буйынса түбәндәге эш төрҙәрен тәҡдим итеп була:

а) Ф. Хисамитдинованың һүҙлегенән үҙегеҙҙең, ғаилә ағзаларының исемдәренең мәғәнәләрен табығыҙ.

б) Ф. Хисамитдинованың «Төрки сығанаҡлы һәм төрки элементлы башҡорт исемдәре» һүҙлегенән ъ хәрефле ун исем яҙып алығыҙ һәм дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ

в) Ф. Хисамитдинованың «Төрки сығанаҡлы һәм төрки элементлы башҡорт исемдәре» һүҙлегенән ь хәрефле ун исем яҙып алығыҙ һәм дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

Кеше боронғо замандарҙан уҡ балаһын әсә теленә өйрәткән, тел хазинаһының матурлығын, әһәмиәтен уның күңеленә һендерергә тырышҡан.

«Тел асҡысы» биреү өсөн сәңгелдәк йырҙары йырлаған, уйындар ойошторған, таҡмаҡтар, тиҙәйткестәр, һынамыштар, йомаҡтар ҡойған. Балаларҙы үҙ әсә телендә һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү, туған телебеҙҙе яратыу, уға ҡарата ихтирам тәрбиәләү бөгөнгө көндә лә иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып тора.

Башҡорт теле дәрестәрендә грамматик тема ниндәйҙер тексҡа йәки әҫәрҙән өҙөккә таянып өйрәнелә, һәм уларҙың йөкмәткеһе ҙур әһәмиәткә эйә. Ф. Хисамитдинованың хеҙмәттәрендә халҡыбыҙҙың йәш быуынды тәрбиәләү өлкәһендәге меңәр йыллыҡ тәжрибәһе, йолалары, традициялары, тарихы сағылыш тапҡан. Уның әҫәрҙәренән өҙөктәрҙе грамматик материалды өйрәнеү өсөн сығанаҡ булараҡ ҡулланырыға кәрәк. Ошо рәүешле эшләү – башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уята.

Бынан тыш ғалимәнең хеҙмәттәренә таянып күп төрлө фәнни эштәр башҡарырға мөмкин. Фәнни тикшереү эшмәкәрлеген ойошторов – белем биреү процесының айырылғыһыҙ бер өлөшө, ул уҡыусыларҙың ижади эшләү һәләтен үҫтереү, уларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙә бик мөһим йүнәлеш булып һанала. Һуңғы йылдарҙа фәнни-тикшеренеү эштәренең бер төрө булараҡ проекттарға өҫтөнлөк бирелә башланы. Проект эштәрен Ф. Хисамитдинованың хеҙмәттәренә бағышлап үткәрергә була.

Уҡыусылар проект өҫтөндә эште мәктәптә, йә булмаһа өйҙә ултырып эшләйҙәр, материал туплайҙар, фекер алышалар. Мәҫәлән, ошо рәүешле бер төркөм уҡыусыларға «Башҡорт халҡының данлы ҡыҙы Ф. Хисамитдинова», «Ф. Хисамитдинова – диалектолог», «Башҡорт халҡының мифтары» һ.б. шундай темаларға проект эше тәҡдим итергә мөмкин. Был иһә үҙ сиратында, уҡыусыларҙа төрлө фәнни китаптарҙы, интернет ресурстарҙы өйрәнеү, анализлау, уларҙың өҫтөнлөктәрен, кәмселектәрен билдәләү кеүек универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырырға булышлыҡ итә. Бындай тикшеренеү эштәре менән мәктәптә, ҡала йәки республика кимәлендә үткәрелгән семинарҙарҙа, конференцияларҙа сығыш яһарға мөмкин. Бындай эштәрҙе төрлө йыйынтыҡтарҙа, мәктәп сайттарында баҫтырып сығарып та була.

Шулай итеп, күренекле ғалимә Ф.Ғ. Хисамитдинова эшмәкәрлеге киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә әһәмиәте ҙур. Уның хеҙмәттәрен туған башҡорт теле дәрестәрендә ҡуланып, предмет буйынса ғына түгел, ә метапредмет, шәхси һөҙөмтәләргә лә сифатлы итеп өлгәшеү ҙә тәьмин ителә.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Латыпова Ф. Милләтебеҙҙең мәртәбәле ҡыҙы // Рәсәй халыҡтары телдәре диалектолоияһының көнүҙәк мәсьәләләре. – Өфө, 2015. – 138-147-се биттәр.

2. Хисамитдинова Ф.Ғ. Башҡорт мифологияһы: Белешмә-һүҙлек. – Өфө: Ғилем, 2002. – 130 бит.

3. Хисамитдинова Ф.Ғ. Башҡорт мифолологияһы һүҙлеге. – Өфө, 2015. – 412 бит.

УДК 37.035

ПРОФЕССОР С.А.ГАЛИНДЫҢ БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫ ҮҘЕШЕНӘ ИНДЕРГӘН ӨЛӨШӨ

PROFESSOR S.A. GALINA'S CONTRIBUTION TO THE DEVELOPMENT OF BASHKIR FOLKLORE

Р.Р.Хадимуллина,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ им.М.Гареева с. Бишкураево МР Илишевский район РБ
R.R.Khadimullina,
teacher of Bashkir language and literature MBOU Secondary School named after M.S. Gareev. Bishkuraevo MR Ilishevsky district of RB

Аннотация: Статья посвящена вопросу вклада ученого в развитие башкирской фольклористики и литературоведения.

Ключевые слова: фольклор, жанры фольклора, научные труды.

Annotation. The article is devoted to the contribution of the scientist to the development of Bashkir folklore and literary studies

Keywords: folklore, genres of folklore, scientific works.

Салауат Әхмәҙулла улы Галин 1934 йылдың мартында Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килгән. Беренсе Этҡол ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, Темәс педагогия училищеһында уҡый. Хеҙмәт эшмәкәрлеген аулыҡай мәктәбендә уҡытыусы булып башлай. 1953-1958 йылдарҙа Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультеты студенты. Бер йыл ошо институтта тел һәм әҙәбиәт кафедраһында асистент булып эшләй. 1959-1962 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ҡаршыһындағы аспирантурала уҡый. Башҡорт фольклоры буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлағас, Өфөлә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми сотрудник булып эшләй. Бына шулай, Салауат Галин нигеҙҙә фольклористика менән ҡыҙыҡһына. Ул башҡорт халыҡ ижадын йыйыу буйынса бик күп фольклор экспедицияларҙа ҡатнаша.

Башҡорт халыҡ ижады – быуындан-быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, изге аманат, ҡәҙерле мираҫ, быуаттар буйы халыҡ күңелендә һаҡланып килгән, уның тарихын, тормош-көнкүрешен, уй-хыялдарын поэтиклаштырған хазина. Салауат Әхмәҙия улы ошо гүзәл мираҫтың жанрҙары, образдар донъяһы менән таныштыра, фольклорсы ғалимдар, йырауҙар, сәсәндәр хаҡында ентекле мәғлүмәт бирә. Автор халыҡ ижады тураһында төшөнсә биреү, уның тәбиғәте, үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ алып барыуҙан элек, терминдың ҡулланыла килеү тарихына байҡау яһай. Фәндә фольклор терминының ныҡлап урын алыуы утыҙынсы йылдарға, атап әйткәндә, СССР Яҙыусыларының беренсе съезынан һуңғы осорға ҡайтып ҡала. Фольклорҙы күпләп йыйыу, уны өйрәнеү, баҫтырып сығарыу ҙа тап ошо йылдарҙа башланып китә. Фольклор халыҡтың һүҙ сәнғәте: йыры, әкиәте йә булмаһа ҡобайыры, бәйете генә түгел, ә уның быуаттар буйы туплана килгән рухи культураһы, рухи байлығы.

Һәр сәнғәттең бер төрө булараҡ, быуындан-быуынға тапшырыла килгән халыҡ ижадының үҙенә генә хас мөһим үҙенсәлектәре бар. Ғалим билдәләүенсә, беренсенән, халыҡ ижады – ул күмәк ижад. Йәғни фольклор билдәле бер коллектив эсендә тыуа, тарала һәм йәшәй, уның мәнфәғәттәрен, уй-теләктәрен, идеалдарын сағылдыра. Фольклор үҙенең характеры менән коллектив ижад булһа ла, уның нигеҙендә индивидуаль башланғыс ята, сөнки тотош бер коллективтың күмәкләшеп ултырып йыр, йә булмаһа әкиәт, бигерәк тә "Урал батыр" һынлы ҡобайырҙарҙы сығарыуы мөмкин түгел. Был әҫәрҙәр, һис шикһеҙ, тәү башлап талантлы һүҙ оҫталары, әйтәйек, сәсәндәр, йырсылар, ҡурайсылар тарафынан сығарыла. Икенсе мөһим үҙенсәлек булып, уның быуаттар буйы халыҡ күңелендә һаҡланып, телдән-телгә күсә килеүе. Бына ошондай традиция халыҡ араһынан атаҡлы йырау һәм сәсәндәрҙең күтәрелеп сығыуына килтергән. Һәр бер халыҡтың ауыҙ-тел ижады – үҙенең тәбиғәте һәм ерлеге менән милли күренеш, сөнки уның тыуыуын һәм үҫешен тулыһынса шул халыҡтың ғына тарихы, тормош-көнкүреш шарттары менән аңлатырға мөмкин. Максим Горький әйтеүенсә, халыҡ ижады, бик боронғо замандарҙан башлап, айырылмаҫ булып һәм бик үҙенсәлекле рәүештә тарихҡа эйәреп килә.

Салауат Әхмәҙулла улы башҡорт халыҡ ижадының башҡа фәндәр менән бәйләнешен бөтә тулылығы менән аса. Фольклор әҫәрҙәрен бөтә тулылығында аңлау өсөн философия, диалектология, һынлы сәнғәт хаҡында ла күпмелер дәрәжәлә мәғлүмәтле булыу талап ителә, сөнки фольклорҙы уларҙан тыш күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

С. Галин халыҡ ижады менән әҙәбиәттең тығыҙ бәйләнеше, бүтән жанрҙар хаҡында байтаҡ мәҡәләләр яҙа, китаптар сығара. Жанр халыҡ ижадының мөһим проблемаларының берене һанала, сөнки фольклорҙың төп йәшәү формаһы – ул жанр. Ғалим билдәләүенсә, һәр жанрҙың тик үҙенә генә хас социаль-тарихи ерлеге бар. Шуға күрә лә теге йәки был осорҙоң ижтимағи-эстетик талаптарына ярашлы рәүештә, заман үтеү менән халыҡ ижадының жанрҙар составы ла, айырым жанрҙарҙың йәшәү формаһы ла үҙгәреп тора. Һуңғы ваҡыттарҙа фольклорҙың күпселек жанрҙары халыҡ күңелендә пассив ижад төрө булараҡ йәшәй.

Яҡты донъяла йәшәгән һәр мәҙәниәтле кешегә үҙенең тарихын, ата-бабаларының үткәнен, халҡының данлы ла, ҡанлы ла ҡаһарманлы юлын , милли-ғөрөф ғәҙәттәрен белеү гражданлыҡ бурысылыр. Беҙҙең мәшһүр ғалимдарыбыҙ, шул иҫәптән Салауат Галин да, башҡорт халҡының йолаларын, йыр-ҡобайырҙарын, эпостарын һәр яҡтан дөйөмләштереп, уларҙың милли үҙенсәлектәренә тарихи үҫеш закондары нигеҙендә аңлатма бирә.

Халҡым ижады тыуған ер ҡуйынынан урғылып сыҡҡан тынмаҫ шишмә ул. Уҡыусы был бай йөкмәткеле китаптарҙы ҡулына алыу менән ата-бабаларыбыҙҙың мәғәнәүи йәшәйешенә, әхләҡи һәм эстетик кисерештәренә, бай фантазияһына, ихласлығына, ҡунаҡсыллығына, отҡорлоғона хайран ҡалыр. Оҙон юлдар үтеп, йөрәк түрендә бик күп хазина һаҡлаусы кешеләр менән осрашып тупланған йолалар беҙҙең күңел даирәһен биләй, ныҡлы инаныуға өйрәтә, эске кисерештәрҙе байыта.

Етмешенсе-туҡһанынсы йылдар башҡорт фольклористикаһының быҙаса күрелмәгән бейеклектәргә күтәрелеү осоро булып тора. Тап ошо йылдарҙа ул бөтә ил – Рәсәй, элекке СССР һәм донъя күләмендә танылыу таба. Был йылдарҙа башҡорт халыҡ ижады ынйыларынан төҙөлгән башҡорт телендә ун һигеҙ, рус телендә ун томлыҡ баҫмалар донъя күрә. Ошо томдарҙы әҙерләүҙә Салауат Галиндың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ: 131 тормош-көнкүреш әкиәте тупланған Башҡорт халыҡ ижады баҫмаһының яуаплы редакторы була, тарихи һәм тормош-көнкүреш йырҙарынан 388 үрнәк бирелгән Башҡорт халыҡ ижадының йырҙар тураһындағы 1-се китабына, ике меңгә яҡын төрлө йыр-ҡобайырҙар, таҡмаҡтар, йола-йырҙары тупланған 2-се китаптарға инеш мәҡәләләр яҙа, аңлатмалар бирә. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Күсәк бей», «Уҙаҡ-Туҙаҡ – балабәшнәк ярсығы», «Ҡобланды батыр», «Маҡтымһылыу» тормош-көнкүреш эпостары тупланған Башҡорт халыҡ ижадының 4-се томына инеш мәҡәлә яҙа.

70-90-сы йылдарҙа башҡорт халыҡ ижадының төрлө мәсьәләләренә арналған күп кенә күләмле фәнни-монографик хеҙмәттәр донъя күрә. Шулар араһында С.Галиндың «Башҡорт халҡының йыр поэзияһы» (1978), юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек сифатында «Башҡорт фольклоры» (1975) китаптары баҫылып сығыу башҡорт фольклористикаһын яңы бейеклектәргә күтәрә.

Ғалим тағы ла Башҡорт халыҡ ижадының афористик жанрҙарына ныҡ иғтибар итә. Мәҡәл – аҙ һүҙ менән тәрән фекер, өгөт-нәсихәт биреүгә ҡоролған тапҡыр һүҙле ижад төрө. Шуға күрә мәҡәлдәр билдәле бер тапҡыр ҡалыпка һалынғандар һәм халыҡ телендә быуаттан быуатҡа шымара килгән күркәм хазинаға әүерелгәндәр. Мәҡәлдәр халыҡ тормошоноң бөтә өлкәһенә лә үтеп ингән ифрат бай йөкмәткеле ижад төрө. Шулай булһа ла уларҙың тарихи үҫештәрен билдәләү шаҡтый ауыр. Автор мәҡәлдәр хаҡында мәҡәләләр баҫтырып сығара, уларҙың баһалап бөтөргөһөҙ танып-белеү һәм тәрбиәүи әһәмиәтен билдәләй. Уның 1981 йылда «Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары», 1999 йылда баҫылған «Тел асҡысы - халыҡта» тигән китаптары донъя күрә.

Йыр – борон-борондан туған халҡыбыҙҙың тормош юлдашы булған. Йыр менән батырҙарҙы яу ҡайтарырға оҙатҡандар, илгә еңеү алып килгәндәрҙе лә йыр менән ҡаршылағандар. Ил батырҙарына йырсы-ҡурайсылар береһенән-береһе моңло, хис-тойғоло йырҙар сығарғандар, көйҙәр көйләгәндәр. Шатлыҡлы йыр күңелде тағы ла күтәреп ебәрһә, йән өҙгәс көйлө, тапҡыр һүҙле йыр ҡайғыны баҫҡан. Ғәҙелһеҙлекте лә, тигеҙһеҙлекте лә йыр менән фашлағандар, ә ғәҙеллек өсөн көрәшселәргә маҡтау йырланған. Халыҡ үҙенең йырын изгеләштереп кенә ҡалмаған, уны быуындан-быуынға боҙолмаҫ аманат итеп тапшырған. Ғалим-фольклорсы Салауат Галин айырыуса йыр жанрын өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт бирә. Йырҙарҙың композицияһына, символикаға, айырым һүҙ формаларына иғтибар йүнәлтә. Шуның һөҙөмтәһе булып, уның «Йылдар һәм йырҙар» (1967), «Башҡорт халҡының йыр поэзияһы» (1978) тигән хеҙмәттәре баҫылып сыға.

Салауат Галиндың башҡорт фольклоры үҫешенә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Уның тағы ла айырым өйрәнеүҙе талап иткән легенда һәм риүәйәттәре, әкиәт һәм көләмәстәре, бәйет һәм мөнәжәттәре, йырауҙар һәм сәсәндәр тураһында биргән тәрән йөкмәткеле хеҙмәттәре 2004 йылда «Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады» китабында донъя күрә.

Һүҙемде йомғаҡлап шуны әйтәм: ғалимдың Башҡорт халыҡ ижады буйынса баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре бөгөнгө көн өсөн йәш быуынды тәрбиәләүҙә аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, ҡәҙерле мираҫ булып тора. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә һәм кластан тыш сараларҙа арҙаҡлы ғалим Салауат Әхмәҙи улы Галиндың хеҙмәттәренә таянам һәм бик теләп ҡулланам.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. 1-се китап. Өфө, 1974.
2. *Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. 2-се китап. Өфө, 1977.*
3. Башҡорт халыҡ ижады. Тормош-көнкүреш эпосы. 4-се том.- Өфө. 1999.
4. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. 2-се китап. Өфө, 1977.
5. Галин С.Ә «Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады» - Өфө. Китап, 2004.
6. Галин С.Ә «Тел асҡысы халыҡта» - Өфө. 1993.
7. Галин С.Ә «Башҡорт халҡының йыр поэзияһы»- Өфө. 1978.
8. Галин С.Ә «Башҡорт фольклоры» - Өфө. 1975.

УДК 398

БАЛАЛАРҘЫҢ ИЖАДИ ҺӘЛӘТЕН ҮҪТЕРЕҮҘӘ ХАЛЫҠ ИЖАДЫНЫҢ РОЛЕ

THE ROLE OF FOLK ART IN THE DEVELOPMENT OF CHILDREN'S CREATIVE ABILITIES

Р.Т. Хазиахметова,
учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ № 1 г. Дюртюли
R.T. Khaziakhmetova, teacher of Bashkir language and literature MBOU Secondary School No. 1 of Durtyuli RB

Аннотация: Статья посвящена роли фольклора в современном образовании и воспитании детей и юношества. Нравственно-эстетическое воспитание детей имеет особое значение в связи с повышенным интересом общества к народной педагогике, этнографии детства, национальной культуре и быту.

Ключевые слова: фольклор, жанры фольклора, методы и приемы.

Annotation. The article is devoted to the role of folklore in modern education and upbringing of children and youth. Moral and aesthetic education of children is of particular importance due to the increased interest of society in folk pedagogy, ethnography of childhood, national culture and everyday life.

Keywords: folklore, genres of folklore, methods and techniques.

Бала – бөйөк хазина, асылмаған сер, тибеҙ. Ысынлап та һәр баланың күңелендә тәрәнгә йәшеренгән аҫыл таштар һымаҡ, хазина бар. Баланың күңеленә юл таба алыу, һәләтен күрә белеү – шул хазина табыуға тиң. Бөтә балалар ҙа бер төрлө түгел, әммә һәр бала үҙенсә һәләтле. Ошо һәләтте ваҡытында күрә белеп артабан үҫтереү ата-әсәләр менән уҡытыусыларҙың яуаплылығында. Шул осраҡта ғына уҡыусыларыбыҙ киләсәктә тормошта үҙ урынын таба алырына ышаныс бар. Мин башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен, кластан тыш сараларҙы тап шул бурысты атҡарыуға йүнәлтәм. Төп маҡсатым – уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү һәм ижади аңын формалаштырыу.

Эшемдең төп маҡсаты:

- уҡыусыларҙың индивидуаль, ижади һәләттәрен асыу, ижади фекерләүҙәрен үҫтереү һәм тормошҡа ашырыу өсөн тулы шарттар булдырыу.

Төп бурыстарым:

- балаларҙың ижади һәләтен асыҡлау һәм үҫтереү;

- ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы тергеҙеү һәм үҫтереү нигеҙендә халкыбыҙҙың тарихын өйрәнеү;

- һәләтле балаларҙы төрлө яҡлап үҫтереү системаһын формалаштырыу.

- яҡташ яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен өйрәнеү аша тыуған яҡҡа һөйөү һәм арҙаҡлы шәхестәр менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

Күренекле яҡташтарыбыҙ башҡорт халыҡ шағиры Назар Нәжми, Советтар Союзы геройы Василий Горшков, Башҡортостандың халыҡ йырсыһы Радик Динәхмәтов, йырсы-композитор Ризван Хәкимов яҙыусы-драматург Мөҙәрис Мөсифуллин, күренекле театр артистары Фидан Ғафаров, Илһөйәр Ғәзетдинова кеүек шәхестәрҙең тормошон, ижадын өйрәнеү йәш быуынға үҙ төйәгенең тарихын тәрәнерәк белергә мөмкинлек бирә, илдең киләсәге тураһында уйланырға, ысын патриот булып үҫергә ярҙам итә.

Әҙәбиәт дәреҫтәрендә уҡылған әҫәрҙәргә иллюстрациялар йәки плакат яһау, өҙөктәрҙе сәхнәләштереү, шиғырҙарҙы тасуири итеп ятлау, ролдәргә бүлешеп уҡыу кеүек эштәр уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү менән бер рәттән артислыҡ һәләттәрен асыуға ла ярҙам итә.

Дәрестә лирик атмосфера булдырыу, поэтик күнекмәләр үткәреү, уҡытыусының тема буйынса үҙенең яратҡан бер шиғырын яттан һөйләүе уҡыусыла лирик әҫәрҙәргә ҡарата мөхәббәт тәрбиәләүҙә ярҙам итә, тасуири уҡыу дәрәжәһен күтәрә. Бында “шиғри юлдарҙы дауам ит” кеүек эштәрҙе башҡарырға була.

Уҡыусылар уҡылған әҫәрҙәге күп һанлы персонаждарҙы өйрәнеү менән бергә, үҙҙәре йәшәй торған тирәлектәге кешеләрҙең батырлығын, ҡыйыулығын күрә һәм баһалай, уй-фекерҙәрен, хистәрен аңлай белергә тейештәр. Шунан сығып, дәрестә белем һәм тәрбиә биреү берҙәм процеста алып барыла.

Махсус хәрби операция барышында хәрби бурыстарын үтәгәндә батырлыҡ һәм түҙемлелек күрһәтеп, батырҙарса һәләк булған дүрт егет беҙҙең мәктәпте тамамлаусылар. Беҙ уларҙың батырлығына битараф булырға тейеш

түгелбеҙ. Халыҡта ошондай әйтем бар: ”Батырҙарҙың исемен күберәк иҫкә ал – иленә көс-ҡеүәт артыр; изгеләреңде күберәк телгә ал – иленә изгелек ҡайтыр».

Уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү кластан тыш эштәрҙә дауам итә. Мәктәптә йәш таланттар түңәрәге эшләй. Студияла балаларҙың һәләтен асыу, үҙ-үҙенә ышаныс арттырыу, тормошҡа позитив ҡараш тәрбиәләү иң мөһим урынды алып тора. Бында сәхнә телен өйрәнеү, башҡорт телендә фекер йөрөтөргә, үҙ фекерҙәрен асыҡ итеп еткерә белергә өйрәнәләр. Һөҙөмтәлә балаларҙың тәү ҡарашҡа күренмәгән һәләтенең асылып китеүендә, үҙҙәрен ышаныслырак тотоуында, көндәлек тормоштағы күп мәҫәләгә һәм мәктәп дәрестәренә яуаплы ҡарай башлауында күренә.

Район һәм республика күләмендә үткәрелгән конкурстарға уҡыусыларым менән етди әҙерләнәбеҙ һәм тырышлығыбыҙ бушҡа китмәй. Уҡыусыларым йыл һайын әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының семинарында уҡыусылар менән “Өй ҡотлау” йолаһын үткәрҙек. Башҡорт халыҡ әкиәте “Әтәс батша”, “Ике тиҫкәре кәҙә”, ”Бейәләй“ әкиәттәрен сәхнәләштерҙек. Был байрамдарға әҙерлек ваҡытында күп кенә уҡыусыларҙың һәләттәре асылды, йыр-бейеүгә маһирлыҡтары асыҡланды.

Дәрестәрҙә программа буйынса үтелгән әҙәби әҫәрҙе уҡыусыларым менән сәхнәләштереүгә етди иғтибар бирәм. Минең фекеремсә, әҫәрҙе уйнап күрһәтеү, образға инеү, уның мәғәнәһен тулыраҡ аңларға, төшөнөргә ярҙам итә. Фәрҙәнә Аҡбулатованың “Атай икмәге”, Талха Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала”, Мостай Кәрим “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәрҙәре нәҡ бына шундайҙарҙан.

Дәрестәрҙә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү өсөн һүрәттәр, картиналар, әкиәт төҙөтәм. Ролдәргә бүлеп сәхнәләштереү, инсцинировка ҡуйыу, дәрес-театр формаһында үткәрһәң, уҡыусылар ҡыҙыҡһынып уҡыйҙар.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү – ҡатлаулы мәсьәлә. Юғарыла күрһәтелгән эш ысулдарын ҡулланыу ҡыуанырлыҡ нәтижәләр бирә. Уҡыусыларҙың үҙ туған телдәре – башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә, уның тарихына, мәҙәниәтенә булған ҡыҙыҡһыныуҙары көсәйә. Улар образлы фекер йөрөтөргә, тормошта килеп тыуған ситуацияларҙы әхлаҡ ҡанундары күҙлегенән сығып сисергә, һәр нимәгә үҙ ҡараштарын булдырырға өйрәнә.

Шулай итеп, һәр ваҡыт эҙләнеү, педагогик оҫталыҡ һәм үҙ аллылыҡ, уҡыусы менән уҡытыусының хеҙмәттәшлеге, фәнгә, туған телгә һәм әҙәбиәткә булған мөхәббәт, матурлыҡты күрә белеү, тормоштағы ыңғай сифаттарҙы бала күңеленә һалыу – ысын кеше итеп тәрбиәләү билдәһе.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Шәрипов И.Ә. Әҙәбиәт уҡытыуҙа балаларҙың ижади һәләтен үҫтереү. – Өфө. – Башҡортостан ”Китап“ нәшриәте 1995.

2. Заһизуллина Р. ”Ижади һәләт – заман талабы“. Башкортостан уҡытыусыһы 2004, № 8, 35-36 нсы бит.

УДК 38.8

БАШҡОРТ ФОЛЬКЛОРЫНЫҢ ЙӘШ БЫУЫНДЫ ТӘРБИӘЛӘҮҙӘГЕ РОЛЕ

THE ROLE OF BASHKIR FOLKLORE IN THE EDUCATION OF THE YOUNGER GENERATION

Г. А. Хакимова,
учитель башкирского языка и литературы
МБОУ Башкирская гимназия с. Учалы, Учалинский район РБ.
G. A. Khakimova,
teacher of Bashkir language and literature MBOU Bashkir gymnasium named after s. Uchaly, Uchalinsky district of the RB

Аннотация: В статье выявлена роль башкирского фольклора в формировании ценностных ориентаций личности школьника. Сделан вывод о том, что фольклор обогащает жизнь школьников, стимулирует их воображение, развивает интеллект, помогает понять самого себя, свои желания и эмоции, способствуют повышению уверенности в себе и своем будущем.

Ключевые слова: фольклор, жанры фольклора, воспитание.

Annotation. The article reveals the role of Bashkir folklore in the formation of value orientations of a student's personality. It is concluded that folklore enriches the lives of schoolchildren, stimulates their imagination, develops intelligence, helps to understand themselves, their desires and emotions, and helps to increase self-confidence and their future.

Keywords: folklore, genres of folklore, upbringing.

Белем биреү системаһында милли үҙаңды формалаштырыуҙа фольклорҙың көсө баһалап бөткөһөҙ, тип билдәләнә, сөнки интеллектуаль, эстетик, этик ҡиммәте буйынса ул кешеләрҙең рухи ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә. Фольклор жанры үҙ эсенә бик күп йүнәлештәр ала: әкиәт, мәҡәл, әйтем, йыр, йомаҡ, эпос, бәйет һ.б. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын халыҡ педагогикаһының энциклопедияһы тиергә мөмкин, сөнки ул балаға белем һәм тәрбиә биреү менән бер рәттән, халҡыбыҙ хазинаһы, ҡомартҡыһы, тарихы, уның хыял-өмөттәре менән дә таныштыра. Тел дәрестәрендә эш алымдарын һәм методтарын фольклорҙың жанр үҙенсәлектәренән сығып ойоштороу шарт. Миҫал өсөн халыҡ ижадының киң таралған төрҙәре – әкиәттәргә, йолаларға, эпостарға, башҡорт балалар уйындарына туҡталайыҡ.

Үрҙә һанап кителгән фольклор жанрҙары балалар тормошонда ҙур роль уйнай, уларҙың ыңғай йоғонтоһо баһалап бөткөһөҙ. Әкиәттәрҙә, йолаларҙа, уйындарҙа, эпостарҙа халыҡ тарихы, көнкүреше, уй-теләктәре, хеҙмәте, азатлыҡҡа ынтылышы сағыла, ирек һәм ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе батырҙар данлана. Уларҙың йөкмәткеһе күтәренке рух менән һуғарылған, шуға ла улар балаларға бик оҡшай.

Бына ошо 36 йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һәм өлгөлө «Бөҙрәкәй» театрының етәксеһе булып эшләү дәүерендә әкиәттәр, йолалар, эпостар, уйындар дәресемдең йәме, тәме булып торалар. Беҙ, уҡыусылар менән,

бик күп әкиәттәр сәхнәләштерҙек, дәрестәрҙә әкиәт, уйындар, эпостар йолалар иленә сәйәхәт иттек, төрлө образдарға кереп уҡыныҡ, уйныҡ. Бәләкәй ҡарһүҙҙәрҙән тыш, «Кәзә менән Һарыҡ», «Ҡамыр батыр», «Урал батыр», «Кем көслө?» «Хеҙмәтйән менән Бапаҡ», «Ҡурай»,“Етем төлкө” һ.б. кеүек халыҡ әкиәттәрен мажаралы итеп тамашасыларға күрһәттек. “Ҡарға бутҡаһы”,“Кәкүк сәйе”, “Килен төшөрөү” кеүек йолаларҙы, “Өсмөйөш”, “Наза”, “Косилка-молотилка” кеүек уйындарҙы ла балалар менән сәхнәгә ҡуйҙыҡ.

“Шәжәрә” байрамын да үткәрҙек. Шәжәрә тураһында күренекле фольклорсы ғалим Салауат Галин «Тел асҡысы – халыҡта» тигән китабында аңлайышлы һәм йөкмәткеле итеп яҙған:«Шәжәрә – асылда, башҡорт халҡының тарихына бәйле, халыҡтың үҙе ижад иткән иң тәүге яҙма ҡомартҡыларының береһе, – ти ғалим. – Яҙмаға күсерелгәнгә тиклем шәжәрәләр ҙә телдән телгә, быуындан быуынға йола буйынса үҙ тамырҙарына тапшырыла килгән». Шуға ла балаларҙы рухлы итеп тәрбиәләүҙә шәжәрә байрамдарын үткәреү, шәжәрәңде төҙөү ҙур әһәмиәткә эйә.

Учалы ерлегендә сыҡҡан ир-егеттәрҙе тәрбиәләүгә ҡоролған башҡорт балалар уйындарын да эҙләп таптыҡ, эпостарҙы ла өйрәндек, сәхнәләштерҙек. Балалар сәхнәгә бар күңеле менән тартыла. Ролдәрҙе илһамланып ысын артистар һымаҡ башҡаралар.

Беҙҙең Учалы ауылы башҡорт гимназияһында әкиәттәрҙе, йолаларҙы, эпостарҙы, яҙыусыларҙың төрлө әҫәрҙәрен сәхнәләштерергә яратҡан йәш артистарҙың бөтәһе лә «Бөҙрәкәй» балалар театрында ролдәрҙе башҡарыу оҫталыҡтарын камиллаштыра. Был ижади ойошма 1996 йылдан башлап эшләп килә. 2007 йылда «Өлгөлө балалар театры» исемен яҡлай. Унда утыҙҙан ашыу бала шөғөлләнә. Улар ике төркөмгә бүленә: кескәйҙәр, өлкәндәр. Кескәйҙәр төркөмө алмаш әҙерләү, үҙеңде сәхнәлә һынап ҡарау маҡсаты менән ойошторола.

Театр эшмәкәрлеге сығыш яһау ғына түгел, танып белеү, тәрбиәүи һәм үҫтереүсе бурыстарҙы ла тормошҡа ашырырға тейеш. Шуға ла эштең төп маҡсаты булып: йәш быуындың буш ваҡытын файҙалы үткәреү, уларҙың ижади һәләттәрен, хис-тойғоларын үҫтереү, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын белергә, тәрбиәле булырға, туған телдә матур итеп һөйләшергә өйрәтеү тора.

Беренсе осорҙа әкиәттәрҙе, йолаларҙы, уйындарҙы, эпостарҙы сәхнәләштерә башлар алдынан тәүге дәрестәрҙә актерлыҡ һәм театр сәнғәте тураһында йәнле аңлатыу үткәрелә, бурыстар, алдағы эштәр асыҡлана; уҡыусылар менән бергәләп сәхнәлә ҡуясаҡ әҫәр һайлана; ролдәргә бүлеп уҡыу, уларҙың йөкмәткеһе тураһында әңгәмәләшеү ойошторола; һәр геройҙың холоҡ-фиғелен, уларҙың ыңғай һәм кире яҡтарына ҡылыҡһырлама бирелә; образға кереү өсөн нисек һөйләшергә, сәхнәлә үҙеңде нисек тототорға икәнлеге тураһында фекер алышыу үткәрелә. Иң мөһиме: театрҙың һәр бер ағзаһы үҙенә бирелгән роль һүҙҙәрен ятлай, уларҙы ул мотлаҡ белергә тейеш. Шул осорҙа һәр һөйләмде, абзацты, телмәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү эше башҡарыла. Уларҙың артикуляцияһын, интонацияһын, дикцияһын үҫтереүгә, һүҙлек байлығын

арттырыуға ҙур баҫым яһала. Ғөмүмән, әҫәрҙәрҙең телмәре өҫтөндә эшләүгә ҙур иғтибар бирелә.

Икенсе осорҙа, әҫәрҙәге ролдәрҙең һүҙҙәре ятлатып бөтөрөлгәс, репетициялар сәхнәгә күтәрелә; бында инде телмәр менән бергә сәхнәлә үҙ-үҙеңде тотоу, хәрәкәткә, ҡыланыштарға иғтибар йүнәлтелә. Бер рәттән сәхнәне музыкаль яҡтан биҙәү, әкиәткә кәрәкле декорация эшләү, әҫәр геройҙарына костюмдар әҙерләүгә ҡарата ойоштороу эштәре алып барыла. Шундай эҙмә-эҙлекле эш ярҙамында ғына уңыш юлдаш була. Матур сәхнә әҫәре тыуа.

Беҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә, мәктәптә, клуб сәхнәһендә, балалар баҡсаларында, төрлө ауылдарҙа үҙебеҙ сәхнәләштергән әкиәттәр, эпостар, йолалар, йырлы уйындар менән сығыш яһайбыҙ. Район һәм республика буйынса үткәрелгән төрлө конкурстарҙан да ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ, актив ҡатнашабыҙ һәм ҙур еңеүҙәргә өлгәшәбеҙ. Шундай ҙур уңыштарыбыҙҙың береһе булып Шакирова Зилиәнең Бөтә донъя башҡорттарының III ҡорлтайына арналған донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусы балаларҙың «Һаумы, Һаумы, Әкиәт!» I Республика конкурсында Гран-при яулауы булды. Ярышта Зилиә «Кем көслө?» тигән башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләне. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул ун ике төрлө образға инде, ун ике төрлө кейем алмаштырып өлгөрҙө. Бабай роле төп булһа, шул уҡ ваҡытта ул Боҙға, Ҡояшҡа, Болотҡа, Ямғырға, Ергә, Үләнгә, Салғыға, Сысҡанға, Бесәйгә, Егеткә, Ҡыҙға әйләнде. Уның аллы-гөллө кейемдәре күҙҙең яуын алып торҙо. Һәр бер образды үтә лә матур уйнаған ҡыҙыҡай үҙенең интонацияһы, ҡыланыштары, тауышы менән барыһын да үҙенә арбаны ла ҡуйҙы. Шулай итеп, беҙҙең оҫта артистарыбыҙҙың береһе конкурста иң-иңдәрҙең рәтенә баҫты һәм “Алтынай” студияһы тарафынан сығарылған аудиодискыға Зилиә һөйләгән әкиәт тә индерелде. Ә донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусы балаларҙың «Һаумы, Һаумы, Әкиәт!» конкурстарында йыл да ҡатнашып торабыҙ һәм призлы урындар яулайбыҙ. Унда беҙ Учалы ауылында йәшәүсе Йосопова Жәүиҙә Вәис ҡыҙынан яҙып алған “Ике күрше”, тағы ла “Урал батыр”, “Һунарсы”, “Ырыҫбикә” һ.б. әкиәттәрен күрһәттек. Әкиәттәр, мөғжизәләр донъяһына сәйәхәт иткеһе килмәгән бала бармы икән донъяла. Юҡтыр! “Башҡортостан ынйылары” конкурстарында ла йыл да ҡатнашабыҙ. Төрлө йолалар, уйындар, топонимик риүәйәттәр сәхнәләштерәбеҙ.

Һәр жанрҙы сәхнәләштереп, уйнаған ваҡытта балаларҙа изгелек, ҡыйыулыҡ, эшсәнлек, әҙәплелек, түҙемлек, йомартлыҡ кеүек ыңғай сифаттарҙы тәрбиәләүҙе, ә көнсөллөк, ялҡаулыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, алдашыу, хәйләкәрлек, кешене мыҫҡыллау кеүек кире сифаттарҙан арыныуҙы маҡсат итеп ҡуям.

Мәҫәлән, «Хеҙмәтйән менән Бапаҡ» башҡорт халыҡ әкиәтен алайыҡ. Бында ике улдың ата-әсәһенә, ауылдаштарына, тыуған еренә ҡарата мөнәсәбәттәре төрлө эштәрҙә, килгән ауырлыҡтар алдында асыла. Хеҙмәтйән эшһөйәр, изге күңелле, шәфҡәтле, ҡыйыу булһа, Бапаҡ мәрхәмәтһеҙлеге, оятһыҙлығы, ҡомһоҙлоғо, хәйләкәрлеге менән бөтәһенән дә айырылып тора.

Әкиәтте сәхнәләштергәндә йәш артистарҙың бер ҙә Бапаҡҡа оҡшағыһы килмәй, уларһың уның ҡылыҡтарына, ырыуҙаштарына ҡарата эшләгән

яуызлыҡтарына иҫтәре китә. Иң мөһиме яҡшылыҡ менән яуызлыҡ араһындағы айырманы күрәләр, сағыштыралар. Ә был рухи-әхлаҡи тәрбиәнең төп йүнәлештәренең береһе булып иҫәпләнә. Әкиәттәр кешене һәр саҡ алға - матур тормош, яҡты хыялдар өсөн көрәшкә әйҙәй.

Кәңәш итеп шуны әйтер инем: балалар менән күберәк сәхнә күренештәре күрһәтергә, уларға тормошта дөрөҫ юл һайлауҙы маҡсат итеп ҡуйырға, уҡыусыларҙы бөтә эшкә илһам менән тотонорға өйрәтергә, халҡына, әҙәбиәтенә, тарихына, теленә, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Бында фольклорҙың иң төп жанрҙарының береһе булараҡ әкиәттәрҙең, йолаларҙың, эпостарҙың роле баһалап бөткөһөҙ.

Тағы ла дәрестәрҙә баларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүҙә ҡулланған иң уңышлы халыҡ ижадының киң таралған жанрҙарының береһе - эпостар. Беҙҙең эпостарыбыҙ бихисап: “Урал батыр” , Заятүләк менән Һыуһылыу, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Аҡбуҙат” һ.б. Улар беҙҙе Йәнтөйәгебеҙ, Атайсалыбыҙҙағы барлыҡ тереклеккә иғтибарлы, хәстәрлекле булырға өндәй. Йәшәү сығанағы булған һыуыбыҙҙы бысратмаҫҡа, шишмәләребеҙҙе таҙартып, тәрбиәләп торорға, тәбиғәтебеҙҙең матурлығын, еребеҙҙең именлеген һаҡлап, илебеҙҙе һөйөп йәшәргә кәрәклеген аңлата. Батырҙарыбыҙҙың изге аманатын килер быуындарға ла түкмәй-сәсмәй тапшырырырға ҡуша. Изгелек менән яуыҙлыҡтың айырмаһын белеп, телһөйәр, илһөйәр булып йәшәргә саҡыра.

Эпостарҙы өйрәнеп кенә, ятлап ҡына ҡалмайбыҙ, беҙ уларҙы сәхнәләштерәбеҙ ҙә.

«Урал батыр» эпосы буйынса республикала уҙғарылып килгән йәш сәсәндәр конкурсында лә беҙҙең Учалы ауылы башҡорт гимназияһының өлгөлө «Бөҙрәкәй» балалар театры артистары 16 йыл рәттән ҡатнашып, юғары бейеклектәргә күтәрелеп, призлы урындар яулап килә. Уларҙың уңыштары республика һәм урындағы матбуғат биттәрендә лә киң яҡтыртыла. “Урал батыр” эпосының йөкмәткеһе буйынса, “Урал батыр менән Шүлгәндең Йәншишмәгә юлланауы”, “Урал батыр йыландар илендә”, “Урал батыр дейеүҙәр илендә”, “Шүлгәндең Уралдан ынйы таяҡты алдап алыуы һәм бөтә ерҙе һыуҙан баҫтырыуы” кеүек бер бөтөн өлөштәрен, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Аҡбуҙат”, “Иҙел”, “Һомай илендә” һ.б. эпостарын балалар сәхнәлә илһамланып уйнанылар. Әлбиттә, конкурстың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ни өсөн тигәндә, уҡыусылар эпос нескәлектәренә төшөнөү менән бер рәттән, үҙҙәренә яңы танышлыҡтар булдыра, дуҫтар таба, арҙаҡлы шәхестәр менән аралаша, Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәт һәйкәлдәре менән дә таныша.

Халҡыбыҙҙың мәңгелек оло хазинаһы булып танылған “ Урал батыр” эпосын данлаусыларҙың тап гимназия уҡыусылары булыуы күңелдә бөтмәҫ – төкәнмәҫ ғорурлыҡ тойғоһо уята. Ата – бабаларыбыҙҙан күсә килгән рухи ҡиммәтебеҙ “Урал батыр” эпосын һаҡлаусы, һанлаусы уҡыусыларға «Афарин!» тип әйтке генә килә. Нисек кенә булмаһын, йәш быуын ауыҙ – тел ижадын, халҡыбыҙ мираҫын, мәҙәниәтебеҙҙе белеп, иманлы, әхлаҡлы, тәрбиәле булып үҫергә тейеш.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге ваҡытта күптәр халыҡ уйындары тураһында бик аҙ белә. Ә бит балаларҙы тәрбиәләүҙә башҡорт халыҡ уйындары ла айырыуса ҙур урын тота. Ололарҙың һөйләүе буйынса, борон, балаларҙы мәргәнлеккә, сослоҡҡа, йылғырлыҡҡа, таҫыллыҡҡа өйрәтеү маҡсатында, аҡһаҡалдар балалар араһында төрлө уйындар, махсус ярыштар ойошторор булғандар. Физик һәм әхлаҡи яҡтан сыныҡтырыуға ҡоролған уйындар, асылда, һунарсының, малсының, балыҡсының көндәлек хеҙмәте өсөн мотлаҡ күнекмә булып торған. 4-5 йәшкә тиклем малайҙарҙы атайҙары үҙ тәрбиәһенә алған. Улар һыбай йөрөргә, уҡтан атырға, йүгерергә, көрәшергә өйрәткән. Төрлө уйындарҙы ла улар үҙҙәре уйлап тапҡан, әлбиттә.

Башҡорт халҡының үҙенә генә хас уйындарына XVIII быуат сәйәхәтселәре үк ҙур иғтибар бүлә. Мәҫәлән, Иван Лепехин да үҙенең «Көндәлек яҙмаларында...», Сергей Руденко «Башҡорттар. Тарихи-этнографик очерктар»ында, күренекле фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов та үҙенең “Бала-сағаның уйын фольклоры” китабында уйындарҙың спорт йүнәлешендә булыуын һәм уларҙың башҡорттарҙың көнкүреше менән бәйле булыуы баҫым яһайҙар.

Учалы ерлегендә лә йәш быуынды батыр, көслө, рухлы итеп тәрбиәләүгә ҡоролған уйындар бихисап. “Башҡорт кешеһе ҡайҙа ғына йөрөмәһен дә, ҡайҙа ғына булмаһын, үҙенең эш, һунар ҡоралын уйынға ла әйләндергән”, – ти күренекле тарихсы Фәнүр Фәнит улы.

Онотолған ир-егеттәрҙе тәрбиәләүгә ҡоролған балалар уйындарын эҙләүгә, табыуға, уйнарға өйрәнеүгә ҙур ярҙамды беҙгә Учалы районының Һәйтәк ауылында тыуған, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Шәһиев Фәнит улы күрһәтте. Ул тағы ла уйындарҙың бик күп булыуы тураһында мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Был һөйләшеү башҡорт милли балалар уйындарын өйрәнеүгә тулыһынса ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы һәм беҙ балалар менән ошо уйындарҙы уйнарға өйрәндек.

Халыҡтың көндәлек шөғөлөндә ҡулланған дилбегә, йүгән, арҡан, ҡылыс, һөйәк ярҙамында ғына 20 төр уйын таптыҡ. Бына улар: “Ат сабышы”, “Әтәстәр һуғышы”,“Кем алдан өлгөрә?”, “Кем көслө”, “Һыбайлылар һуғышы”, “Арба тартыш”, “Сик аша”,“Арҡан тартыш”, “Һикерәндәктәр”, “Ултырып тартыш”, “Алыш”, “Ҡороҡ һалыу”, “Сәпкә тейҙереү”, “Түңәрәккә баҫма”, “Дуҫлыҡ ебе”, “Ҡылыс” , “Атҡа менергә әҙерме?”,“Йәкәл һуғыу” h.б.

Уйындар балалар тормошон биҙәй, мәғәнә өҫтәй. Һәр уйында маҡсатҡа ирешеүҙең үҙ ауырлығы бар. Уйнаусылар уларҙы еңеп сығырға тейеш. Ә ҡаршылыҡтар үҙ сиратында була тороп, еңелдән ҡатмарлана бара. Ошо принципҡа ҡоролған уйындар балаларҙа ихтыяр көсө, сыҙамлылыҡ, ныҡышмалылыҡ, хеҙмәт һөйөүсәнлек тәрбиәләй.

Үҙебеҙҙең тыуған яғыбыҙҙың шәжәрәһен, йолаһын йыйыу, тарихын, уйындарын белеү барыбыҙ өсөн дә мөһим эш. Күренекле фольклорсы С. Галин әйтеүенсә: “Тел асҡысы - халыҡта”. Халыҡ ижадын ентекләп өйрәнеү халҡыбыҙҙың тарихын өйрәнеүгә, мәҙәниәтен үҫтереүгә бик күп һәм мөһим яңылыҡтар өҫтәйәсәк.

Дөйөмләштереп әйткәндә, халыҡ ижады өлгөләрен мәктәптәрҙә өйрәнеү йәш быуынды тәрбиәләүҙә иң мөһим ролдәрҙең береһен үтәй. Сөнки, фольклор әҫәрҙәре йәш быуынға ғына түгел, ата-бабаларыбыҙға ла төп белем сығанағы булып хеҙмәт иткән. Уның аша халыҡ үҙенең йыр-моңона күскән тарихы менән танышкан, ата-бабаларҙан тапшырыла килгән яҙылмаған тормош тәжрибәһен һәм әхлаҡ нормаларын үҙләштергән, эстетик зауығын үҫтергән.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. *Лепёхин И. И.* Дневные записки путешествия доктора и Академии наук адъюнкта Ивана Лепёхина по разным провинциям Российского государства в 1768 и 1769 году. Часть 1. – СПб., 1771.

2. *С. И. Руденко*. Башкиры: Историко-этнографические очерки. — М.— Л., 1955.

3. *И. Ғ. Ғәләүетдинов.* Башҡорт халыҡ балалар уйындары. Беренсе китап. - Өфө: Китап, 2002.-248.

4. *Ә. М. Сөләймәнов* “Бала-сағаның уйын фольклоры”. - Өфө: Китап, 2007.-344 бит.

5. Салауат Галин «Тел асҡысы — халыҡта». Башҡорт фольклоры - Өфө, Китап, 1993й. 224 бит.

УДК 373.2.

ТЕЛ КҮРКЕ – ҺҮҘ, МИЛЛӘТ КҮРКЕ – ТЕЛ

THE BEAUTY OF THE LANGUAGE IS THE WORD, THE BEAUTY OF THE NATION IS THE LANGUAGE

Э.Р.Хакова,
воспитатель МБДОУ Детский сад №12 «Алтынчач» г.Дюртюли
E.R.Khakova,
educator MBDOU Kindergarten No. 12 "Altynchach" in Durtyuli RB

Аннотация: В статье предложены и охарактеризованы педагогические приемы для формирования метапредметных компетенций у обучающихся на уроках литературы, показаны конкретные задания, которые позволяют развивать метапредметные универсальные учебные действия, что, в свою очередь, позволяет достичь высокого результата при работе с текстами.

Ключевые слова: фольклор, детский сад, методика, внеурочная деядельность.

Annotation. The article proposes and characterizes pedagogical techniques for the formation of meta-subject competencies among students in literature lessons, shows specific tasks that allow them to develop meta-subject universal learning activities, which, in turn, allows them to achieve high results when working with texts.

Keywords: folklore, kindergarten, methodology, extracurricular activities.

Туған телебеҙҙә һөйләшәйек,
Һаҡлайыҡ телебеҙҙе!
Ғорурланып иҫкә алһын

Киләсәк быуын беҙҙе!

Һәр кеше өсөн иң яҡын, иң мөһиме – ул туған тел!

Туған тел ул әсә кеүек берәү һәм ғәзиз. Ул кешенең донъяға ауаз һалған минутынан һуңғы һулышына тиклем йәнәләшә килә.

Тел – тарихи үткән менән киләсәкте бәйләгән күпер. Халыҡтың халыҡ булып ҡалыуы, йәшәйеше лә тел яҙмышы менән бәйле.

Беҙҙең бурысыбыҙ – туған телебеҙҙе һаҡлау, йәшәү мөхитебеҙҙә ҡулланыу һәм уны киләһе быуындарға тапшырыу. Был бурыс һәр кемдең иңенә берҙәй тигеҙ һалынған. Һәр кеше үҙенең туған теле менән ғорурланып йәшәһә генә, ул һис шикһеҙ, бәхетле кеше тип һанала.

Туған телгә һөйөү кесе йәштән – балалар баҡсаһынан башлана.

Элеккеге тарихи яҙмаларға күҙ һалһаҡ, 1991 йылды Дүртөйлө ҡалаһында беҙҙең балалар баҡсаһын асыу һәм уға “Алтынсәс” исеме биреү ҙә, шул маҡсатты үтәү өсөн эшләнгән.

Беренсенән, үҙ телендә һөйләшкән бала – бәхетле бала. Сөнки ул туған телендә аралаша, халыҡ араһында йәшәй, милли йолаларҙа тәрбиәләнә.

Ә икенсенән инде, туған телен өйрәнмәгән, тел биҙәктәрен күрмәгән кеше – ярлы кеше. Кесе йәштән тел ҡәҙерен аңлатыу мотлаҡ.

Ғөмүмән, үҙ телендә һөйләшкән бала киләсәктә лә милләтенә тоғро булып үҫәсәк!

Ғалимдар фекеренсә, бала туған телендә алған белемде бер ҡасан да онотмай. Тәүҙә балалар баҡсаһында, унан мәктәптә тәрәнәйтә һәм нығыта бара.

Әлбиттә, башҡорт фольклорын өйрәтеү балалар баҡсаһында мөһим урын алып тора. Минең эшемдең төп маҡсаты - халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килгән ауыҙ-тел ижадын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, уйындарын, әкиәттәрен ошо балаларға өйрәтеү һәм киләсәк быуынға еткереү.

Шулай итеп, балаларҙа үҙ туған еренә, ғөрөф-ғәҙәтенә, ижадына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, ихтирам уятыу, милли рухҡа нигеҙ һалыу, туған телде өйрәтеү өсөн үҙебеҙҙең Дүртөйлө ҡалаһы 12-се һанлы “Алтынсәс” балалар баҡсаһында төрлө мәҙәни саралар үткәрәбеҙ. Уларҙың роле бик ҙур. Сараларға әҙерләнгән ваҡытта бик күп өҫтәмә материалдар ҡарала, балалар менән әҙерлек эше алып барыла.

Беҙҙең тәбәктә йәшәүсе хайуандар, ҡоштар, бөжәктәр, тирә-йүндең тәбиғәте тураһында белемдәрен киңәйтеү, нығытыу өсөн, халыҡ ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары тураһында тарихи материалдарға таянып эш итәм.

Башҡорт мөхите булмаған ҡала шарттарында үҫкән, телде бөтөнләй белмәгән, ғаиләлә аралашмаған балаларға белем биреү айырыуса ҡатмарлы.

Балалар өлкәндәргә оҡшарға тырыша. Донъя йөҙөндә тиҙерәк үҫергә теләмәгән бер генә бала ла юҡ.

Әгәр баланың һүҙ байлығы ярлы, иғтибары юҡ икән, уның дәрес менән ҡыҙыҡһыныуы ла түбән була. Шуның өсөн төрлө алымдар, уйындар һәм мауыҡтырғыс күнегеүҙәр менән баланың һәләттәрен төрлө яҡлап үҫтерергә тырышам.

Һәр бала башҡорт телен яратып, ҡыҙыҡһынып өйрәнһен өсөн, әлбиттә ҡыҙыҡлы әсбаптар кәрәк. Балалар менән күҙәтеү алып барғанда, үҙҙәре танып белгән ҡоштар, хайуандар, бөжәктәр, үҙебеҙҙең яҡтың үҫемлектәре менән таныштырғанда шиғыр юлдары уҡылһа, балалар бик тиҙ отоп алалар.

Беҙҙең яҡтың урманында
Үҫә матур ҡайындар.
Йүкә, шыршы, имәндәр
Һәм зифа буйлы талдар.
Яҙҙарын япраҡ яра
Талғын елгә тирбәлә,
Был матур күренешкә
Күңелебеҙ көрләнә.

Дуҫ булайыҡ.
Бик күңелле бит бында
Тәбиғәт ҡосағында.
Һеҙ ҙә беҙҙең эргәгә
Рәхим итегеҙ, әйҙә!

Нәҡ ошо турала минең “Тәбиғәт ҡосағында” исемле тәүге китабым баҫылып сыҡты. Был китапҡа кескәй күләмле шиғырҙар тупланған. Әлбиттә, ул минең өсөн ҙур ярҙамсым булып тора. Башҡорт халҡының традициялары, фольклоры тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу өсөн төрлө милли байрамдар, йолалар, саралар ойоштораб ыҙ. Балаларҙа ҡыҙыҡһыныу, мөхәббәт, ихтирам тәрбиәләйбеҙ.

Был осраҡлы түгел, сөнки балаларҙы нисек, ниндәй миҫалдарҙа тәрбиәләһәк, киләсәгебеҙ ҙә шулай буласаҡ.

Беҙҙең балалар баҡсаһында “Сөмбөлә”, “Ҡаҙ өмәһе”, “Аулаҡ өй”, “Ҡарға бутҡаһы”, “Нәүрүз”, “Һабантуй” байрамдары үткәреү традицияға ингән.

Байрам ҡайһы урында үткәрелеүенә ҡарап, ер-һыу атамаларына иғтибар йүнәлтәбеҙ. Байрамдарҙа балаларҙың күңел күтәренкелеген, шатлыҡ хистәрен уятыу, кешеләргә ҡарата изгелек, рухи киммәттәргә оло ихтирам тәрбиәләйбеҙ.

Быларҙан тыш заман талаптарына таянып “Атайҙар көнө”, “Әсәйҙәр көнө”, “Милли кейем көнө”, “Башҡорт теле көнө”, “Ҡоштар көнө”, “Ер көнө” кеүек бик күп башҡа байрамдарға ла ҙур йоғонто яһайбыҙ.

Хәҙерге ваҡытта балалар баҡсаһында уҡ кескәйҙәргә милләтебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәренә, ауыҙ-тел ижадына, йолаларына ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү бик мөһим. Сөнки улар аша бала халҡыбыҙҙың үткән тарихы менән таныша, теленә ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо уяна. Халҡыбыҙҙың йолаларына таянып үткәрелгән байрамдар балаларҙың күңеленә бигерәк тә яҡын. Сабый күңеленә улар аша рухи тәрбиә һалына. Тик бына балалар баҡсаһында, бигерәк тә ҡала ерендәгеләрендә, балалар менән эшләү өсөн үҙ туған телендә тейешле ҡулланмалар юҡ дәрәжәһендә. Һәр байрам хәтерҙә ҡалһын, фәһемле булһын өсөн төплө сценарийҙар ҡулланыу кәрәк.

Шуны иҫәпкә алып, милли байрамдарға әҙерләнеү өсөн үҙемдең икенсе «Тылсымлы һандыҡ» исемле фольклор йыйынтығымды ижад иттем. Был ижад емешемдә балалар баҡсаһында үткәреү өсөн халыҡ ижады байрамдарынан сценарийҙар һәм театр эшмәкәрлеге ойоштороу өлгөләре тупланған. Унда ҡайһы бер юғалып барған йолалар ҙа ингән. Йола байрамдары тәбиғәткә ҡарата – һөйөү, ололарға ихтирам, кеселәргә кеселекле булыу тойғоһо тәрбиәләү маҡсаты менән яҙылған.

Барлыҡ методик ҡулланмаларҙы ҡулланып, артабан да эшебеҙҙе ошо йүнәлештә дауам итһәк, балаларҙа үҙе йәшәгән төйәккә, тәбиғәткә, аралашып йәшәгән башҡа милләт халыҡтарына иғтибарлы, ихтирамлы итеп тәрбиәләрбеҙ. Быуындан – быуынға күсеп килгән традицияларыбыҙҙы һаҡлап ҡалырҙар, телде ҡәҙерләп йәшәргә, уның тормош сығанағы, белем шишмәһе икәнен онотмаҫтар тип ышанып ҡалабыҙ.

УДК 811.512.141

ПРОБЛЕМА РАЗНОПИСАНИЯ В БАШКИРСКОЙ ОРФОГРАФИИ

THE PROBLEM OF SPELLING IN BASHKIR ORTHOGRAPHY

Хусаинова Л.М.,
д-р филол. наук, профессор, декан факультета башкирской филологии,
Кильмухаметова С.С.,
студент, ФГБОУ ВО «БГПУ им. М. Акмуллы», г. Уфа
Khusainova L.M., Doctor of Philology, Professor
Kilmukhametova S.S.,
student FGBOU VO "BSPU named after M. Akmulla", Ufa

Аннотация: Данная статья посвящена проблеме разноописания в башкирской орфографии, ее нормам.

Ключевые слова: орфография, башкирский язык, нормы, лексика.

Annotation. This article is devoted to the problem of misspelling in Bashkir orthography, its norms.

Keywords: spelling, bashkir language, norms, vocabulary.

Орфография современного башкирского языка состоит из 5-ти разделов (разделы указаны римскими цифрами), которые включают 35 параграфов (со знаком §), некоторые из них подразделены на части, обозначаемые прописными буквами (А, Б, В, Г, Ғ). Внутри параграфов представлены пункты, пронумерованные арабскими цифрами, которые могут иметь подпункты, обозначаемые строчными буквами, взятыми в скобки: а), б), в), г) [2, 28].

Из правил орфографии 1981 г. не реализуются или не всегда реализуются следующие правила:

1) раздел IV, § 32, А. 1, подпункт б (сложные слова с компонентом *як*);
2) раздел IV, § 32, А. 5 (правописание терминов родства);
3) раздел IV, § 35, В. 3 (аффиксация башкирских фамилий, имеющих в основе только гласные переднего ряда).

Нечетко регламентированы следующие правила:

1) раздел IV, § 32, Б. 1, подпункт а (раздельное написание детерминативных существительных);

2) раздел IV, § 32, Б. 2, подпункт в (раздельное написание сложных слов с глагольным компонентом).

Рассмотрим эти правила на примерах. Для анализа мы использовали материалы трех словарей: «Орфографический словарь башкирского языка», составленный Р.Г. Азнагуловым [1, 368], «Орфографический словарь башкирского языка», составленный Н.Ф. Суфьяновой и З.К. Ишмухаметовым [7, 352], коллективный труд «Академический словарь башкирского языка» [3].

1. Больше всех разнописаний наблюдается в написании детерминативных существительных, которые могут быть написаны слитно, через дефис, раздельно. Надо сказать, что в башкирском языке довольно сложно определить критерии написания таких слов. Об этом А.А. Юлдашев писал так: «практика слитного и раздельного написания не отличается последовательностью, носит в целом традиционный характер, очень трудно поддается по этой причине научному обоснованию и обобщению в виде определенных правил» [6, 76].

Эта проблема характерна и для других тюркских языков. В тюркских языках достаточно широко распространено образование сложных композитов без грамматического показателя, а также при помощи аффиксов III лица категории принадлежности, которые выступают в качестве средства связи слов. На примере чувашского языка Ю.М. Виноградов изучил орфографию именных словосочетаний, компоненты которых соединяются имплицитным вариантом. По справедливому замечанию ученого, аффикс любого лица может выражаться как эксплицитно, так и имплицитно. По мнению Ю.М. Виноградова, в моделях синтагм с имплицитным аффиксом III лица как основное средство связи слов выступает порядок слов. Предлагается во избежание противоречий все эти формы, независимо от того, как выражен аффикс III лица – эксплицитно или имплицитно – писать раздельно [5, 84].

В качестве доказательства того, что этот вопрос один из самых спорных, можно привести общеупотребительные слова *бала сак* (детство) и *баш ҡала* (столица). В орфографическом словаре 1998 г. *бала сак* дано раздельно, а в орфографическом словаре 2002 г. – слитно; слово *баш ҡала* – в словаре 2002 г. раздельно дано, а в словаре 1998 г. вообще не представлено. В таких композитах не утрачена подчинительная связь между компонентами, следовательно, нужно придерживаться раздельного написания, как это дано в «Академическом словаре башкирского языка».

С целью выявления спорных моментов и кодификации некоторых правил нами проведен обзор имен существительных (названия зубов, пальцев, платков, шуб), представленных в I – IX томах академического словаря башкирского языка, по нескольким тематическим группам [3].

А. Названия зубов

написано слитно	*написано раздельно*	*рекомендуемая форма записи*
модель ‘имя существительное + имя существительное’		
ҡурпытеш	*бала теш* (молочные	*бала теш*

(молочный зуб) *көрәктеш* (зуб-резец) *кырыйтеш* (клыки) *сабыйтеш* (молочные зубы) *тешәүтеш* (молочные зубы)	зубы) *кабан теш* (клыки) *каҙык теш* (клыки) *кыяк теш* (волчки)	*көрәк теш, кабан теш* *каҙык теш, курпы теш кырый теш, кыяк теш сабый теш, тешәү теш*
модель ‘имя прилагательное + имя существительное’		
алғыртеш (лишний зуб) *кортеш* (волчий зуб)	*коро теш* (волчий зуб) *тәүге теш* (молочные зубы) *тәү теш* (молочные зубы)	*алғыр теш, коро теш* *тәү теш, тәүге теш* *искл.: кортеш*

Слова данной категории следует писать раздельно, так как первый компонент выступает в роли определения слова «теш» (зуб). Существительное *кортеш* нужно писать слитно в виде исключения, так как здесь наблюдается усечение первого компонента, т. е. компоненты сложного слова грамматически оформлены.

Б. Названия пальцев

написано слитно	*написано раздельно*	*рекомендуемая форма записи*
кесбармак (мизинец), оланбармак (указательный палец), тәпәсәйбармак (мизинец)	*баш бармак (большой палец), балан бармак (название указательного пальца при игре в считалки на пальцах), баштай бармак (большой палец), имам бармак (указательный палец), имән бармак (указательный палец), йөрәк бармак (безымянный палец), йәнсе бармак (безымянный палец), күҙәмә бармак (указательный палец), себәбә бармак (указательный палец), сук бармак (безымянный палец), сығанак бармак (безымянный палец), сығансак бармак (безымянный палец), сыңғарсай бармак (мизинец), сәнсәкәй бармак (мизинец)*	*баш бармак, балан бармак, баштай бармак, имам бармак, имән бармак, йөрәк бармак, йәнсе бармак, күҙәмә бармак, олан бармак, себәбә бармак, сук бармак, сығанак бармак, сығансак бармак, сыңғарсай бармак, сәнсәкәй бармак, тәпәсәй бармак* *искл.: кесбармак*

Названия пальцев в основном образованы путем сложения корневых морфем имен существительных, а также сочетанием корневых морфем имен прилагательных и имен существительных. Следует отметить, что многие названия являются диалектными, и они зафиксированы только в академическом словаре и диалектологическом словаре башкирского языка [4, 432]. Одно название (*баштай бармаҡ*) отсутствует и в диалектологическом словаре башкирского языка. При изучении данных лексем выяснилось, что только в академическом словаре встречается слитное написание некоторых названий пальцев (*кесбармаҡ, оланбармаҡ, тәпәсәйбармаҡ*). В остальных словарях все эти названия записаны раздельно. На наш взгляд, в данном случае правильнее было бы оставить раздельное написание, так как такие сложные слова происходят от словосочетаний, образованных путем примыкания, где обязательно имеется компонент ‘бармаҡ’ (палец), а второй компонент выступает в качестве определения. Исключением выступает слово *кесбармаҡ,* где есть грамматическое оформление компонентов сложного слова.

В. Названия платков

написано слитно	*написано раздельно*	*рекомендуемая форма записи*
ғәрсшәл (вид шали), тулашәл (большая домотканая шерстяная шаль), казбикшәл (тонкая шаль), ҡыжымшәл (шелковый платок с длинными кистями)	*бала шәл (маленький платок), дебет шәл (пуховая шаль), кизе шәл (кашемировая шаль), ғыжым шәл (белая шелковая шаль), мамыҡ шәл (пуховый платок), ҡалын шәл (большая шерстяная шаль), оло шәл (плед), оло яулыҡ (шаль), сана шәле (плед), селтәр шәл (паутинка)*	*бала шәл, дебет шәл, кизе шәл, ғыжым шәл мамыҡ шәл, ҡалын шәл, оло шәл, оло яулыҡ, сана шәле, селтәр шәл, ғәрс шәл, тула шәл, казбик шәл, ҡыжым шәл*

Данные слова образованы по двум моделям: «имя существительное + имя существительное» (*дебет шәл, сана шәл*) и «имя прилагательное + имя существительное» (*оло яулыҡ, оло шәл*). В основном названия шалей имеют раздельное написание, что вполне понятно: в каждом слове есть компонент ‘шәл’, а первым компонентом выступает слово, обозначающее то, из какого материала сделана шаль или какую функцию выполняет данный вид шали. Слитно записаны следующие названия: *ҡыжымшәл, казбикшәл, ғәрсшәл, тулашәл*. Следует отметить, что первый компонент этих сложных слов (*ҡыжым-, казбик-, ғәрс-, тула-*) как самостоятельное слово не зафиксирован, возможно, этим объяснятся такое написание слов. Но в лексикографических работах не встречается слово *«ғыжым»* (*ғыжым шәл*), следовательно, и это название шали должно было быть записано слитно. В данном случае авторы академического словаря сохранили написание этих слов так, как они представлены в диалектологическом словаре башкирского языка [4, 432]. Все

эти названия правильнее было бы записать раздельно, так как один компонент является определением по отношению к другому.

Г. Названия шуб

написано слитно	*написано раздельно*	*рекомендуемая форма записи*
тамаҡтун (шуба из шейной части лисьей шкуры), тиртун (шуба из овчины), тоҡортун (полушубок), төлкөтун (шуба из лисьей шкуры)	*бүре тун (волчья шуба), бәрән тун (мерлушковая шуба), инә тун (шуба, подаренная женихом матери невесты), көрпә тун (мерлушковая шуба), ҡама тун (выдровая шуба), ҡамҡа тун (шуба, обшитая черным шелком, с окаймленным мехом рукавами и подолом), ҡыптыр тун (дубленка из жесткой шкуры), тире тун (шуба из овчины), төлкөсираҡ тун (шуба из лисьих лапок), төлкөтамаҡ тун (шуба из шкуры лисьей шеи)*	*бүре тун, бәрән тун, инә тун, көрпә тун, ҡама тун, ҡамҡа тун, ҡыптыр тун, тире тун, төлкөсираҡ тун, төлкөтамаҡ тун, тамаҡ тун, тир тун, тоҡор тун, төлкө тун*

Приведенные примеры характеризуют шубы по следующим критериям: из какого материала (меха) сшита шуба, фасон шубы, функциональное назначение шубы. Самым ярким примером того, что в орфографии таких единиц нет единства, являются слова, образованные по одной и той же структурной модели, имеющие одинаковую семантику*: бүре тун* (волчья шуба) *и төлкөтун* (шуба из лисьей шкуры). Эти словоформы образованы от словосочетаний путем примыкания, где второй компонент выступает в качестве определения, поэтому их нужно писать раздельно.

Список использованных источников и литературы

1. Аҙнағолов Р.Ғ. Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1998. – 368 бит.
2. Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. – Өфө: ТТӘИ, 2007. – 28 бит.
3. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. I – X / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011 – 2018.
4. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2002. – 432 бит.
5. Виноградов Ю.М. Об имплицитном варианте аффикса третьего лица категории принадлежности имен существительных в чувашском языке // Развитие образования. – 2018. – Вып. 1 (1). – С. 82 – 84.

6. Грамматика современного башкирского литературного языка / Отв. ред. А.А. Юлдашев. – М.: Наука, 1981. – 495 с.
7. Суфьянова Н.Ф., Ишмөхәмәтов З.Ҡ. Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. – Өфө: Башҡортостан энциклопедияһы, 2002. – 352 бит.

УДК 159.923.38

О МУДРОМ РУКОВОДИТЕЛЕ, ЧЕЛОВЕКЕ И НАСТАВНИКЕ
ABOUT A WISE LEADER, A PERSON AND A MENTOR

Хусаинова Р.Х.,
заслуженный работник народного образования РБ, г. Уфа
Khusainova R.H.,
Honored Worker of the National education of the RB, Ufa

Аннотация. Данная статья раскрывает личность С. Галина как мудрого руководителя, как наствника и как Человека.

Ключевые слова: кафедра, деятельность, личность, наставник, человек.

Annotation. This article reveals the personality of S. Galin as a wise leader, as a mentor and as a Person.

Keywords: department, activity, personality, mentor, person.

О научных трудах и научно-педагогической деятельности Галина С.А. написано много. Мне бы хотелось, вспоминая годы совместной работы, рассказать о нем как о мудром руководителе, человеке и наставнике.

«Вспоминая», наверное, не совсем точно подобранное слово по отношению к памяти Салавата Ахмадеевича. Ведь вспоминается, как правило, забытое, а мы его не забываем, помним до сих пор. Мы - это сотрудники кафедры мировой и национальной культуры ИРО РБ, те, кому посчастливилось работать под его руководством в те годы.

Наша кафедра, созданная Галиным С.А., объединяла предметы образовательной области «Искусство»: культура Башкортостана, музыка, изобразительное искусство и мировоя художественная культура (МХК). Основная деятельность коллектива заключалась в организации и проведении курсов повышения квалификации учителей, научно-методическое обеспечение школьных предметов культурологического цикла, изучение и пропаганда передового педагогического опыта лучших педагогов, исследовательская работа и многое другое.

Сегодня по-разному оцениваются и воспринимаются «лихие девяностые», но именно в эти годы серьезно начал подниматься вопрос о возрождении, изучении и развитии национальной культуры разных народов России, традиции национальной культуры регионов впервые активно внедрялись в школьную систему образования. Именно в эти годы появился новый школьный предмет «Культура Башкортостана» (в последующие годы появились дополненные, доработанные издания программы), а также, была издана программа «Музыка» (с учетом регионального компонента). Действительно, это было долгожданное, очень значимое явление. Мы

буквально «горели» на работе, вдохновенно, с особым оптимизмом, не жалея сил и времени, издавали учебники, нотные хрестоматии, аудио/видеопособия, электронные учебники и другие учебно-методические материалы. Учебники по предмету «Культура Башкортостана» издавались под общей редакцией Галина А. (в соавторстве с Кузбековым Ф.Т., Кузбековой Р.А., Галиной Г.С., Поповой Л.Н.) Следует отметить, что все это происходило при большой финансовой поддержке Министерства образования РБ.

Народный художник России Б. Неменский писал: «национальное искусство – тот дом, из которого ребенок отправляется по дорогам мирового искусства, поэтому искусство, культура своего народа, региона должны быть остро им прочувствованы».

В многонациональной Республике Башкортостан, как и в России, именно изучение культуры, искусства способно объединить детей различной национальной принадлежности и вероисповедания, воспитывать в них уважение к обычаям, традициям, языку, истории и культуре друг друга, а также чувства достоинства, гордости за достижения национальной культуры. Мы были просто одержимы этой идеей, изучали сами, в целях пропаганды лучших образцов народного и профессионального искусства Башкортостана проводили семинары, разного уровня научно-практические конференции, словом, трудились, как говорится, «не покладая рук».

Но вернемся к первому заседанию кафедры, которое провел Салават агай (так мы его звали иногда неофициально, в традициях башкирского народа). Я хорошо запомнила этот день. Все немного волновались: как сложится работа под руководством такого титулованного человека, академика, профессора, доктора филологических наук? А еще действительный член Академии гуманитарных наук РФ, заслуженный деятель науки БАССР, отличник народного просвещения РСФСР, лауреат премии Башкирского комсомола им. Г. Саляма, лауреат премии Правительства Российской Федерации.

Но вел он себя очень просто, встретил с улыбкой, представил нас к друг другу, много шутил, но после того, как познакомил нас с планами на будущее, с задачами, стоящими перед коллективом, очень серьезно сказал: «Мне известно о профессиональных данных каждого из вас, поэтому и пригласил для сотрудничества, но для нормальной жизни целого коллектива этого еще недостаточно. Мало опыта – научитесь, мастерство, навыки приходят с годами, одного не потерплю – скандалов, ссор между собой. Жизнь есть жизнь (донъя булғас, төрлө хәлдәр була), какие-то недоразумения, мелкие обиды и т.д. просто неизбежны, но превращать это в постоянные конфликты, вражду, «выносить сор из избы» - просто недопустимо. Научитесь анализировать такие ситуации разумно и трезво, между собой, не доводя до моего внимания. И еще, ничего дважды повторять не буду, потребую ответственного отношения к своим обязанностям, вот тогда я вас буду уважать, ну и поддержку с моей стороны вы найдете всегда».

В том, что он действительно заботливый, готовый поддержать в любую минуту руководитель, мы убедились очень скоро. Ничто не ускальзывало от его

внимания: с каким настроением мы пришли на работу, как со здоровьем, что нас огорчает или радует, не испытываем ли каких-то неприятностей и др. Есть известное выажение «как за каменной стеной», вот и мы, без всякого преувеличения, всегда находились как за каменной стеной. Специфика деятельности профессорско-преподавательского состава такова, что кроме организации курсов, идет подготовка к лекциям, составляется большое количество официальных документов, планов, отчетов, разрабатываются УМК, тестовые задания, Положения и многое другое. Вот тогда он становился очень серьезным, строгим. Человек, требовательный в первую очередь к самому себе, не допускал получения каких-либо взысканий или просто замечаний из-за невыполненных в установленные сроки работ. В такие моменты на кафедре царила тишина, непривычная для нашего веселого, жизнерадостного и очень эмоционально настроенного коллектива.

Ну вот все сделано, сдано, наш руководитель с довольной улыбкой на лице возвращается с оперативки, и мы слышим в очередной раз: «Молодцы, девочки, спасибо, не подвели! Но я не слишком строго? Случайно, не обидел никого? А не попить ли нам чаю?» Тут начинается оживленный разговор, обсуждение проделанной работы, долго царит смех, а смеялся он так заразительно, громко, запрокинув голову назад, ну просто от души!

В настоящее время сотрудников бывшей кафедры МиНК судьба разбросала по разным уголкам, действительно, жизнь есть жизнь, но до сих пор нас объединяет ПАМЯТЬ о Салавате Ахмадеевиче, светлые воспоминания о нем. На фотографии, запечатленной в день его 75-летия мы такие веселые, счастливые...Мы - это Яхина Илюза Загитовна, Юлгильдина Райхана Валиулловна, Муллагулова Сажида Наилевна, Кистанова Валентина Васильевна и др. Очень запомнился нам этот юбилей, который прошел в торжественной обстановке в актовом зале ИРО РБ. Собрались родственники, друзья, коллеги, его бывшие ученики, студенты, аспиранты. Необычным и интересным показалось нам тогда то, что каждый из братьев и сестер заканчивал слова поздравления исполнением какой-нибудь протяжной башкирской народной песни, а аккомпанировали друг другу на курае его братья. В конце сам юбиляр поблагодарил дорогих гостей исполнением одной из своих любимых народных песен «Күктә лә генә болот». Вообще, в этот вечер звучали песни довольно распространенные и очень редкие, которые, как выяснилось позже, были записаны Галиным С.А. во время фольклорных экспедиций. Эти еще неизвестные широкому слушателю песни должны были войти в следующую книгу, которая осталась незаконченной...

Он не только собирал и издавал легенды, сказки, песни своего народа, но и сам писал стихи, сочинял песни, правда об этом знали лишь немногие. По башкирскому радио часто звучит песня в записи популярного певца Ф. Бикбулатова «Күҙәреңә ҡарап туялманым», написанная на слова известного поэта Назара Наджми. Там есть строки, которые трудно поддаются переводу:

Күҙәреңә ҡарап туялманым,
Әйтәалманым әйтер һүҙемде.

Һәр минуты йылдар кеүек оҙон,
Ярай әле йөрәк түҙемле.

Эту песню, очень мелодичную и задушевную, часто выбирают слушатели в качестве поздравления для своих близких. Лишь немногие знают о том, что автором музыки является наш С. А. Галин, и что песню эту он написал еще в далекие годы, когда был молодым и влюбленным. Всякий раз, когда мы встречаемся на праздниках, слушая или тихо напевая ее, с грустью вспоминаем годы совместной работы с Салават агай, говорим о том, что при жизни, как и поется в этой песне, наверное, не смогли сказать ему свои слова благодарности. При последнем посещении его в Республиканском кардиоцентре, он выглядел бодро, интересовался ходом Конференции, говорил, что сам в полном порядке, что даже не знает, где находится его сердце, как всегда, шутил, мол «на кого же оставлю вас, девочки, когда впереди столько работы, вот приду в понедельник и посмотрю, как вы там без меня».

В этом году 3-его марта ему исполнилось бы 90 лет! Хотя о нем мы до сих пор не можем говорить в прошедшем времени, он все еще с нами! И мы говорим ему сегодня: «Огромное человеческое Спасибо Вам за то, что были для нас опорой, наставником, как руководитель, за то, что сделали для возрождения, и сохранения башкирской национальной культуры, как ученый, а главное, за то, что всю свою жизнь трудились для учителей башкирского языка и культуры Башкортостана, как настоящий педагог!» По праву, Ваша жизнь – яркий пример служения своему народу!

Помним! Любим! Гордимся Вами, дорогой наш Салават агай!

УДК 74.268.3

ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ МЕТАПРЕДМЕТ КОМПЕТЕНЦИЯЛАР

META-SUBJECT COMPETENCIES IN LITERATURE LESSONS

Шагивалиева Д.Д.,
студент 5 курса БГПУ.им.М Акмуллы,г.Уфа
Руководитель: Алибаев З.А.,
к. филол.н., доцент БГПУ им. Акмуллы D.D. Shagivalieva,
student of the 5th course M. Akmulla BSPU, Ufa.
Supervisor: Z.A. Alibaev,
Candidate of Philology, Associate Professor, Akmulla BSPU.

Аннотация: В статье предложены и охарактеризованы педагогические приемы для формирования метапредметных компетенций у обучающихся на уроках литературы, показаны конкретные задания, которые позволяют развивать метапредметные универсальные учебные действия, что, в свою очередь, позволяет достичь высокого результата при работе с текстами.

Ключевые слова: литература, образовательные технологии, компетенции, современный урок.

Annotation. The article proposes and characterizes pedagogical techniques for the formation of meta-subject competencies among students in literature lessons, shows specific tasks that allow them to develop meta-subject universal learning activities, which, in turn, allows them to achieve high results when working with texts.

Keywords: literature, educational technologies, competencies, modern lesson.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (ФГОС) элекке уҡытыу талаптарынан ҡырҡа айырыла. Яңы стандарттар уҡытыу йөкмәткеһенең метапредмет принциптарына таяныуын күҙаллай. Ғалимдар билдәләүенсә, хәҙерге педагогикала метапредмет һөҙөмтәләренә өлгәшеү төп копметенцияларҙы формалаштырыуға нигеҙләнеп, кешенең бөтә төр эшмәкәрлегендә лә төп һәләттәрен тәрбиәләүҙе күҙ уңында тота. Яңы уҡытыу стандарттары уҡытыу эшмәкәрлеген универсаль рәүештә ҡороп, уҡыусының интеллектуаль һәм һәм яҡлап үҫешкән шәхес булып мәктәпте тамамлауын төп талап итеп ҡуя.

Хәҙерге мәктәптең төп бурысы – белем биреү генә түгел, ә уны тормошта ҡуллана белергә өйрәтеү, балаларҙа тутҡтауһыҙ танып белеү эшмәкәрлеге һәм яңы мәғлүмәтте үҙләштереүгә ҡыҙыҡһыныу, ижади һәләттәр тәрбиәләү. Метапредмет һөҙөмтәләре – уҡытыу процесы ваҡытында реаль тормош ситуацияларына ҡоролған мәсьәләләрҙе хәл итеү, ул бер йәки бер-нисә предмет сиктәрендә бара ала.

Метапредмет кимәлендә әҙәбиәт дәресен айырым дисциплина булараҡ ҡына түгел, ә донъя, кешелек хаҡында белем системаһы итеп ҡабул итеү рәүеше үҙәккә ҡуйыла.

“Метакомпетенциялар” төшөнсәһе ниндәй нәмәләрҙе күҙ уңында тота?

Метакомпетенцияларҙы төркөмләүҙә берҙәм фекер юҡ. Мәҫәлән, А.В. Хуторский уҡыты һәм танып-белеү, дөйөм мәҙәни, коммуникатив, социаль һәм хеҙмәт, шәхси үҫеш компетенцияларын күрһәтә [16,152].

Дөйөм алғанда, метакомпетенция – уҡыусыларҙың дөйөм уҡытыу, предмет-ара танып-белеү һәм башҡа һәләттәрен үҙ эсенә алған, башҡа айырым компетентлыҡ төрҙәренән барыһынан да өҫтөн торған һәләттәр.

Әҙәбиәт дәрестәрендә метакомпетенцияларҙы үҫтереүҙең үҙ юлдары бар. Ул, ҡағиҙә булараҡ, дәрестең төҙөлөшөнә бәйләнгән. Метакомпетен-цияларҙы үҫтереүҙе төп бурыс итеп ҡуйған дәресте планлаштырыу алдынан әҙәбиәт уҡытыусыһы түбәндәгеләрҙе асыҡларға тейеш:

1. Теманы билдәләү.
3. Дәрестең метапредмет һөҙөмтәләрен күрһәтеү.
3. Төп уҡытыу мәсьәләләрен эшләү.
4. Уҡыусыларың ниндә йһәләттәренә таянып эш итеү юлын асыҡлау.
5. Ниндәй ҙә булһа проблемалы уҡыу ситуацияһын тыуҙырыу.

Ғалимдар һанауынса, метапредмет дәресенең үҙәген проблемалы уҡытыу ситуацияһы тыуҙыра. Улар балаларҙың йәнле эшмәкәрлеген, мотивацияһын тыуҙырыусы төп нигеҙ. Мәҫәлән, И.А.Зимняя иҫәпләүенсә, метакомпетенцияларҙы үҫтереүҙең мөһим бер юлы – интегратив дәрестәр

ҡороу, сөнки улар предмет-ара бәйләнештәрҙе генә түгел, ә донъя хаҡындағы белемде комплекслы үҙләштереү сараһы [16,42]. Ул социомәҙәни компетенциялар нигеҙен булдырыу сараһы.

Ғөмүмән, метакомпетенцияларҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән ошо дәрес формаларынан иң уңышлалыры тип һанала:

- дәрес-тикшеренеү;
- интегратив дәрес;
- дәрес-дебат;
- дәрес-уйын;
- дәрес-сәйәхәт һ.б.; [4, 32].

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә метапредмет һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙә үҫтереүсе уҡытыу алымдарына таянырға өйрәнһәк, яңы быуын стандарттары балаларҙың тап уҡыу эшмәкәрлегенең ойошторолоуын үҙәккә ҡуя. Йәғни, әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү менән бергә уларҙың ижади эшен, танып-белеү эшмәкәрлеген, коммуникатив ситуацияларҙы булдырып, йәнле процесс барлыҡҡа килтереү мөһим. Баланың һәр яҡлап үҫешен уҡыу эшмәкәрлегенән башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Яңы быуын стандарттарында баланың үҙ аллы эшмәкәрлеге – уҡытыу системаһының нигеҙ таштарының береһе, шунһыҙ киләсәктә мәктәпте тамамлаусы һәр шәхесте ижади эшләргә һәм үҙенең һәләттәрен үҫтерергә өйрәтеп булмай. Тимәк, башҡорт әҙәбиәте дәресендә метапредмет һҙөмтәләренә өлгәшеү, тәү сиратта, баланы һәр төрлө эшмәкәрлеккә ҡыҙғытырға бурыслы.

Дәрестә метакомпетенцияларҙы үҫтереүҙең ҡайһы бер алымдары:

1.Проблемалы ситуация булдырыу (Был хаҡта ентекләберәк М.М.Мәхмүтов, Ш.Я. Лернер, А.М. Матюшкин хеҙмәттәрендә танышырға мөмкин).

2. Уҡыусыларҙың тикшереүселдәр ролендә сығыш яһауы. Балаларҙы төркөмләп үҙ аллы эшмәкәрлеген ойошторороп була.

3. Прект методын уңышлы ҡулланыу. Ул баланың шәхси эшмәкәрлеген тыуҙырып, донъяны танып-белеү һәм төп һәләттәрен үҫтереүҙә файҙалы алым.

4. Старт булмаған дәрес формаһын ҡулланып, уны уҡыусыларҙың үҙҙәре һайлауын ойоштороу.

5. Билдәләрҙән баш тартыу. Һәр эше уҡытыусы тарафынан тикшерелгән уҡыусы үҙ мөмкинлектәрен, үҫешен контролдә тота алмай. Йыш осраҡта хаталанырға, уны төҙәтергә уҡытыусы алдында ҡурҡа, ҡайһы бер осраҡта булған белемен күрһәтергә лә баҙнат итмәй, һөҙөмтәлә үҙ үҙенә ышанысы юғала, үҙбаһаһы кәмей, уҡырға теләге һүлпәнәйә.

6. Баһалау эшмәкәрлегенә уҡыусыларҙың үҙҙәрен йәлеп итеү. Ғалимдар билдәләүенсә, әлбиттә, әле билдәләрҙән тулыһынса баш тартыу- ул күп кенә ғалим методистарҙың хыялы. Әммә уҡыусыларҙы үҙҙәренең һәм бер-береһенең эштәрен баһалауға йәлеп итеү хәл итерлек мәсьәлә. Ул уҡыусыларҙа уҡыуға ҡыҙыҡһыныу, сәм уятып ҡына ҡалмаясаҡ, ә үҙ фекерҙәрен иҫбатларға, тәнҡитте ҡабул итә белергә, теүәл, тыйнаҡ, иғтибарлы булырға ла өйрәтәсәк [16, 152].

7. Уҡыу-уҡытыу процесын төрлөсә ойоштороу.

Бер үк типтағы дәрестәр, эш төрҙәре, дәрес структураһы уҡыусыларҙы ялҡыта. Формаһы буйынса уҡыусыларҙың психологик мөмкинлектәренә тап килерлек дәрестәр ойоштороу – уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныу, белем алырға теләктәрен һәм дәрес һөҙөмтәһен күтәреүҙә әһәмиәтле сара.

8. Уҡытыусының дөрөҫ аралаша белеү һәләте, уҡыусыларға ҡарата ихлас, эскерһеҙ мөнәсәбәте.

9. Тормош ситуацияларын даими анализлау. Уҡыусының шәхси тәжрибәһенә, ҡыҙыҡһыныуҙарына мөрәжәғәт итеү [9, 15].

Башҡорт әҙәбиәтенән бер типтағы дәрестәр, эш төрҙәре, дәрес структураһы уҡыусыларҙы ялҡыта. Формаһы буйынса балаларҙың психологик мөмкинлектәренә тап килерлек дәрестәр ойоштороу ҡыҙыҡһыныу уята, белем алырға теләк тыуҙыра, дәрес һөҙөмтәһен күтәреүҙә әһәмиәтле сара булып тора.

Уҡытыусы – дәрестең дирижеры. Уның һәр ҡарашы, һүҙе, ым-хәрәкәттәре – барыһы ла иғтибар үҙәгендә. Әммә ысын уҡытыусы – йәнле ҡурсаҡ та, театрҙағы төп ролде башҡарыусы актер ҙа түгел, уҡыусыларҙы белем алырға йүнәлтеүсе, фекерҙәрен төҙәтеп, тулыландырып, конкретлаштырып ебәреүсе субъект.

Уҡыу-уҡытыу материалы ни тиклем ауырыраҡ, шул тиклем күңелһеҙерәк һәм киреһенсә лә булырға мөмкин. Уҡыусыла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған, мөһим тип һаналған предмет, үҙ иткән проблемалар менән бәйле әҫәрҙәрҙе өйрәнеү, анализлау мотивация ысулдарының береһен тәшкил итә.

Шулай итеп, башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә метакомпетенцияларҙы үҫтереү яңы стандарт нигеҙендә ойошторола. Уға нигеҙләнеп программа, дәреслек, методик ҡулланмалар төҙөлә, белем биреү сифатына талаптар билдәләнә. Икенсе быуын белем биреү стандарты “белем биреү мәктәбен” “ижади шәхес формалаштырыуға йүнәлтелгән” системаға күсереүҙе тәҡдим итә. Стандарттың төп идеяһы – уҡыусыларҙың метапредмет кимәлендәге белем алыу һөҙөмтәләренә өлгәшеү, уҡытыуҙың компетентлы моделен тормошҡа ашырыу.

Метакомпетенцияларҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән башҡорт әҙәбиәте дәресе универсаль уҡыу нигеҙен тәшкил иткән төп компетенцияларға эйә булыу, предмет-ара төшөнсәләрҙе үҙләштереүҙе төп бурыс итеп ҡуя. Икенсе быуын белем биреү стандарттары талабы уҡытыусыға башҡорт әҙәбиәте дәрестәрен ижади ооштороуҙы талап итә, эҙләнеүҙәргә юл аса, уҡыусыны шәхес булараҡ үҫтерергә, уҡытыуҙы тормошҡа яҡынайтырға мөмкинлектәр бирә. Әҙәбиәт дәрестәрендә метапредмет һөҙөмтәләре балаларҙы һәр яҡлап үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Тимәк, башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә метапредмет кимәле дүрт төп компонентты: шәхес тәрбиәләү, регулятив характерҙағы эштәр биреү, танып-белеү эшмәкәрлеген ойоштороу һәм коммуникатив йүнәлештәге күнекмәләрҙе дәрестә айырым бер процесс итеп алып барыуҙы иҫәпкә алырға кәрәк. Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү барышында уҡыусыларҙың үҙ аллы эшмәкәрлеген ойошторуға айырыуса ҙур иғтибар бирелергә тейеш. Сөнки яңы быуын стандарттары баланың үҙ аллы эшен үҙәккә ҡуя һәм тик ошо осраҡта ғына һәр

уҡыусы алынған белемде аңлы рәүештә үҙләштерергә һәм тормошта урынлы файҙаланырға өйрәнәсәк. Метакомпетенцияларҙы үҫтереүҙе инновацион юлдар аша алып барылыуы балаларҙың дәрескә ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Шуның өсөн дә башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу процесында уҡытыусының ижади эше һәм уҡыу эшмәкәрлеген ойошторороуға новаторҙарса ҡарашы ҙур әһәмиәткә эйә.

Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Ғафаров Б. Б. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы . – Өфө : Китап, 2008. – 202 б.
2. Ғафаров Б. Мәктәптә әҫәрҙе йөкмәтке һәм форма берлегендә өйрәнеү. - Өфө: Китап, 1988. – 210 б.
3. Ғималова М. V-XI кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. - Өфө: Китап, 1994. – 220 б.
4. Современный урок. Материалы Всероссийского конкурса методических разработок. Выпуск 1. – Бирск: Бирск.фил. Баш. гос. ун-та, 2016. – 177 с.

РОДНОЙ ЯЗЫК, ФОЛЬКЛОР И ЛИТЕРАТУРА В СИСТЕМЕ ОБРАЗОВАНИЯ: ТЕОРИЯ, ПРАКТИКА, ПЕРСПЕКТИВЫ

Материалы Всероссийской научно-практической конференции, посвященной 90-летию со дня рождения профессора С.А. Галина

Под общей редакцией:

З.М.Габитовой, канд. филол. наук, заведующий кафедрой башкирского и других родных языков и литератур ИРО РБ;

А. Г. Ильмухаметова, канд. филол. наук, доцента кафедры башкирского и других родных языков и литератур ИРО РБ;

Р.Ф.Сулейманова, старшего преподавателя кафедры башкирского и других родных языков и литератур ИРО РБ.

Материалы печатаются в авторской редакции

Компьютерная верстка и макет:
Г.Р. Ильясова

Подписано к печати 1.07.2024
Бумага ксероксная. Формат 60x84 1/16.
Гарнитура Times New Roman
Отпечатано на ризографе и KONIKA MINOLTA.
Усл. печ. л. 8,5. Уч.-изд. л. 9.
Тираж 500 экз. Заказ 009.

Издательство Института развития образования
Республики Башкортостан.
450005, Уфа, ул. Мингажева, 120.
rio_biro@mail.ru